Башҡортостан Республикаһының
Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханаһы

**Азат Ярмуллин**

# АВТОНОМИЯЛЫ БАШҠОРТОСТАН БАЙРАҒЫ АҪТЫНДА

Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте эшмәкәрҙәре хаҡында ҡыҫҡаса биографик очерктар

Өфө – 2009

УДК
ББК
Я

Рецензент:
Тарих фәндәре докторы, профессор
Ҡасимов С. Ф.

**Ярмуллин А.Ш.**

**Автономиялы Башҡортостан байрағы аҫтында:** Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте эшмәкәрҙәре хаҡында ҡыҫҡаса биографик очерктар. — Өфө. — 2009. — 222 бит.

**ISBN**

Был китапта, архив документтары һәм ғилми сығанаҡтар нигеҙендә, 1917—1920 йылдарҙағы Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте етәкселәре, Башҡортостан автономияһының терәге — башҡорт ғәскәрҙәренең командирҙары, ҡаһарман сардарҙар, автономия өсөн көрәш тарихында яҡты эҙ алдырған эшмәкәрҙәр хаҡында бәйәт ителә. Күптәренең исеме киң ҡатлам уҡыусылары, йәмәғәт иғтибарына тәүге тапҡыр сығарыла.

**ISBN**

© Ярмуллин А. Ш.,
© Башҡортостан Республикаһының
Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге
Милли китапханаһы

# Һәйкәлдәргә лайыҡ исемдәр

1917–1920 йылдарҙағы Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте тарихы, унда ҡатнашҡан эшмәкәрҙәр тураһында һуңғы ике тиҫтә йыл эсендә байтаҡ яҙылды. Башҡорт халҡының күп кенә арҙаҡлы улдары: Зәки Вәлиди, Муса Мортазин, Юныс Бикбов, Шәриф Манатов, Фәтхелҡадир Сөләймәнов, Ғәлимйән Таған, Хафиз Ҡушаев, Сәғит Мерәҫов, Мөхәмәтхан Ҡулаев һәм башҡаларҙың яҡты исемдәре халыҡҡа ҡайтарылды. Әммә шуға ҡарамаҫтан, автономия өсөн көрәштә ҡатнашҡан, милли-азатлыҡ хәрәкәте тарихында тәрән эҙ ҡалдырған күп кенә эшмәкәрҙәрҙең исемдәре киң йәмәғәтселеккә билдәһеҙ ҡала килә.

Башҡортостандың үҙәк дәүләт тарих һәм үҙәк дәүләт ижтимағи йәмәғәт берекмәләре архивтарында граждандар һуғышы осоронданғы башҡорт ғәскәрҙәре тарихына ҡағылышлы фондтарҙы өйрәнгән саҡта милли-азатлыҡ хәрәкәтендә ҡатнашҡан шәхестәрҙең эшмәкәрлеге, биографияһын сағылдырған бик күп документтарҙы осратырға тура килде. Көтөлмәгән ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр ҙә осраны. Мәҫәлән, архив документтары башҡорттоң мәшһүр йырсыһы Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың башҡорт милли хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашыуы тураһында бәйән итә. 1918 йылдағы Башҡорт хәрби шураһының фармандарында Ғ. Әлмөхәмәтов Ҡыпсаҡ кантонында ирекле башҡорт отрядын ойоштороусы булараҡ телгә алына.

Тәүҙә ниәт башҡорт армияһының сардарҙары тураһында биографик мәғлүмәттәр туплау ине. Артабан, милли хәрәкәт документтарында осраған башҡа шәхестәрҙең дә эшмәкәрлеге иғтибарҙы үҙенә йәлеп итте. Уларҙың ошо данлы, ла шанлы ла осорҙағы эшмәкәрлеген барлау, артабанғы яҙмышын асыҡлау ниәте тыуҙы. Артбанғы тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә тағы ла бик тә ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр тупларға насип булды. Мәҫәлән, Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының да әүҙем ҡатнашыуы, етәксе вазифалар биләүе асыҡланды. Шуларҙың береһе – Илдархан Мутин. Тыумышы менән Өфө губернаһы Минзәлә өйәҙенең Үрге Таҡталасыҡ ауылынан (хәҙерге көндә был ауыл Татарстандың Аҡтаныш районына ҡарай). Гәрәй улысы старшиналары нәҫеленән, дворян. Автономия өсөн милли хәрәкәттең башынан йөрөй. 1917 йылдағы бөтөн башҡорт ҡоролтайҙарында ла ҡатнаша. 1918 йылда Башҡорт хөкүмәтенең финанс министры, Башҡорт хәрби шураһы рәйесе Зәки Вәлидиҙең урынбаҫары вазифаларын башҡара.

Тағы бер милли хәрәкәт эшмәкәре ул Хәлим Әмиров. Тыумышы менән Артауыл исемле башҡорт ауылынан (хәҙерге Яңауыл районы). Зәки Вәлидиҙең яҡын көрәштәше. 1918 йылда Башҡорт хөкүмәтендә эшләй. 1919 йылда Петроградтағы башҡорт ғәскәрҙәрендә Башҡорт Республикаһының махсус вәкәләтлеһе (особоуполномоченный) була.

Архив документтары автономия өсөн көрәштә милли интеллигенция ғына түгел, ә башҡорттоң бөтөн элитаһы ҡатнашҡанлығы тураһында һөйләй. Мәҫәлән, башҡорт дворяндарынан мөфтөй Мөхәмәтйәр Солтановтың улы юрист, адвокат

Искәндәрбәк Солтанов 1918 йылда Башҡорт хөкүмәтенең хоҡуҡ бүлеген етәкләй, икенсе төрлө әйткәндә, юстиция министры була. Аҡтарҙың Себер хөкүмәте менән һөйләшеүҙәр алып бара.

Данлы Ҡыуатовтарҙан Усман Ҡыуатов 1919 йылда Башҡортостандың финанс һәм һаулыҡ һаҡлау халыҡ комиссары итеп һайлана, Ғүмәр Ҡыуатов та иһә унан һуң республиканың һаулыҡ һаҡлау комиссариатын етәкләй, Ә Хажиәхмәт Ҡыуатов 1918 йылда хәрби милиция начальнигы булып хеҙмәт итә. Батша армияһы подполковнигы дворян Шаһихәйҙәр Аҡсулпанов 1918 йылда 1-се Башҡорт пехота дивизияһы менән етәкселек итә. Шулай уҡ башҡорт ғәскәрендә Дәүләт думаһы депутаты Шаһихәйҙәр Сыртлановтың улы Йосоп та хеҙмәт итә. Ризаитдин Фәхрединовтың улы Ғабдрахман 1918 йылда милли хәрәкәттең матбуғат органы – “Башҡортостан хөкүмәтенең теле” гәзитенең мөхәррире булып эшләй. данлы Ҡарамышевтар нәҫеленән ағалы-ҡустылы Гәрәй, Әмир, Мөхтәр, Сөләймән Ҡарамышевтар ҙа йәне-тәне менән автономия идеяһына фиҙәкәр хеҙмәт итә.

Милли хәрәкәттең географияһы ла бөтөн башҡорт ерҙәрен үҙ эсенә ала. Илдархан Мутин, Хәлим Әмиров, Муллаян Халиҡов, Шәйехзада Бабич төньяҡ-көнбайыш башҡорттарынан булһа, Харис Йомағолов, Яхъя Салихов – Һамар губернаһынан, Сәғит Мерәҫов, Аллабирҙе Йәғәфәров, Хәсән Әхмәров – Ырымбур яҡтарынан, Ғәлимйән Таған, Сәйетгәрәй Мағазов – Ялан-Ҡатай (хәҙерге Ҡурған өлкәһе) башҡорттарынан, Нуриәғзәм Таһиров, Хафиз Ҡушаев, Ғәбделхай Иркәбаев, Ғәбделхаҡ Ғәбитов, Ғариф Мөхәмәтйәров, иһә – Силәбе башҡорттарынан.

Был китапҡа архив документтары, ғилми әҙәбиәт, хәтирәләргә таянып яҙылған матбуғат материалдары нигеҙендә Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә ҡатнашҡан илленән ашыу шәхестең эшмәкәрлеге һәм яҙмышы тураһында ҡыҫҡаса биографик очерк рәүешендә биографик мәғлүмәт тупланылған. Бында төп баҫым уларҙың, автономия өсөн көрәш осорондағы, йәғни 1917–1920 йылдарғы эшмәкәрлегенә яһала, артабанғы тормоштары ҡыҫҡаса яҡтыртыла. Халыҡҡа билдәле шәхестәр: Зәки Вәлиди, Шәриф Манатов, Мөхәмәтхан Ҡулаев, Муса Мортазин, Юныс Бикбов, Харис Йомағолов һ.б. хаҡында ла мәғлүмәт биреүҙе кәрәк тип таптым. Сөнки улар тураһында өндәшмәй тороп, башҡалар хаҡында нимәлер әйтеүе ҡыйын. Шулай уҡ китапта Шәһит Хоҙайбирҙиндың да милли-хәрәкәт осорондағы эшмәкәрлеге тураһында ла ҡыҫҡаса мәғлүмәт бирелгән.

Башҡорт эшмәкәрҙәре ҡыҙылдар яғында йөрөһә лә, аҡтар яғында йөрөһә лә, уларҙың ниәте бер – башҡорт халҡына азатлыҡ, автономия яулау, Башҡортостан дәүләтселеген ойоштороу булған. Уларҙың байтағы ошо изге көрәш юлында йәнен фиҙа ҡылһа, ҡалғандарың ғүмерен 30-сы йылдарҙың Сталин репрессияһы өҙә.

Бөгөн беҙ Башҡортостан тигән республикала йәшәүебеҙ менән 1917–1920 йылдарҙағы Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте эшмәкәрҙәренә ғәйәт ҙур бурыслыбыҙ. Ошо китапта бәйән ителгән шәхестәрҙең яҡты иҫтәлеген мәңгеләштереү – уларға булған бурысты ҡайтарыу. Милли хәрәкәт тарихында тәрән эҙ ҡалдырған ил-азаматтарының исемдәрен башҡалабыҙ Өфөлә лә, уларҙың тыуған яҡтарында, район үҙәге һәм ауылдарҙа ла мәңгеләштереү шарттыр.

**Автор.**



## ӘХМӘТЗӘКИ ВӘЛИДИ
**1890–1970**

Әхмәтзәки Әхмәтшаһ улы Вәлиди – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте лидеры, Башҡортостан дәүләтселегенә нигеҙ һалыусы. 1890 йылдың 10 декабрендә Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙенең (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Ишембай район) Көҙән ауылында тыуған. Тәүҙә атаһы Әхмәтшаһ мулла ҡулында, 1902 йылдан Үтәк ауылында олатаһы (әсәһенең ағаһы) Хәбибназар Үтәкиҙең мәҙрәсәһендә белем ала. 1908 йылда Ҡаҙанға барып “Ҡасимиә” мәҙрәсәһенә инә. Бер үк ваҡытта, 1909 йылдан мәҙрәсәлә шәкерттәргә төрки тарихы һәм ғәрәп әҙәбиәте буйынса һабаҡ бирә. 1910 йылдан Ҡаҙан университетында тарих һәм тел буйынса лекцияларға йөрөй. 1912 йылда “Ҡасимиә”не тамамлау менән бер рәттән, “Төрк үә татар тарихы” тигән китабын баҫтырып сыға. Төркиәт фәне ғалимдары араһында абруй ҡаҙана. Ошоноң һөҙөмтәһе булып, уны фәнни эшкә йәлеп итәләр. 1913-1914 йылдарҙа Зәки Вәлиди Төркөстанда ғилми экспедицияларҙа ҡатнаша. 1915 йылда Өфөлә “Ғосманиә” мәҙрәсәһендә уҡыта. 1916 йылда Өфө губернаһынан вәкил сифатында уны Петроградҡа Дәүләт думаһының Мосолман фракцияһына эшкә саҡырыла.

1917 йылда Вәлиди Рәсәй мосолмандарының Ваҡытлы үҙәк бюроһына ағза итеп алына. 1917 йылдың мартынан Дөйөм Төркөстан хәрәктендә ҡатнашлыҡ итә. Ташкентта үткән конгресстарҙа федератив ҡоролош, төрки халыҡтарҙың территориаль автономияһын яҡлап сығыш яһай. Ошо конгреста уны май айында Мәскәүҙә үтәсәк I Бөтә Рәсәй мосолман съезына делегат итеп һайлайҙар.

Беренсе Бөтә Рәсәй мосолман съезында башҡорт делегацияһы (50 кеше) ер мәсьәләһе буйынса ҡабул ителгән ҡарарҙар менән риза булмайынса, Ырымбурҙа Башҡорт ҡоролтайы йыйырға ҡарар ҡыла. Ошо маҡсатта, өс кешенән торған Башҡорт өлкә бюроһы – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең тәүге етәкселек органы ойошторола. Бюроға ағза итеп Сәғит Мерәҫов, Аллабирҙе Йәғәфәров һәм Зәки Вәлиди һайлана.

Зәки Вәлиди Төркөстан хәрәкәтендә йөрөү сәбәпле, тәүге Башҡорт ҡоролтайын әҙерләү эшендә туранан-тура ҡатнаша алмай. *“Башҡорт үҙәк*

*шураһының ойоштороу бүлеге мөдире итеп тәғәйенләнһәм дә, Ташкентта булғанлыктан, королтайҙы йыйыу эше менән үҙем етәкселек итмәнем. Әммә Төркөстан Милли шураһы менән Башҡорт Үҙәк шураһының эш регламенттарын мин яҙып, һәр ике шурала идара ағзалары яҡын арҡадаштарым булғанлыктан, үҙем булмаһам да, эштәр бик яҡшы ойошторолғайны*", – тип яҙа ул хәтирәләрендә.

Ҡоролтай ҡушыуы буйынса 1917 йылдың авгусында Зәки Вәлиди Илдархан Мутин, Усман Ҡыуатовтар менән бергә Петроградҡа барып, Ваҡытлы хөкүмәттең ауыл хужалығы министрында булып, башҡорт халҡының ер мәсьәләһе һәм Каруанһарайҙы ҡайтарыу буйынса һөйләшеүҙәрҙә ҡатнаша. "*Уның* (Каруанһарайҙың – А. Я.) *башҡорттарға ҡайтарылыуы халҡыбыҙ өсөн ҙур әһәмиәткә эйә. Халыҡ быны тартып алынған хоҡуктарының кире ҡайтарыла башлауы итеп ҡабул ҡыласаҡ ине. Хөкүмәткә тапшырған яҙыуҙа былар аңлатылғайы,* Чернов (Ваҡытлы хөкүмәттең ауыл хужалығы министры – А. Я.) *уны диккәт менән тыңланы.*

*Виктор Чернов, 1918 йылда Ырымбурға килеп, беҙҙә мосафир булған сакта: "Вәлидовтың, беҙгә кире ҡайтарып бирегеҙ, тип, Петроградҡа тиклем етеп талап иткән Каруанһарайы ошо икән: әгәр бер көн беҙ ҙә башҡорттарҙың ҡунағы булырыбыҙҙы белһәк, тағы бер нисә бина өҫтәп биргән булыр инек", – тип шаяртты*", – тип яҙа Вәлиди.

1917 йылдың авгусында Өфөлә үткән II Башҡорт ҡоролтайында Зәки Вәлиди Башҡорт үҙәк шураһының башҡарма комитетының рәйесе Шәриф Манатовтың урынбаҫары итеп һайлана. Шураның Эске эштәр бүлеген етәкләй. 1917 йылдың көҙөндә Ойоштороу йыйылышына (Учредительное собрание) депутатлыкка кандидат итеп күрһәтелә. Артабанғы айҙарҙа Зәки Вәлиди Башҡорт мили-азатлыҡ хәрәкәтенең лидерына әүерелә. Уның туранан-тура ҡатнашлығында, милли хәрәкәттең артабанғы йүнәлешен билдәләгән мөһим фармандар ҡабул ителә.

1917 йылдың 15 ноябрендә Башҡортостан автономияһын иғлан иткән тарихи акт – Башҡорт үҙәк шураһының 2-се һанлы фарманын әҙерләүҙә һәм уны иғлан итеүҙә ҡатнаша.

1917 йылдың 8-20 декабрендә үткән III Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайында Зәки Вәлиди Башҡортостан автономияһының Кесе ҡоролтайына (предпарламент) ағза итеп һайлана. Уның етәкселегендәге милли хәрәкәт эшмәкәрҙәре Башҡорт хөкүмәтенең рәйесе итеп Юныс Бикбовты һайлауға өлгәшә. Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиев тәкдим иткән Шәриф Манатовтың кандидатураһын ҡоролтай ҡабул итмәй. Вәлиди үҙе Башҡорт хөкүмәтенең Хәрби бүлеген етәкләй. Ғәскәр эштәре менән мәшғүл була.

1918 йылдың ғинуарында Ырымбур ҡалаһы большевиктар ҡулына күсә. Ошонан файҙаланып, Башҡортостан автономияһына ҡаршы булған Ырымбур мосолман хәрби комитеты Башҡорт хөкүмәте ағзалары Зәки Вәлиди, Илдархан Мутин, Сәғит Мерәҫов, Абдулла Әҙеһәмов, Ғәлиәхмәт Айытбаевты ҡулға алып, төрмәгә яба. Төрмәлә ике ай ултыра улар.

Башҡорт хөкүмәте ағзаларын Ырымбур төрмәһенән, 1918 йылдың 4

апрелендә казактар ярҙамында Әмир Ҡарамышевтың отряды ҡотҡара. Май аҙағында хөкүмәт ағзалары Чехословактар ҡулында булған Силәбе ҡалаһына йыйыла. *"Силәбелә уларҙың* (чехословактарҙың – А. Я.) *штаб-квартираһы станциялағы бер нисә вагонда урынлашҡан. Хәрәкәттең етәксеһе Богдан Павлу янына килдем. Үҙемде Ырымбурҙан большевиктар төрмәһенән ҡасҡан Башҡортостан хөкүмәте ағзаһымын, тип таныттым. Өҫтөмдә бик сәйер күренгән ауыл башҡорто кейеме, һаҡал-мыйығым еткән булыуға ҡарамаҫтан, ул миңә икеләнмәйенсә ышанды. Башҡорт ғәскәре төҙөргә әҙер булыуыбыҙҙы, Бөрйән, Түңгәүер, Ҡатай һәм Ялан кантондарында партизан отрядтарыбыҙ барлығын аңлаттым, ҡорал һораным. Улар ихтыяжыбыҙҙы ҡәнәғәтләндерәсәктәрен, хөкүмәтебеҙ өсөн ҡаланың уртаһында бер бина бирәсәктәрен белдерҙе"*, – ти Вәлиди.

1918 йылдың 7 июнендә Башҡорт хөкүмәте тергеҙелеп, Зәки Вәлиди етәкселегендә башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороу эшенә тотона. 12 июнь хөкүмәттең Хәрби бүлеге янында, Вәлиди етәкселегендә Башҡорт хәрби шураһы төҙөлә. Оҙаҡламай Зәки Вәлиди Һамар (Комуч, Комитет членов Учредительного Собрания) һәм Себер хөкүмәтттәре менән бәйләнешкә инә. Июль айында Омскиға барып Себер хөкүмәте менән килешеү төҙөй. Себер армияһы командалығы башҡорт ғәскәрҙәрен айырым ғәскәри берәмек булараҡ таный һәм уларҙы ҡорал һәм башҡа кәрәк яраҡтар менән тәьмин итергә ризалыҡ бирә. Һөҙөмтәлә, Зәки Вәлидиҙең тырышлығы менән ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә тулайым бер Башҡорт милли армияһы үҫеп сыға. Июнь-август айҙары эсендә биш башҡорт пехота һәм бер кавалерия полкы ойоштороло.

1918 йылдың август айында Вәлиди Һамар ҡалаһына барып, Комуч менән һөйләшеүҙәр үткәрә. Уның һөҙөмтәһендә Һамар хөкүмәте башҡорт полктарын Халыҡ армияһы сиктәрендә Айырым Башҡорт корпусына берләштерергә ризалаша. Ошо рәүешле, сентябрь айында башҡорт полктары ике пехота дивизияһынан торған Башҡорт корпусына туплана.

Әммә 1918 йылдың көҙөнән хәлдәр ҡатмарлаша. Колчак ноябрь айында Башҡорт корпусын дивизия итеп үҙгәртергә бойороҡ бирә. Дивизияның командиры итеп Колчактың офицеры тәғәйенләнә. Шуға ҡарамаҫтан, 1918 йылдың декабрь аҙағына Зәки Вәлиди башҡорт полктарын Башҡортостан территорияһында туплауға өлгәшә. Ғәскәрҙәр менән етәкселекте үҙ ҡулына ала. Ҡабат Башҡорт корпусы ойоштороло.

1918 йылдың ғинуарында советтар менән һөйләшеүҙәр башлана. 18 февралдә, Советтар менән һөйләшеүҙәрҙең тамамланыуын көтөп тормайынса, Башҡорт ғәскәрҙәрен ҡыҙылдар яғына алып сыға. Сөнки, һөйләшеүҙәр тураһында аҡтар белеп ҡалһа, башҡорт ғәскәрҙәренә һөжүм башлауы көн кеүек асыҡ. Ә ике ут араһында ҡалыу – үлемгә торошло. Ошо рәүешле Вәлиди, ауыр булһа ла, башҡорт халҡының, Башҡортостан автономияһының киләсәге хаҡына тиҙ арала ҡыҙылдар яғына сығырға ҡара ҡыла.

*"20 февралдә полктар үҙ күҙем алдында ҡыҙылдар яғына сыҡты. Ян-яғына әйәрле ике атым да бәйләнгән егеүле санала ултырған килеш ғәскәр*

*хәрәкәтен күҙәттем. Күҙ йәштәремде көскә йыйып, уларҙы сәләмләнем. Һалдаттар илаша. Улар үтеп бөткәс, янымдағы Әхмәтйәндең* (вестовой – А. Я.) *яурынына башымды эйеп үкһеп иланым. Былай үкһеүем ғүмеремдә күп булһа ике-өс тапҡыр булғандыр. Бырыбыҙ ҙа инанған демократия һәм азатлыҡ фекерен фиҙа итеп, шәхси, милли һәм ижтимағи ихтыярыбыҙҙы беҙгә билдәһеҙ маҡсатта ҡулланасаҡ Тоболин, Колесовтар ҡулына тапшырыу, аяуһыҙ ҡаршы һуғышҡан дошмандың аяғы аҫтында ҡалыу, милләтебеҙ киләсәгенең ҡараңғылығы, яратҡан ғәскәребеҙҙең башына һәләкәт төшөү мөмкинлектәре күҙ алдыма килә ине. Советтарҙың, Көнсығыш халыҡтарына ҡарата сәйәсәт мәнфәғәтенән сығып, беҙҙең ғүмерҙе ҡыймауҙарына ышана инем"*, – тип яҙа.

Шуға ҡарамаҫтан, Зәки Вәлиди 1919 йылдың мартында Мәскәүҙә Совет хөкүмәте етәкселәре Ленин, Сталиндар менән осрашып, Башҡортостанға киң автономия хоҡуҡтары һәм башҡорт ғәскәрҙәренең үҙаллылығын һаҡлап ҡалыуға өлгәшә. Уның үҙе Башҡортостандың хәрби комиссары итеп раҫлана.

Ләкин 1919 йылдың яҙында Колчак армияһының кире һөжүмгә күсеүе, Башҡортостан автономияһын тормошҡа ашыра башларға мөмикнлек бирмәй. Башҡортостандың революцион хөкүмәте – Башревком һәм республиканың Хәрби эштәр буйынса комиссариаты Саранскийға күсә. Бында Зәки Вәлиди башҡорт ғәскәрҙәрен тәртипкә килтереү менән мәшғүл була. Ике кавалерия һәм ике уҡсы полктарҙан торған Айырым Башҡорт бригадаһы ойошторола башлай. Килешеү буйынса улар Көнсығыш фронтҡа барып Башҡортостан территорияһын Колчактан азат итеүҙә ҡатнашырға тейеш була. Әммә 1919 йылдың июнендә, Көньяҡ фронтта (Украинала) ҡыҙылдарҙың хәле мөшкөлләнеү сәбәпле, Башҡорт бригадаһы шунда ебәрелә. Ә инде сентябрҙә бөтә башҡорт ғәскәрҙәре Петроградҡа ташлана.

*"1920 йылдың майында Советтар менән Польша араһында һуғыш башланғас, башҡорт ғәскәренең бер өлөшө поляктарға ҡаршы ебәрелде. Был ваҡытта Совет хөкүмәте башҡорт ғәскәрҙәрен теге йәки был тарафҡа күсереүҙә, уның менән идара итеүҙә Башҡорт хәрби комиссарлығының ризалығын һорап тормай ине инде. Бөтә хосуста ла Совет командалығына буйһоноп ҡалдыҡ"*, – яҙа Зәки Вәлиди.

1920 йылдың 19 майында үҙенең декреты менән Үҙәк Совет хөкүмәтең Башҡортостандың автономия хоҡуҡтарын да ҡырҡа сикләй. Был ваҡытта инде, Зәки Вәлиди Мәскәүгә саҡыртып алынып, республикаға етәкселек итеүҙә ситләтелгән була. Ул Советтарға ҡаршы көрәште Төркөстанда дауам итергә ҡарар итә. Үҙенең көрәштәштәре, Башревком ағзаларына ла Төркөстанға китергә кәңәш бирә.

Әммә Төркөстандағы милли хәрәкәт тә уңышһыҙлыҡҡа осрай. 1923 йылда Зәки Вәлиди яҡын дуҫы Фәтхелҡадир Сөләймәнов менән Иранға сыға, артабан Төркиәгә килә. 1924 йылда Германияла йәшәй. 1925 йылдың июнендә Төркиә гражданлығы алып, Истанбул ҡалаһына килеп төпләнә. 1932 йылға тиклем Төркиәнең Мәғариф министрлығында эшләй. 1932–1939 йылдарҙа

Германияла йәшәй. Бонн университетында докторлыҡ дәрәжәһенә диссертация яҡлай. 1939 йылдан вафатына тиклем Стамбул университетында эшләй. 1953 йылда университет янында Ислам тикшеренеүҙәре институтын ойошороп, шуға етәкселек итә. Шәрҡиәтсе, тарихсы Зәки Вәлидиҙең исеме донъяға таныла.

**Сығанаҡтар:**

А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Ч. 1. Уфа, 2005. С.54, 61, 65, 87, 96, 118, 142, 159, 256–260, 261, 245, 263, 266, 269, 275, 279, 283, 287, 292, 332, 337, 334.

Вәлиди Туған Ә. Ә. Хәтирәләр. Өфө, 1996. 184, 187, 266-сы бит.

Әзмәтзәки Вәлиди Туған. Башҡорттарҙың тарихы. Өфө, 2005. 254-се бит.

Башкирская энциклопедия. Т. 2. Уфа, 2006. С. 14–15.



**ШӘРИФ МАНАТОВ**
**1892 – 1936**

Шәрифйән Әхмәтйән улы Манатов – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте етәкселәренең береһе. 1892 йылдың 20 октябрендә Ырымбур губернаһы Силәбе өйәҙенең (хәҙерге Ҡурған өлкәһенең Әлмән районы) Манат ауылында тыуған. Өфөләге "Ғәлиә" мәҙрәсәһендә, артабан Семипалатинск ҡалаһында Уҡытыусылар семинарияһында уҡый. 1910 йылда Петербург ҡалаһындағы Бехтерев институтының тарих-филология факультена уҡырға инә. Бында ул сәйәси-революцион эшмәкәрлек менән мауығып китә. Һөҙөмтәлә 1914 йылда полицияның эҙәрлекләүенән ҡасып, Швецарияға сығып китә. Эмиграцияла революционерҙар менән аралаша, большевиктарҙың лидеры Ленин менән танышып ала.

1917 йылдың Февраль революцияһынан һуң, Башҡортостанға ҡайта. Өфөлә "Тормош" гәзите редакцияһында эшләй. 1917 йылдың йәйенән Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушылып китә. Оҙаҡламай Ш. Манатов милли-хәрәкәт лидерҙарының береһенә әүерелә. 20–27 июлдә үткән I Башҡорт ҡоролтайында милли хәрәкәттең идара органы – Башҡорт мәркәз (үҙәк) шураһы башҡарма комитетына рәйесе итеп һайлана. 1917 йылдың көҙөндә Шәриф Манатов Рәсәйҙең Ойоштороусылар йыйылышына (Учредительное Собрание) депутат итеп һайлана.

Уның етәкселегендәге Башҡорт мәркәз шураһы 1917 йылдың 15 ноябрендә Башҡортостан автономияһын иғлан итә. 8-20 декабрҙә Ырымбурҙа үткән III Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайында Башҡортостан автономияһы раҫлана. Шәриф Манатов автономияның юғары закон сығарыу органы – Кесе ҡоролтайы составына һайлана. Үҙ сиратында, Кесе ҡоролтай үҙ составынан Башҡорт хөкүмәтен һайлай. Хөкүмәт рәйесен һайлаған ваҡытта ҡыҙыу көрәш башлана. "*Был ҡоролтайҙа Арғаяш кантонлығы башҡорттарынан Ғәбделхай Ҡорбанғәлиев менән Минһаж исемле арҡадашы, монархист урыҫтар менән берләшеп, оппозиция тәшкил итергә маташты... Ҡорбанғәлиев Манатовты Башҡортостан хөкүмәте рәйесе итергә тырышты, беҙ иһә адвокат Юныс*

*Бикбовты һайларға уйлай инек"*, – тип яҙа Вәлиди. Әммә күпселек тауыш менән Башҡорт хөкүмәте рәйесе итеп Ю.Бикбов һайлана.

Етәкселектән ситләтелеү сәбәпле, Шәриф Манатов 1918 йылдың ғинуарында Петроградҡа, Ойоштороу йыйылышына китә. Бында ул Милләттәр эштәре буйынса комиссариаты (Наркомнац) янындағы Мосолман үҙәк комиссариатына эшкә төшә. Мосолман эштәре буйынса комиссар Мулланур Вәхитовтың урынбаҫары итеп раҫлана. Әммә мосолман комиссариаты алға һөргән Татар-Башҡорт Республикаһы тураһындағы идея, уның күңеленә бер ҙә хуш килмәй. Манатов башҡорт эшмәкәрҙәре Ф. Әхмәҙуллин, Т. Имаҡовтар (икәүһе Өфө мосолман комиссариатында эшләй) менән бергә айырым Башҡортостан автономияһы өсөн сығыш яһай башлай.

1918 йылдың майында Өфөгә килгән сағында Мәскәүҙә бергә эшләгән коллегаһы, татар эсеры Ғәлимйән Ибраһимов Ш. Манатовты Ф. Әхмәҙуллин һәм Т. Имаҡовтар менән бергә төрмәгә ябып ҡуя. Июнь айында, Өфө аҡтар ҡулына күсеү сәбәпле, большевиктар Манатовты Сарапул төрмәһенә күсерә. Төрмәлә ике ай тирәһе ултырып сыға.

Артабан Наркомнацта эшләй. 1919 йылдың ғинуарында уны Төрөк коммунистар партияһының матбуғат баҫмаһын сығарыуҙа ярҙам күрһәтеү өсөн Төркиәгә ебәрәләр. Бында ул 1920 йылдың октяренә тиклем эшләй.

1920 йылдың декабренән Наркомнацтың БашЦИК янындағы вәкиле булып эшләй. 1924 йылдан Башҡортостан халыҡ мәғарифы комиссариаты янындағы Академик үҙәккә етәкселек итә. Артабан 1925–1932 йылдарҙа Ярославль педагогия институтында уҡыта, Әзербайжан компартияһы үҙәк комитетында эшләй, Баҡы педагогия институты ректоры булып тора.

1934 йылдан Фрунзе ҡалаһында Ҡырғыҙ дәүләт педагогия институтында уҡыта. 1935 йылда, "контрреволюцион буржуаз милләтсел иделогиянан" ҡотолмаған кеше булараҡ ул партия сафтарынан һәм эшенән сығарыла.

Оҙаҡламай Шәриф Манатов Силәбе өлкәһенең Смородиновка ауылында йәшәгән ағаһы янына ҡатып төшә. 1936 йылдың көҙөндә ошо ауылда вафат була. Уны күрше Учалы районының Көсөк ауылы зыяратына алып барып ерләйҙәр.

**Сығанаҡтар:**

А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Кн. 1. Уфа, 2005. С. 51, 54, 61, 65, 66, 87, 96, 118.

Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 1. Уфа, 2002. С. 142, 157, 177, 185.

Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 258, 400, 534.

Насыров Р. От имени башкир //Возвращенные имена. – Уфа, 1991. С. 191–210.

Вәлиди Туған Ә. Ә. Хәтирәләр. – Өфө, 1996. 204-се бит.

Давлетшин Р. Товариш комиссара по делам мусульман // Истоки. 1997. № 1 (143).



## ЮНЫС БИКБОВ
## 1883–1943

Юныс Юлбарыҫ улы Бикбов – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте етәкселәренең береһе, Башҡорт хөкүмәтенең тәүге рәйесе. Үҫәргәндәрҙең данлыҡлы ырыу башлығы Бикбау бей нәҫеленән.

Ю. Бикбов 1883 йылда Ырымбур губернаһы Орск өйәҙенең (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Ейәнсура районы) Әбүләис ауылында тыуған. Ауыл мәҙрәсәһен тамамлағандан һуң, Ырымбур гимназияһына уҡырға инә. Гимназияла үҙен зирәк уҡыусы итеп таныттҡанға күрә уны, артабан Ҡаҙан университетының юридик факультетына уҡырға ебәрәләр. Бында ул "Башҡорт стипендияһы"на уҡый. 1911 йылда университетты тамамлап ҡайтып, 2-се Үҫәргән улысында мировой судья булып эшләй.

1917 йылдың йәйендә Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушылып китә. Июнь аҙағында Ырымбурҙа ойошторолған милли хәрәкәттең идара органы – Башҡорт иттифаҡи бюроһының ағзаһы итеп һайлана. Әйткәндәй, был бюрола уның атаһы Юлбарыҫ Бикбов та ағза булып тора.

1917 йылдың июлендә һәм авгусында үткән I, II Башҡорт ҡоролтайҙарында әүҙем ҡатнаша. 1917 йылдың көҙөндә уны Ш. Манатов, Ғ. Иҙелбаев, У. Ҡыуатовтар менән бергә Ырымбур башҡорттарынан Рәсәйҙең Ойоштороу йыйылышына (Учредительное собрание) депутатлыҡҡа кандидат итеп күрһәтелә. Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте был оло йыйынға ҙур өмөтттәр бағлай, сөнки унда Рәсәйҙең артабанғы яҙымышы, дәүләт ҡоролошо хәл ителергә тейеш була.

1917 йылдың 8-20 декабрендә Ырымбурҙа Каруанһарайҙа III Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайы үтә. Бында Башҡортостан автономияһы раҫлана. Автономияның юғары закондар сығарыу органы – Кесе ҡоролтай (Предпарламент) һайлана. Башҡорт хөкүмәте ойошторола. Хөкүмәттең рәйесе итеп оло йыйын күпселек тауыш менән тәжрибәле юрист Юныс Бикбовты һайлай. Оҙаҡ эшләргә насип булмай.

1918 ғинуарында Ырымбур большевиктар ҡулына күсеүҙән файҙаланып, автономияға ҡаршы булған Ырымбур мосолман хәрби комитеты, Башҡорт хөкүмәтен контрреволюцияла ғәйепләп, төрмәгә ябып ҡуя.

Тик 1918 йылдың авгусында Башҡорт хөкүмәте Силәбенән Ырымбурға ҡайтҡас, Юныс Бикбов яңынан рәйес вазифаһын яңынан үтәй башлай (ул бер

үк ваҡытта хөкүмәттең Ер эштәре буйынса бүлеген етәкләй). *“Ырымбурға килеп етер-етмәҫтән дәүләт ҡоролошо эштәре менән мәшғүл булдыҡ. Быны‍ң менән хөкүмәт рәйесе Юныс Бикбов һәм профессор Ҡулаев шөғөлләнде. Улар юридик эштәр менән шөғөлләнеп, ауыл хужалығы һәм урман идараһы мәсьәләләренә ҡағылған ҡанундар ҡабул итте”*, – тип яҙа Зәки Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә.

1918 йылдың сентябрендә Юныс Бикбов Зәки Вәлиди менән бергә Һамар хөкүмәте (Учредитель йыйылышы Комитеты ағзалары, Комуч) менән һөйләшеүҙәр алып бара. Һөйләшеүҙәрҙең маҡсаты: Башҡортостан автономияһын Комуч тарафынан танытыу, уның Халыҡ армияһына башҡорт ғәскәрҙәрен ҡушыу. Һамар хөкүмәте автономияны таныуы тураһында рәсми рәүештә иғлан итмәһә лә, Башҡорт хөкүмәтенә ҙур ярҙам күрһәтә. Башҡорт полктарын Халыҡ армияһы составында Айырым Башҡорт корпусына берләштереүгә ризалыҡ бирә.

1918 йылдың ноябрендә Колчак власҡа килеү менән башҡорт ғәскәрҙәре һәм хөкүмәтен таратыу тураһында фарман бирә. Милли хәрәкәт етәкселеге араһында Совет власы менән һөйләшеүҙәрҙәр башлау кәрәклеге мәсьәләһе күтәрелә. Әммә Башҡорт хөкүмәте рәйесе һәм ҡайһы бер хөкүмәт ағзалары был идеяға ҡаршы сыға. 1919 йылдың ғинуарында хөкүмәт рәйесе итеп Мөхәмәтхан Ҡулаев һайлана һәм ул большевиктар менән һөйләшеүҙәргә етәкселек итә.

Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, Юныс Бикбов Башҡортостандың Юстиция халыҡ комиссары булып эшләй. 1919 йылдың апрелендә, Башревком Мораптал ауылында торған саҡта, отпуск алып, Ю. Бикбов тыуған ауылына ҡайта. Әммә ул бында ҡыҙылдар (Үҫәргән кантоны большевиктары) тарафынан ҡулға алына. Аҡтар һөжүмгә күсеү сәбәпле Башревком Саранскиға эвакуациялана. Ошо рәүешле Ю. Бикбов Башревкомдан тороп ҡала. Ул ауылында йәшеренеп йәшәй.

Башревком Саранскийҙан ҡайтҡас, Ю. Бикбов Юстиция комиссариаты Коллегияһы ағзаһы булып, артабан “Башкирпомощь”та эшләй. Һуңынан ул байтаҡ йылдар Йылайыр кантонында халыҡ судьяһы вазифаһын башҡара. 1930 йылдың майында ОГПУ органдары Юныс Бикбовты ҡулға алып, биш йылға иркенән мәхрүм итә. 1933 йылда төрмәнән сыҡҡас, ул ғаиләһе янына Ташкентҡа китә. Бында мәктәптәрҙә уҡыта, аҙаҡ университетта эшләй. 1938 йылда Юныс Бикбовты тағы ҡулға алалар. Һигеҙ йылға иркенән мәхрүм итеп, Карагандаға һөргөнгә ебәрәләр. Юныс Юлбарыҫ улы Бикбов 1943 йылда Караганда ҡалаһында вафат була. 1962 йылдың 17 авгусында реабилитациялана.

## Сығанаҡтар:


ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 25. Л. 2 об.

А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Кн. 1. Уфа, 2005. С. 184, 201, 159, 239.

Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 1. Уфа, 2002. С. 157, 178, 216.

Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 390, 484, 553, 582.

Вәлиди Туған Ә. Ә. Хәтирәләр. – Өфө, 1996. 236-сы бит.

Кульшарипов М. М. Башкирское найциональное движение (1917–1921). Уфа, 2000. С. 195–196.

Книга памяти жертв политических репрессий Республики Башкортостан. Т. 1. Уфа, 1997. С. 287.

Башкирская энциклопедия. Т. 1. Уфа, 2005. С. 463.

Насиров Р. Башҡорт хөкүмәтенең тәүге рәйесе // Ватандаш. 1999. № 4.



## МӨХӘМӘТХАН ҠУЛАЕВ
## 1873–1959

Мөхәмәтхан Сәхипгәрәй улы Ҡулаев – Башҡорт милли азатлыҡ хәрәкәте етәкселәренең береһе, Башҡорт хөкүмәте рәйесе. 1873 йылдың 7 февралендә Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙенең (хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районы) Ейәнсура ауылында тыуған. Тәүҙә ауыл мәҙрәсәһендә, артабан Рус-башҡорт мәктәбендә уҡый. 1895 йылда Ырымбур гимназияһын алтын миҙалға тамамлай. 1897–1902 йылдарҙа Ҡаҙан университетының медицина факультетында уҡый. Унирверситетта уҡыған йылдарында урыҫ ҡыҙы менән танышып, өйләнешергә булалар. Әммә ҡыҙҙың атаһы М. Ҡулаевҡа христиан диненгә күсергә – урыҫ исемен алырға тигән шарт ҡуя. Ошо осорҙан алып Мөхәмәтхан Ҡулаевтың рәсми исеме Мстиславҡа әйләнә. Университетты тамамлағандан һуң, Ҡаҙан губернаһының Кесе Илсекәй ауылында земство врачы булып эшләй, һуңынан Ҡаҙан ҡалаһының Александр дауаханаһына күсә.

1913 йылда Варшава ҡалаһына эшкә күсерелә. Беренсе донъя һуғышы башланғас, 1914 йылдың октябренән Көньяҡ-Көнбайыш фронтта ялан госпиталенең начальнигы – баш врачы булып хеҙмәт итә. 1917 йылда революциянан һуң Ҡаҙанға ҡайтып, врач булып эшләй.

1918 йылдың авгусында Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәктенә ҡушылып китә. Уны Ырымбурҙа Башҡорт хөкүмәтенә баш врач итеп тәғәйенләйҙәр. Оҙаҡламай хөкүмәт составына индерелә. Сентябрь айында Ҡулаев башҡорт йәштәренең "Тулҡын" ойошмаһын тергеҙеүҙә ҡатнаша. "Тулҡын"дың 1-се сентябрҙә үткән ойоштороу йыйылышында доклад менән сығыш яһай.

1918 йылдың ноябрендә Колчак власҡа килеү менән хәлдәр ҡатмарлашҡас, Башҡорт хөкүмәте рәйесе вәкәләттәре Мөхмәтхан Ҡулаев ҡулына тапшырылған булһа кәрәк. Документтар ошо хаҡта һөйләй. Омскийҙа Колчак хөкүмәте менән һөйләшеүҙәр алып барған юрист Искәндәр Солтанов 1918 йылдың 14 ноябрендә Ырымбурға: "*Готовятся назначить главноуполномоченного для ликвидации нашего дела башкирской автономии. Приезд доктора желателен*", – тип телеграмма һуға. Оҙаҡламай М. Ҡулаев Омскиға китә. "*Доктор Кулаев, генерал*

*Ишбулатов, Султанов, и Ишмурзин еще до сих пор не вернулись. Они пишут о плохом положении Колчака"*, – тип яҙа 1918 йылдың 14 декабрендә Зәки Вәлиди.

Омскиҙан ҡайтҡас, Мөхәмәтхан Ҡулаев, 1919 йылдың ғинуарында, рәсми рәүештә Башҡорт хөкүмәтенең рәйесе итеп һайлана.

Хәҙер инде ул Советтар менән һөйләшеүҙәргә етәкселек итә. 1919 йылдың 18 февралендә Ҡулаев етәкселегендәге Башҡорт хөкүмәте делегацияһын (М. Халиҡов, Ә. Бикбауов) Өфөлә Республиканың Реввоенсоветы, губерна коммунистары, 5-се армия Реввоенсоветы һәм Наркомнац вәкилдәре менән һөйләшеүҙәр үткәрә. Артабан һөйләшеүҙәр, Көнсығыш фронттың штабына, Сембер ҡалаһына күсерелә. Бында, 1919 йылды 27 февралендә, башҡорт вәкилдәре менән Көнсығыш фронттың Реввоенсовет вәкилдәре менән тәүге (предварительный) килешеү төҙөлә. Артабан Башҡорт хөкүмәте делегацияһы Мәскәүгә юллана. Бында килешеү процессына Зәки Вәлиди ҙә ҡушыла. Мөхәмәтхан Ҡулаев менән Вәлиди Ленинға инеп, автономия мәсьәләләре тураһында һөйләшеп сыға. *"...Мәскәүҙә (2–6 мартта) Коминтерндың Икенсе конгресы йыйылырға тейеш булған. Лениндың ысынлап та бик мәшәҡәтле ваҡыты. Сит мәмләкәттәрҙән күп делегация килгән. Шулай ҙа, Сталин, миңә бер көн телефон аша шылтыратып, һеҙҙе Ленин күрергә теләй, үҙегеҙ менән бергә бер-ике иптәшегеҙҙе лә алығыҙ, тине. Хөкүмәт рәйесебеҙ доктор Ҡулаев менән бергә киттек. Ул ошо көндәрҙә Семберҙә көнсығыш фронт командалығында солох төҙөү һөйләшеүҙәренән килеп төшкәйне. Ҡулаев бала сағынан рус миссионерҙары ҡулына эләгеп, христиан мөхитенә йәлеп ителеп, христианлаштырылған башҡорт. Беҙ уға ысын исеме менән Мөхәмәтхан ағай тип өндәшә торғайнык, үҙе лә шуны теләне. Әммә рәсми исеме менән Мстислав Кулаев тип имза ҡуя ине... Ленин өҫтәл артынан сығып, ҡул һуҙып күреште... Доктор Ҡулаевтан: "Иптәшегеҙҙең исеме Әхмәтзәки, ә ни өсөн һеҙҙең исемегеҙ Мстислав?" – тип һораны. Ҡулаев: "Мин христиан башҡорт", – тип яуап бирҙе. Ленин: "Дин алыштырыуығыҙ арҡаһында халҡығыҙ менән мөнәсәбәтегеҙ боҙолманымы? Дин алмаштырмай ғына атеист булыу яҡшыраҡ түгелме?", – тип һораны. Ҡулаев уңайһызланды, аныҡ яуап бирмәне"*, – тип яҙа үҙенең хәтирәләрендә Вәлиди.

1919 йылдың 20 мартында Үҙәк Совет хөкүмәте менән Башҡорт хөкүмәте араһында Башҡортостан Совет автономияһы тураһында килешеү төҙөлә. Килешеүгә Башҡорт хөкүмәте исеменән Мөхәмәтхан Ҡулаев, Муллаян Халиҡов һәм Әбдрәшит Бикбауовтар ҡул ҡуя.

Мәскәүҙән ҡайтҡандан һуң, Ҡулаев Башревкомда эшләй. 1919 майынан, Саранскиҙа Башревком рәйесе урынбаҫары вазифаһын башҡара. Июнь айында Ҡулаевты Саранскийҙан Ҡаҙан ҡалаһына, мосолман эшмәкәрҙәрен Башҡорт Республикаһына эшкә саҡырырға ебәрәләр. Әммә ул бында ауырып китеп, үҙенең өҫтөнә һалынған бурыстарҙы үтәй алмай. Һуңынан инде Башревкомға килеп тормай, Ҡаҙанда эшкә төшә. Ошоноң менән дәүләт эштәренән бөтөнләй китә.

Мөхәмәтхан Сәхипгәрәй улы Ҡулаев ғүмеренең һуңына тиклем Ҡаҙан ҡалаһында йәшәй, врач булып эшләй. 1959 йылда ошонда вафат була.

## Сығанаҡтар:

ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 25. Л. Л. 47, 71, 137.
А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Кн. 1. Уфа, 2005. С. 201, 345.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 273, 346, 484, 500, 536, 543, 549, 550, 579, 602, 621, 637.
Вәлиди Туған Ә. Ә. Хәтирәләр. – Өфө, 1996. 269–270-се биттәр.



## МУЛЛАЙӘН ХАЛИҠОВ
## 1894–1937

Муллайән Дәүләтша улы Халиҡов – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте етәкселәренең береһе, күренекле дәүләт эшмәкәре. 1894 йылдың 4 февралендә Өфө губернаһы Бәләбәй өйәҙенең (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Бүҙәк районы) Аҡтау исемле башҡорт ауылында тыуған.

1909 йылға тиклем тыуған ауылында белем ала, артабан Килем ауылында башланғыс урыҫ мәктәбендә уҡый. 1915 йылда Ырымбур губернаһының Троицк ҡалаһындағы уҡытыусылар семинарияһын тамамлай. М. Халиҡовты Орск ҡалаһына башланғыс мосолман мәктәбенә уҡытыусы итеп ебәрәләр. Бында ул 1917 йылдың октябренә тиклем эшләй. Артабан уны Темәс ауылындағы земство китапханаһына мөдир итеп тәғәйенләйҙәр. Халиҡов Темәстә 6 йыллыҡ Башҡорт башланғыс училищеһында уҡыта. Ошо осорҙа ул Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушылып китә. Халиҡов Башҡорт үҙәк шураһына ағза итеп алына.

Әммә 1918 йылдың 4 февралендә (яңыса 16 февраль) Ырымбур ҡалаһында Башҡорт хөкүмәте һәм Башҡорт үҙәк шураһы ағзалары ҡулға алынып, төрмәгә ябыла. Х. Ғәбитов яҙыуынса, 14 февраль көнө Ырымбурҙан Муллайән Халиҡов менән Ғәзиз Әлмөхәмәтов Баймаҡҡа килеп, башҡорт эшмәкәрҙәренә Ырымбурҙағы хәлдәрҙе хәбәр итә.

Муллайән Халиҡов үҙенең автобиографияһында яҙыуынса, 1918 йылдың 23 мартынан РКП(б)-ға яҙылып, советтар яғында йөрөй. Троицк ҡалаһы һәм өйәҙенең мосолман эштәре буйынса комиссары булып эшләй. Апрель айында Ырымбур төрмәһенән ҡотолған Зәки Вәлиди йәшерен рәүештә Муллаян Халиҡов менән бәйләнешкә инә һәм уны милли хәрәкәт эшенә йәлеп итә. “*Хәҙер Семипалатинскиға кеше ебәреп, 15–20 майҙа Кустанайҙағы мөхәррир Ғабдулла Ғисмәтиҙең атаһы өйөнә килергә саҡырасаҡбыҙ. Муллайән Халиҡов, Троицкиға һәм артабан Кустанайға барып, беҙҙе көтәсәк*”, – тип яҙа Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә.

1918 йылдың май аҙағында Силәбе ҡалаһында Чехословак корпус большевиктарға ҡаршы баш күтәреп, власты үҙ ҡулына ала. Оҙаҡламай Бөтә

Өфө һәм Ырымбур губернаһында власть большевиктарға ҡаршы көстәр ҡулына күсә. Июнь башында Силәбе ҡалаһында Башҡорт хөкүмәте тергеҙелә. Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте етәкселәре автономияның хәрби көстәрен – Башҡорт армияһын ойоштороу эшенә тотона.

1918 йылдың 10 июлендә Муллайән Халиҡов Башҡорт хөкүмәтенең Хәрби бүлеге тарафынан Һамар ҡалаһына Ойоштороу йыйылышы ағзалары комитетына (Комуч, Һамар хөкүмәте) ебәрелә. Бында ул Башҡорт армияһына ҡорал менән ярҙам итеү мәсьәләһе буйынса һөйләшеүҙәр алып бара. Комуч башҡорт милли ғәскәрҙәрен ойоштороуҙы хуплай һәм ярҙам күрһәтергә ризалыҡ бирә.

1918 йылдың август башында Башҡорт хөкүмәте Силәбенән үҙенең Ырымбурҙағы резиденцияһына, Каруанһарайға ҡайтып төшә. Хәҙер инде хөкүмәт, ғәскәр ойоштороу эштәре юлға һалып, Башҡортостан автономияһының урындағы власть органдарын тергеҙеүгә тотона. Сентябрь аҙағында Муллайән Халиҡов Башҡорт хөкүмәтенең уполномоченныйы сифатында Көҙәй кантонына ебәрелә. Бында ул кантон башҡармаһын ойоштороу менән шөғөлләнә. Унда 1918 йылдың декабрь уртаһына тиклем була. Кантон башҡармаһына етәкселек иткән булһа кәрәк.

1918 йылдың ноябрендә Колчак власка килгәс, Башҡортостан автономияһын бөтөрөргә, ә уның ғәскәрҙәрен тулыһынса үҙенең генералдарына буйһондорорға тигән фарман сығара. Башҡорт хөкүмәте Совет власы менән һөйләшеүҙәр башларға уй-ниәт ҡора. Ошо маҡсат менән фронт һыҙығы аша Гәрәй Ҡарамышев менән Сәләх Атнағоловтарҙы ебәрә. Әммә илселәрҙең юлы уңмай. С. Атнағолов үҙенә һалынған бурысты онотоп, Бәләбәй ҡалаһында эшкә төшә. Г. Ҡарамышев кире ҡайтып килә.

1918 йылдың 15 декабрендә Башҡорт хөкүмәте Өфө ҡалаһына Муллайән Халиҡов менән Хәйретдин Сәғитовтарҙы ебәрә. 31 декабрҙә Өфө Ҡыҙыл Армия ҡулына күсә. Башҡорт вәкилдәре урындағы совет власы органдары һәм Ҡыҙыл Армия етәкселеге менән бәйләнешкә инеп, һөйләшеүҙәр башлай. 30 ғинуар көнө Халиков менән Сәғитов Өфө губерна башҡарма комитеты ултырышында ҡатнаша. Бында Милләттәр эштәре комиссариаты (Наркомнац) вәкиле лә була.

*“Наши условия были следующие: 1) Башкирская Советская Республика, 2) Башкирский корпус, 3) финансовая помощь, 4) продвижение фронта скорее до Челябинска и Троицка, дабы восточная часть населения Башкирии не пострадала в руках сибирских реакционеров. На эти условия они получили положительный ответ.*

*8 февраля наши представители тт. Мулладжан Халиков и х. Сагитов и с ними вместе представитель партии коммунистов т. Г. Аминев прибыли в штаб Башкирского корпуса и привезли протокол совещания, подписанный всеми участниками”*, – тип яҙа Зәки Вәлиди.

Ошо уҡ мәлдә Өфө коммунистары һөйләшеүҙәр тураһында Мәскәүгә хәбәр итә. Ленин менән Сталин: *“Предлагаем не отталкивать Халикова, согласиться на амнистию при условии создания единого фронта с башкирскими полками*

*против Колчака. Со стороны советской власти гарантия национальной свободы башкир полная. Конечно, необходимо наряду с этим строжайше отсечь контрреволюционные элементы башкирского населения и добиться фактического контроля за пролетарской надежностью башкирских войск"*, – тип телеграмма һуға Өфөгә.

1919 йылдың 11 февралендә Өфөгә яңы башҡорт делегацияһы юллана. Башҡорт хөкүмәте рәйесе Мөхәмәтхан Ҡулаев, Муллайән Халиҡов һәм З. Вәлидиҙең адъютанты Әбдрәшит Бикбауовтар 18–19 февралдә Өфө губревкомы рәйесе Б. Нимвицкий, РКП(б)-ның Өфө губкомы рәйесе В. Седенков, 5-се армияның Реввоенсоветынан И. Смирнов, Республиканың (РСФСР) Реввоенсоветынан В. Смирнов һәм Милләттәр эштәре буйынса комиссариат вәкиле М. Солтанғәлиевтар ҡатнашлығында һөйләшеүҙәр үткәрә.

Ошо уҡ мәлдә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыға. 21 февраль көнө Темәс ауылында Бөтә Башҡорт хәрби съезында Башҡортостан автономияһының ваҡытлы революцион хөкүмәте – Башревком ойошторола. Советтар менән һөйләшеүҙәрҙә йөрөгән Муллайән Халиҡовты Башревкомға ағзалыҡҡа кандидат итеп һайлайҙар.

Башҡорт вәкилдәре һөйләшеүҙәрҙе Көнсығыш фронттың штабында, Сембер ҡалаһында дауам итә. 1919 йылдың 27 февралендә бында Башҡорт хөкүмәте вәкилдәре менән Ҡыҙыл Армия командалығы араһында тәү килешеү (предварительный договор) төҙөлә. Артабан башҡорт вәкилдәре Мәскәү ҡалаһына юллана.

20 март көнө Муллайән Халиҡов Мөхәмәтхан Ҡулаев һәм Әбдрәшит Бикбауовтар менән бергә башҡорт халҡының автономияһын раҫлаған тарихи документҡа – Үҙәк Совет хөкүмәте менән Башҡорт хөкүмәте араһындағы Башҡортостан Совет автономияһы тураһындағы килешеүгә ҡул ҡуя. Мәскәүҙән ҡайтҡас, М. Халиҡов Башревкомда эшләй.

1919 йылдың 16 майында Зәки Вәлиди тәҡдиме менән Халиҡов Һамар ҡалаһындағы Көнсығыш фронттың Көньяҡ төркөмө штабында янында Башревком вәкиле итеп тәғәйенләнә. Бында ул Мәскәү менән элемтә тота, М. Фрунзе менән даими бәйләнештә була, башҡорт ғәскәрҙәрен төрлө-кәрәк яраҡтар тәьмин итеү эшен координациялай. Был вазифаны М. Халиҡов 1920 йылдың мартына тиклем башҡара.

1920 йылдың 24 мартында Башревком Халиҡовты Һамарҙан ҡайтарырға ҡарар итә. Ул Тамъян-Ҡатай кантоны ревкомы рәйесе итеп раҫлана. Халиҡов тик апрель айында ғына Башҡортостанға ҡайтып етә һәм үҙенә һалынған вазифаһын үтәй башлай.

Үҙәк Совет власы Башҡоростандың автономия хоҡуҡтарын ҡырҡа сикләгәс, Муллайән Халиҡов 1920 йылдың июнендә Башревком ағзалары менән бергә эшен ташлап сығып китә. Халиҡов Әбдрашит Бикбауов менән Зәки Вәлиди янына юллана. Вәлиди сентябрь башында Баҡы ҡалаһында Шәреҡ милләттәре съезында ҡатнаша. "*Съезд тамамланыр-тамамланмаҫтан юлға сыҡтым.*

*Порт һәм станцияларҙа мине эҙләп йөрөүсе чекистар ҡулына эләкмәҫ өсөн Баҡынан Сумгаит станцияһына ҡәҙәр фаэтон яллап киттем һәм, поезға шунан ғына ултырып, Муллайән Халиков, адъютантым Ғәбдрәшит Бикбауов менән алдан әҙерләнгән купела Петровскиға тиклем бергә килдек. Улар ВЦИК, йәғни Рәсәй Үҙәк Башҡарма Комитеты ағзаһы булыуымдан файҙаланып, документ әҙерләгәндәр, шуға Петровскиға тыныс барып еттем. Үҙҙәре лә ВЦИК ағзаһы булған был ике арҡадашым менән һуңғы тапҡыр ошо поезда хушлаштым. Уларҙы ғүмеремдә башҡа күрергә яҙманы. Башҡортостанға ҡайттылар"*, – тип яҙа Вәлиди.

Башҡортостанға ҡайтыу менән Муллайән Халиҡов республиканың социаль тәьминәт комиссары итеп тәғәйенләнә. БашЦИК ағзаһы итеп һайлана. 1921 йылдың ғинуарынан Башҡортостандың халыҡ мәғарифы комиссары булып эшләй. Июль айында Муллайән Халиҡов Автономиялы Башҡорт Совет Республикаһы хөкүмәте – Башсовнарком рәйесе итеп һайлана. Хөкүмәт рәйесе вазифаһында ул Башҡортостан дәүләтелеген нығытыуҙа, ә иң мөһиме Өфө губернаһы башҡорттарын автономияға ҡушыуҙа ҙур эштәр башҡара. 1921 йылдың майында уҡ Халиҡовтың докладын нигеҙендә Башобком менән БашЦИК түбәндәге ҡарарын сығара:

а) В основу Башкирской Советской Социалистической Республики берется Малая Башкирия в составе ныне существующей Башкирской республики с присоединением Златоустовского горонозаводского района, Архангельского клина (Уфимской губ.) Магнитной горы и минских башкир в составе 19 волостей Белебеевского и Уфимского уездов.

б) включить в состав Башреспублики г. Оренбург;

в) включить целиком ныне существующую Уфимскую губернию с городом Уфой;

г) включить башкирские волости Мензелинского уезда по реке Ик.

Үҙәк власть Башҡортостан хөкүмәте индергән тәҡдимдәрҙең ҡайһы берҙәрен ҡабул итмәй. Ә шулай ҙа 1922 йылдың июнендә Өфө губернаһын Башҡортостанға ҡушырға ҡарар итә. Халиҡов Оло Башҡортостан хөкүмәте рәйесе булып китә.

1925 йылдың аҙағында Муллайән Халиҡов Мәскәүгә эшкә китә. Бында ул Ауыл хужалығы банкында эшләй. 1930–1933 йылдарҙа Ҡыҙыл профессураның иҡтисад институтында белем ала. Артабан РСФСР финанс комиссариатының Бюджет идаралығы начальнигы урынбаҫары булып эшләй. 1937 йылдың 25 июлендә Халиҡов, совет властына ҡаршы террористик эшмәкәрлектә ғәйепләнеп, НКВД органдары тарафынан ҡулға алына. 27 сентябрҙә Муллайән Дәүләтша улы Халиҡов СССР Юғары Советының Хәрби коллегияһы ҡарары буйынса атыла. Егерме йыл үткәс, 1958 йылдың 28 ғинуарында, шул уҡ Коллегияның ҡарары менән аҡлана.

## Сығанаҡтар:

ЦГИА РБ. Ф. 394. Оп. 9. Д. 17. Л. 11.
ЦГИА РБ, Ф. 1107. Оп. 1. Д. 107а. Л. 60.
ЦГИА РБ. Ф. 1780. Оп. 1. Д. 10. Л. 43.
ЦГИА РБ. Ф. 394. Оп. 1. Д. 233. Л. 7.
ЦГИА РБ. Ф. 933. Оп. 2. Д. 238а. Личное дело Халикова М. Д.
А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Ч. 1. Уфа, 2005. С. 169, 269,
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 1. Уфа, 2002. С. 118–119, 318.
Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 536, 546, 547, 579, 604, 637
Шунда уҡ. Т. 3. Ч. 1. Уфа, 2004. С. 68–69, 101, 668.
Шунда уҡ. Т. 4. Ч. 1. Уфа, 2008. С. 328, 371, 377, 388, 392, 404.
Вәлиди Туған Ә. Ә. Хәтирәләр. Өфө. 1996. 212, 362-се биттәр.
Давлетшин Р. "Предлагаем не отталкивать Халикова..."// Возвращенные имена. Уфа, 1991. С. 252–262.
www.lists.memo.ru



## ХАРИС ЙОМАҒОЛОВ
**1891–1937**

Харис Йомағол улы Йомағолов – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте етәкселәренең береһе, дәүләт эшмәкәре. 1891 йылдың 3 ғинуарында Һамар губернаһы Пугачев өйәҙенең (хәҙерге Һамар өлкәһенең Оло Черниговка районы) Хәсән ауылында тыуған.

Реаль училищеның 7 синыфын тамамлай. 1914 йылда Мәскәү ауыл хужалығы институтына уҡырға инә. Әммә 1917 йылдың ғинуарында хәрби хеҙмәткә алына. Мәскәү прапорщиктар мәктәбен тамамлай. Полуротный командир булып хеҙмәт итә, йәғни ярты рота менән командалыҡ итә. 1917 йылғы Февраль революцияһынан һуң, Х. Йомағолов большевиктар партияһына инә, революция хәрәкәтенә ылығып китә.

1917 йылдың йәйендә Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушыла. 1917 йылдың 20–27 июлендә Ырымбурҙа үткән I Башҡорт ҡоролтайында Харис Йомағолов Башҡорт үҙәк шураһы башҡарма комитеты ағзаһы итеп һайлана. *“Йомағолов – Кәмәлек башҡорттарынан. Бик ҡыҙыу егет ине. Ағаһы Йыһангир Йомағолов менән бергә Башҡортостан автономия хәрәкәтен башынан алып ҙур теләк менән яҡлап сығыусы менәүәрҙәр иҫәбенән булды. Беҙ башҡорт һәм татарҙарҙың әҙәби теле бер булыуын хәстәрләп, нәшриәтебеҙҙе уртаҡ телдә сығарған саҡта Харис Йомағолов башҡорт әҙәби теленә әүерелдереү фекерендә булды. 1917 йылда Беренсе башҡорт ҡоролтайы көндәрендә Ырымбурҙа ойошторолған демонстрацияларға Йомағол арҡадаштары менән ҡулдарына башҡортса яҙылған байраҡтар тотоп уртаға сыҡты”*, – яҙа үҙенең хәтирәләрендә Зәки Вәлиди.

1917 йылдың көҙөндә Х. Йомағолов Һамар губернаһы башҡорттары исеменән Ойоштороу йыйылышына (Учредительное Собрание) депутатлыҡҡа кандидат итеп күрһәтелә. 1917 йылдың 8–20 декабрендә үткән III Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайында Х. Йомағолов Башҡортостан автономияһының Кесе ҡоролтайы (предпарламент) составына индерелә.

1918 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте ҡулға алынғандан һуң, советтар яғында хеҙмәт итә. Мосолман коммунистарының үҙәк бюроһы ағзаһы,

Эске Рәсәй мосолмандары комиссары урынбаҫары, Ҡаҙанда хәрби комиссар вазифаһын үтәй. 1919 йылдың башында Х. Йомағолов Мәскәүҙә Үҙәк мосолман комиссариаты комиссары Мирсәйет Солтанғәлиевтың урынбаҫары булып эшләй.

1919 февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, Сталин Йомағоловты ВЦИК вәкиле сифатында Башҡортостан автономияһының революцион хөкүмәте – Башревкомға ебәрә. 1919 йылдың майынан Х. Йомағолов Башревкомды етәкләй.

1919 йылдың авгусында Башревком Башҡортостанға ҡайтып төшә. Республикалағы власты үҙ ҡулына алыуы тураһында фарман сығара. Әммә Өфө һәм Ырымбур губернаһы большевиктары башҡорт территорияһында үҙ хакимиәтенән баш тартырға бер ҙә ашыҡмай. Шуға ҡарамаҫтан, ҙур ҡыйынлыҡтар менән, Башревком территориаль автономияны тормошҡа ашырыу эшенә тотона. Икенсенән, Үҙәктән ебәрелгән большевиктар республиканың өлкә партияһында тупланып, Башревкомға ҡаршы һәр яҡлап эш итә. 1920 йылдың ғинуарында Башревком менән автономияға ҡаршы коммунистар араһында мөнәсәбәт үтә ҡырҡыулаша. 12 ғинуар Башобком Башревкомдан һорап тормайынса БашЧК рәйесе С. Мырҙабулатов урынына А. Измайловты тәғәйенләй. Быға яуап итеп Башревком рәйесе Йомағоловтың бойороғо буйынса 15-нән 16-һына ҡарай төндө фетнә ҡороп йөрөгән БашЧК коллегияһы ағзалары Ғ. Шәмиғолов, С. Мостафин, Ж. Муценек һәм А. Измайловты ҡулға алына. Был эшкә тиҙ арала Үҙәк власть ҡыҫыла.

Килеп сыҡҡан хәлгә аңлатма биреү талабы менән Харис Йомағоловты Мәскәүгә саҡыртып алалар. 1920 йылдың 17 майындағы декреты менән Үҙәк Совет власы Башҡортостандың автономия хоҡуҡтарын ҡырҡа сикләй. Башревком ағзалары быға протест белдереп, Башҡортостандан сығып китә. Улар Зәки Вәлиди кәңәше буйынса Төркөстанға юллана.

Харис Йомағолов та Зәки Вәлиди янына китә. *“Баҡы съезы, Мәскәүҙә ҡабул ителгән ҡарарҙарыбыҙҙы яңынан төрлө яклап тикшергәндән һуң, безгә Бохарала урынлашыу хакында практик саралар билдәләргә мөмкинлек бирҙе. Мине Әстерханда ҡаршылаясаҡ аркадаштарым Харис Йомағолов, ҡайнағам Талха Рәсүлев менән бергә Гурьев– Үстйорт аша Харәзмға китәсәкбеҙ. Съезд тамамланыр-тамамланмаҫтан юлға сыктым”*, – тип яҙа Вәлиди.

Әммә Төркөстандағы көрәш уңышһыҙлыҡҡа осрағас, Х. Йомағолов Башҡортостанға ҡайтырға ҡарар итә. *“Ил һәм иман өсөн көрәш ауырлыктарын кутәрә алмаясағы хакындағы һүҙҙәре мине унан һыуындырманы. Һуңыраҡ ул Советттар яғына кусте, ғәфу ителеп, яңынан партия сафына алынды, аҙаҡ партиянан йәнә сығарғандар, тип һөйләнеләр”*, – тип яҙа Вәлиди.

1921 йылда Х. Йомағолов БашЦИК-тың аслыҡҡа ҡаршы көрәш буйынса уполноченныйы вазифаһын башҡара. 1922 йылдан ВЦИК Президиумы янындағы Башҡортостан вәкиллегендә эшләй. 1926 йылда БашЦИК рәйесе Хафиз Ҡушаевтың тәҡдиме менән Йомағоловты Башҡоростандың Мәскәүҙәге сауҙа вәкиллегенә эшкә алалар. Бында ул экономист-консультант вазифаһын башҡара. 30-сы йылдарҙа Х. Йомағолов СССР-ҙың Иген һәм малсылыҡ совхоздар комиссариатында Көнбайыш Себерҙең һөт-ит етештереүсе совхоздары

идаралығының иҫәп һәм статиска бүлеге начальнигы булып эшләй. 1935 йылда уны тағы партиянан сығаралар. Ә инде 1937 йылдың 27 июлендә, советтарға ҡаршы милләтселек эшмәкәрлеге алып барыуҙа ғәйепләп, төрмәгә ябып ҡуялар.

Харис Йомағол улы Йомағолов СССР Юғары Советының Хәрби коллегияһы ҡарары буйынса 1937 йылдың 2 ноябрендә атыла. 1956 йылдың 10 октябрендә реабилитацияланған.

**Сығанаҡтар:**


ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 150. Л. 7.

ЦГИА РБ. Ф. 629. Оп. 1. Д. 1263. Личное дело Х. Юмагулова.

ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 30. Л. 48, Д. 25. Л. 41

А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Ч. 1. Уфа, 2005. С. 53, 87, 96.

Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 167, 639.

Вәлиди Туған Ә. Ә. Хәтирәләр. Өфө. 1996. 276–277, 362, 373-сө биттәр.

Кульшарипов М. М. Башкирское национальное движение (1917–1921 гг.). Уфа, 2000. С. 250–253.

www.lists.memo.ru



# СӘҒИТ МЕРӘҪОВ
## 1880–1932

Сәғит Ғөбәйҙулла улы Мерәҫов – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте етәкселәренең береһе, тарихсы, фольклорсы. 1880 йылда Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙе Ҡыпсаҡ улысының (хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Новсергиевск районы) Мерәҫ ауылында тыуған. Ауыл мәҙрәсәһендә белем ала. Тыуған ауылында мулла, артабан имам-хатип булып хеҙмәт итә. 1914–1917 йылдарҙа Ырымбур ҡалаһында кооперативтар союзы идараһында эшләй.

1917 йылдың майында Мәскәүҙә үткән I Бөтә Рәсәй мосолмандар съезында ҡатнаша. Бында башҡорт делегацияһы тарафынан Башҡорт өлкә бюроһы – милли хәрәкәттең етәкселек органы булдырыла. Бюроның составына Зәки Вәлиди һәм Аллабирҙе Йәғәфәров менән бергә Сәғит Мерәҫов та һайлана. Уларға Ырымбурҙа I Башҡорт ҡоролтайын ойоштороу бурысы йөкмәтелә.

Съездан ҡайтыу менән Сәғит Мерәҫов һәм Аллабирҙе Йәғәфәров (Зәки Вәлиди Төркөстан съезын ойоштороу менән мәшғүл була) урындарҙа Башҡорт улыс шуралары ойоштора, халыҡтан аҡса йыйып, ҡоролтайға әҙерлек башлай. С. Мерәҫов Башҡорт өлкә бюроһының ҡаҙнасыһы булараҡ, финанс мәсьәләләре менән мәшғүл була.

1917 йылдың июлендә I Башҡорт ҡоролтайында милли хәрәкәттең идара органы – Башҡорт мәркәз (үҙәк) шураһы ойошторола. Сәғит Мерәҫов Ш. Манатов, И. Мутин, З. Вәлиди, У. Ҡыуатовтар менән бергә Үҙәк шураның башҡарма комитетына һайлана. Шураның нәшриәт эштәренә етәкселек итә. Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең тәүге баҫмаһы – “Башҡорт иттифаҡи бюроһының мөхбире” гәзитен ойоштора, артабан “Башҡорт” гәзитенең мөхәррире була.

1917 йылдың декабрендә үткән III Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайында Башҡортостан автономияһының Кесе ҡоролтайы (предпарламент) һәм Башҡорт хөкүмәте ағзаһы итеп һайлана. Ҡоролтайҙа Башҡортостан мосолмандарының айырым диниә назараты ойошторола. Назараттың етәксеһе (мөфтөйө) итеп Сәғит Мерәҫовты һайлайҙар.

1918 йылдың ғинуарында Ырымбур большевиктар ҡулына күсә. Ошонан файҙаланып, Башҡортостан автономияһына йәне-тәне менән ҡаршы

булған Ырымбур мосолман хәрби комитеты, Башҡорт хөкүмәте ағзаларын контрреволюцияла ғәйепләп, февраль башында төрмәгә ябып ҡуя. Сәғит Мерәҫов З. Вәлиди, И. Мутин, А. Йәғәфәровтар менән бергә ике ай буйы Ырымбур төрмәһендә ултыра. Апрель башында ғына Әмир Ҡарамышев казактар ярҙамында Башҡорт хөкүмәте ағзаларын төрмәнән ҡотҡара.

Оҙаҡламай, Сәғит Мерәҫов Арғаяш кантонындағы башҡорт эшмәкәрҙәре менән бәйләнешкә инә. Күп тә үтмәй Силәбе ҡалаһы власть Чехословак корпусы ҡулына күсә. Сәғит Мерәҫов Нуриәғзәм Таһиров һәм подпоручик Ғәбделхаҡ Ғәбитовтар менән Силәбегә килеп, чехословактар менән һөйләшә. Башҡорт вәкилдәре Силәбенән ҡайтҡас, Арғаяш кантонының Мәтәл ауылында съезд үткәрелә. Унда 16 башҡорт улысынан делегаттар ҡатнаша. Съезд Силәбе ҡалаһында Башҡорт үҙәк шураһы тергеҙеү, башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштора башлау һәм ҡаланың Халыҡ власы комитетына башҡорт вәкилдәрен ебәрергә тип ҡарар итә.

1918 йылдың июнь башында Силәбе ҡалаһына башҡа милли хәрәкәт эшмәкәрҙәре, шул иҫәптән Зәки Вәлиди, килеп етә. *“Төрлө урында йәшеренеп ҡалған Башҡорт хөкүмәте ағзаларын телеграф аша саҡырҙыҡ һәм уларҙың байтағы килеп етте. Милли хөкүмәт төҙөлдө. Сәғит Мерәҫ ваҡытлы хөкүмәт рәйесе, Ғабдулла Әҙеһәм, Ғәбделхаҡ Ғәбитов, Сәйетгәрәй Мағазов, Муллаян Халиҡов һәм мин хөкүмәт ағзалары булдыҡ”*, – тип яҙа З. Вәлиди хәтирәләрендә.

1918 йылдың июлендә Сәғит Мерәҫов Ырымбурға китә. Бында ул Дутовтың казак хөкүмәте менән һөйләшеп, килешеп, Башҡорт хөкүмәтенең Ырымбур хәрби бүлеген ойоштора. Башҡортостандың көньяғында советтарҙан йәшеренеп йөрөгән башҡорт эшмәкәрҙәрен үҙ янына туплай. Тиҙҙән, Ә. Бейешев, Х. Ғәбитов, У. Ҡыуатовтар, Ырымбурға килеп, хәрби бүлектең эшенә ҡушылып китә. “Башҡорт тауышы” исемле гәзит сығарыла башлай. Башҡорт хөкүмәтенең Ырымбур хәрби бүлеге рәйесе С. Мерәҫов, атаман Дутов ярҙамында Ырымбур өйәҙендә мобилизация иғлан итеп, 4-се Башҡорт пехота полкын ойоштора башлай.

*“Караван-Сарай занят войсковым правительством. Нет оружия, снаряжений, обмундирования, довольствия, потому мобилизацию задержали. Командный состав набирается из мусульман. Налицо: штабс-капитан Еникеев, поручик Биишев, прапорщики: Кальметов, Давлетшин. Образовали отделы Военного совета в Караван-Сарае члены: Мрясов, Куватов, Идельбаев, Хасанов, Габитов другие”*, – тип хәбәр итә 1918 йылдың 20 июлендә Сәғит Мерәҫов Силәбегә, Башҡорт хәрби шураһына.

Ырымбур казактары хөкүмәте менән һөйләшеү өсөн Зәки Вәлидиҙең үҙенең килеүен һорай. 1918 йылдың август башында Башҡорт хөкүмәте Ырымбурға, Каруанһарайға күсеп ҡайта. Артабан Сәғит Мерәҫов хөкүмәттең дини эштәр буйынса бүлеген етәкләй, йәғни үҙенең элекке вазифаһын башҡара башлай.

*“1917 йылдың 8-20 декабрендә үткән Башҡорт ҡоролтайында, Башҡортостандың дини идараһы ойошторолғайны, 1918 йылдың 15 авгусынан*

*ул үҙенең эшмәкәрлеген башланы. Үҙәк Диниә назаратында һаҡланған Бәләкәй Башҡортостан диниә назаратының материалдарын алып ҡайтыу өсөн имам Сәғит Мерәҫов Өфөгә китте”*, – тип хәбәр итә 1918 йылдың 26 авгусында “Башҡортостан хөкүмәтенең теле” гәзите.

1918 йылдың 3 октябрендә Сәғит Мерәҫов башҡорт ғәскәрҙәрендәге дивизия муллаһын тәғәйенләү мәсьәләһен күтәреп сыға. Ул Башҡорт хәрби шураһына былай тип яҙа: *“До сих пор, по не назначению полковых мулл в башкирские полки, сведений убитых, раненых и пропавших без вести не получены. В последние время, хотя муллы были назначены по полкам, но по случаю трудности составления сведений не исполнялись, поэтому необходимо назначить особого муллы, от которого можно было вытребовать всякие сведения.*

*Принимая эти причины во внимание, Духовное управление признает необходимость назначить дивизионного или гарнизонного муллы. Со своей стороны предлагает на эту должность Хабибуллы Габитова”*.

Ләкин Башҡорт хәрби шураһы С. Мерәҫовтың хатына былай тип яуап бирә: *“По приказанию Начальника Башкирского Войскового Управления сообщаю, что полковые муллы и муллы 1-й и 2-й дивизий назначены. Помимо их никаких других назначений пока не требуется. Сведения об убитых и раненых командирами полков даются по команде строевому начальству и Воинским Начальникам для объявления родственникам и в случае надобности таковые муллами могут быть получены через строевое начальство”*. Ә Хәбибулла Ғәбитов тәүҙә 7-се Башҡорт уҡсы полкына мулла итеп тәғәйенләнә, һуңынан 1-се уҡсы полкка күсерелә.

1918 йылдың ғинуарында Башҡорт хөкүмәте ҡыҙылдар һөйләшеү башлай. 1919 йылдың 16 февралендә Сәғит Мерәҫов Башҡорт корпусы штабы уполномоченныйы сифатында 2-се Башҡорт кавалерия полкына ебәрелә. Ул бында Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәренең Совет власы яғына сығыуы тураһындағы фарманды иғлан итә, уның сәбәптәрен һалдаттарға аңлата.

Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, Мерәҫов Башревкомдың агитация-ағартыу бүлегендә эшләй. 1919 йылдың апрелендә Башревком Уполномоченныйҙар Советы составында, аҡтарҙан азат ителгән, Туҡ-Соран кантонына ҡайта. Бында ул кантондың улыс советтарын ойоштороуҙа ҡатнаша. Артабан Туҡ-Соран кантоны хәрби комиссариатының агитация-ағартыу бүлеге мөдире булып эшләй.

1919–1920 йылдарҙа Башҡортостан Эске эштәр комиссариатының мәғлүмәти-инструктор идаралығында инструктор, Статистика бүлеге мөдире вазифаһын үтәй.

Зәки Вәлиди етәкселегендәге Башревком властан киткәндән һуң, Сәғит Мерәҫов тулыһынса ғилми һәм уҡытыусылыҡ эшенә күсә. 20-се йылдарҙа “Башҡорт аймағы” аймағы журналында эшләй, башҡорт теленең яңы алфавитын булдырыуҙа әүҙем ҡатнаша. Башҡорт халҡының тарихын, әҙәбиәтен һәм фольклорын өйрәнә. “Башҡорт тарихына бер ҡараш” тип исемләнгән хеҙмәт яҙа. Сәғит Ғөбәйҙулла улы Мерәҫов 1932 йылда Стәрлетамаҡ ҡалаһында вафат була.

## Сығанаҡтар:

ЦГАОО РБ. Ф. 9776. Оп. 2. Д. 3. Л. 37, 41.
ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 132. Л. 132.
А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Кн. 1. Уфа, 2005. С. 275, 279.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 1. Уфа, 2002. С. 273, 289, 312, 398, 414, 416, 556.
Вәлиди Туған Ә. Ә. Хәтирәләр. – Өфө, 1996. – 227-се бит.
Сәғит Мерәҫов. Башҡорт тарихына бер ҡараш // Ватандаш. 1996. № 1-3. 1997. № 1–3.
Башкортостан. Краткая энциклопедия. Уфа, 1996. С. 411.
Хакимов Р. Ш. Земля Аргаяшская: история и современность. – Челябинск, 2005. С. 77, 83–84.

## АЛЛАБИРҘЕ ЙӘҒӘФӘРОВ

Аллабирҙе Нурмөхәмәт улы Йәғәфәров – Башҡортостанға автономия хоҡуғын яулау хәрәктен башлап ебәреүселәрҙең береһе. Сығышы менән Ырымбур башҡорттарынан.

1917 йылдың майында А. Йәғәфәров Мәскәүҙә үткән 1-се Бөтә Рәсәй мосолмандары съезына делегат итеп һайлана. Съезда башҡорттар ер мәсьәләһен күтәреп сыға. Әммә күпселекте тәшкил иткән татар делегаттары, ер мәсьәләһе мосолмандарҙы борсоған дөйөм проблема түгел тип, һүҙҙе күберәк дин, мәғариф өлкәһенә ҡора. Съездың, аграр мәсьәлә буйынса ҡабул иткән ҡарары менән риза булмаған, башҡорт делегацияһы (50 депутат) Ырымбурҙа ҡоролтай йыйырға ҡарар итә. Оло йыйынды ойоштороу бурысы Аллабирҙе Йәғәфәров, Әхмәтзәки Вәлиди һәм Сәғит Мерәҫовтарға йөкмәтелә. Уларҙы Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең идара органы – Башҡорт өлкә бюроһы ағзалары итеп һайлайҙар.

Башҡортостанға ҡайтыу менән бюро ағзалары ең һыҙғанып эшкә тотона. Матбуғатта сығыш яһайҙар, башҡорт халҡы араһында агитация йәйелдереп ебәрелә. Беренсе Башҡорт съезын ойоштороу менән Аллабирҙе Йәғәфәров һәм Сәғит Мерәҫов шөғөлләнә. “*Башҡорт үҙәк шураһының ойоштороу бүлеге мөдире итеп тәғәйенләнһәм дә, Ташкентта булғанлыктан, ҡоролтайҙы йыйыу эше менән үҙем етәкселек итмәнем. Әммә Төркөстан Милли шураһы менән Башҡорт үҙәк шураһының эш регламенттарын мин яҙып, һәр ике шурала идара ағзалары якын арҡадаштарым булғанлыктан, үҙем булмаһам да, эштәр бик якшы ойошторолғайны. Ырымбурға килгәс, арҡадаштарым Сәғит Мираҫ һәм Аллабирҙе Йәғәфәр улы Башҡортостан ерҙәрендә алдан ҡарарлаштырған “Төбәк шуралары” н ҡорғандар, милләттең ошо эшендә тотоноу өсөн акса йыйғандар, ҡоролтайға ағзаларҙың һәр тарафтан алдан билдәләнгән тәртип буйынса һайлап ебәрелеүен тәьмин иткәндәр. Быны күреп, бик һөйөндөм, дуҫтарымды ысын күңелдән маҡтаным*”, – тип яҙа Зәки Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә.

Әммә шуныһы ғәжәп: ҡоролтайҙы ойоштороуҙа ҙур эш башҡарып сығыуға ҡарамаҫтан, А. Йәғәфәров ни өсөндөр I ҡоролтай мәлендә һайланған Башҡорт үҙәк шураһы составына индерелмәй. Август айында Өфөлә II Башҡорт ҡоролтайында Үҙәк шураның яңы составы һайлана. Аллабирҙе Йәғәфәровтың исеме бында ла күҙгә салынмай.

1917 йылдың 8–20 декабрендә Ырымбурҙа үткән III Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайында, ниһәйәт Аллабирҙе Йәғәфәров Башҡортостан автономияһының закондар сығарыу органы – Кесе ҡоролтай (предпарламент) составына инә. Башҡорт хөкүмәте ағзаһы итеп һайлана.

1918 йылдың ғинуарында Ырымбур ҡалаһы ҡыҙылдар ҡулына күсә. Күп тә үтмәй, 4 февралдә (яңыса 16 февраль), Мосолман хәрби комитеты большевиктар исеменән Башҡорт хөкүмәте ағзалары ағзаларын ҡулға алып, төрмәгә яба. Зәки

Вәлиди, Илдархан Мутин, Сәғит Мерәҫов, Ғәлиәхмәт Айытбаевтар менән бергә Аллабирҙе Йәғәфәров та төрмәгә эләгә. Башҡорт эшмәкәрҙәре большевиктар ҡулында тотҡонда ике ай тирәһе була. 1918 йылдың апрель башында, казактар менән башҡорттар Ырымбурға һөжүм итеп, хөкүмәт ағзаларын төрмәнән сығара.

1918 йылдың май аҙағында Башҡорт хөкүмәте ағзалары Силәбе ҡалаһына йыйыла. бында Башҡорт хөкүмәте үҙенең эшмәкәрлеген яңынан башлап ебәрә. Аллабирҙе Йәғәфәров хөкүмәт структураһында мөһим постарҙың береһе – Эске эштәр бүлеген етәкләй (тәүҙә ваҡытлыса). Әгәр ҙә милли хәрәкәт лидеры Әхмәтзәки Вәлиди Башҡорт хөкүмәтенең хәрби бүлеге мөдире булараҡ автономияның хәрби көстәрен ойоштороу эшен үҙ өҫтөнә алһа, А. Йәғәфәровтың иңенә – автономияның бөтә эске эштәре, урындарҙа власть органдарын ойоштороу, ер мәсьәләһен хәл итеү, закон һәм положениелар эшләү, өйәҙ властары менән мөнәсәбәттәр булдырыу эшенә етәкселек итеү бурысы ята. Хөкүмәттең урындағы власть органдары эшмәкәрлеген көйләгән мөһим документтары – фармандар, циркулярҙар, төрлө күрһәтмәләре Аллабирҙе Йәғәфәровтың ҡатнашлығында эшләнә.

1919 йылдың февраленән, Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, А. Йәғәфәров Башҡорт Совет республикаһының революцион хөкүмәте – Башревком ағзаһы, Башҡортостандың Халыҡ мәғарифы комиссары итеп һайлана. Әммә уға мәғариф өлкәһендә эшләргә тура килмәй. Һуғыш барған мәлдә уның ҡайғыһы булмай әлбиттә. Март айында Башревком уны үҙенең уполномоченныйы сифатында Өфө ҡалаһына, Көнсығыш фронттың аҙыҡ-түлек буйынса баш комиссары янына ебәрә. Бында Йәғәфәров Бәләкәй Башҡортостан халҡын икмәк менән тәьмин итеү эше менән шөғөлләнә. Уның тырышлығы менән республика өсөн 50000 бот икмәк әҙерләнә.

1919 йылдың майында Башревком Саранск ҡалаһына эвакуацияланa. Бында ла Йәғәфәров алһыҙ-ялһыҙ хөкүмәт эшендә була. Июнь башында Яхъя Салихов урынына республиканың Финанс эштәре комиссары бурыстарын үтәһә, 20 июндән 17 июлгә тиклем Башревком рәйесе вазифаһын башҡара. Шуның араһында үҙенең туранан-тура бурысы – Мәғариф мәсьәләләренә лә ваҡыт таба. Мәҫәлән, ул мөғәллимдәрҙе хәрби хеҙмәттән азат итеү мәсьәләһен күтәреп сыға. Уның тәҡдиме буйынса Башревком Президиумы махсус ҡарар ҡабул итә.

1919 йылдың авгусында, Стәрлетамаҡҡа ҡайтҡандан һуң, Аллабирҙе Йәғәфәров Башревкомдың махсус комиссияһы составында Өфө губернаһы властары менән һөйләшеүҙәр алып бара. Бында ул, 1919 йылдың мартындағы килешеүҙә ҡаралған башҡорт улыстарын Өфө губернаһы ҡарамағынан Башҡортостанға күсереү мәсьәләләре менән шөғөлләнә. Сентябрь айында тағы Башревкомға етәкселек итә. Артабан Дәүләт контроле халыҡ комиссары булып эшләй.

1920 йылдың майында РСФСР етәкселеге менән Башҡортостандың автономия хоҡуҡтары бөтөнләй ҡыҫа. Ә башҡорт лидерҙары Вәлиди менән Йомағоловтарҙы Мәскәүгә күсерә. Зәки Вәлиди милли-азатлыҡ көрәшен

Төркөстанда дауам итергә, советтар менән хеҙмәттәшлектән баш тартырға саҡырып, башҡорт эшмәкәрҙәренә хат яҙа. “*...Разъежайтесь по Востоку – туда, где находится больше мусульман, и работайте энергично. Не оставляйте никого в центре из башкир, которые должны были бы служить прихвостниками русских шовинистов и могли бы своим влиянием привлечь башкирский народ.*

*В центре Башкирии оставьте для связи Ягафарова и Гумера Куватова (просив остальных удалиться) под руководством Исхакова Ибрагима...*”, – тиелә уның хатында. Зәки Вәлидиҙең ҡушыуы буйынса Башревком ағзалары 1920 йылдың 15–16 июнендә, төрлө һылтауҙар менән Стәрлетамаҡтан китә. Бында Аллабирҙе Йәғәфәров ҡына ҡала.

Бер нисә көн үткәс, Башревком ағзаларының юҡлығы Башобкомға асыҡлана. 21 июнь обком үҙенең ултырышына Йәғәфәровты саҡырып, Башревком тураһында һораша. “*Точных сведений – кто куда уехал – у меня нет. Некоторые члены ревкома и наркомы уехали в командировки, некоторые уехали ввиду трехдневного праздника*”, – тип яуап бирә Йәғәфәров, коммунистарға ысын хәлде асып һалмай. Башревкомдың эш ташлап китеүен белһәләр ҙә, коммунистар тиҙ генә власты үҙ ҡулдарына алырға баҙнат итмәй. Тик биш көн үткәс кенә, 26 июндә, Аллабирҙе Йәғәфәровты саҡырып, республикалағы власты яңы Башревкомға тапшырыу тураһында акт төҙөйҙәр.

Ошонан һуң Аллабирҙе Йәғәфәровтың исеме республиканың етәкселек органдарында күренмәй. Уның артабанғы яҙмышы билдәһеҙ.

### Сығанаҡтар:


ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. 25. Лл. 69, 71, 178.

ЦГИА РБ. Ф. 395. Оп. 1. Д. 5. Л. 2.

ЦГИА РБ. Ф. 395. Оп. 1. Д. 14. Л. 22.

А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Кн. 1. Уфа, 2005. С. 39, 87, 119, 151, 179, 222.

Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 1. Уфа, 2002. С. 216, 249, 361.

Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 465, 579.

Шунда уҡ. Т. 3. Ч. 1. Уфа, 2004. С. 46, 60.

Шунда уҡ. Т. 4. Ч. 1. Уфа, 2008. С. 216–217, 252–257, 281.

Вәлиди Туған Ә. Ә. Хәтирәләр. – Өфө, 1996. 184–185-се биттәр.



## ИЛДАРХАН МУТИН
**1888 – 1938**

Илдархан Ибраһим улы Мутин – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте етәкселәренең береһе. Сығышы менән төньяҡ-көнбайыш башҡорттарынан. 1888 йылдың 21 июлендә Өфө губернаһының Минзәлә өйәҙенә ҡараған Үрге Таҡталасыҡ ауылында тыуған. Бөгөн был ауыл Татарстандың Аҡтаныш районына ҡарай. Әйткәндәй, революцияға тиклем 150 мең башҡорт йәшәгән Минзәлә өйәҙе 1920 йылда яңы төҙөлгән Татар АССР-ына бирелә.

Илдархан Мутин башҡорт старшиналары һәм дворяндары Мутиндар нәҫеленән. Ғалим Ә. З. Әсфәндиәров яҙыуынса, дворянлыҡты улар XIX быуаттың икенсе яртыһында алған. 1900 йылда Мутиндарҙың атанан-улға күсә торған дворянлыҡ хоҡуғын (потомственное дворянство) Сенат тарафынан раҫлаған. Мутиндар династияһына XVIII быуатта йәшәгән Гәрәй улысы старшинаһы Мөтә Йәнырыҫов нигеҙ һала. Уның исеме, бәлки, Мөтиғулла булғандыр. Әммә урыҫ документтарында Мутя Янурусов, тип телгә алына. Ул Таҡталасыҡ ауылында йәшәй. Ауылдың исеме – Таҡталасыҡ – уның килеп сығышы тураһында әйтеп тора. Ул Гәрәй башҡорттарының йәйләү урыны булған. Сөнки Аласыҡ һүҙенең бер мәғәнәһе йәйләүҙә көн итеү өсөн ҡабыҡ йәки ситәндән эшләнгән ҡаралтыны аңлата. Ә бында ауылдың исеме үҙе үк Таҡта аласыҡ икәнен әйтеп тора. 1745 йылда М. Йәнырыҫовтың иптәштәре менән үҙ ерҙәренә яһаҡ түләүсе татарҙарҙы (ясашные татары) индереүе, 1746 йылда Ҡаҙан губернаһынан урыҫ крәҫтиәндәренә 15 йылға Ағиҙел йылғаһындағы балыҡ тотоу урындарын ҡуртымға (арендаға) биреүе тураһында архив документтары һөйләй.

Артабан Гәрәй улысы старшинаһы вазифаһы Мөтә Йәнырыҫовтың улы Тимер Мутинға күсә. 1756 йылда Пруссия менән һуғыш башланғас Тимер Мутинды яуға киткән башҡорт ғәскәрҙәре (2500 яугир) башлығы Ҡыҙрас Муллаҡаевтың ярҙамсыһы итеп тәғәйенләйҙәр. Шулай итеп, Т. Мутин Ете йыллыҡ һуғышта (1756–1763) ҡатнашып ҡайта. Ул һуғыштың аҙағына тиклем булмай.

1755–1756 йылдарҙағы башҡорт ихтилалы баҫтырылғандан һуң Сенат батшабикә Елезавета Петровнаға тоғролоҡҡа ант биреү өсөн Санкт-Петербургҡа

башҡорттарҙан вәкилдәр ебәреү тураһында указ сығара. Әммә вәкилдәр өс йылдан һуң ғына, 1759 йылда ғына һайлана. Башҡорттарҙан 6 кеше, улар араһында Ҡаҙан даруғаһы башҡорттары исеменән Тимер Мутин вәкил булып Санкт-Петербургҡа бара.

Башҡорт вәкилдәре пайтәхеткә барыу форсаты тейгән саҡта халыҡ мәнфәғәтен хәстәрләү сараһын күрергә тырыша. 1759 йыл Санкт-Петербургта булған саҡтарында һайланмыш башҡорттар Тимер Мутиндың инициативаһы менән Сенатҡа үтенес хатын яҙа. Үҙҙәренең Сенатҡа хатында улар башҡорт ерҙәрен баҫып алыуҙы тыйыу, бөтә улыс ризалығы менән генә купчийҙарҙы (ер һатып алыу тураһында килешеү) раҫлауҙы һорап мөрәжәғәт итә. Сөнки 1755-1756 йылғы башҡорт яуын баҫтырыуҙан файҙаланып, казактар башҡорт ерҙәрен баҫып ала башлай. Башҡорттарҙан һорап тормайынса, ялған купчийҙар менән аҫаба ерҙәрҙе үҙҙәренә яҙҙырыу осраҡтары күп була. Сенат 1759 йылдың 29 сентябрендә башҡорт вәкилдәренең үтенестәренә ҡолаҡ һала һәм башҡорт ерҙәрен баҫып алыуҙы ҡәтғи тыйыу тураһында указ сығара.

Тимер Мутинға Санкт-Петербургтан тыуған яҡтарына ҡайтырға насип булмай, ул 1759 йылдың декабрендә вафат була. Гәрәй улысында старшиналыҡ вазифаһы уның улы Аҙнағол Тимеровҡа күсә. Уның 1763 йылдан старшина булғанлығы документтарҙан билдәле. Ул 1773–1775 йылдарҙағы Бүгәсәү яуында ҡатнаша. 1774 йылдың ғинуарында Алабуға ҡәлғәһен (хәҙерге Татарстандың Елабуга ҡалаһы) ҡамауҙа тотҡан баш күтәреүселәр араһында була. 17 октябрь Ҡаҙан ҡалаһына властарға "ғәйебен" танырға (с повинной) килә. Аҙнағолды аманат сифатында Ҡаҙанда ҡалдыралар. Башҡорттар баш күтәрмәһен өсөн батша властары борон-борондан старшина, тархандарҙың үҙҙәрен йәки улдарын аманат рәүешендә тотор булғандар.

1816 йылда Аҙнағол Тимеров 11-се башҡорт кантонында йорт (юртовой) старшинаһы булып хеҙмәт итә. Уның командаһында Гәрәй улысының 8 ауылы, шул иҫәптән Үрге һәм Түбәнге Таҡталасыҡ ауылдары булған. 1798 йылда кантон идаралығы системаһы индерелгәс, улыстар йорттарға (юрт) бүленә. Йорттар исем менән түгел, ә һандар менән билдәләнеп йөрөтөлә. Был осорҙа инде Аҙнағолдың улы Әхмәҙи Аҙнағолов (Мутин) та йорт старшинаһы булып хеҙмәт итә. Уның ҡарамағында биш ауыл теркәлгән.

1816 йылғы ревизия (халыҡ иҫәбен алыу) буйынса Үрге Таҡталасыҡ ауылында 285 кеше (башҡорттар) көн иткән. Заманына күрә ҙур башҡорт ауылы булған. Түбәнгеһендә 52 башҡорт һәм 89 типтәр (килешеү буйынса килеп ултырғандар) иҫәпләнгән. Аҙнағолдың тағы бер улы Туҡтағол Мутин 11-се башҡорт кантонында зауряд-сотник булып хеҙмәт итә.

Йәш тарихсы, аспирант Альбина Ильясова яҙыуынса, XIX быуаттың тәүге яртыһында Гәрәй улысы Таҡталасыҡ ауылынан Әбдрәшит Мутиндың (Тимер Мутиндың улы булһа кәрәк) Мөғәтәсим (йорт старшинаһы), Ғисмәтулла (зауряд-есаул), Әбделбасыр (хорунжий), Мөхәмәтша (зауряд-хорунжий), Әхмәтша (йөҙ башы ) исемле улдары 11-се башҡорт кантонында, Ырымбур сик һыҙығында хәрби хеҙмәттә йөрөүҙәре билдәле.

Ибраһим Әбдрәшит улы Мутин (Илдархан Мутиндың атаһы) Әбдрәшит Мутиндың кесе улы булһа кәрәк (мәҫәлән, йәш ҡатынынан). Әммә шуны әйтергә кәрәк, уның үрҙә телгә алынған уландары 1791–1804 йылдар арауығында донъяға килгән. Ә инде 20-се – 30-сы йылдарҙа уларҙың үҙҙәренең балалары тыуған.

Илдархан Мутин Минзәлә ҡалаһында 4 синыфлы училище тамамлай. 1909 йылда хәрби хеҙмәткә алынып, биш йыл буйы 12-се сик буйы бригадаһында хеҙмәт итә. Хәрби хеҙмәттән ҡайтҡас, мөғәлимлек итә, таможня ведомствоһында, артабан кооперация инструкторы булып эшләй.

1917 йылда И. Мутин Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәктенә ҡушылып китә. Тиҙҙән ул милли хәрәкәт лидерҙарының береһенә әүерелә. 1917 йылдың 20–27 июлендә Ырымбурҙа үткән тәүге Башҡорт ҡоролтайында, Шәриф Манатов, Зәки Вәлидиҙәр менән бергә милли хәрәкттең идара органы – Башҡорт үҙәк шураһының башҡарма комитетына һайлана. Әйткәндәй, ошо осорҙа, Илдархан туғаны Ғариф Мутин да Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә ҡатнаша. Ул да Башҡорт үҙәк шураһының башҡарма комитеты составына индерелә.

Ҡоролтай ҡушыуы буйынса 1917 йылдың августа Илдархан Мутин Зәки Вәлиди һәм Усман Ҡыуатовтар менән бергә Петроградҡа барып, Ваҡытлы хөкүмәттең ауыл хужалығы министрында булып, башҡорт халҡының ер мәсьәләһе һәм Каруанһарайҙы ҡайтарыу буйынса һөйләшеүҙәргә ҡатнаша. “*Беҙ ауыл хужалығы министры Чернов менән һөйләштек... Эш хаҡында һөйләшеһе урынға үҙ тәғлимәтенең нигеҙҙәрен аңлатырға кереште. Шулай ҙа Каруанһарай мәсьәләһендә беҙҙең файҙаға бер әмер бирҙе*”, – тип яҙа Зәки Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә.

Петроградтан ҡайтҡас, Илдархан Мутин Башҡорт үҙәк шураһының хәрби эштәр буйынса бүлеген етәкләй. Артабанғы айҙарҙа ул милли хәрәкәттең уртаһында ҡайнай. 1917 йылдың 15 ноябрендә Башҡортостан автономияһын иғлан иткән тарихи акт – Башҡорт үҙәк шураһының 2-се һанлы фарманын әҙерләүҙә һәм уны иғлан итеүҙә ҡатнаша.

1917 йылдың 8–20 декабрендә үткән III Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайында Илдархан Мутин Башҡортостан автономияһының Кесе ҡоролтайы (предпарламент) һәм Башҡорт хөкүмәтенең ағзаһы итеп һайлана. Мутин хөкүмәттең ҡаҙнасыһы (финанс бүлеге мөдире) вазифаһын үтәй. 1918 йылдың ғинуарында Ырымбур ҡалаһы большевиктар ҡулына күсә.

Ошонан файҙаланып, Башҡортостан автономияһына ҡаршы булған Ырымбур мосолман хәрби комитеты Башҡорт хөкүмәте ағзаларын котрреволюцияла ғәйепләп, 4 февраль (яңыса 16 февраль) көнө төрмәгә ябып ҡуя. Илдархан Мутин З. Вәлиди, С. Мерәҫов, Ғ. Айытбаев, А. Йәғәфәровтар менән ике ай тирәһе Ырымбур төрмәһендә ултыра.

Башҡорт хөкүмәтен 1918 йылдың апрель башында Әмир Ҡарамышевтың отряды казактар ярҙамында төрмәнән азат итә. Башҡорт эшмәкәрҙәре, шул иҫәптән, И. Мутин да ике ай тирәһе советтарҙан йәшеренеп йәшәй. 1918 йылдың май аҙағында Силәбе ҡалаһында Чехословак корпусы большевиктарҙы ҡыуып, үҙ власын урынлаштырғас, хөкүмәт ағзалары шунда йыйыла башлай.

1918 йылдың июнь башында Башҡорт хөкүмәте яңынан үҙ эшмәкәрлеген йәйелдереп ебәрә. Милли хәрәкәт етәкселәре, тәү сиратта, автономияның хәрби көстәрен булдырыу эшенә тотона. Ғәскәрҙәр менән идаралыҡ итеү органы – Башҡорт хәрби шураһы ойошторола. Июль айынан Илдархан Мутин хәрби шураның рәйесе Зәки Вәлидиҙең урынбаҫары булып хеҙмәт итә. Август-сентябрь айҙарында, Вәлиди дәүләт мәьәләләре менән Һамар ҡалаһында, Өфөлә Дәүләт кәңәшмәһендә йөрөгән саҡта, Илдархан Мутин Башҡорт хәрби шураһы рәйесе бурыстарын үҙ өҫтөнә ала. Артабанғы айҙарҙа Башҡорт хөкүмәтенең финанс бүлегенә етәкселек итә.

Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, 1919 йылдың 1 мартынан 15 апреленә тиклем Башҡортостандың Эске эштәр халыҡ комиссары вазифаһын башҡара. 15 апрелдән республиканың Социаль тәьминәт комиссариатын етәкләй. Башҡортостандың революцион хөкүмәте – Башревком ағзаһы итеп һайлана.

1919 йылдың майында Башҡортостан автономияһының Туҡ-Соран кантоны аҡтарҙан азат ителеү менән Илдархан Мутин Саранскийҙан Башревкомдың Уполномоченныйҙар Советы ағзаһы сифатында республикаға ҡайтып төшә. Бында Туҡ-Соран кантоны халҡын башҡорт ғәскәрҙәренә мобилизациялау, кантон ревкомын, улыс советтарын ойоштороу менән мәшғүл була.

1919 йылдың 28 сентябрендә Илдархан Мутин Башҡортостандың Аҙыҡ-түлек халыҡ комиссары урынбаҫары итеп тәғәйенләнә. 1919 йылдың ноябренән 1920 йылдың февраль айына тиклем ВЦИК-тың “Башкирпомощь” комиссияһы уполномоченныйы урынбаҫары сифатында Башҡортостандың Тамьян-Ҡатай, Бөрйән-Түңгәүер кантондарында эшләй. Һуғыш арҡаһында тамам бөлгән халыҡты, аслыҡтан ҡотҡарыу эше менән янып йөрөй.

1920 йылдың майында Үҙәк Совет хөкүмәте Башҡортостандың автономия хоҡуҡтарын ҡырҡа ҡыҫҡарта. Бер һүҙ менән әйткәндә, башҡорттарҙың ике йыл буйы күпме ыҙа сигеп, күпме ҡан түгеп яулаған автономияһынан исеме генә тороп ҡала. Быны менән риза булмаған Башревком ағзалары, шул иҫәптән И. Мутин, 1920 йылдың июнендә Зәки Вәлиди кәңәше буйынса, Башҡортостанды ташлап, Төркөстанға сығып китә. Бында ул Нуриәғзәм Таһиров менән бергә Бохара республикаһының Кермина округының мәғариф бүлегендә эшләй.

Төркөстандағы советтарға ҡаршы милли хәрәкәт уңышһыҙлыҡҡа осрағас, 1921 йылдың июнендә Н. Таһиров менән Башҡортостанға ҡайта. 1921 йылдың авгусынан Илдархан Мутин Башцентросоюз идараһы рәйесе булып эшләй. 1922 йылдың февралендә Башцентросоюз һәм Башсовнархоздың уполномоченные сифатында Мәскәү ҡалаһына эшкә ебәрелә. 1923 йылдың сентябрендә Башҡортостанға ҡайтып, республиканың Инвалид кооперацияһы идараһы, 1924 йылдан Башсоюз идараһы ағзаһы булып эшләй. 1926–1928 йылдарҙа Мәскәүҙә Башҡортостандың сауҙа вәкиллеге мөдиренең урынбаҫары вазифаһын башҡара.

30-сы йылдарҙағы аҙағында, башҡорттоң күп кенә асыл ир-азаматтарын һәләк иткән, Сталиндың репрессия тәгәрмәсе Илдархан Ибраһим улы Мутинды

ла аямай. Ул СССР Юғары Советының хәрби коллегияһы ҡарары менән 1938 йылдың 2 февралендә атыла.

## Сығанаҡтар:

ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 152. Л. 16.
ЦГИА РБ. Ф. 1201. Оп. 2. Д. 1. Л. 8.
ЦГИА РБ. Ф. 629. Оп. 1. Д. 1267. Личное дело И. И. Мутина.
ЦГИА РБ. Ф. 138. Оп. 2. Д. 754. Л. 431–434.
ЦГИА РБ. Ф. 138. Оп. 2. Д. 104 "а". Л. 378.
НАРТ (Нац. Архив РТ). Ф. 4. Оп. 177. Д. 427. Л. 315.
А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Кн. 1. Уфа, 2005. С. 236.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 1. Уфа, 2002. С. 142, 185, 216, 254, 355.
Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 297, 332, 325, 440, 596.
Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 2. Уфа, 2003. С. 130, 228, 352, 448, 464, 484.
Шунда уҡ. Т. 3. Ч. 1. Уфа, 2004. С. 502, 525, 607.
Западные башкиры по переписям 1795–1917 гг. Асфандияров А. З., Абсалямов Ю. М., Роднов М. И. – Уфа: Китап, 2001. – С. 76, 97, 256.
Материалы по истории Башкирской АССР. Т. 3. М.–Л., 1949.– С. 425–26, 436–37, 447–48, 450–51, 456, 472–473, 544.
Шунда уҡ. Т. 4. Ч. 1. М., 1956.– С. 39, 50, 69.
Шунда уҡ. Т. 4. Ч. 2. М., 1956.– С. 21, 24–25, 46, 300, 426, 497–499.
Шунда уҡ. Т. 5. М., 1960.– С. 237–238.
Вәлиди Туған Ә. Ә. Хәтирәләр. – Өфө: Китап, 1996. – 187-се бит.
Караван-сарай. – Уфа, 1996. – С. 149–150.
Башҡорт теленең һүҙлеге, М., 1993. 48-се бит.
Тагиров Т. Н. Суровая проза жизни. Воспоминания. – Уфа, 2004. – С. 19–21.



## ӘМИР ҠАРАМЫШЕВ
## 1892 – 1918

Әмир Батыргәрәй улы Ҡарамышев – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан башҡорт офицеры. Зәки Вәлидиҙең яҡташы, дуҫы һәм яҡын арҡаҙаштарының береһе.

Ә. Ҡарамышев 1892 йылда Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙе Маҡар улысының Маҡар ауылында тыуған. Зәки Вәлиди уның турала: "*Әмир – минең йәшлек дуҫым. Беҙҙән ете саҡрым алыҫлыҡтағы Маҡар ауылынан. Башҡорттарҙың боронғо күренекле нәҫеленән, XIX быуаттың беренсе яртыһында билдәле башҡорт офицеры Йософ майор Ҡарамышевтың ейәне*", – тип яҙа.

Әмир Ҡарамышевтың нәҫел ептәре XVI быуатта йәшәгән Юрматы ырыуының түбә башлығы Ҡармыш-бабаға барып тоташа. 1553-1554 йылдарҙа ул, юрматыларҙың башлығы Тәтегәс бей менән бергә Ҡаҙанға барып Иван батшаның наместнигынан үҙ ерҙәренә аҫабалыҡ хоҡуғы алып ҡайтҡанлығы билдәле. Артабанғы быуаттарҙа Ҡармыштың нәҫелдәре хәрби хеҙмәттә булып, дан-шөһрәт ҡаҙана. Әмирҙең ҡартатаһы Йософ Ҡарамышев, Ырымбур кадет корпусын тамалап, оҙаҡ йылдар Башҡорт ғәскәрендә хеҙмәт итә. Майор дәрәжәһенә ирешә. Аҙаҡ Маҡар улысы старшинаһы булып тора. Йософтың кесе улы Батыргәрәй (Әмирҙең атаһы) Ҡаҙандағы Уҡытыусылар семинарияһын тамамлап, мөғәлимлек юлын һайлай.

Әмир Батыргәрәй Ҡарамышевтың ғаиләһендә икенсе малай булып донъяға килә. Унан һуң Батыргәрәйҙең тағы Мөхтәр һәм Сөләймән исемле ике улы тыуа. Әмир Ҡарамышев ҡартатаһы кеүек үк хәрби хеҙмәт юлынан китә. Революцияға тиклем батша армияһында хеҙмәт итә. Әрмелә хәрби мәктәпте тамалап, корнет чинын ала. Уның ҡустылары ла офицер була, милли хәрәкәттә ҡатнаша. Ағаһы – Гәрәй Ҡарамышев дәүләт эшмәкәре.

Әмир Ҡарамышев милли хәрәкәттең башынан уҡ әүҙем ҡатнаша. 1917 йылдың декабрендә Дөйөм Башҡорт ҡоролтайында Башҡорт хөкүмәте ойошторола. Зәки Вәлиди эске һәм хәрби эштәр бүлеген етәкләй. Уның ғәскәри

эштәр буйынса ярҙамсыһы итеп Әмир Ҡарамышев тәғәйенләнә. Ҡоролтай башҡорт ғәскәрен ойоштороу тураһында ҡарар ҡабул итә. 1918 йылдың ғинуарында Әмир Ҡарамышев, Ғимран Мағазов, Ғабдулла Иҙелбаевтар тәүге башҡорт полкын төҙөү өсөн Бөрйән-Түңгәүер кантонына, Баймаҡка юллана. Бында улар Бөрйән улысы башҡорттарынан 300 кешенән торған отряд туплай. Әмир Ҡарамышев милли ғәскәр төҙөү эшенә бөтөн күңеле менән бирелгән сардар була. Хәбибулла Ғәбитов хәтерләүенсә, Ҡарамышев отрядҡа йәшел байраҡтар эшләтеп, үҙе сығарған "Ватан" йырын йырлатып йөрөр булған. Үҙе лә йырға-ҡурайға маһир ир-уҙаманы була. *"Ҡарамыштың улдары сиктән тыш батыр һәм идеалист егеттәр булды"*, – тип яҙа Вәлиди.

Бында улар Баймаҡтың эшселәр Советы менән бәйләнеш урынлаштыра. Баймаҡтар башҡорт отрядына Орскиҙан ҡорал алып килергә вәғәҙә итә. Ырымбурҙа Башҡорт хөкүмәте ҡулға алынғандан һуң, Баймаҡ большевиктарына башҡорт отрядын юҡ итергә тигән бойороҡ килә. Орскиҙан алып килгән ҡоралды йәшерен рәүештә үҙенең эшселәренә тартып, 16 февралдең төнөндә (яңы стиль буйынса 2 март) бер ниҙә белмәй йоҡлап ятҡан башҡорт отрядын килеп баҫалар. Отрядтың командирҙары поручик Ғабдулла Иҙелбаев менән прапорщик Ғимран Мағазовтарҙы ҡулға алалар. Был төндә Әмир Ҡарамышев үҙенең һыбайлылары менән Иҙелбай ауылында ҡуна. Иртәгеһенә, Баймаҡтағы хәлдәр тураһында ишетеп, тирә-яҡ ауылдарҙан халыҡ туплай башлай. Ике мең тирәһе кеше менән Баймаҡты ҡамауға ала. Эшселәрҙән ҡулға алынған башҡорт офицерҙарҙын азат итеүҙе талап итә. Әммә Баймаҡҡа һөжүм итергә баҙнат итмәй. Сөнки быных өсөн башҡорттарҙың ҡоралы булмай. Башҡорт отрядының аҡсаһына ҡорлланып алған эшселәргә ҡаршы ҡоро ҡул менән барып булмай бит инде. Икенсенән Ырымбурҙа, большевиктар ҡулында ултырған Башҡорт хөкүмәте ағзалары тураһында уйлай корнет Ҡарамышев. *"...Уларҙың иң ҡурҡҡаны – төрмәлә ултырған хөкүмәт ағзаларын атып ҡуйырҙар тигән уй була"*, – тип яҙа Зәки Вәлиди хәтирәләрендә.

Оҙаҡламай Ырымбурҙан ебәрелгән ҡыҙылдарҙың полкы килеп, башҡорттарҙы сигенергә мәжбүр итә. Ҡыҙылдар Баймаҡтағы башҡорт офицерҙары Ғабдулла Иҙелбаев менән Ғимран Мағазов һәм улар менән бергә башҡорт отярдында хеҙмәт иткән бер нисә поляк офицерын ата.

Ошо ваҡиғаларҙан һуң Әмир Ҡарамышев, үҙенең отряды менән Бөрйән-Түңгәүер кантонының таулы-урман яғына китеп, ҡыҙылдарға ҡаршы партизан отрядтары ойоштороуға тотона. Тамъян-Ҡатай кантонында ла отрядтар ойошторола башлай. Ҡаһарман сардар Верхнеуральскийға сигенгән Дутов казактары менән бәйләнеш урынлаштыра.

Тәүәккәл офицер тау-урман араһында ғына боҫоп ятырға йыйынмай, төрмәләге Башҡорт хөкүмәте ағзаларын ҡотҡарыу яғын уйлай. 1918 йылдың 4 апреле төнөндә Ҡарамышев отряды казактар менән бергә Ырымбурға һөжүм итеүҙә ҡатнаша. Ҡыҙылдар көтмәгән арала ҡалаға бәреп инеп, отряд төрмәләге милли хәрәкәт етәкселәрен сығара. Әммә башҡорт һалдаттары төпкө камерала ултырған Вәлидигә генә барып етеп өлгөрмәйҙәр. Уның хәтерләүенсә, һалдаттар

камераның асҡысын таба алмай кире сигенә. Ҡото алынған төрмә начальнигы, асҡысты табып, Вәлидиҙе үҙе асып сығара. Төрмәнән ҡотолоу менән Вәлиди Ырымбур янындағы Ҡарғалы ауылына юллана, унда Ҡарамышев отрядының бер һалдатын осратып, Әмиргә: *“Ҡотолдом, Өфөгә килһен”*, – тип хәбәр ебәрә.

Шулай итеп, Әмир Ҡарамышев ойошторған һәм етәкселек иткән отряд казактар ярҙамында Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте етәкселеген азат итә. Кем белә? Бәлки, хәлдәр ҡатмарлашып киткән осраҡта Башҡорт хөкүмәте ағзаларын большевиктар атҡан да булыр ине. 1918 йылдың йәйендә чехословак һәм башҡорт ғәскәрҙәре Екатеринбургка яҡынлашҡас, Николай Икенсене ғаиләһе менән бергә атҡандар бит.

Был осорҙа Әмир Ҡарамышев Зәки Вәлидигә милли хәрәкәт эшен юлға һалыуҙа ныҡлы терәк һәм ярҙамсы була. Өфөлә осрашып, кәңәшләшеп улар йәшерен рәүештә милли хәрәкәт вәкилдәре менән бәйләнеш урынлаштыра башлай. Тәүҙә улар Тамъян-Ҡатай кантонына юллана: *“Арҡадаштарыбыҙҙың береһен поезд менән Семипалатинск яғына, тәғәйенләнгән ике һалдатты Миәскә һәм Белоретҡа ебәргәндән һуң, беҙ Әмир менән 9 апрель кис иреү ҡарҙа санаға ултырып киттек. Иретә. Кубеһенсә төндә йөрөйбөҙ. Үткән 1917 йылдың сентябрендә өйөндә үҙем мосафир булған Ямалетдин Байышевты, Мәжит Ғафуриҙы күрҙек һәм Сабир хәҙрәт Хәсән улына килдек. Ул тау башҡорттары кейемен табып бирҙе, ат егеп, Ҡатай башҡорттары улысына ҡараған Шамов рудниғына алып килде. Беҙ унан Тамъян-Ҡатай кантонына Әхмәт ауылына китәсәкбеҙ. Әммә Хоҙайбирҙе ауылына етмәҫтән, ун саҡырымдар алыҫлыкта, аттарыбыҙ бер йылғаның иреү боҙона баҫырға ҡуркты. Беҙҙе алып килгән кешене аттары менән кире ҡайтарҙыҡ. Әмир ҡурай уйнауға маһир булды. Был юлы беҙ китеп барған урманда ҡурай куп ине. Дуҫым уларҙы киҫеп алып, тишек тишеп уйнай. Яҙғы йомшаҡ ҡарҙан бата-бата атлау беҙҙе йөҙәтте. Өс-дүрт сәғәт атлағас ҡына, түбә башына сыктыҡ һәм алыҫтағы ауылды күрҙек. Ауылға барып еткәнсе тамам арыныҡ”*, – тип яҙа Зәки Вәлиди үҙенең иҫтәлектәрендә.

Артабан ике дуҫ Шығай ауылында ҡунып, Әхмәткә барып етә. Бында Зәки Вәлиди ике аҙнаға яҡын, апрель аҙағына тиклем эшмәкәрлек итә, Юламан мулла ярҙамында төрлө документтар, мөрәжәғәттәр баҫып тарата. Шул осорҙа Әмир Ҡарамыш тырышлығы менән Тамъян, Түңгәүер, Ҡарағай-Ҡыпсаҡ һәм Бөрйән улыстарында партизан төркөмдәре ойошторола.

1918 йылдың майында Силәбе ҡалаһында Чехословак корпусы большевиктарға ҡаршы баш күтәрә. Чехословактар Силәбе ҡалаһында власты үҙ ҡулына ала. Зәки Вәлиди һәм милли хәрәкәттең башҡа етәкселәре большевиктарҙан азат ителгән ҡалаға туплана. 7 июндә Башҡорт хөкүмәтенең эшмәкәрлеге яңынан тергеҙелә. Оҙаҡламай хөкүмәт Башҡортостан автономияһының хәрби көстәрен ойоштороу эшенә тотона.

Әмир Ҡарамышев Тамъян-Ҡатай кантонында 1-се Башҡорт кавалерия һәм 5-се Башҡорт пехота полктарын ойоштороу менән мәшғүл була. Шулай уҡ

бында Тамьян-Ҡатай ирекле отряды төҙөлә. Башҡорт хәрби шураһы фарманы менән корнет Ҡарамышев 1-се Башҡорт кавалерия полкы командиры итеп тәғәйенләнә. Был осорҙа Иҙелбашында (Белоретта) ҡамауҙа ҡалған Блюхер менән Кашириндарҙың ҡыҙыл партизан отрядтары (10 меңдән ашыу кеше) Ҡыҙыл Армияға барып ҡушылыу өсөн Верхнеуральск ҡалаһы яғына юллана. Бында ҡыҙылдарға ҡаршы Верхнеуральск фронты булдырыла, фронттың башҡорт ғәскәрҙәре (1-се Башҡорт кавалерия һәм 5-се Башҡорт пехота полктары һәм Тамъян-Ҡатай ирекле отряды, йәмғеһе 2000 тирәһе яугир) менән етәкселек итеү Әмир Ҡарамышевҡа йөкмәтелә. Блюхерҙың отряды һан яғынан күпкә өҫтөнлөк итеүгә ҡарамаҫтан, башҡорт һәм казактарҙың көслө ҡаршылығына осрай. Верхнеуральск янында ҡаты бәрелештәр булып үтә. Блюхер Верхнеуральскиҙы ала алмай, Белоретҡа кире сигенә. *"Башҡорт батыры кавалерия корнеты Әмир Ҡарамышев үҙенең таулы башҡорт отряды менән Белорет янында большевиктарҙы ҡыйратып, күп кенә трофейҙар алған"*, – тип хәбәр итә "Башҡорт" гәзите ошо осорҙа. Ҡаһарман сардарға ротмистр звание бирелә.

Хәҙер инде ҡыҙылдар Өфө яғына сығыу өсөн Белореттан Стәрлетамаҡҡа юллана. Әмир Ҡарамышев үҙенең полкы төнъяҡҡа сигенгән ҡыҙылдарҙың артынан ҡыуа. Блюхерҙың йыйылма отряды был мәлдә хәҙерге Ишембай районының Маҡар ауылына (Әмир Ҡарамышевтың тыуған ауылы) килеп етә. 8 июлдә Ҡарамышевтың полкы Көҙән менән Маҡар ауылдары араһында большевиктар менән ҡаты һуғышып ала. 11–12 июлдә Петровск ауылы янында тағы бер бәрелеш була. Зәки Вәлиди хәтерләүенсә, ҡыҙылдар ҡоралдарын ташлап Егән йылғаһы аша сығып ҡаса. Улар артабан Стерлетамаҡ гарнизоны менән һуғыша, ҡалаға инә алмай Өфө яғына юллана. Ҡарамышев ҡыҙылдарҙың артынан ҡыуып, Еҙем буйында тағы ла бәрелешкә инә. Артабан Блюхеровсылар Иглин станцияһы аша сығып Ҡыҙыл Армияға барып ҡушыла.

Бер айҙан ашыу ҡаты һуғыштар һөҙөмтәһендә тамам һаулығы ҡаҡшаған сардар (уның үпкәһе шешеп ауырып йөрөгән була), Миәс ҡалаһының госпиталенә барып ята. 1918 йылдың 7 авгусында ошо госпиталдә Әмир Батыргәрәй улы Ҡарамышев вафат була. Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең башынан әүҙем ҡатнашҡан, иң ауыр осорҙа Башҡорт хөкүмәте ағзаларын үлемдән ҡотҡарып алып ҡалған, артабан милли хәрәкәтте тергеҙеүҙә күп көс һалған, башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороуҙың башында торған батыр офицерҙың үлеме Башҡортостан автономияһы өсөн ҙур юғалтыу була.

Зәки Вәлиди ҡаһарман сардарҙы Ырымбурға алып килеп ерләргә бойора. 21 август Ҡарамышевтың кәүҙәһе поезд менән Ырымбурға килтерелә. Ошо айҡанлы Башҡорт хәрби шураһы махсус фарман сығара. Унда былай тиелә:

*"На 22 сего августа назначаю похороны умершего при исполнении своего долга под Верхнеуральском доблестного сына Башкурдистана командующего добровольческим отрядом ротмистра Карамышева Амира Батыр-Гареевича. Для отдания воинских почестей умершему назначается одна рота от 1-го*

*Башкирского полка при полном боевом вооружении и при полном количестве офицеров. Роте своим оркестром прибыть к часовне к 12 часам и сопровождать тело до мечети Караван-Сарая откуда по совершения обряда Джиназа сопровождать до мусульманского кладбища, где при опускании гроба в могилу роте дать семь салютационных залпов.*

*При выносе и погребении присутствовать Башкирскому Военному Совету и г.г. офицерам и классным чинам, свободным от служебного наряда, Штаба Корпуса и 1-го и 4-го Башкирских полков. За гробом следовать оседланной лошади каковую выслать от 1-го Башкирского полка.*

*Командирам полков ознакомить вкратце г.г. офицеров и солдат с личностью ротмистра Карамышева».*

Әмир Ҡарамышевтың кәүҙәһе 22 август көнө Башҡорт хөкүмәте, Башҡорт хәрби шураһы, Башҡорт үҙәк шураһы ағзалары, офицер һәм һалдаттар ҡатнашлығында ҙур хөрмәт менән Ырымбурҙың мосолман зыяратында ер ҡуйынына тапшырыла. *“Әмир Ҡарамыштың үлеме ғәскәребеҙ өсөн бик ҙур юғалтыу ине. Ул хаҡта Башҡортостандағы шағирҙарыбыҙ байтаҡ мәрҫиә яҙҙы. Шулар араһында Шәйехзада Бабичтың мәрҫиәһе һуңғы ваҡытҡа тиклем халыҡ араһында яттан уҡылып килеүен 1943 йылда Германияла әсир төшкән башҡорт һалдаттарынан белдем”*, – тип хәтерләй Зәки Вәлиди.

Ҡарамышевтың үлеме башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте өсөн ниндәй ҙур ҡайғы булғанын халҡыбыҙҙың бөйөк шағиры, азатлыҡ йырсыһы Шәйехзада Бабич үҙенең шиғырында асып һала. Был мәрҫиәне ул Әмир ерләгән мәлдә, батырҙың ҡәберендә һөйләй:

Бөгөн беҙгә ни булған?
Күңелебеҙ ник ҡырылған?
Йөҙөбөҙҙә ник тағы
Үлгән хәсрәт терелгән?

Терелгәндең сәбәбе:
Бер аяулы ир үлгән!..
Ул аяулы кем ине?
– Әмир тигән ир ине.

Башҡорт күген яҡтыртҡан
Аҙ йондоҙҙоң бере ине.
Яу өҫтөнә атылһа,
Ҡуйға сапҡан бүре ине.

Ғәскәр йыйнап, баш булып,
Яҫтағаны таш булып,
Ут эсендә ут йотоп,
Нисә көндәр ас йөрөп,

Дошман яуын ҡырғанда
Күкрәгендә сир ине...
Шул сирендин үлгәндә
Етенсе август көнө ине.

Алдыбыҙҙа ниндәй тән?
Ҡәлбебеҙҙә ниндәй ғәм?
Түбәмеҙҙә әйләнеп
Осоп йөрөгән ниндәй йән?

– Алдыбыҙҙа ир тәне,
Ҡәлбебеҙҙә ил ғәме,
Алды тәҡдир арадин
Тағын да бер иркәне!..

Йәнен уның әйтәйем:
Йән түгел ул – намыҫтыр,
"Әмир" тигән бер исем –
"Намыҫ" тигән тауыштыр.

Йә илаһым, Әмирҙе
Йәннәткә ҡауыштыр!

Әй, Әмирйән – ил өсөн
Һүнгән шәмдең бере һин!
Ҡара гүрҙе ағартып,
Ингән йәндең береһе һин!

Анаң һөтөң анаңсөн
Имгән йәндең бере һин,
Бәхетле һин – үлмәнең:
Ил күңелендә тере һин!..

Сәсәкләрдин һөйөнгән,
Шишмәләрҙә ҡойонған,
Дошмандардин йән һаҡлап,
Тауға-ташҡа һыйынған.

Һин бер батыр ир инең
Илең өсөн көйөнгән...
Ятҡан ерҙән ҡалҡынған,
Намыҫ йөҙөн яҡтыртҡан,
Ҡая тауҙар башында

Януб торған кәндилдәй;
Ҡаһарманлыҡ аңҡытҡан,
Ғәйрәт берлән дан тотҡан,

Үрҙән ҡырға һикереп,
Оса сапҡан дөлдөлдәй,
Һин бер аҫыл ир инең
Ил бәхетенә ант иткән!..

Осто Әмир асманға,
Тағы байрам дошманға,
Тағы ҡайғы, тағы зар
Моңло Башҡортостанға.

Көйөнһәк тә беҙ бында
Рәхәттә ос һин унда!...
Беҙҙән сәләм ирештер
Ғабдулла һәм Ғимранға!..

Сәләм һеҙгә, өс ҡорбан!
Әмир, Ғабдулла, Ғимран;
Йәнегеҙ фиҙа иттегеҙ
Башҡортостан ғишҡындан.

Өсәү бергә йөрөгөҙ,
Нур эсенә сумығыҙ!
Фәрештәләр ғәскәре
Төҙөп беҙгә килегеҙ!

Атланып аҡ пыраҡҡа,
Остоғоҙ һеҙ йыраҡҡа,
Ҡалағыҙ тик йөрәктә
Мәңгелеккә үрнәккә...

Урынығыҙ түрҙән яһалһын,
Уңай булһын артығыҙ!
Мәңге рәхәт йәшәһен
Күп интеккән халҡымыҙ!

Милли хәрәкәттең “Башҡорт”, “Башҡорт тауышы” гәзиттәрен сығарыусы мөхәррир, шағир Хәбибулла Ғәбитов та ҡаһарман сардарҙың иҫтәлегенә мәрҫиә бағышлай:

## Башҡорт арыҫланы Әмир Ҡарамышевты юҡлап

Беҙгә ғәмле көн тыуҙы,
Уралда гөлдәр һулыны,
Хәсрәттән күңел тулды,
Әмир шаһит арыҫлан!
Беҙҙе ташлап һин киттең,
Үкһеҙ етем “ил” иттең,
Иртә китеп аранан,
Күҙ йәштәрен күл иттең.
Әмир шаһит арыҫлан!
Дошмандарҙы таптаның,
Бик ҙур эштәр башланың,
Шаһит булып арыҫлан,
Йомшаҡ тупраҡ яҫтандың,
Әмир шаһит арыҫлан!
Ҡаршы сығар алдыңдан
Абыҙ – Аҡай – Салауат,
Ҡарашһалар башҡортто,
Беҙҙән күп-күп сәләм әйт!
Әмир шаһит арыҫлан!
Башлаған эш туҡтамаҫ,
Инде башҡорт йоҡламаҫ,
Илдең изге теләген
Дошман яуы ташламаҫ.
Әмир шаһит арыҫлан!
Ҡанлы “тыу”ын күтәргән,
Илгә бурысын үтәгән,
Халҡын һаҡлап дошмандан
Ҡан төкрөп йүтәлгән,
Әмир шаһит арыҫлан!
Әжәл килде ашығып,
Буйһондоң һин, баш ороп,
Ҡайғы-хәсрәт, үлемдән
Илең ҡалды йәшегеп,
Әмир шаһит арыҫлан!
Хуш мәңгегә, батырым!
Башымда юҡ ғаҡылым.
Дошман ҡыуып сыңлатҡан
Уралдың тау-таҡырын.
Әмир шаһит арыҫлан!
Моңло ҡәбереӊ өҫтөндә,

Әмир һине юҡланым,
Ғаҡлым китеп башымдан,
Һөйләй алмай туҡтаным,
Әмир шаһит арыҫлан!
Рәһен булһын башҡортҡа
Иртә осҡан аҡ йәнең,
Маҡсатҡа беҙ етәрбеҙ,
Тыныс булһын пак йәнең,
Әмир шаһит арыҫлан!

Әлбиттә, ҡаһарман офицерҙың үлемен ҡайғыһын ғаиләһе ауыр кисерә. Әмир Ҡарамышевтың ҡатыны Мәрхәбә үлем түшәгенәдге һөйөклө иренең янында моңланып ултырып йыр йырлаған, тиҙәр. Был йыр аҙаҡ, 1918 йылдың 20 авгусында, матбуғатта баҫылып сыға:

Ирмәк кенә тауҙың башҡайында
Ана ултыра яңғыҙ бер ҡайын.
Сит илдәргә килтереп, мәрхүм итеп,
Ҡалдыраһыңмы ғәзиз йәнкәйем?
Ирәмәл генә тауҙың, ай, баштары
Була микән, йәнем, еләкле.
Башҡорттарҙан тағы тыуыр микән
Һинең кеүек ғорур йөрәкле!
Яңы ғына теккән кейемеңде
Башлап кейеп киттең һуғышҡа.
Һинең генә сығарған моңло көйөң
Ҡалды башҡорттарға һағышҡа.
Көлөп ҡарап, төртөп күрһәтәһең,
Күренәме әллә Йәннәт алдыңда?
Көлөп кенә үлмәк булаһыңмы,
Ғәзиз балаң илай янында?
Ҡаранаһың төрлө яҡтарға,
Һөйләнәһең, Кавказ, Кавказ, тип.
Йәш йөрәккәйем сыҙай алмай,
Ахыры, ҡалды ғүмереӊ аҙ, аҙ, тип.
Йыраҡ ҡалды һинең инәкәйең,
Һағыналыр улар барыһы ла,
Сыҙай ғына алмай, уф, уф, тиәм,
Йөрәк кенәм бигерәк ярһый ҙа.
Туғандарың һине тилмереп көтә,
Ялан ерҙә һине – ҡыр ҡошо!
Һуңғы минуттарың килеп етте,

Ай-һай, Ғазраилдың ҡыр ҡышы!
Эй, Хоҙайым, бирсе миңә сабыр!
Сыҡты, сыҡты йәнең, йән генәң!
Айырылыр минут килеп етте,
Нисек кенә китәйем яныңдан!

Бына шундай шиғырҙар менән хөрмәтләп, һуңғы юлға оҙата ҡаһарман офицер Әмир Ҡарамышевты көрәштәштәре. Башҡорт хөкүмәте Ырымбурҙың мосолман зыяратында ерләнгән батырҙың ҡәберенә таш яҙҙырып, маҙар төҙөп ҡуйыу буйынса ҡарар ҡабул итә. Был бурыс Әмирҙең ағаһы Гәрәй Ҡарамышевҡа йөкмәтелә.

Әмир Ҡарамышев үлгәндән һуң, уның урынына 1-се Башҡорт кавалерия полкы командиры итеп, ҡустыһы прапорщик Мөхтәр Ҡарамышев тәғәйенләнә. 1918 йылдың октябрендә Башҡорт ғәскәри идаралығының фарманы менән 1-се Башҡорт кавалерия полкына ҡаһарман сардарҙың исеме бирелә. 1918 йылдың аҙағындағы – 1919 йылдың башындағы документтарҙа 1-се кавполк "1-й Башкирский кавалерийский имени ротмистра Карамышева полк", – тип телгә алына.

## Сығанаҡтар:


ЦГИА РБ. Ф. 1201. Оп. 2. Д. 1. Л. 3.
ЦГАОО РБ. Ф. 9776. Оп. 2. д. 3. Л. 116.
А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Ч. 1. Уфа, 2005. С. 271, 288.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 1. Уфа, 2002. С. 309–334.
Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 2. Уфа, 2002. С. 406, 418, 461.
Бабич Шәйехзада. Беҙ үҙебеҙ – башҡорттар. Өфө, 1995. – 263–266-сы биттәр.
Вәлиди Туған Ә. Ә. Хәтирәләр. Өфө, 1996. 205, 208, 211, 213, 235-се бит.
Башкирские родословные. Уфа, 2002. С. 57.
Рәүеф Насиров. Ҡылыс ҡында килешә. Өфө, 2000. 51–52-се битәр.



## ШӘЙЕХЗАДА БАБИЧ
## 1895–1919

Шәйехзада Мөхәмәтзәкир улы Бабич – башҡорт халҡының бөйөк шағиры, башҡорт әҙәбиәтенең классигы, Башҡортостан автономияһы өсөн милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан эшмәкәрҙәрҙең береһе. 1895 йылдың 2 ғинуарында Өфө губернаһы Бөрө өйәҙенең (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Дүртөйлө районы) Әсән ауылында тыуған. Ш. Бабич тамырҙары менән Ҡаңлы башҡорттарының Ҡыйғаҙытамаҡ ауылынан (хәҙерге Мишкә районы).

Атаһы Мөхәмәтзәкир 1888 йылда Әсән ауылының икенсе мәхәлләһенә мулла булып бара. Шәйехзада Бабич тәүге белемде атаһының мәҙрәсәһендә ала. 1910 йылда, 15 йәшендә, ул ҡаҙаҡ далаһына, Кустанай яҡтарына сығып китә. Бында ул ҡаҙаҡ балаларын уҡытып йөрөй. 1911 йылдың көҙөндә, Башҡортостанға ҡайтып, Өфөләге “Ғәлиә” мәҙрәсәһенә уҡырға инә. 1916 йылда мәҙрәсәне тамамлағандан һуң, бер йыл Троицк ҡалаһында мөғәллимлек итә.

1917 йылдың авгусында “Ҡармаҡ” журналының саҡырыуы буйынса Ырымбур ҡалаһына күсеп килә һәм Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушылып китә. Ошо уҡ айҙа Өфө ҡалаһында үткән II Башҡорт ҡоролтайында Шәйехзада Бабич милли хәрәкәттең етәкселек органы – Башҡорт Мәркәз (үҙәк) шураһының ағзаһы итеп һайлана. Бабич Үҙәк шураның сәркәтибе сифатында милли хәрәкәттең тарихи ҡарарҙарын әҙерләүҙә һәм ҡабул итеүҙә ҡатнаша. 1917 йылдың 15 ноябрендә Башҡорт үҙәк шураһы Башҡортостан автономияһын иғлан итеү тураһында ҡарар ҡабул итә һәм иртәгеһенә 2-се Фарманын иғлан итә. Ошо тарихи актҡа милли-азатлыҡ хәрәкәте етәкселәре Ш. Манатов, З. Вәлиди, И. Мутиндар менән бергә Шәйехзада Бабич та үҙ ҡултамғаһын ҡуя. Ошоноң менән бер рәттән Ш. Бабич милли хәрәкттең матбағаһы – “Башҡорт” гәзитен сығарыу эшендә әүҙем ҡатнаша, мәҡәләләр баҫтыра. Шәйехзада Бабич ысын мәғәнәһендә, милли хәрәкәттең рупоры, автономия өсөн көрәштең ялҡынсы йырсыһы, пропагандалаусыһы, идеологтарының береһенә әүерелә. Үҙенең шиғырҙары аша башҡорт халҡының автономиялы дәүләте – “Башҡортостан” төшөнсәһен киң йәмәғәтселек аңына һеңдереүҙә ҙур өлөш индерә. Шағир Башҡортостан

автономияһын иғлан итеү һәм Каруанһарай Башҡорт үҙәк шураһы ҡулына күсеү айҡанлы, халыҡның яҡты киләсәгенә ҙур өмөттәр бағлап, рухланып "Олуғ шатлыҡ" исемле шиғырын яҙа:

Яңғырап, шаулап сыҡҡан шатлыҡ йырын
Фәрештәләр һөйөнөп тыңлаһын.
Шатландырҙың Тәңрем, һибеп нурың,
Башҡортостан халыҡ донъяһын.

Ябраил мәләк, елпеп ап-аҡ ҡанат,
Осоп йөрөһөн Башҡортостанда.
Хәбәр бирһен тиеп: "Булдың азат!
Сыҡтың йәмле, гөллө бостанға".

Азат булды ғәзиз Каруанһарай,
Азат булды барлыҡ ерҙәрең...
Йырлап ебәр һөйөнөп, уйнап ҡурай,
Сыҡһын тиҙерәк шатлыҡ йырҙарың.

Теләктәрең алға килеп тора,
Азатлыҡҡа ошо ғәләмәт.
Инеп тора "дәүләт", ҡунып тора,
Киләсәгең яҡты, сәләмәт...

"Бәхет ҡыҙы" матур йөҙөн асып,
Һиңә табан көлөп боролдо...
Шатлан, уйна, һикер ярһып-ярһып!
Күпме шатлаһаң да урынлы...

Үләм... Ташам... Тормайым, ашам күккә...
Үкенмәйем инде үлһәм дә...
Үкенмәйем инде инде тыуған йортҡа
Күкдин ҡарап көлөп торһам да...

1917 йылдың декабрендә Ырымбур ҡалаһында Каруанһарай бинаһында III Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайы үтә. Оло йыйында Башҡортостан автономияһы раҫлана, тәүге Башҡорт хөкүмәте төҙөлә. Башҡорт үҙәк шураһының вәкәләттәре хөкүмәткә ҡарамағына күсә. *"Теперь обязанности Центрального шуро сводятся к следующему: издание газеты "Башҡорт", распространение разных объявлений, воззваний и сообщений, наблюдение за Башкирским правительством (исключительно в целях ненасения вреда башкирскому движению), создание местных (тюбек) шуро, управление ими и руководство,*

*сбор налогов и пожертвований. В общем и по большому счету, вся его работа – это усилия во благо и счастье башкир"*, – тиелә шураның рәсми хәбәрендә. Шураның яңы рәйесе һайланғанса, был вазифа Шәйехзада Бабчиҡа йөкмәтелә, уның сәркәтибе итеп Нуриәғзәм Таһиров тәғәйенләнә.

Бынан тыш, 1917 йылдың 18 декабрендә, III ҡоролтай барышында, Ш. Бабич, Х. Ғәбитов һәм Н. Таһировтар инициативаһы менән "Тулҡын" исемле башҡорт йәштәренең берекмәһе (иттифағы) ойошторола. Был ойошма башҡорт йәштәрен берләштереү, йәштәрҙә милли телгә, әҙәбиәткә һөйөү тәрбиәләү, милли традицияларҙы тергеҙеү, халыҡ ижадын йыйыу, үҙешмәкәр коллективтар булдырып, милли кисәләр ойоштороу, йәштәрҙең рухын күтәреү, гәзит журналдар сығарыу һ. б. бик күп изге маҡсаттар ҡуя. "Тулҡын"ды Шәйехзада Бабич етәкләй. Ә ойошманың ҡаҙнасыһы итеп Ғабдулла Дәүләт тәғәйенләнә.

1918 йылдың ғинуарында башҡорт эшмәкәрҙәре, ҡоролтай ҡарарына ярашлы, өйәҙҙәрҙә Башҡортостан автономияһының урындағы власть органды – кантон башҡармаларын ойоштороу өсөн төрлө тарафтарға юллана. Шәйехзада Бабич иптәше Ғайнулла Ғирфанов менән тыуған яғы Бөрө өйәҙенә китә. Оҙаҡламай Ырымбур ҡалаһы ҡыҙылдар ҡулына күсә. Ошонан файҙаланып, Башҡортостан автономияһына йәне-тәне менән ҡаршы булған Ырымбур мосолман хәрби-революцион комитеты 4 февралдә (яңынса 16 февраль) Башҡорт хөкүмәте ағзаларын, контрреволюцияла ғәйепләп, ҡулға алып, төрмәгә ябып ҡуя. Ғабдулла Дәүләтов, тиҙ арала большевиктар яғына күсә һалып, "Тулҡын" ойошмаһының йыйылышында яңы хөкүмәт – Башҡортостандың ваҡытлы революцион советын төҙөп, үҙе баш булып ала. "*Спустя немногим более месяца к моему возвращению из Бирска все было перевернуто вверх дном: наши дела разгромлены,* "*Башкирское центральное шуро оказалось в тюрьме.*

*В подготовленном нами гнезде засели какие-то проходимцы, назвавшиеся "революционным советом Башкортостана". Наконец, и меня, как контру и провокатора, заперли в тюрьму..."*, – тип яҙа Бабич. Ләкин тиҙҙән ул нисектер большевиктар ҡулынан ысҡына ала. Иреккә сыҡҡас, Бабич боҫоп ятырға йыйынмай, халыҡ араһында законлы Башҡорт хөкүмәтен төрмәгә япҡан большевиктарға ҡаршы агитация алып бара. Уны тағы төрмәгә ябып ҡуялар. "*Узнав, что Бабич и Имаков, убежавшие из тюрьмы, ведут вредную агитацию против ревкома, Шафиев* (Башҡортостандың Ваҡытлы Революцион Советы рәйесе урынбаҫары Бәхтегәрәй Шәфиев – А. Я.) *разыскал и арестовал их"*, – тип яҙа Революцион советтың рәйесе Ғабдулла Дәүләт.

Икенсе тапҡыр Ш. Бабичтың нисек итеп Ырымбур төрмәһенән ҡасан ҡотолғанлығы билдәһеҙ. 1918 йылдың апрель башында казактар менән башҡорттар, Ырымбурға һөжүм итеп, Башҡорт хөкүмәте ағзаларын иреккә сығара. Ошо мәлдә Бабичты ла азат иткәндәр, күрәһең. Июнь башында Силәбе ҡалаһында Башҡорт хөкүмәте яңынан тергеҙелә. Шәйехзада Бабич Силәбегә килеү менән ғәскәр ойоштороу эшендә әүҙем ҡатнаша. Уға башҡорт офицерҙарын милли армияға йәлеп итеү бурысы йөкмәтелә. 1918 йылдың июлендә ул генерал

Х.Ишбулатов, подполковник Ш. Аҡсулпанов менән һөйләшеп ҡайта. Үҙәк дәүләт тарих архивында ошондай танытманың күсермәһе лә һаҡлана.

**Военный Отдел**
**Правительства**
**Башкирии**
**10 июля 1918 г.**
**№ 287**

**УДОСТОВЕРЕНИЕ**

**Предъявитель сего Шайхи-Зада Бабич командируется в г. Уфу для организации Башкирских боевых дружин в пределах Уфимской губернии.**

**Заведующий Военным отделом Правительства Башкирии Валидов**
**За секретаря Прапорщик Мухамедьяров**

Документтан күренеүенсә, Шәйехзада Бабич 1918 йылдың йәйендә Башҡорт милли армияһын ойоштороуҙа әүҙем ҡатнашҡан, Өфө губернаһында мобилизация эштәре менән шөғөлләнгән.

Башҡорт хөкүмәте Ырымбурға ҡайтҡас, Зәки Вәлиди ҡушыуы буйынса, Шәйехзада Бабич Ҡаҙаҡстанда эш итә. *“Һамар хөкүмәте, Урал казактары һәм Ҡаҙағстан менән берлектә ойошторолған иң беренсе уңышлы эшебеҙ мәғлүмәт йыйыуҙы тәьмин итеү булды. Эшмәкәрлек үҙәктәре итеп һайланған Уральск (Теке), Әстерхан вилайәтендәге Хан Урҙаһы, Гурьев (Уйшук), Көнбайыш Себерҙәге Омск, Совет идараһы аҫтындағы Орск, Аҡтүбә һәм Ташкент кеүек ҡалаларға вәкилдәр ебәреп, тиҙ генә тәшкиләт булдырҙыҡ. Милли шағирҙарыбыҙ Сәйетгәрәй Мағаз, Шәйехзада Бабич, үзбәк шағиры Ғәбделхәмит Сөләймән, ҡаҙаҡтарҙан йәш мөхәррир Беримжан һәм бер меңәүәр ҡаҙаҡ ҡыҙы, был ҡалаларҙа йәшерен бүлектәр ойоштороп, Ырымбурҙағы үҙәккә бик ҡиммәтле мәғлүмәттәр тупланыуҙы тәьмин итте”*, – тип яҙа Зәки Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә.

1918 йылдың 1 сентябрендә Бабичтың инициативаһы менән Ырымбурҙа “Тулҡын” ойошмаһының конференцияһы булып үтә. Ойошма яңынан тергеҙелә. “Тулҡын”дың рәйесе итеп Гәрәй Ҡарамышевты һайлайҙар, уның ярҙамсыһы – Бабич. Г. Ҡарамышев, хөкүмәттең ер эштәре бүлеге мөдире булараҡ, дәүләт эше менән мәшғүл булғанлыҡтан “Тулҡын” ойошмаһының эшмәкәрлегенә етәкселек Бабичтың иңенә төшә. Шағир тәүге көндәрҙән үк ең һыҙғанып эшкә тотона. 1918 йылдың сентябрь айында Бабич тарафынан Ырымбурҙа ойошторолған Башҡорт әҙәби кисәһе милли сәнғәтебеҙҙең бер балҡышы була. Т. Чәнекәй яҙыуынса, был кисә башҡорт халыҡ йырҙарын тыңлау өсөн урыҫ, татар, ҡаҙаҡтар ҙа килә.

Кисәлә башҡорт һалдаттары хоры башҡарыуында “Зөбәржәт”, “Ҡуш беләҙек” йырҙарын халыҡ алҡышлап ҡаршы ала. Артист Вәлиулла Мортазин-

Иманский (1919 йылда башҡорт театрына нигеҙ һала) – “Башҡорт батыры Аҡай Күсемов ҡәбере янында” исемле шиғырын, Бабич “Ҡанлы шәүләләр”ҙе уҡый. Тамашасылар танылған йырсы Ғәзиз Әлмөхәмәтов башҡарыуында башҡорт халыҡ йырҙарын ишетә. Кисәлә ҡурайсы башҡарыуында “Әлмөхәмәт кантон”, “Ҡаһарман кантон”, “Йомаҡ”, “Алты егет”, “Бала ҡарға” яңғырай. Ә башҡорт бейеүҙәре кисәгә дәрт өҫтән. Бынан тыш, буфет залында башҡорт тирмәһен ҡуйып, тамашасыларға ижауҙар менән ҡымыҙ тәҡдим итәләр. Тамаша сәғәт төнгө икелә генә тамамланыуға ҡарамаҫтан, халыҡ таралашырға ашыҡмай. Концерттан һуң, тағы ла ике сәғәт тирәһе тамашасылар өсөн сәхнәлә бейеүҙәр ойошторола.

Шәйехзада Бабичтың ялҡынлы шиғырҙары Башҡорт ғәскәрендә ҙур танылыу яулай. Уларҙы һалдаттар яттан уҡый. Бабичтың “Башҡортостан” исемле шиғыры милли хәрәкәттең үҙенә күрә бер гимнына әүерелә. Башҡорт һалдаттары уны көйгә һалып, йырлап йөрөй (был йырҙы бөгөн беҙ “Каруанһарай” төркөмө башҡарыуында беләбеҙ):

Арыҫландар үҙ ерен
Залимдарҙан таптатмаҫ,
Таптайым тип атлаһа,
Башҡорт ҡаны атлатмаҫ.
Ил өҫтөнә сапҡан яу
Башҡорт йәнен ҡаҡшатмаҫ,
Бысраҡ табан аҫтында
Башҡорт намыҫы ятмаҫ.
Башҡортостан – гөлбостан,
Сөмбөлөстан, нурбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт атлы арыҫлан!...

“Ғәскәр маршы” шиғырын Бабич махсус рәүештә башҡорт халыҡ йыры “Эскадрон”ға һалып ижад итә:

Тайярбыҙ беҙ Ватан фарманына,
Ысын ихлас биреп, баш ороп;
Тыуған илебеҙҙең ҡорбанына
Йәнде-тәнде һөйөнөп тапшырып.
Илебеҙ түшәк, еребеҙ карауаттай,
Ҡары-боҙо эҫе юрғандай;
Түҙемлебеҙ батыр Салауаттай,
Күкрәк ғәйрәт менән тулғандай.
Утлы беләк беҙҙең утын яҡһа,
Кибер төҫлө өлкән диңгеҙ ҙә;
Ныҡлы беләк беҙҙең уғын атһа,

Тейер төҫлө Сулпан йондоҙға!
Беҙ йөрөйбөҙ, илде һаҡлайбыҙ тип,
Һаҡларбыҙ һәм Башҡортостанды;
Тураҡлайбыҙ , илде таптайбыҙ тип,
Ҡаршы килгән яуыз дошманды!
Илкәй өсөн сыҡһын ғәзиз йәндәр,
Ҡунһын шәһит рухтар талына;
Хәләл ергә аҡһын хәләл ҡандар,
Бабайҙарҙың ҡаны янына.
Беҙҙәр ғәскәр, әйҙә, алға марш!
Тетрәп торһон ер-күк , асманы.
Беҙ арыҫлан, беҙ бит һәм юлбарыҫ,
Яңы Башҡортостан ғәскәре.

Бабичтың ҡаһарман сардар Ә. Ҡарамышевтың үлеме айҡанлы яҙған шиғыры оҙаҡ йылдарға халыҡ күңелендә уйылып ҡала. “*Кызылдарҙы Көнсығыш Уралдан кыуып сығарыуҙа иң ҙур урын тоткан 2-се атлы* ( 1-се – А. Я. ) *полк сардары Әмир Ҡарамыш ошо сәфәр вакытында вафат булды. Был ғәскәребеҙ өсөн бик ҙур юғалтыу ине. Ул сакта Башкортостандағы шағирҙарыбыҙ байтак мәрҫиә яҙҙы. Шулар араһында Шәйехзада Бабчитың:*

*Бөгөн беҙгә ни булған?*
*Күңелебеҙ ниңә таралған?*
*Таралғандың мәғәнәһе –*
*Бер аяулы ир үлгән,*
*Аяулы ир кем ине?*
*Әмир тигән ир ине...–*

*мысралары менән башланған мәрҫиәһенең һуңғы вакытка тиклем халык араһында яттан укылып килеүен 1943 йылда Германияла әсир төшкән башкорт һалдаттарынан белдем*”, – тип яҙа З. Вәлиди.

Автономия өсөн көрәшкә бағышланып яҙылған шиғырҙарын Ш. Бабич 1918 йылда Ырымбурҙа бер йыйынтыҡ итеп баҫтырып сығара. Исемен дә “Йәш Башҡортостан. Зәңгәр йырҙар” атай, сөнки унда мөстәҡиллек тураһында иң изге уй-ниәттәр менән һуғарылған, ысын мәғәнәһендә азатлыҡ йырҙарына әүерелгән шиғырҙар туплана.

1918 йылдың ноябрендә Колчак власҡа килеү менән Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең бөтөн уй-хыялдары селперәмә килә. “Рәсәйҙең юғары хакимы” Башҡорт хөкүмәтен таратырға, башҡорт ғәскәрҙәрен туранан-тура Дутовҡа буйһондорорға тигән фарман бирә. Башҡорт хөкүмәте Колчактың фарманына буйһонмай, 1918 йылдың 2 декабрендә Ырымбурҙан Башҡортостан территорияһына күсенә. Аҡтар ҡулынан автономия алыуға өмөтөн өҙгән милли

хәрәкәт лидерҙары аяуһыҙ һуғышҡан дошмандары – советтар менән һөйләшеп килешергә ҡарар итә. Өфөлә барған һөйләшеүҙәр һөҙөмтәһендә, Башҡорт хөкүмәте 1919 йылдың 18 февралендә ҡыҙылдар яғына сығырға тигән фарман сығара.

Сәйәси хәлдәрҙең ҡырҡа үҙгәреүе, кисәге дошмандар менән килешеү һәм уларҙың яғына сығыу сәбәптәрен, уның әһәмиәтен башҡорт ғәскәрҙәренә аңлатыу, төшөндөрөү өсөн Башҡорт корпусы штабынан полктарға вәкилдәр ебәрелә. Шәйехзада Бабич, 16 февраль көнө 2-се Башҡорт уксы полкына барып, Зәки Вәлидиҙең советтар яғына сығыу тураһындағы фарманын иғлан итә. Ошо полк составында Советтар яғына сыға. 1919 йылдың 21 февралендә Темәс ауылында 1-се Бөтөн Башҡорт хәрби съезы ойоштorола. Оло йыйында Ш. Бабич та ҡатнаша. Уны съездың сәркәбе итеп һайлайҙар. Хәрби съезда Башҡортостандың ваҡытлы революцион хөкүмәте – Башревком ойоштorола.

Аҡтар белмәһен өсөн, Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре, һөйләшеүҙәрҙең тамамланыуын көтөп тормайынса, тиҙ арала советтар яғына сыға. Шуға күрә күп ерҙәрҙә халыҡ аптырап ҡала, икенсе яҡтан Колчактың провокаторҙары Зәки Вәлиди большевиктарға 2 миллион һумға һатылған тип, ялған хәбәр тарата, башҡорттарҙың башын бутай. Ошо мәлдә Шәйехзада Бабчи үҙенең “Большевиктар менән килешеү туралы башҡорт халҡына көйлө хитап” исемле шиғри юлдарға һалынған мөрәжәғәтнамәһен яҙа. Уны 1919 йылдың 25 февралендә, Темәстә Башревкомдың типографияһында баҫтырып, халыҡҡа тараталар. “Көйлө хитап” түбәндәге юлдар менән башланып китә:

Башҡорт халҡы, һиңә бер һүҙ әйтәм,
Минең әйткән һүҙҙе тыңлаһаң,
Зәки һеҙҙе һатҡан тигән һүҙгә
Ышанмаҫһың, алйот булмаһаң...

Уйыңа ла алма, башҡорт булһаң,
Әхмәтзәки беҙҙе һатыр тип!
Ҡорьән үбеп Зәки ғәһед иткән,
Уйлай күрмә антын тапар тип.

Башҡорттағы намыҫ, иман менән
Ярһып тибә Зәки йөрәге,
Ҡолаҡ асма дошман ҡотҡоһона!
Зәки – Башҡортостан терәге.

25 февралдә Ш. Бабич Темәстә Башревком янындағы башҡорт матбуғатының корректоры итеп тәғәйенләнә. Март башында бында “Башҡорт хәрби инҡилаби комитетының мөхбире” (“Известия Башкирского военно-революционного комитета”) тигән гәзит сығарыла башлай. Бабич ошо гәзитте

сығарыу менән мәшғүл була. Ләкин тиҙҙән аҡтар һөжүмгә күсеп, Ҡыҙыл Армия ғәскәрҙәрен ҡыҫырыҡлай башлай. 17 март көнө Башревком Темәстән Мораҡ ауылына (хәҙерге Күгәрсен районының үҙәге) күсенергә ҡарар итә. Күсенеүҙе ойоштороу бурысы Башревкомдың хужалыҡ бүлеге мөдире Кәримовҡа йөкмәтелә. Ҡыҙылдарҙың Смоленск полкы күсенергә әҙерләнгән ылауҙарҙы үҙҙәренә тартып ала, шуға ҡарамаҫтан 19 март көнө Башревкомдың төп өлөшө Мораҡ ауылына юллана. Ылауҙар етмәү сәбәпле Башревкомдың типографияһы, аҙыҡ-түлек аҙаҡҡа ҡалдырыла. *"В 4 часа дня 19 марта оставшиеся в Темясово ответственные служащие ревкома в своем собрании вынесли постановление оставить вместо меня 2-х уполномоченных для отправления имущества по мере нахождения подвод. Исполнять эту миссию изъявили свое согласие тт. Шайхзада Бабич и Абдулхаир Иркабаев, и в помощь им оставлено 15 вооруженных красноармецев комендантской роты. На расходы по отправке имущества уполномоченым я дал аванс в размере 4000 рублей и небходимую провизию как для них, так и для красноармейцев. В момент моего отъезда в Темясово оставалось имущества ревкома: мебель всех отделов, почти все имущество типографии, 400 пудов пшеницы, 50 пудов пшеничной муки и около 20 пудов овса."*, – тип яҙа рапортында Кәримов . Шулай итеп, Башревкомдың матбуғат хеҙмәткәрҙәре Ш. Бабич менән Ғ. Иркәбаев типографияны күсереү өсөн ылау көтөп тороп ҡалалар.

Кәримов рапортын былай тип дауам итә: *"К месту назначения (Мраково) ревком прибыл 22 марта, а обоз частями 22, 23 и 24 марта, и, развернув канцелярию, приступил к работе. 25 марта прибыла в Мраково хозяйственная часть 1-го Смоленского стрелкового полка, заведывающей которой тов. Андроцкий, объявив себя начальником гарнизона в селении Мраково, якобы в связи с переходом нашего 1-го кавалерийского полка на сторону контрреволюционного Колчака распорядился обезоружить комендантскую роту, команду ревкома и служащих его"*.

Ошондай хәүефле мәлдә Бабич менән Иркәбаев, типография әйберҙәрен тейәп, Темәстән юлға сыға. Улар Кананикольск ауылы (хәҙерге Йылайыр районының төнъяғында) янында Смоленск полкы һалдаттары ҡулына эләгә. Ҡыҙылдар Бабич менән Иркәбаевты, уларҙы оҙатып килгән 15 башҡорт һалдатын ҡоралһыҙландырып, Йылайыр (ул саҡта Преображенск) ауылына алып киләләр. Ҡоторонған Смоленск полкы һалдаттары 28 март көнө Шәйехзада Бабич менән Әбделхәй Иркәбаевты йыртҡыстарса үлтерә. Шаһиттарҙың һөйләүенсә, тәүҙә Бабичты Йылайыр урамы буйлап ат ҡойороғона тағып һөйрәп алып йөрөткәндәр, аҙаҡ ҡылыс менән сапҡылап үлтергәндәр. Башҡорт халҡының данлы улы, бөйөк шағиры, азатлыҡ йырсыһы Шәйехзада Бабичтың ғүмере 24 йәшендә генә фажиғәле өҙөлә.

Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте ҙур ҡорбандар аша булһа ла үҙенең изге маҡсатына – Башҡортостанға автономия яулауға ирешә. 1919 йылдың 20 мартында Совет власы Башҡортостан автономияһын таный, 1919 йылдың

августа Башревком Саранскиҙан ҡайтҡас, автономия ғәмәлгә ашырыла башлай. 1922 йылда республикаға Көнбайыш Башҡортостан биләмәләре (элекке Өфө губернаһы) ҡушыла. Бабичтың тыуған яҡтары ла, ниһайәт, Башҡортостан автономияһына ҡушыла. Ошо йәһәттән Бабчитың 1917 йылда яҙған "Олуғ шатлыҡ" шиғырының һуңғы юлдары күрәҙәлек булараҡ яңғырай:

Үләм… Ташам… Тормайым, ашам күккә…
Үкенмәйем инде үлһәм дә…
Үкенмәйем инде инде тыуған йортҡа
Күкдин ҡарап көлөп торһам да…

## Сығанаҡтар:


ЦГИА РБ. Ф. 78. Оп. 1 Д. 7. Л. 8.
ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 128. Л. 2.
А.А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Ч. 1. Уфа, 2005. С. 30, 54, 61, 69, 117, .
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 1. Уфа, 2002. С. 157, 185, 189, 217–218, 385.
Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 268–270, 273, 415, 441–445, 556.
Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 2. Уфа, 2003. С. 166, 302, 326, 385, 401.
Ә. Ә. Вәлиди Туған. Хәтирәләр. Өфө, 1996. 236–237, 235-се биттәр.
Шәйехзада Бабич. Беҙ үҙебеҙ – башҡорттар. Өфө, 1994. 247, 252, 257, 263–266, 287-се биттәр.



**МУСА МОРТАЗИН**
**1891 – 1937**

Муса Лут улы Мортазин – 1918 йылда Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәктендә әүҙем ҡатнашҡан башҡорт офицерҙарҙың береһе, легендар комбриг, дәүләт эшмәкәре. Ул 1891 йылдың 20 февралендә Ырымбур губернаһы Вернеуральск өйәҙенең Күбәләк-Тиләү улысына ҡараған Көсөк ауылында (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Учалы районы Көсөк-Маяҡ ауылы) тыуған. 1911 йылда үҙ ауылында мәҙрәсә тамамлай. Киләһе йылына уны әрме хеҙмәтенә алалар. Алыҫ Көнсығышта 9-сы Себер артиллерия бригадаһында хеҙмәт итә. 1913 йылда уҡыу командаһын тамамлап, бомбардир-наводчик (батша армияһы артиллерияһындағы ефрейтор) званиеһын ала.

1914 йылда Германия менән һуғыш башланғас (Беренсе донъя һуғышы), 9-сы Себер артиллерия бригадаһы фронтҡа ебәрелә. Бомбардир Мортазин 1917 йылдың майына тиклем Көнсығыш, Румыния фронтарында немец, австриец һәм румындарға ҡаршы һуғышып йөрөй. 1914 йылдың сентябрендә вице-фейерверкер (кесе унтер-офицер) званиеһы ала. 1916 йылда июлендә ҡаты алыштарҙың береһендә артиллерист Мортазиндың башы яралана. Яуҙарҙа күрһәткән ҡаһарманлыҡтары өсөн Мусаны унтер-офицер итеп үрләтәләр.

1917 йылдың Февраль революцияһынан һуң, фронтта һалдаттар араһында революцион агитация киң ҡолас йәйә. Муса Мортазинға бигерәк тә большевиктарҙың агитацияһы ныҡ тәьҫир итә. Мосолман һалдаттары араһында абруй ҡаҙанған унтер-офицерҙы 1917 йылдың майында Мәскәүҙә үткән I Бөтә Рәсәй мосолмандары съезына делегат итеп ебәрәләр. Ошо осорҙан башлап, Муса Мортазин башы-аяғы менән сәйәси эшмәкәрлеккә сума.

1917 йылдың декбарендә, Ырымбурҙа үткән III Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайында ҡатнаша. “*Сәйәси яҡтан Ҡоролтай өс төркөмгә бүленде. З. Вәлидов менән Ш. Манатов етәкселек иткән беренсе төркөм башҡорт халҡының нindәй ҙә булһа билдәле бер иҡтисади төркөмөнөң мәнфәғәттәрен түгел, ә башҡорттарҙың милли бойондороҡһоҙлоҡҡа дөйөм ынтылыштарын сағылдыра ине... Икенсе төркөм – фронттан ҡайтҡан һалдаттар һәм*

*башҡорттарҙың хеҙмәтсән интеллигенцияһы – большевиктарға тартылды...”*, – тип яҙа Мортазин үҙең китабында. Ул тап ошо төркөмдә була. Ҡоролтайҙа күпселек тарафынан ҡабул ителгән ҡайһы бер ҡарарҙар менән (ер мәсьәләһе буйынса) килешмәһә лә, Мортазин Башҡортостандың тупраҡлы мөхрәтиәтен ҡуш ҡуллап хуплай.

1918 йылдың ғинуарында Мортазин башҡорт делегацияһы составында Өфөлә үткән төрки-татарҙарҙың Милли мәжлесе йыйылышында ҡатнаша. Унда улар Башҡортостан автономияһына ҡаршы сығыш яһайған татарҙар менән ҡыҙыу бәхәстәр алып бара. Ошо арала Ырымбурҙа Башҡорт хөкүмәте губерна мосолман комитеты тарафынан ҡулға алынып, төрмәгә ябыла. Башҡорт вәкилдәре Муса Мортазин, Хафиз Ҡушаев, Зәкәриә Айытбаев, Усман Ҡыуатов һәм Мөхәмәтхан Ҡулаев Ырымбурға ҡайтып, власты үҙ ҡулына алған Башҡортостандың ваҡытлы революцион советына бара. *“Хотя делегаты разъяснили цель их прибытия к Временному революционному совету... но в тот день они не смогли получить ясного ответа”*, – яҙа З. Айытбаев. 1 март көнө делегаттар менән Ваҡытлы революцион советтың берлектәге йыйылышы була. Делегаттарҙың ни өсөн Башҡорт хөкүмәте ҡулға алынған?, – тигән һорауына, Ырымбур мосолман комитеты рәйесе Ғәли Шәмиғолов: *“Они получили от Дутова 60 тысяч рублей денег и 300 винтовок. А также Дутовым засланы в пределы Башкирии несколько офицеров и инструкторов. К тому же члены предпарламента работали рука об руку с Дутовым и хотели присоединить Башкирию к Юго-Востоному союзу”*, – тип аңлата. *“Делегаты, собравшиеся на Башкирский учредительный съезд, были все буржуи. ...Все их постановления, принятые на учредительном съезде, были буржуазными...”*– тип өҫтәй Б. Шәфиев. Бер ниҙә хәл итә алмағас, делегаттар таралыша. Һул ҡарашлы Мортазинды большевиктар Ваҡытлы революцион советҡа эшкә саҡыра. Әммә улар Мортазинға бер аҙ шик менән ҡарай. *“Из вновь введенных (конце марта) членов ревкома Муртазин иногда показывал себя левым, но только на словах; у нас было подозрение, что он – сторонник Валидова в ревкоме”*, – тип яҙа Башҡортостандың ваҡытлы революцион советы рәйесе Ғабдулла Дәүләтшин. 1918 йылдың 30 мартында Ғ. Шәмиғолов Ваҡытлы революцион советты яба. Муса Мортазин тыуған яғына ҡайтып, совет власы урынлаштырыу менән мәшғүл була. Тамъян-Ҡатай кантонында милиция ойоштора.

1918 йылдың июнендә Чехословак корпусы ярҙамында Башҡорт хөкүмәте милли армия ойоштороу эшенә тотона. Тамъян-Ҡатай кантонында корнет Әмир Ҡарамышев етәкселегендә 5-се Башҡорт пехота һәм 1-се Башҡорт кавалерия полкы төҙөлә башлай. Муса Мортазин 1-се һәм 5-се полктарҙы ойоштороуҙа әүҙем ҡатнаша. 1-се кавалерия полкының эскадрон командиры сифатында 1918 йылдың июненән алып 1919 йылдың ғинуарына тиклем, Блюхерҙың ҡыҙыл бандаларына ҡаршы, һуңынан Ҡыҙыл армияның ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша. 1919 йылдың 10 ғинуарында Зәки Вәлиди корнет Муса Мортазинды 1-се Башҡорт кавалерия полкына командир итеп тәғәйенләй.

1919 йылдың 19-20 февраленд Башҡорт корпусы ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, башҡорт полктарынан аҡтарға ҡаршы төркөм ойошторола. Ошо төркөмгә 1-се Башҡорт кавалерия полкы ла инә (Мортазин яҙыуынса, 1-се полкта *“540 ҡылыс, 600 ат һәм 4 пулемет”* була). Әммә оҙаҡламай, 1-се Ҡыҙыл армия командованиеһы башҡорт полктарына Пенза дивизияһының тылына күсергә бойора. Фронт һыҙығында Муса Мортазиндың ғына полкы тороп ҡала. 1-се полк ҡыҙылдарҙың Смоленск полкы менән Тамъян-Ҡатай кантонында аҡтарға ҡаршы фронт тота. Ләкин тиҙҙән башҡорт полктарын көсләп ҡоралһыҙландыралар, ҡаршылыҡ күрһәткәндәрен аталар, тигән хәбәр фронт һыҙығындағы Мортазин егеттәрен лә килеп етә. Ҡыҙыл Армияның яман ҡыланышына ҡаршылыҡ күрһәтеп ҡайһы бер башҡорт частары (2-се Башҡорт кавалерия полкының эскадроны, 1-се Башҡорт уҡсы полкының батальоны) кире аҡтар яғына сыға. Әтрәфәләм элементтарынан торған Ҡыҙыл Армия һалдаттары, башҡорттарҙан үс алырға тотона – ябай ауыл халҡын талай, ыҙа сиктерә башлай. Бер һүҙ менән әйткәндә, ҡөһөрҙө ябай башҡорт халҡына төшөрә. Ошо мәлдә Муса Мортазиндың полкы башҡорттарҙың берҙән-бер яҡлаусыһы, терәге була. Тиҙҙән ярһыу сардарҙың түҙер әмәле ҡалмай.

*“Башҡорт кавалерия полкы сигенергә теләмәһә лә бригада командованиеһы уға тылға күсергә бойороҡ бирҙе, һәм, шул әмергә буйһоноп, полк 28 мартта Билал ауылына, Смоленск полкы торған тирәгә, барып урынлашты. Полкты смоленсылар хас дошман һымаҡ күреп ҡаршыланы. Башҡорт отряды бында уларҙың урындағы халыҡты йәберләүенең бик күп миҫалдарына шаһит булды. Тағы ҡоторонып конфискация үткәреүҙәр, контрибуция һалыуҙар башланды. смоленсылар, бәйһеҙ шашынып, халыҡты ҡан илатты”*, – тип яҙа Муса Мортазин. Түҙемлеге ҡалмаған Башҡорт кавалерия полкы тамам шашҡан Смоленск полкын туҙҙырып, ҡоралһыҙландыра. Мортазин был турала бригада командованиеһына хәбәр итә. Ҡото алынған бригада штабы 40 саҡырым тылға – Ҡананикольскийға һыпыртыу яғын ҡарай. Башҡорт кавалерия полкы тарафынан ебәрелгән делегация атыла. Бер нисә көндән 20-се дивизияның 1-се бригадаһы частары бергә тупланып, Башҡорт кавалерия полкына һөжүм башлай. Казактар, фронт һыҙығының был яғында низағлашыу, хатта ҡораллы бәрелеш барыуын тиҙ генә һиҙеп ҡалып, башҡорт полкын үҙҙәре яғына сығарыу тураһында һөйләшеү өсөн Мортазинға делегация ебәрә. Ике ут эсендә ҡалған полк ирекһеҙҙән аҡтар яғына сығып китә.

Аҡтар 1-се полкты ҡыҙылдарға ҡаршы һуғышҡа индерергә тырыша, Стәрлетамаҡ яғына сигенгән ҡыҙылдарҙың юлын киҫергә бойора. Ләкин Мортазин төрлө һылтауҙар менән бойороҡтарын үтәүҙән баш тарта. Ул үҙ полкы менән Белорет ҡалаһына барып урынлаша. Бында аҡтар яғындағы башҡорт һалдаттарын эҙләп үҙ полкына туплай башлай. Муса Мортазин Белорет ҡалаһында апрелдең урталарынан алып майҙың аҙағына тиклем тора, йәғни үҙенең һалдаттарына ай ярым буйынса ял итергә, яңы яугирҙар туландырырға мөмкинлек ала.

1919 йылдың июнь башында Стәрлетамаҡ ҡалаһына күсә. Бында Мортазин полкы тағы 15 көн тирәһе әҙерлек үтә, һалдаттар һәм ҡоралдар менән

тулыландырыла. Күпләп башҡорттар йәшәгән районда айырым фронт һыҙығында урынлашыуҙан файҙаланып, М. Мортазин үҙ полкына тағы күберәк һалдаттар туплarға мөмкинлек ала. Күрше казак частарындағы башҡорт һалдаттары Мортазиндың күсә башлай. Ошо рәүешле 1919 йылдың июнендә ғәййәр сардар үҙенең полкын бригада кимәленә үҫтереп ебәрә.

*"Июнь аҙағына бригаданы ойоштороуҙы тамалап һәм йәйәүле дивизион да төҙөп алып, 4000 самаһы кешеле Башҡорт кавалерия бригадаһы 10 июлгә тиклем Ағиҙел буйында һаҡта торҙо, был тирәнән ҡыҙылдарҙың разведкаһын үткәрмәне"*, – тип яҙа Мортазин. Сағыштырып ҡарағыҙ: ошо осорҙа, ҡыҙылдар яғында Көньяҡ фронтта һуғышҡан Башҡорт кавалерия дивизияһының иҫәбе өс мең кешегә лә тулмай. Ә Муса Мортазин аҡтар яғында 4000 тирәһе кешенән торған бригада ойоштороуға өлгәшә. Ошоноң менән ул Колчак армия частарында һибелгән башҡорт һалдаттарының байтағын бергә ғәскәргә туплай.

Бригада кимәленә үҫеп еткән Мортазин полкы хәҙер аҡтарҙың фармандарын бөтөнләй һанға һуҡмай башлай. 1919 йылдың июлендә ҡыҙылдар һөжүмгә күскәс уларға ҡаршы сығырға, тип Колчак командованиеһы күпме генә бойорһа ла, Мортазин ҡыҙылдарға артыҡ ҡаршылыҡ күрһәтмәй сигенә, йә булмаһа бәрелештән тайпыла. Мортазиндың был ҡыланышынан асыуы ҡабарған 5-се корпус командиры Эллерс-Усов уны Әбйәлил ауылына, корпустың штабына саҡыра. 8 август Мортазин Әбйәлилгә барып, генерал менән низағлашып китә, револьверҙан уны яралай. Иртәһенә бригадаһы менән килеп, корпус штабының канцелярияһын, 3 мең винтовка һаҡланған складын баҫып ала.

17 августа мөнәсәбәттәрҙе көйләү маҡсатында корпус командиры генерал Бакич Мортазинды үҙенә саҡыра. Башҡорт кавалерия бригадаһы 18 августа Березовка ауылы янында корпустың ике полкын туҙҙырып, корпустың штабын баҫып ала.

Ошо мәлдә Башревком ярҙамында (бригадаға Таһир Имаҡов килә) Муса Мортазин ҡыҙылдар яғына кире сығыу тураһында һөйләшеүҙәр башлай. 1919 йылдың февраль-март айҙарындағы ваҡиғаларҙан һуң ҡыҙылдарҙан артыҡ яҡшылыҡ көтмәгән комбриг Ҡыҙыл Армия яғына сығыу өсөн ҡәтғи шарттар ҡуя:

1. Башҡорт һалдаттарын һәм командирҙарын ҡораһыҙландырмаҫҡа һәм атмаҫҡа;

2. Бригаданы ҡабул итеү өсөн башҡорт һәм совет командованиеһы вәкилдәре менән бергә ике-өс башҡорт совет полкын ҡуйырға, сөнки башҡорттар март айындағы атыуҙарҙан һуң рус командованиеһына ышанмай;

3. Полктарҙы Колчакка ҡаршы ебәреү мөмкинлеге булмаһа, уларҙы заводтарға һәм күсенеү пункттарына урынлаштырмаҫҡа, йә Верхнеуральскийға ебәрергә, йә Стәрлетамаҡта ҡалдырырға.

Ошо шарттар үтәлмәһә, бригаданы ҡаҙаҡ далаларына алып китәм, – тип иҫкәртеп ҡуя ҡыҙылдарҙы Мортазин. 1919 йылдың башында, Башҡорт корпусын ҡоралһыҙландырып, хата яһағанын аңлаған Ҡыҙыл Армия командованиеһы (был хатаны улар 1919 йылдың мартында Колчак армияһы контрһөжүмгә күскән мәлдә, һуғышсан башҡорт ғәскәрҙәре ярҙамына мохтаж саҡта, яҡшы аңлай)

Муса Мортазиндың шарттары менән риза була. Хәҙер инде ҡыҙылдар Башҡорт кавалерия бригадаһын үҙ файҙаһына ҡулланыуҙың әһәмәтенә бик яҡшы төшөнә.

Мортазиндың ғәскәре ҡыҙылдар яғында Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы статусын ала. Йәғни команда составы, полктар үҙгәрешһеҙ ҡалдырыла. 1919 йылдың август аҙағында бригада ҡыҙылдарҙың 24-се уҡсы дивизияһы составында аҡтарҙың Көньяҡ армияһы частарын туҙҙыра. Адамский һәм Бриены ҡасабаларына (Ырымбур өлкәһенең көнсығышында) һөжүм итеп, Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы аҡтарҙың өс йөҙгә яҡын һалдатын әсиргә ала, 20 ылауын ҡулға төшөрә.

*"Һуғыштарҙа арыған бригада, ҡаршыһында дошмандың йүнле көсө булмағас, тылға, Башҡортостанға, Ишмөхәмәт – Туртөкөй төбәгенә ҡайтарылды, унан, резервтағы 1-се армия ҡарамағына бирелеп, Урал фронтына – Ырымбур – Ҡарғалы (Сәйет биҫтәһе) тирәһенә күсерелде.*

*Бында өс көн ял иткәс, бригада иң яҡшы хәрби составынан, айырыуса йәштәр араһынан, политработниктар һайлап алды һәм, 3 мең кешене 2 меңгә генә ҡалдырып, бер аҙ кейем-һалым алып, тулы әҙерлек хәлենә килде"*, – тип яҙа Муса Мортазин. Ҡарғалыла торған сағында ҡыҙылдар (24-се дивизия) Башҡорт бригадаһында үҙҙәренең тәьҫирен нығытыу маҡсатында яңы политработниктар тәғәйенләй. Шуларҙың береһе – 24-се дивизияның сәйәси идаралығында агитатор булып йөрөгән Ғәли Камалов хәтирәләрендә (1956 йылда) бына нимә тип яҙа: *"В августе 1919 года из стана белых на сторону Советской власти перешла Башкирская кавалерийская бригада Мусы Муртазина. И я с несколькими товарищами был направлен в эту бригаду, которая находилась в то время в селе Каргалы, близ Оренбурга. Выехали туда сразу же по получении назначения, ибо дорога предстояла долгая и трудная. Настроение было мрачное, всех точила одна и та же мысль: что ждет нас в этой стольнаш умевшей муртазинской бригаде. К концу вторых суток показалась деревня, и через несколько шагов мы услышали возглас: "Эй, кто идет?" Наш возчик остановил лошадей. Из-за кучи кизяка появился человек. Мы предъявили ему наши удостоверения. Кто-то из нас зажег спичку, и мы смогл разглядеть подошедшего человека. Это был невысокий, средних лет мужчина, одетый в несколько странную военную форму синего цвета. Как потом мы выяснили это была японская военная одежда, которую носила почти вся бригада. Проверив документы, постовой проводил нас к штабу. На крыльце нас встретил начальник штаба бригады Я. З. Рамеев. Поздоровавшись, вошли в штаб, где проходило совещание командиров. За огромным столом сидело около 20 человек. Большинство из них было одето в красноармейские гимнастерки и в казачьи брюки с лампасами. Внимание обращал на себя здоровый, высокий мужчина с узкими, живыми глазами, одетый в шлем, на который была нашита звезда ярко-малинового цвета. Это и был командир бригады Муса Муртазин. Нас представили каждому из сидящих. Здесь были командир 1-го полка Усман Янбулатов, его заместитель Л. С. Эрадзе, командир 2-го полка Абдрахманов, начальник отдела снабжения бригады Ахмадей Муртазин и другие.*

*После знакомства заговорил на башкирском языке М. Муртазин. Привествовав наше прибытие в бригаду, выразил надежду, что мы быстро найдем общий язык с командным составом бригады и поможем им в создании сознательной революционной дисциплины среди башкирских конников. Он ознакомил нас с состоянием бригады. Последняя готовилась к боям. Приводились в порядок оружие, снаряжение, конский состав (ковка лошадей) и т. д. Бригада представляла довольно внушительную силу: 1800 сабель, один пеший дивизион, два орудия, 8 пулеметов. Основной контингент состоял из красноармейцев башкирской национальности восточных кантонов Башкирии.”*

1919 йылдың октябрь башында Башҡорт кавалерия бригадаһы Урал фронтына күсерелеп, 4-се ҡыҙыл армияға буйһондорола. Бында Мортазин атлылары казак генералдары Толстой, Беловтарҙың армияларына ҡаршы һуғыша. Аҡтарҙы ҡыуып Миргород, Аҡбулаҡ, Нефрашанка, Чунгай, Ҡормантай ауылдары янында ҡанлы һуғыштарҙа ҡатнаша. Бригада 1919 йылдың ноябрь-декабрендә Төркөстан фронтының Урал-Гурьев операцияһында ҡатнаша. Ошо хәрби операция һөҙөмтәһендә аҡтарҙың Урал армияһы туҙҙырыла. Тар-мар ителгән ғәскәрҙәренең ҡалдыҡтары Гурьев ҡалаһына ҡаса.

Өҙлөкһөҙ һуғыштар, һыуыҡтар, тиф сире арҡаһында Башҡорт кавалерия бригадаһы 1919 йылдың декабрь аҙағына бик ауыр хәлдә була. *“Декабрь аҙағында бригада, Ҡарғалыға күсерелеп, яраларын төҙәтергә кереште. Ә яралылар күп ине... Медицина персоналының, дарыуҙарҙың, эшсе ҡулының етешмәүе бәкәлгә һуға. Һуғыштарҙа йөрөгәндә бригада тифлы халыҡ менән аралашмай булдыра алманы. Эпидемиянан йөҙәрләгән ҡыҙыл армеец һәләк булды: яугирҙарыбыҙҙың 50–70 проценты тиф менән ауырыны. Уларҙы ебәрергә урын юҡ ине, үҙ тылыбыҙҙа тотток.*

*Башҡорт бригадаһы эпидемиянан һәм һуғыштарҙан ҙур юғалтыуҙар кисерҙе. 1 армия инспекторы (Свешников) 30 декабрҙә армия штабының оператив бүлегенә биргән белдермәһендә былай тип яҙа (№ 60/с):*

*“Армия буйынса бирелгән бойороҡ (№ 455) нигеҙендә, 5-се кавалерия дивизияһына ваҡытлыса буйһондоролған һәм 2-се бригадаға ҡушыласаҡ Мортазиндың Башҡорт кавалерия бригадаһы түбәндәге составта килде: командирҙар – 56, административ состав – 10, ҡылыслылар – 403, ҡоралһыҙ һыбайлылар – 77, строевой хеҙмәткә яраҡһыҙҙар – 249, аттар – 377, пулеметтар – 12, ылау – 124”. Был донесениянан шул күренә: бригада үҙенең 60 процент самаһы составын юғалтҡан (Урал фронтында һуғыш операциялары башланған сакта 2000 кеше бар ине)”,–* тип яҙа Муса Мортазин үҙенең китабында.

1-се ҡыҙыл армия командованиеһы 60 процент составын юғалтҡан Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһын 5-се дивизияна ҡушып, йәғни полктар кимәлендә генә ҡалдырып, айырым бригада булараҡ бөтөрөргә ҡарар итә.

Борсолоуға ҡалған Муса Мортазин хәлде аңлатып, Башҡортостандың хәрби комиссары Зәки Вәлидигә түбәндәге рапортын ебәрә:

## БАШВОЕНКОМУ тов. ВАЛИДОВУ

**№ 0999 / в**
**1919 года 29 декабря** **от Нач. брига Отд. Башк.**

## РАПОРТ

Доношу, что вверенная мне бригада до сего времени существовала, как отдельная Башкирская бригада; На основание приказа тов. Троцкого и по личному Вашему приказу бригада не входила и не должна была войти в состав дивизии, в особенности русскую, а должна была составлять, как отдельную Бригаду Башкирского войска; И поэтому приказом по 1-ой Революц. Армии она была отправлена для ликвидации Уральского фрон–та, как отдельная единица и оперативные приказы и задачи давались ей как отдельной части, а так же и выполнялись как отдельной частью Башкирского Советского войска. А теперь, когда бригада, не смотря на все недостатки, чувствуя острую нужду во всем, не получая ни в чем и ни по каким отраслям и ни с какой стороны помощи, среди холода, голода под пулями и снарядами неприятеля, организовала все, что требуется отдельной бригаде, исполнила честно и в точности возложенную на нее задачу, по необъяснимым причинам, вливают ее в состав 5 кавал. дивизии. Если точнее выразить – разрушают то, что было создано трудами сознательных работников. И все эти труды идут насмарку. Не оценили наши труды, что слишком обидно для всего состава бригады. По влитие бригады в состав дивизии много работников – работников честных добросовестных остаются без должности т. к. штат не отдельной бригады слишком мал и скуден, что же скажут и какими глазами посмотрят на меня эти работники, получив понижение без всяких на то причин.

Поэтому, не желая получить понижение и быть влитым в русскую дивизию, прошу Вашего ходатайства Пред. тов. Троцким и тов. Командиром фронта о разрешении оставить вверенную мне бригаду и пополнения, Отдельную Башкирскую и о переводе ее в Башкирскую дивизию или же оставить ее в временном подчинении 1-ой Армии, но как отдельную бригаду.

**Начальник Бригады Муртазин**
**Врид. Военкомбрига Богуславский**
**Врид. Наштабриг Сагитов**

Зәки Вәлиди был мәсьәләне Ленин һәм Троцкийға еткерә. Ләкин Төркөстан фронты командующийы Фрунзе Башҡорт бригадаһын таратыу яғын ҡайыра:

*“Ознакомившись с положением дела в кавалерийской бригаде Муртазина, включенный в состав 5-й кавдивизии, стало наиболее целесообразным эту бригаду расформировать. Ввиду удобства, связанного с отдачей приказа фронтом, прошу соответстветствующего распоряжения от Реввоенсовета Республики. Основание к расформированию есть”*, – тип яҙа ул Ленинға. Фрунзе Башҡорт бригадаһын үҙ фарманы менән 5-се дивизияға ҡушһа ла, уны таратырға итергә баҙнат итмәй. Реввоенсоветтың рөхсәтен һораған. Фрунзе Ленинға ебәргән телеграммаһын былай, тип дауам итә: *“Башкирский ревком считает эту бригаду национальным формированием и ходатайствует перед центром об исключении ее из дивизии. Я же ответил, что бригада в состав башкирской армии включена быть не может, так как это превысит установленную соглашением для Башкирии норму”*. Бында һүҙ 1919 йылдың 20 мартындағы килешеү тураһында бара. Ул килешеү буйынса Башҡорт армияһы бер кавалерия дивизияһы һәм бер уҡсы бригаданан торорға тейеш була. Шуға күрә лә Фрунзе, Мортазиндың кавалерия бригадаһын артыҡ һанай. Ул Башҡорт бригадаһын бөтөрөп, уның яугирҙары менән Петроградтағы башҡорт ғәскәрҙәрен тулыландырырға тәҡдим итә.

Ләкин Башҡортостан хәрби комиссары Зәки Вәлиди Троцкий менән Ленинды Мортазин бригадаһын таратмаҫҡа күндерә. Бригада 1919 йылдың декабренән алып 1920 йылдың апрель аҙағына тиклем Ырымбур янында, Ҡарғалыла тора. Ял итә, сафтарын тулыландыра.

*“1920 йылдың 29 апрелендә Башҡорт бригадаһы Польша фронтына юл алды. Ул вагондаръа Ташкент тимер юлының Ново-Сергиевка станцияһында тейәлде һәм 7 майҙа Бобровица станцияһына (Нежин ҡалаһы районына) килеп етте. Бригада составында 27-се, 28-се полктар һәм 800 кешелек йәйәүле дивизион, 200 ҡылыс һәм 600 ат, 15 пулемет бар ине”*, – тип яҙа Мортазин.

Бригада 9 майҙан 12-се армия составында поляктарға ҡаршы һуғыш башлай. 16 майҙа Мортазин бригадаһына Новгород губернаһынан 900 кешелек 1-се Башҡорт кавалерия полкы килеп ҡушыла (1-се кавполк Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы полктарынан ойошторола, ә дивизияның үҙе расформировать ителә). Бынан тыш, Стәрлетамаҡтан Башревком тарафынан бригадаға тағы 100 һалдат ебәрелә.

Шулай итеп, Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы өс полклы (1-се, 27-се, 28-се полктар) ғәскәри частҡа тиклем үҫеп етә. Бригада 12-се армияның 7-се кавдивизияһы составында Киев операцияһында әүҙем ҡатнаша. Ҡанлы яуҙар барышында байтаҡ ҡына юғалтыуҙар кисерә.

13 июлдә Муса Мортазин командалығында 12-се армияның атлы төркөмө ойошторола. Уның составында Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы, 25-се кавалерия бригадаһы, Дон-Кубан, Суров, 7-се йыйылма һәм 59 кавалерия полктары була. Атлы төркөм поляктарҙы ҡыуып 8 августа Ковель ҡалаһын ала. Ҡалаға беренсе булып Башҡорт бригадаһының 1-се кавполкы бәреп инә. Һуғышта күрһәткән ҡаһарманлыҡтары өсөн комбриг Мортазин алтын сәғәт, көмөш ҡылыс

менән бүләкләнә, ике тапҡыр Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була (1920, 1921 йылдарҙа).

Был осорҙа, Башҡортостанда Зәки Вәлиди етәкселегендәге Башревком ВЦИК-тың декретына ҡаршы ризаһыҙлыҡ белдереп эштән киткән була. Артабан хәлдәр тағы ҡатмарлаша, Бөрйән-Түңгәүер кантонында башҡорттар советтарға ҡаршы баш күтәрә. Республикалағы ваҡиғалар тураһында хәбәр алыу менән, комбриг Мортазин, 1920 йылдың авгусында отпуск алып, ҡайтып китә.

Башҡортостанға ҡайтыу менән Муса Мортазин ихтилалды тиҙерәк артыҡ ҡорбандарһыҙ туҡтатырға бөтә көсөн һала. Яңы Башревкомға ышанмаған башҡорттар, Муса Мортазин ҡайтыу менән уны үҙенең яҡлаусыһы күрә. Абруйлы сардарҙың һүҙенә ҡолаҡ һалып, башҡорттар советтарға ҡаршы ҡораллы көрәште туҡтарырға була.

1920 йылдың декабренән Мортазин республиканың Хәрби эштәр буйынса халыҡ комиссары булып эшләй. 1921 йылдың июнендә ул Автономиялы Башҡорт Совет Республикаһының етәксеһе – Башҡортостандың Үҙәк Башҡарма Комитеты (БашЦИК) рәйесе итеп тәғәйенләнә. 1922 йылда, хәрби белем алыу маҡсатында, Мәскәү Юғары Хәрби-педагогика мәктәбенә уҡырға китә. 1924 йылда, хәрби мәктәпте тамамлап, Эшсе-Крәҫтиән Ҡыҙыл Армияһының М.В. Фрунзе исемендәге Хәрби академияһына уҡырға инә. 1927 йылда, академияны тамамлап, Ҡыҙыл Армияның Баш идаралығында резервта тора. Ошо йылда Мәскәүҙә “Башҡортостан һәм башҡорт ғәскәрҙәре граждандар һуғышында” тип исемләнгән китабы баҫылып сыға.

1928 йылдың ғинуарынан 11-се кавалерия двиизияһының 3-сө бригадаһы командиры, 8-е кавалерия дивизияһының бригада командиры булып хеҙмәт итә. 1929 йылдың декабренән Мәскәүҙә Ҡыҙыл Армия Баш идаралығының Аттарҙы яңыртыу идаралығы инструкторы, 1931 йылдан ошо идаралыҡтың 2-се секторы начальнигы урынбаҫары, артабан 4-се, 2-се секторы начальнигы булып хеҙмәт итә. 1935 йылдың февраленән Аттар составын яңыртыу буйынса бүлектең 2-се бүлексәһе начальнигы була. Ошо уҡ йылдың декабрендә Муса Мортазинға комбриг званиеһы бирелә.

Ҡаһарман сардар, легендар комбриг, башҡорт халҡының данлы улы Муса Лотфулла улы Мортазин 1937 йылда репрессиялана. 27 сентябрь көнө СССР Юғары Судының хәрби коллегияһы уны үлем язаһына хөкөм итә. Шул уҡ көндә атыла. 1956 йылдың 14 июлендә реабилитациялана.

**Сығанаҡтар:**

ЦГАОО РБ. Ф. 10287. Оп. 1. Д. 163. Лл. 1–3.
ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 146. Л. 118.
ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 76. Л. 44.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 1. Уфа, 2002. С. 246, 254, 354, 381, 384, 386.
Мортазин М. Л. Әҫәрҙәр. Өфө, 1994. 64–65, 105, 282–284, 135–136-се биттәр.



# НУРИӘҒЗӘМ ТАҺИРОВ
## 1888–1938

Нуриәғзәм Таһир улы Таһиров – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте етәкселәренең береһе. Әйткәндәй, 2005 йылда миңә Н. Таһировтың улы Тойғон ағай Таһиров менән күрешеп әңгәләшеп ултырыу бәхете тейҙе. Нуриәғзәм Таһировтың тормошо тураһында байтаҡ мәғлүмәт алдым.

1888 йылдың 9 ғинуарында Ырымбур губернаһы Силәбе өйәҙенең (хәҙерге Силәбе өлкәһенең Арғаяш районы) Ҡужа (Ләүәш) ауылында тыуған. Атаһы Таһир мулла уны Мәтәл ауылындағы Урыҫ-башҡорт мәктәбенә бирә. Һуңынан Мәүлит ауылы мәҙрәсәһендә уҡый. Артабан Троицкиҙағы атаҡлы «Рәсүлиә» мәҙрәсәһенә уҡырға инә. 1906 йылда илдәге революцион күтәрелеш тәьҫирендә, мәҙрәсә шәкерттәре митинг үткәрә. Митингты ойоштороусыларҙың береһе булараҡ, полицияның эҙәрлекләүенән Силәбе ҡалаһына ҡаса. Артабан күскенселәр менән алыҫ Иркутскиға сығып китә. Күпмелер ваҡыттан Мансуров фамилияһын Басировҡа үҙгәртеп, тыуған яҡтарына ҡайтып төшә. Артабан Ҡаҙағстанда мөғәллим булып йөрөй. 1908 йылда Өфөләге «Ғәлиә» мәҙрәсәһенә уҡырға инә.

1911 йылда, мәҙрәсәне тамамлағандан һуң Нуриәғзәм тыуған ауылына ҡайтып, унда атаһы ярҙамы менән йәҙит (яңыса ысул менән уҡытыу) мәктәбе аса. Төньяҡ-көнсығыш башҡорттары араһында билдәле ишан, йәҙитселеккә ҡаршы дин әһеле Ғәбиҙулла Ҡорбанғәлиев, мосолман динен нигеҙҙәрен емерә, властҡа ҡаршы революцион идеялар тарата, тип Нуриәғзәмдең мәктәбен яптыра.

Ахырҙа, Н. Таһиров Силәбегә барып, уҡытыусы булып эшкә урынлаша. Әммә ишан уны бында ла һыйҙырмай. Ҡулға алыныуҙан ҡасып, Себер яҡтарына сығып китә. Өс йыл буйы, 1914 йылдан 1917 йылға тиклем ситтә йөрөргә мәжбүр була.

1917 йылдың майында ғына Нуриәғзәм Таһиров тыуған яғына ҡайтып төшә. Тормоштоң әсеһен дә, сөсөһөн дә күреп өлгөргән, алдынғы ҡарашлы йәш мөғәллим яңы ойошоп килгән Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә, Башҡортостанға автономия яулау идеяһына бөтә күңеле менән бирелә. Ул июль айында Ырымбурҙа үткән I Башҡорт ҡоролтайына делегат итеп һайлана.

Ҡоролтайҙан һуң Нуриәғзәм Таһиров Башҡорт мәркәз шураһына эшкә йәлеп ителә. Уны II Башҡорт ҡоролтайына әҙерлек эштәре менән тыуған яғына, Арғаяшҡа ебәрәләр. Бында ул ең һыҙғанып эшкә тотона.

1917 йылдың 25–29 августында Өфөлә үткән II Башҡорт ҡоролтайында уны милли хәрәкәт лидерҙары Шәриф Манатов, Зәки Вәлиди, Шәйехзада Бабич һәм Сәғит Мерәҫовтар менән бергә Башҡорт мәркәз шураһының яңы составына ағза итеп һайлайҙар. Өфөлә һәм Силәбелә шураның өлкә секретариаттарын булдыра. Силәбе секретариатының эшен алып барыу бурысы Нуриәғзәм Таһировҡа йөкмәтелә.

1917 йылдың 8–20 декаберндә үткән III Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайында Нуриәғзәм Таһиров Башҡортостан автономияһының Кесе ҡоролтайы (предпарламент) ағзаһы итеп һайлана. Ҡоролтай ваҡытында ул Шәйехзада Бабич, Хәбибулла Ғәбитовтар бергә, үҙ янына йәштәрҙе туплап, башҡорт мәҙәниәтен, әҙәбиәтен, телен күтәреүҙе маҡсат итеп ҡуйған “Тулҡын” исемле башҡорт йәштәренең әҙәби-ижади ойошмаһы төҙөй.

1918 йылдың ғинуар башында Башҡортостан автономияһына ҡаршы сығыш яһаусы Милли мәжлес (милли-мәҙәни автономия өсөн сығыш яһаған татарҙар ойошмаһы) менән һөйләшеүҙәр алып барыу өсөн башҡорт делегацияһы составында Н. Таһиров Өфөгә ҡалаһына юллана. 5–11 ғинуарында, Башҡортостан автономияһы вәкилдәре менән Милли мәжлестең берлектәге ултырыштара ҡатнаша. Башҡорттар автономия мәнфәғәттәрен яҡлап сығыш яһай. Әммә улар Милли мәжлес менән бер фекергә киләалмай.

Бер үк ваҡытта хөкүмәт вәкилдәре ҡоролтайҙың ҡарарына ярашлы “Бәләкәй Башҡортостан” сиктәрендә 9 кантондан торған Башҡортостан автономияһын тормошҡа ашырыу эшенә тотона. Урындағы власть органдары – кантон башҡармаларын ойоштора.

– Атайым төнъяҡ-көнсығыш Башҡортостанда урынлашҡан Арғаяш, Дыуан-Ҡошсо һәм Ялан кантондарын ойоштороуҙа әүҙем ҡатнашҡан. 1918 йылдың 30 ғинуарында үткән Арғаяш кантонының съезында ул Ғәбделхәй Иркәбаев, Хафиз Ҡушаев, Ғариф Мөхәмәтйәровтәр менән бергә кантон башҡарма комитетына һайланған булған, – тип һөйләй Нуриәғзәм Таһировтың улы Тойғон ағай Таһиров.

1918 йылдың 4 февралендә (яңыса 16 февраль), башҡорт халҡының үҙаллылығына йәне-тәне менән ҡаршы булған Мосолман хәрби-революцион комитеты Ырымбурҙағы Башҡорт хөкүмәте ағзаларын ҡулға алып, төрмәгә яба. Тойғон ағай һөйләүенсә, Н. Таһиров был ваҡытта кантондарҙа йөрөгән була. Ырымбурҙан хәбәр алыу менән Арғаяшҡа, үҙ яғына ҡайта. Уны кантон идараһы рәйесе итеп һайлайҙар. Зәки Вәлиди төрмәнән сығып Силәбегә килер алдынан был яҡтағы (Арғаяштың) йәш башҡорт зыялылары Башҡортостан автономияһын тергеҙеү өсөн ҙур эш алып бара. 1918 йылдың майында Силәбелә большевиктар ҡыйратылып, власть Чехословак корпусы ҡулына күскәс, Арғаяштағы башҡорттар, ҡоролтай йыйып, өс кешене чехословактарға вәкил итеп ебәрә.

Атайым, Сәғит Мерәҫов, Ғәбделхаҡ Ғәбитов чехословактар менән һөйләшә,

улар башҡорттарға ярҙам итергә вәғәҙә бирә. Арғаяшта тиҙ арала ҡоролтай йыйылып, Силәбенең халыҡ власы эргәһендә Башҡорт шураһы (советы) булдырыу тураһында ҡарар ҡабул иткәндәр. Шураның ағзалары итеп Нуриәғзәм Таһиров, Сәғит Мерәҫов, Ғәбделхаҡ Ғәбитов, Тәҡи Ғисмәтуллин, Фәтхелҡадир Сөләймәнов һәм Ғәриф Мөхәмәтйәровтар һайлана. Башҡорт шураһы ағзалары иртәгеһенә үк Силәбегә барып, тәү сиратта, ғәскәр туплау эшенә тотона. Шулай итеп, Башҡортостан хөкүмәте төрмәлә саҡта ла, милли хәрәкттең эше һүнеп ҡалмай. Хөкүмәт бурыстарын Сәғит Мерәҫов, Нуриәғзәм Таһиров һәм Ғәбделхаҡ Ғәбитовтар үҙ иңенә һалған, – ти Тойғон Нуриәғзәм улы.

29 майҙа Силәбегә килгәс, Зәки Вәлиди Башҡорт хөкүмәтен тергеҙеү һәм дә чехословактар ярҙамында милли ғәскәр ойоштороу эшенә тотона. 1 июнь хөкүмәт исеменән мобилизация иғлан ителә. Таһиров Башҡорт хөкүмәтенең Хәрби бүлегендә янында ойошторолған Башҡорт хәрби шураһы составына инә, йәғни тәүге башҡорт полктарын ойоштороу эшендә туранан-тура ҡатнаша. 1918 йылдың 13 июнендә Башҡорт хөкүмәтенең хәрби бүлеге төнъяҡ-көнсығыш кантондарҙағы башҡорттарҙы милли армияға мобилизациялау тураһында 217-се фарман сығараһа, бер айҙан, 10 июлдә 288-се фарман менән дөйөм башҡорт халҡына мобилизация иғлан итә. Фарман Зәки Вәлиди, Сәғит Мерәҫов, Нуриәғзәм Таһировтар ҡул тамғаһы менән тарала. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә башҡорт полктары ойошторолоп улар ҡыҙылдарға ҡаршы һуғыштарҙа ҡаһарманлыҡ күрһәтеп тә өлгөрә. 2-се Башҡорт пехота полкының ике батальоны Екатеринбург ҡалаһын ҡыҙылдарҙан азат итеүҙә ҡатнаша. Ҡала халҡы башҡорт яугирҙарының хеҙмәтен юғары баһалай: ярым ай, йондоҙ менән биҙәлгән, *“Доблестным освободителям благодарный Екатеринбург”* яҙылған, ебәктән тегелгән байраҡ бүләк итә. Бүләкте тапшырыу тантанаһы 1918 йылдың 7 авгусында, Силәбе ҡалаһында үтә. Тантанала Башҡорт хөкүмәте һәм Башҡорт хәрби шураһы исеменән һалдаттарҙы Нуриәғзәм Таһиров ҡотлай. Үҙенең сығышында борон милли-азатлыҡ көрәшенә күтәрелгән данлы ата-балаларыбыҙ – Салауат Юлаев, Ҡараһаҡалдарҙың батырлыҡтары хаҡында һөйләп үтә.

Н. Таһиров Башҡорт армияһында милли хәрәкәт идеяларын таратыу, милли идеологияны булдырыусы эшмәкәрҙәрҙең береһе була. 1918 йылдың 19 июнендә Башҡортостандың милли байрағы тураһындағы фарман аҫтында Башҡорт хөкүмәтенең урынбаҫары З. Вәлиди менән бергә, дөйөм эш буйынса сәркәтип булараҡ уның фамилияһы ла тора. Артабан Нуриәғзәм Таһиров, тыуған яғына ҡайтып Арғаяш кантоны башҡармаһы рәйесе булып эшләй.

Ғәскәрҙәрҙә тәртип тотоу, һалдаттарҙың рухын күтәреү һәм иң мөһиме автономия өсөн көрәштең тураһында аңлатыу эше алып барыу маҡсатында, Башҡорт армияһында полк муллалары институты индерелә. 1 октябрҙә Нуриәғзәм Таһиров 2-се Башҡорт пехота полкы муллаһы итеп тәғәйенләнә. Полк муллалары дини йолаларҙы атҡарыуҙан тыш сәйәси комиссарҙар ролен дә үтәй. Уларға большевиктарға ҡаршы һуғыштың маҡсатын, дөйөм сәйәси хәлде аңлатыу, хөкүмәттең фармандарын еткереү эше йөкмәтелә.

1918 йылдың 8 ноябрҙа полк муллаһы Нуриағзәм Таһировҡа тағы ла яуаплыраҡ вазифа йөкмәтелә – ул 1-се Башҡорт пехота дивизияһы муллаһы итеп тәғәйенләнә: “...*полкового муллу 2-го Башкирского стрелкового полка Тагирова возлагаю исполнение обязанностей дивизионного муллы 1-й Башкирской стрелковой дивизии с 1-го октября с. г. с исполнением своих прямых обязанностей*”, – тиелә Зәки Вәлидиҙең фарманында.

Шулай итеп, Н. Таһировҡа 1918 йылдың көҙөндә башҡорт ғәскәрҙәрендә сәйәси-аңлатыу эше алып барыу бурысы һалына. Был ваҡытта Аҡтүбә фронты башҡорт милли хәрәкәте өсөн ҙур сәйәси әһәмиәткә урынға әүерелә. Тойғон Таһир улы: “*Башкортостан хөкүмәте Ырымбурға кайткас, өс кеше, минең атайым, Фәтхелкадир Сөләймәнов ( Әбделкадир Инан) һәм Сәйетгәрәй Мағазов (уларҙың бөтәһелә мәҙрәсә тамамлаған, тимәк бөтәһе лә мулла) беҙҙе ғәскәрҙәрғә ебәрегеҙ, тип рапорт яҙғандар. Атайым Башкорт хөкүмәте ҙур әһәмиәт биргән Аҡтүбә фронтына ебәрелә. Бында башкорт ғәскәрҙәренә ҡыҙылдарҙы тар-мар итеп Төркөстандың советтарға каршы көстәре менән ҡушылырға тигән максат ҡуйылған була. Ләкин советтар өҫтәмә көстәр ташлап беҙҙең ғәскәрҙәргә Төркөстанға сығырға мөмкинлек бирмәгән*”, – тип һөйләне.

Тарихсы Марат Ҡолшәрипов билдәләүенсә, Орск янынан Ҡаҙағстан территорияһына сигенгән частар иҫәбенә Аҡтүбә фронтында ҡыҙылдарҙың хәле ныға. Икенсенән, Колчак генералдарының Башҡортостан автономияһын бөтөрөүгә йүнәлтелгән сәйәсәте башҡорт һалдаттарының рухын төшөрә.

1918 йылдың 18 ноябрендә адмирал Колчак власты үҙ ҡулына алып, үҙен “Рәсәйҙең юғары хакимы” тип иғлан итә. Башҡортостан автономияһын бөтөрөлөүен, башҡорт ғәскәрҙәренең тулыһынса үҙ генералдарына буйһондоролоуын талап итә. Әммә Башҡорт хөкүмәте был фарманға ҡолаҡ һалып бармай. Зәки Вәлиди башҡорт ғәскәрҙәре менән етәкселекте үҙ ҡулына ала һәм уларҙы бер урынға туплай башлай. Вәлидиҙең ышанслы көрәштәштәре, И. Исхаҡов (полк командиры) менән Н. Таһиров 2-се Башҡорт уксы полкын бер ҡыйынлыҡһыҙ Аҡбулаҡ фронтынан Башҡортостанға алып ҡайта.

Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, Нуриәғзәм Таһиров Башревкомға кандидат итеп һайлана. 1919 йылдың яҙында Ҡыҙыл Армия сигенеү айҡанлы, Башревком Саранкийға күсерелә. Һәм ошонда элеккеләре тәртипкә килтерелеп, яңы полктар ойоштороло башлай. Улар Айырым Башҡорт бригадаһын тәшкил итә. “*Саранскиҙа ғәскәри частарҙы тәртипкә килтереү эше тамамланмағайны әле. Шуға карамаҫтан, Совет «Хәрби инҡилап шураһы» (Реввоенсовет, рәйесе Троцкий) 10 июндә был ғәскәрҙәрҙең ойошторолғандарын Украина фронтында* (Көньяҡ фронт– А.Я.) *һуғышкан 14-се армия карамағына ебәреү хаҡында миңә әмер бирҙе. Был ғәскәрҙең әҙерлек эше тамамланмағанлыктан фронтка ебәреү ваҡытын бер ни тиклем кисектереү өсөн байтаҡ тырыштым. Ләкин Троцкийҙы, айырыуса уның урынбаҫары Вацетисты күндерә алманым, ғәскәрҙәрҙе ебәрергә мәжбүр булдыҡ*”, – тип яҙа Зәки Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә.

Шулай итеп, Башҡорт бригадаһы генерал Деникиндың армияһына ҡаршы һуғышҡа ебәрелә. 1919 йылдың июлендә Башҡортостандан килгән частар менән тулыландырылып, Көньяҡ фронттағы бригада Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы кимәленә үҫтерелә. Дивизияның сәйәси комиссары итеп Нуриәғзәм Таһиров тәғәйенләнә (дивизияның командиры А. Ахлов). Шулай итеп, аҡтар яғында полк муллаһы, артабан дивизия муллаһы вазифаһын үтәгән Н. Таһировҡа, хәҙер инде тағы ла шундай уҡ бурыс йөкмәтелә. Килешеү буйынса, башҡорт ғәскәрҙәре Колчакка ҡаршы һуғышыр урынға, алыҫ Украинала «революция ҡаҙаныштарын" яҡлап Совет власы өсөн ҡан ҡойорға мәжбүр була. Башҡорт дивизияһы фронттың иң ауыр ерҙәренә ташланып, байтаҡ юғалтыуҙар кисерә. Сәйәси комиссар булараҡ Нуриәғзәм Таһировҡа был һуғыштың маҡсаттырын һалдаттарға төшөндөрөү еңелдән булмағандыр, ахыры. Быныҡ сәбәптәрен Башревком да башҡорт ғәскәрҙәренә аңлатырға тырышып былай тип яҙа: "... *Переброска Вас на Юг явилась как бы испытанием, экзаменом революционности, верности башкир, и этот экзамен башкирские красноармейцы и весь башкирский народ в Вашем лице, товарищи, блестяще выдержал..."*

Әммә Совет власы алдында, ауыр юғалтыуҙар аша "тоғролоҡҡа имтихан" тотҡан башҡорт ғәскәрҙәренең көрәһеләре алда була әле. 1919 йылдың көҙөндә Совет етәкселеге революцияның бишеге – Петроградты Юденич ғәскәрҙәренән ҡурсалау тигән тағы бер яуаплы "имтихан" йөкмәтә башҡорттарға. Шулай итеп, Нуриәғзәм Таһиров етәкселек иткән Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы бер һуғыштан икенсеһенә ташлана. Тыуған иленә ҡайтырға өмөт иткән һалдаттарҙың рухы бөтөнләй һүнеп ҡала. Икенсенән, большевиктар башҡорттарға автономия бирмәйәсәк тигән провокацион хәбәрҙәр таратыла. Ошо сәбәпле Харис Йомағолов дивизия комиссары Нуриәғзәм Таһировҡа былай тип яҙа: "

*Дорогой тов. Тагиров Нур-Агзам!*

*Шлю Вам и всем тов. Красн. – башкирам, находящимся в Петрограде от имени Воен.-Рев.-Ком. Баш. Сов. Рес. Горячий и сердечный привет!!!*

*Затем тов. Нур-Агзам, сообщи, всем тов. Башкирам-красн., как находящимся в настоящее время в Петрограде, так и вновь прибывающим с востока и юга в Петроград, следующие:*

*Президиум Всеросс. Центр. Исп. Ком. Сов. Раб. Крест. Красноар. и Казачих депутатов постановил назначить комиссию для решения вопроса о создании власти в Сов. Башкирии, в эту комиссию, по вызову Президиума ВЦИК от имени Воен. Рев. Ком. Баш. Сов. Рес. В Моск. Прибыл я (Юмагулов) и Ф. Тухватуллин. Эта комиссия устроила заседание 15 сентября, где была принята резолюция, которая является теперь постанов. ВЦИК и как таковая объявлена в «Известиях ВЦИК» за № 206, от 17 сентября...*

*Итак, тов. Нур-Агзам, наконец-то Башкирия стала автономной Крас. Сов. Башкирией.*

*Сообщи всем-всем красн.-башкирам!!! Пусть неподдаются провокации!!!*

*Нур-Агзам! По некоторым сведениям наших кр.-ар. В Белебее*

*настраивались против нас т.е. Ревкома и Б.С.Р. и против Советов, так прими меры чтобы рассеять лживые, провокационные слухи кр.-ар. Прочти постановление ВЦИК, наши приказы и обращ.”*

1919 йылдың сентябрендә Бәләбәйҙән Петроградҡа Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы (өс пехота полкы), бер кавалерия полкы һәм Айырым Башҡорт артиллерия дивизионы килә. Башҡорт кавалерия дивизияһы менән бергә Петроградта 10 меңлек башҡорт ғәскәрҙәре туплана. Улар Петроград фронтының Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмөн тәшкил итә. Дивизия комиссары Нуриәғзәм Таһиров, башҡорт ғәскәрҙәрен башҡорт сәйәси кадрҙары менән тәьмин итеү буйынса ҙур эш башҡара. Уның юллауы буйынса, Мәскәүҙә Я. М. Свердлов исемендәге Коммунистик университетта уҡыған башҡорт курсанттары Петроградтағы башҡорт ғәскәрҙәрендә төрлө етәксе вазифаларға тәғәйенләнә. Мәҫәлән, Һиҙиәтулла Сәғәҙиев Башҡорт кавалерия дивизияһының Сәйәси бүлеге мөдире, Ғабдулла Ибрагимов Башҡорт уҡсы бригадаһы комиссары итеп ҡуйыла. Бынан тыш, Н. Таһировтың тырышлығы менән Петроградта башҡорт ғәскәрҙәренең “Салауат” исемле гәзите сығарыла башлай.

Совет хөкүмәте, Юденич армияһын тар-мар итеүҙәге хеҙмәттәре өсөн башҡорт яугирҙарын юғары баһалай. Күптәр төрлө ҡиммәтле бүләктәр, алтын сәғәт, почетлы ҡорал, РСФСР-ҙың Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградлана. РСФСР Хөкүмәте Нуриәғзәм Таһировтың да хеҙмәттәрен айырым билдәләп үтә. Михаил Калинин уға, ВЦИК исеменән рәхмәт белдереп, ҡиммәтле эйәр бүләк итә. “*Был эйәрҙе мин бик яҡшы хәтерләйем. Ялтырап торған һары күндән ине. Аҫтына һала торған күк төҫтәге түшәгенең мөйөштәренә көмөш йондоҙҙар һүрәтләнгән. Түшәк менән бергә эйәр бик тә матур күренә ине. Атайымды ҡулға алынғандан һуң да ул эйәр беҙҙең һаҡланды. Эйәрҙе һатығыҙ тип һорап килгән кавалерист командирҙар күп булды. Әммә әсәйем уны бер кемгә лә бирмәне. Тик матди хәлебеҙ ауырлашҡас ҡына, атайымдың был ҡомартҡыһын һатыр ебәрергә мәжбүр булды. Ҡыҙыл Армия йортоноң (хәҙерге Офицерҙар йорто) фойеһында атайымдың ҙур портреты торҙо. Ул унда ат атҡа атланған килеш төшөрөлгән ине. Картина атайымды ҡулға алғандан һуң да оҙаҡ ҡына ваҡыт торҙо. Беҙ ағайым менән һәр ваҡыт инеп ҡарай торғайныҡ*”, – тип хәтерләй Тойғон Нуриәғзәм улы.

Н. Таһиров Петроградтан башҡорт ғәскәрҙәре менән фин сигенә күсерелә, һәм бында һыуыҡ тейҙереп ауырып китеү сәбәпле Башҡортостанға ҡайта. 1920 йылдың мартында Башревком ҡарары менән ул Арғаяш кантонының ревкомы рәйесе итеп раҫлана.

Ләкин 1920 йылдың майында Үҙәк совет власы Башҡортостандың автономия хоҡуҡтарын бөтөргән декретын сығара. Быға ҡаршы протест белдереп, башҡорт етәкселәре эштәрен ташлап сығып китә. “*Атайым Урта Азияға китеп барғанда Ҡаҙағстанда ҡаты сирләй. Өс ай буйы ауырып ята. 1921 йылдың башында ғына Ташкентҡа бара. Бында ул Сәйетгәрәй Мағазов, Илдархан Мутиндар менән күрешә. Унан Бохара республикаһының бара. Уны урындағы мәғариф бүлегенә мөдир итеп тәғәйенләйҙәр. Тиҙҙән үҙ янына И. Мутинды*

*ала. Шунан бер мәл Бохара янындағы бер ҡышлаҡта Зәки Вәлиди башҡорт эшмәкәрҙәрен йыя. Унда ул совет власына ҡаршы көрәш өсөн көс туплау мәсьәләһен ҡуя. Уға хәҙер инде советтарға ҡаршылыҡ күрһәтеү файҙаһыҙ тип, күптәр ҡаршы төшә. Шуға ҡарамаҫтан, Зәки Вәлиди уларға бурыстар йөкмәтә. Өс кеше – атайым, С. Мағазов, И. Мутинға Ҡаҙағстанға барып ғәскәр туплау тигән бурыс ҡуйыла. Быны менән риза булмай улар. Атайым Ташкентҡа барып Харис Йомағолов менән бәйләнешкә инә. Х. Йомағолов Башҡортостанға ҡайтығыҙ тип кәңәш итә. Шунан Илдархан Мутин менән атайым ҡайтып төшә"*, – тип һөйләй Тойғон ағай.

Нуриәғзәм Таһиров 1921 йылдың июнендә Стәрлетамаҡҡа килә. Советтарҙың II Бөтөн башҡорт съезында ҡатнаша. Республиканың Халыҡ мәғарифы комиссариаты коллегияһы ағзаһы итеп тәғәйенләнә. Артабан Башҡорттарҙың көнкүрешен, тарихын, телен һәм мәҙәниәтен өйрәнеү буйынса йәмғиәт рәйесе (хәҙерге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының башланғысы) вазифаһын башҡара. 20-се йылдарҙа Нуриәғзәм Таһиров тел, мәғариф өлкәһендә уңышлы эшләй. Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ тормошҡа ашырыу, әҙәби телдең ҡанундарын, төрлө нормаларын билдәләү буйынса ҙур эш башҡара. 1924 йылда ул «Башҡортса эш йөрөтөү өсөн ҡулланма һәм үрнәктәр» исемле йыйынтыҡ төҙөп сығара. Шул уҡ йылды Хәбибулла Ғәбитов менән берлектә төҙөгән «Башҡортса яҙыу ҡоралы» тигән ҡулланмаһы донъя күрә. Бынан тыш, халыҡтың һөйләү теле материалы нигеҙендә төҙөлгә «Башҡорт лөғәте» (1926 йыл) һәм ҡыҫҡа орфографик һүҙлек баҫтырып сығара. Башҡорт теленең тәүге грамматикаһы авторҙарының береһе була. Шулай итеп, Нуриәғзәм Таһиров Башҡортостандың дәүләтселегенең, башҡорт халҡының яҡты киләсәге өсөн янып, бөтөн булмышы менән уға хеҙмәт итә.

*"Зәки Вәлидиҙең Башҡортостанда ҡалған ҡатыны Нәфисә Өфөгә килеп йәшәгән, атайым, әсәйемдәр менән аралашҡан. Бер мәл ул йәшеренеп кенә Өфөнән Мәскәүгә китә. Сит илгә сығырға уйлай. Бында уның юҡлығын белгән ОГПУ, атайымды саҡыртып, Зәки Вәлидиҙең ҡатыны ҡайҙа, тип һорау ала. Атайым белмәгәс, ебәрәләр. Ул, Нәфисә ханымды ОГПУ эҙләй, тип үҙ таныштары араһында һөйләй. Ошо һүҙен бер кеше (осведомитель) ОГПУ-ға алып барып еткерә. Атайымды Башҡортостандан ҡыуалар. Ул Ҡаҙанда адвокат булып эшләй. Унан ҡайтҡас, 1927 йыл атайымды ОГПУ үҙенең осведомителе итергә тырыша. Ул һеҙгә ошаҡсы булып йөрөмәйем, тип тураһын бәреп әйтә. Уны тағы Башҡортостандан бер йылға ҡыуып ебәрәләр. Урта Азияла йәшәп, 1928 йыл ҡайтып төшә. Адвокат булып Главсудта эшләй. Әммә бер йылдан, 1929 йылдың йәйендә атайымды ҡулға алдылар*, – ти Тойғон Таһиров. – *Биш йәшлек кенә булһам да, атайымды ҡулға алғандарын яҡшы хәтерләйем. Иртә таң ине шикелле. Беҙҙең өйҙөң коридорында ҡараңғы ине. Әсәйем һеңлемде ҡулында тотҡан, ағайым баҫып тора. Ниндәйҙер сит кешеләр атайым менән бергә уның кабинетына инделәр. Күпмелер ваҡыт үткәндән. Теге кешеләр сығып ҡуша үҙҙәре менән атайымды алып киттеләр. Китер алдынан атайым әсәйемә: «Әйшуҡ, һин, балаларҙы йоҡларға һал. Бер яңылышлыҡ килеп сыҡҡандыр. Мин*

*иртән таң аткас ҡайтырмын тип сығып китте. Әсәйемдең исеме Ғәйшә. Атайым уны "Әйшук" тип йөрөтә ине. Уны ОГПУ бинаһының подвалында тоттолар, хәҙерге Гоголь менән Коммунистик урамдарының мөйөшөндә булды. Ул бинә әлелә тора. Аҙаҡ Гоголь урамының осондағы төрмәгә күсерҙеләр. Әсәйем мине төрмәнең ҡаршыһындағы йорттоң эскәмйәһенә ултырта ине. Мин атайыма ҡарап ултыра инем. Ул ултырған камераның тәҙрәләре асыҡ, атайым тәҙрә төбөндә ултыра. Янында радиоприемник, наушниктар менән. Яҙышҡан ҡағыҙҙары ята. Ул саҡта сәйәси тотҡондарға мөнәсәбәт башҡасараҡ яҡшыраҡ булған, күрәһең. Әсәйем туҡтап һөйләшеп торорға ҡурҡа ине, шуға эргәнән былай-тегеләй үтеп кенә йөрөй. Әсәйем ағайым менән күп тапҡырҙар атайыма барып йөрөнөләр, әммә уларҙы индермәнеләр"* – ти Тойғон ағай.

Нуриәғзәм Таһиров нахаҡҡа ғәйепләүҙәренә протест белдереп, аслыҡ иғлан итә. 11 көндән һуң аяҡтан йығылғас, уны камеранан төрмә дауаханаһына носилка менән алып сығалар. *"Мине төрмәнең дауаханаһына, атайым янына индерҙеләр. Ул карауатта ята ине. Йөҙө ап-аҡ ине"*, – тип хәтерләй Тойғон Таһиров.

ОГПУ-ның коллегияһы Нуриәғзәм Таһировты төрмәгә ултыртырға тигән ҡарар сығара. Именлек органдарын тикшереүсе прокурор, Н. Таһиров советтарға ҡаршы пропаганда алып барған, тип, был ҡарарҙы үлем язаһы менән, йәғни атырға тигән хөкөм ҡарары менән алмаштыра. *"Әсәйем Сталинға хат яҙа. Ләкин уның хаты Башҡортостандан сыҡмай. Икенсе хатын таныштары аша Мәскәүгә ебәртә. Уныһы ла Башҡортостанға кире ҡайта. Архивта күрҙем ул хатты. Ахырҙа әсәйем үҙе Мәскәүгә барып Калининды күрә. Атайымдың үлем язаһы ҡарары 10 йыл төрмә менән алмаштырыла. Нисектер Өфө төрмәһенән атайымдың ҡалын ҡульяҙма дәфтәрен алып сыҡтылар. Ваҡ ҡына итеп ғәрәп хәрефтәре менән яҙылған ине. Ошо дәфтәрҙе 1937 йыл әсәйем менән еңгәм төндә аҙбарға инеп, һәр бер битен йыртып яндырҙылар. Унда нимә тураһында яҙылған булғандыр, белмәйем"*,- ти Тойғон ағай.

Күрәһең, Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте тарихы тураһындағы берәй китап булғандыр. Н. Таһировты 1930 йылдың ғинуарында этап менән алып китәләр. Лагерҙарҙа 8 йыл буйы йөрөп ҡайта. 1938 йылдың көҙөндә Өфөгә килеп, күп тә тормай, тыуған яғы Арғаяшта була ла, Урта Азия яҡтарына сығып китә. *"Мин иҫләүемсә, атайымдың Ҡырғыҙстандан бер-ике хаты килгәйне. Ул аҡса ла ебәргән тип әйтә ине еңгәм. Шунан һуң хәбәр булманы"*, – тип хәтерләй Тойғон Нуриәғзәм улы.

Н. Таһировтың ғаиләһенә лә яҙмыштың ауыр өлөшө төшә. Ире төрмәгә киткәндән һуң, Ғәйшә Таһирова өс балаһы менән ҡала. Ун йыл тирәһе ҙур ҡыйынлыҡ менән Өфөлә көн итә улар. 1940 йылда сараһыҙлыҡтан Таджикстанға, һеңлеһе янына сығып китә. 1942 йылда, 16 йәшлек ҡыҙы ауырып үлеп китә. Өлкән улы фронтта һәләк була. Өфөлә ҡалған улы Тойғон 1942 йылда әсәһе янына Тажикстанға бара. Бер айҙан һуғышҡа алып китәләр. Һуғыштан йөрөп ҡайтҡас, Тойғон Нуриәғзәм улы әсәһе янына китә. Тормоштоң ауырлыҡтары, иренең, ҡыҙының, өлкән улының үлемен кисергән Ғәйшә Таһирова 46 йәшендә генә

вафат була. Тойғон Таһиров Тажикстанда ҡалып, ғүмер буйы тыуған яғынан ситтә йәшәй. Тик 1995 йылда, 71 йәшендә генә, Башҡортостанға ҡайтып төшә.

Башҡорт милли хәрәкәте етәкселәренең береһе, Башҡортостанға үҙаллылыҡ яулау идеяһы янып йәшәгән, уны тормошҡа ашырыуҙа бик күп эштәр башҡарған. Ҡулына ҡорал алып та, ҡәләм менән дә Башҡортостан дәүләтселеге өсөн көрәшкән. Ошо эшмәкәрлеге өсөн унар йыл ғүмерен лагерҙарҙа үткәргән, ахырҙа, ҡорбан булған һәйкәлгә лайыҡ шәхестәребеҙҙең береһе ул Нуриәғзәм Таһир улы Таһиров.

**Сығанаҡтар:**


ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 42. Л. 31.
ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 10. Л. 13.
ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 107а. Л. 60а.
ЦГАОО РБ. Ф. 9776. Оп. 2. Д. 4. Л. 77.
ЦГАОО РБ. Ф. 1832. Оп. 4. Д. 294. Л. 10.
ЦГИА РБ, Ф. 1780. Оп. 1. Д. 11. Л. 65.
ЦГИА РБ. Ф. 1780. Оп. 1. Д. 9. Л. 13.
А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Кн. 1. Уфа, 2005. С. 54, 95, 118, 142–143, 309.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 1. Уфа, 2002. С. 142, 157,216, 218, 245, 254, .
Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 251, 269, 403, 486.
Книга памяти жертв политических репрессий Республики Башкортостан. Т. 5. Уфа, 2005. С. 10.
Кульшарипов М. М. Башкирское национальное движение (1917–1921 гг.). Уфа, 2000. С. 190.
Тагиров Т. Суровая проза жизни. – Уфа, 2004. С. 3–34.



**ХАФИЗ ҠУШАЕВ**
**1888 – 1938**

Хафиз Ҡушай улы Ҡушаев – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте етәкселәренең береһе, күренекле дәүләт эшмәкәре. 1888 йылдың 15 октябрендә Ырымбур губернаһы Силәбе өйәҙенең (1918–1934 йылдарҙа Башҡортостандың Арғаяш кантоны, хәҙер Силәбе өлкәһенең Арғаяш районы) Күҙәш ауылында тыуған.

1904 йылда Әшир ауылында мәҙрәсә тамамлағандан һуң, Ҡаҙан ҡалаһында мәҙрәсәгә уҡырға инә. Бында революцион эшмәкәрлек менән мауығып китә. “*1904–1905 гг. разразившаяся в России революция заставила очнуться воспитанников татаро-башкирских школ и в нашем медресе был организован культурно-просветительный кружок, целью которого было распростарнение идей гражданства, равноправия и т.д. Пользуясь указанной организацией под видом культурно-просветительных целей, читались лекции социал-демократами и эсерами во главе которых были Исхаков, Ямашев и др. Но моя молодость не дала мне тогда возможности в полном смысле углубиться в революционное движение, но все таки я получил многое и стал разбираться в тех или иных вопросах. За распространение слышанных мною среди башкир я в первый раз в жизни был взят в число неблагонадежных тогдашними властями. Официально в партии не состоял но за сочувствие социал-демократам я в числе 88 человек ыбл выгнан из медресе*”, – тип яҙа үҙенең автобиографияһында Ҡушаев.

Шулай итеп, 1908 йылда Хафиз Ҡушаевты мәҙрәсәнән ҡыуалар. Ә киләһе йылына әрмегә алына. Хәрби хеҙмәтте ул Силәбе ҡалаһында башлай. Тиҙҙән Х. Ҡушаев Омск ҡалаһына Уҡыу командаһына (унтер-офицерҙар курсына) ебәрелә. Омскиҙа уҡып ҡайтҡас, хеҙмәтте Силәбе ҡалаһында дауам итә. 1913 йылда Ҡушаев, хәрби хеҙмәтен тултырып, тыуған яғына ҡайта. Әммә Беренсе донъя һуғышы башланыу менән уны тағы әрмегә алалар. Тәжрибәле унтер-офицер Силәбе гарнизонында хәрби хеҙмәткә алынған башҡорт һалдаттарын һуғышҡа өйрәтә. Яҡшы хеҙмәт өсөн уға фельдфебель чины бирелә.

1917 йылдың Февраль революцияһын Хафиз Ҡушаев ҙур шатлыҡ менән ҡаршылай. Һалдаттар араһында үҙенең ялҡынлы революцион сығыштары менән абруй яулап ала. Апрель айында Ҡушаевты Силәбе гарнизонының мосолман һалдаттары I Бөтә Рәсәй крәҫтиән депутаттары съезына делегат итеп ебәрә. Съездан ул большевиктар идеологияһы менән рухланып ҡайта. Силәбе гарнизонына ҡайтып, һалдаттар араһында Ваҡытлы хөкүмәткә ҡаршы агитация алып бара башлай. Силәбе эшсе һәм һалдат депутаттары советы ағзаһы итеп һайлана. Был, әлбиттә, гарнизон етәкселегенә оҡшамай. Улар июль айында Х. Ҡушаевты фронтҡа оҙата. Революцион рухлы фельдфебель 1917 йылдың 25 декабренә тиклем Рига фронтында һуғышып йөрөй. Тәүәккәл егет бында ла тиҙ арала, һалдаттар араһында абруй яулап ала. Ул тәүҙә полк, артабан дивизия һуңынан 12-се армияның мосолман комитеты ағзаһы итеп һайлана. II Бөтә Рәсәй мосолман һалдтаттары съезында ҡатнаша.

1917 йылдың декабрендә Германия менән солох төҙөлөү айҡанлы Ҡушаев хеҙмәт иткән батальон Силәбе ҡалаһына ҡайта. Демобилизацияланғас, тыуған яғына ҡайтып, совет власы органдарын ойоштороуҙа әүҙем ҡатнаша. Советтарҙың 1918 йылдың 27–30 ғинуарында үткән Арғаяш кантоны съезында ул Арғаяш кантоны советы башҡарма комитетына һайлана. Әйткәндәй, кантондың идара органына күренекле Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте эшмәкәрҙәре Н. Таһиров, Ғ. Иркәбаев, Ғ. Мөхәмәтйәровтар ҙа инә. 1918 йылдың 25 апрелендә 2-се Кантон съезында Х. Ҡушаев Арғаяш кантон башҡарма комитетының ер эштәре буйынса бүлек мөдире итеп тәғәйенләнә.

27 майҙа Чехословак корпусы Силәбе ҡалаһында властьы үҙ ҡулына ала һәм шул уҡ көндө Арғаяш станцияһын баҫып ала. Әүҙем большевик булараҡ, Х. Ҡушаевҡа ҡасып, йәшеренеп йөрөргә тура килә. Ләкин оҙаҡ түгел. Июнь башында Силәбе ҡалаһында эш башлаған Башҡорт хөкүмәте Хафиз Ҡушаевты эшкә йәлеп итә. Ул 1918 йылдың июленән Арғаяш кантон башҡармаһы рәйесе булып эшләй. Бер үк ваҡытта ер эштәре бүлеге мөдире вазифаһын да башҡара. Большевистик ҡараште булһа ла Арғаяш кантоны етәксеһе булараҡ, Х. Ҡушаев Башҡортостан автономияһын ғәмәлгә ашырыу, Башҡорт хөкүмәте ҡарарҙарын үтәү буйынса ысын күңелдән бирелеп эшләй. 1918 йылдың 11 сентябрендә Ырымбурға, Башҡорт хөкүмәтенә ебәргән докладында Ҡушаев бына былай тип яҙа: *"Кантональная управа имеет честь довести до сведения Правительства, что на пути проведения в жизнь указаний Правительства Башкирии об автономном управлении, ей приходится сталкиватся с препятствиями в виде распоряжений разного рода учреждений, не являющихся представителями Правительства Башкирии и идущими вразрез с распоряжениями кантональной управы...*

*Докладывая о сем, кантональная управа просит указаний Правительства Башкирии – продолжать ли ей действовать в том же направлении по пути твердого и неуклонного проведения в жизнь порядка автономного управления, как в культурно-национальном, так и территориальном отношении, или же несколько изменить свое поведение в другую сторону.*

*Впредь же, до получения указаний Правительства Башкирии, кантональная управы от принятого ею направления отступать не намерена, а наборот, принимает меры более энергичные по проведению в жизнь автономии Башкирии во всех отношениях, не исключая и территориального.*

*Между прочими распоряжениями кантональной управой принят решительный шаг к изъятию из ведения земства школьное дело и все школьное имущество, приводится в известность и передается на временное хранение своим, башкирским должностным лицам, которые местами уже сдают это имущество заведующему отделом народного образования и учительскому персоналу, поставленным распоряжением кантональной управы.*

*Точно также сделано распоряжние волостным управам не исполнять никаких требований лиц и учреждений, не являющихся представителями Правительства Башкирии, относительно взыскания податей и взноса их в казначейство. В скором времени, как только в распоряжении кантональной управы будут денежные средства, управа приступит к приемке земских больниц и фельдшерских пунктов на территории Башкирии".*

Әммә сентябрь аҙағында Ҡорбанғәлиевтар Силәбе башҡорттарын Башҡорт хөкүмәтенә ҡаршы ҡоторта башлай. Урал корпусы штабы тарафынан ебәрелгән казактар, 8 октябрҙә Арғаяшҡа килеп, урындағы башҡорт ирекле отрядын ҡоралһыҙландыра, иртәгеһенә Арғаяш кантоны рәйесе Ҡушаев, кантондың ғәскәри начальнигы Мәғәсүмовты, бер үк ваҡытта Башҡорт хөкүмәтенең уполномоченныйы Муса Смаҡовты ҡулға алып, Силәбе төрмәһенә бикләп ҡуя. «*Силәбе төрмәһендә алты ай буйы ултырҙым, ақтарҙың тәфтиш комиссияһына ришүәт биреп, ireккә сыҡтым*», – тип яҙа Х. Ҡушаев үҙенең автобиографияһында.

1919 йылдың майында Саранскиҙағы Башревкомға барып ҡушыла. Бында ул Хәрби комиссариаттың ойоштороу-агитация бүлеге мөдире вазифаһын башҡара. 1919 йылдың авгусында Башревком эвакуациянан ҡайтҡас, Ҡушаев Арғаяш кантонына хәрби комиссар итеп ебәрелә. Бында ул РКП(б) оргбюроһын ойоштороп, уға етәкселек итә. Артабан Арғаяш кантоны башҡарма комитеты рәйесе булып эшләй.

1922 йылдың мартында Башҡортостан Үҙәк Башҡарма комитеты (БашЦИК) рәйесе итеп һайлана. Был юғары вазифаны Хафиз Ҡушаев ете йыл башҡара. Ошо осорҙа Башҡортостан дәүләтселеге үҫешә, нығына, Өфө губернаһы бөтөрөлөп, Көнбайыш Башҡортостан БАССР-ға ҡушыла.

1929 йылдың мартында тәжрибәле етәксене Мәскәүгә яуаплы эшкә, ВЦИК Президиумының милләттәр бүлегенә эшкә алына. Мәскәүгә килеү менән ВКП(б)-ның Үҙәк комитеты янындағы ике йыллыҡ марксизм-ленинимз курстарында уҡып ала. 1937 йылдың мартында Хафиз Ҡушаев "Власть Советов" нәшриәте директоры урынбаҫары итеп ҡуйыла.

1937 йылдың 19 июлендә Ҡушаев НКВД органдары тарафынан ҡулға алына. Уға Зәки Вәлиди менән бәйләнештә булыуы, шпионаж һ. б. ғәйептәр

тағыла. 1937 йылдың 27 сентябрендә Хафиз Ҡушаев СССР Юғары Советының Хәрби Коллегияһы ҡарары буйынса атыла. 1957 йылдың 30 июлендә реабилитацияланған.

## Сығанаҡтар:


ЦГИА РБ. Ф. 629. Оп. 1. Д. 2. Л. 141.

ЦГИА РБ. Ф. 935. Оп. 1. Д. 5. Л. 12.

ЦГИА РБ. 1780. Оп. 1. Д. 9. Л. 12.

ЦГИА РБ. Ф. 394. Оп. 9. Д. 17. Л.56.

А.А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Ч. 1. Уфа, 2005. С. 157, 162, 171, 340.

Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 1. Уфа, 2002. С. 246, 354.

Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 72, 354, 358, 359, 360–364, 375.

Кушаев К. Первый президент “Большой Башкирии” //Трудный путь к правде. Уфа, 1997. С. 151–163.

Хакимов Р. Ш. Земля Аргаяшская: история и современность. Челябинск, 2005. С. 70–87.

Валеев Д. Ж. Судьба аргаяшских башкир: история и современность. Уфа, 2002. С. 72, 74, 104.

Рәүеф Насиров. Уҙамандарҙы эҙләйем. Өфө, 1997. 212–252-се биттәр.



## ШӘҺИТ ХОҘАЙБИРҘИН
**1890–1924**

Шәһит Әхмәт улы Хоҙайбирҙин – Башҡортостан автономияһы аяҡҡа баҫҡан осорҙа, республика өсөн күп эшләгән шәхестәрҙең береһе, күренекле дәүләт эшмәкәре. 1896 йылдың 9 октябрендә Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙе (хәҙерге Башҡортостан Республикаһы Күгәрсен районы Хоҙайбирҙе ауылы) Бесәнсе ауылында тыуған.

Ш. Хоҙайбирҙиндың сәйәси эшмәкәрлек юлы үҙ заманы кеүек ҡатмарлы һәм ҡапма-ҡаршылыҡлы. 1917 йылғы Февраль революцияһынан һуң һул эсерҙар (социаль-революционерҙар) партияһында йөрөй. 1918 йылдың мартында коммунистар партияһы сафтарына инә. Ул Башҡортостан автономиялы республикаһын ойоштороу хәрәкәтенә большевиктар лагерынан килеп ҡушылған берҙән-бер билдәле башҡорт дәүләт эшмәкәре тип әйтһәк, бер ҙә яңылыш булмаҫ.

Сөнки 1917 йылда, башҡорттоң бөтә алдынғы ҡарашлы эшмәкәрҙәре Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәткә тупланған мәлдә, Шәһит Хоҙайбирҙин ошо автономияға ҡаршы булған большевиктарҙың Өфө губерна Татар-Башҡорт комиссариатында ағзаһы булып, Татар-Башҡорт Республикаһы яҡлылар лагерында йөрөй. Ул большевик булараҡ совет платформаһындағы Татар-Башҡорт республикаһы башҡорт халҡына бәхет килтерер тип инанғанмы? Уныһын әйтеүе ҡыйын.

1919 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡан осорҙа, уның етәксеһе Зәки Вәлидиҙе автономия исеме менән башҡорт халҡын алдап, үҙен хан итеп күрергә тырышҡан әҙәм, тип тәнҡитләп яҙып сыға. Әммә башҡорт ғәскәрҙәре ҡыҙылдар яғына сыҡҡандан һуң булып үткән фажиғәле ваҡиғалар – Ҡыҙыл Армия тарафынан башҡорт халҡының ныҡ йәберләнеүе, башҡорт һалдаттарына ҡарата ҡанлы репрессиялар Шәһит Хоҙайбирҙиндың большевиктар власына ҡарата мөккибән ҡарашын ҡаҡшатмай ҡалмағандыр. Зәки Вәлиди етәкселегендәге Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡарата ла мөнәсәбәте үҙгәргәндер, автономия өсөн көрәштең асылын аңлай башлағандыр, күрәһең.

Архив документтарынан күренеүенсә, Зәки Вәлиди Шәһит Хоҙайбирҙинды ситкә этәрергә тырышмаған. Мәҫәлән, 1919 йылдың йәйендә Вәлиди Бәләбәйҙә ойошторолоп ятҡан Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһына гәзит сығарып таратыу өсөн Хоҙайбирҙинға мөрәжәғәт итә. Был осорҙа Ш. Хоҙайбирҙин Стәрлетамаҡ оборона советы янында Башревком вәкиле булып хеҙмәт итә. Башҡорттарҙың ерҙәрен тартып алыу осраҡтары башланғас, Вәлиди уларға ярҙам итеүҙе Хоҙайбирҙинға йөкмәтә.

Артабан инде Ш.Хоҙайбирҙин Башҡортостан автономияһының урындағы идара органдарын ойоштороу эшенә йәлеп ителә. Тәүҙә Бөрйән-Түңгәүер кантоны ревкомы ағзаһы итеп һайлана, һуңынан кантон етәксеһе итеп тәғәйенләнә. 1920 йылдың мартында Башҡортостан кантон ревкомдары съезында Зәки Вәлиди менән бергә эшләй. Съезд рәйесе итеп һайлана.

1920 йылдың июнендә Вәлиди етәкселегендәге Башҡорт хөкүмәте ВЦИК-тың 19 майҙағы декретына (был декрет менән Мәскәү Башҡортостандың автономия хоҡуҡтарын ҡырҡа сикләй) ризаһыҙлыҡ белдереп, эшенән китә.

Башҡортостан автономияһын большевиктар бөтөргән, тигән хәбәрҙе ишеткән башҡорт халҡы (Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең төп тетәрге булған көньяҡ-көнсығыш башҡорттары) күтәрелеп, сыға. Мәҫәлән, 1-се һәм икенсе Түңгәүер улысының һәр бер ауылында тиерлек йыйылыштар үткәрелеп, бөтә халыҡ исеменән Мәскәүгә Милләттәр эштәре буйынса халыҡ комиссариатына телеграммалар ебәрелә. Яңы Башревком күтәрелеште көс менән баҫырға уйлай. Был ҙур ихтилалдың тоҡаныуына сәбәпсе була. Ул Бөрйән-Түңгәүер кантонында ҡабына. Көндән-көн үҫә барған күтәрелеште баҫтырыу өс бригада һәм БашЧК-ның 1200 кешелек батальоны йәлеп ителә. Тағы ла 1919 йылдың февраль-март айҙарындағы кеүек башҡорт халҡына ҡарата асыҡтан-асыҡ террор башлана. ЧК отрядтарының бер командиры Поленов ысын мәғәнәһендә «Тәфтиләү»гә әүерелә. Мәҫәлән, ул 16 июлдә кантон ревкомы ағзаларын Баймаҡҡа алып барып аттыра.

Шәһит Хоҙайбирҙин отпускы һылтауы менән сығып Бөрйән-Түңгәүер кантонындағы ҡот-оскос хәлдәр тураһында Мәскәүгә хәбәр итергә тырышып ҡарай, әммә уны Темәс ауылы гарнизоны начальнигы ауылда ҡалдыра.

Көслө террорға ҡарамаҫтан, ихтилал баҫылыу түгел, киреһенсә һуғыш әүерелә башлай. С. Мырҙабулатов, Ғ. Амантаев, Ғ. Мәғәсүмовтар баш күтәреүселәрҙе берләштереп, ике дивизиянан торған армия төҙөй, Реввоенсовет ойоштора. Һуғыш төҫөн ала барған ихтилалға ҡаршы яңы ревком бер ни эшләй алмай. Был эшкә тиҙҙән Мәскәү ҡыҫыла. Үҙәк ихтилалды хәрби көскә таянып түгел, ә тыныс юлдар менән туҡтатыу кәрәклегенә инана. Ошо уҡ мәлдә Польша фронтынан Муса Мортазин ҡайтып төшә һәм ихтилалды туҡтатыу эшенә ҡушыла. 1920 йылдың көҙөндә баш күтәреүселәр менән килешеү төҙөлә.

Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитеты (БашЦИК) рәйесе итеп Муса Мортазин ҡуйыла, 1921 йылдан был вазифаны Шәһит Хоҙайбирҙин йөкмәтелә. Артабан ул РКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты сәйәси сәркәтибе, Эске

эштәр халыҡ комиссары, БАССР Халыҡ Комиссарҙары Совет рәйесе урынбаҫары кеүек яуаплы вазифалар башҡара.

Шулай итеп, Шәһит Хоҙайбирҙин Зәки Вәлиди етәкселегендәге Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте яуланған автономияны аяҡҡа баҫтырыуға, нығытыуға күп көс һалған, Зәки Вәлидиҙән һуң эстафетаны алған эшмәкәрҙәрҙең береһе булып китә. Ҡыҫҡа ғына ғүмерендә эсендә башҡорт халҡы өсөн тарихта ҡалырлыҡ эштәр башҡарып ҡала. Башҡорт әҙәби телен булдырыуҙа, башҡорт әҙәби телен дәүләт теле булараҡ ғәмәлгә индереүҙә, башҡорт матбуғат үҫтереүҙә баһалап бөткөһөҙ эш башҡара.

Бөгөн Рәсәй кимәлендә граждандар һуғышы осоронда ҡыҙылдар йә аҡтар яғындағы эшмәкәрҙәрҙе бер-беренә ҡаршы ҡуйып һаман да ҡыҙыу бәхәстәр барһа, Зәки Вәлиди, Шәһит Хоҙайбирҙин, Муса Мортазин һәм башҡа шәхестәребеҙҙең һәр береһе Башҡортостан тарихында үҙ урынын алған. Сөнки улар халҡыбыҙҙың яҡты киләсәге өсөн янып йәшәгән.

## Сығанаҡтар:


ЦГИА РБ. Ф. 394. Оп. 1. Д. 233. Л. 3–4.

Национально-государственное устройство Башкортостана. Т. 2. Ч. 2. Уфа, 2003. С. 234, 317, 490.

Шунда уҡ. Т. 3. Ч. 1. Уфа, 2004. С. 570,

Мардамшин Р.Р. Башкирская чрезвычайная комиссия (Страницы истории). Уфа, 1999. С. 68–70.

Ярмуллин А.Ш. Автономия өсөн көрәшкән большевик // Йәшлек. 2006, № 42.



## ӘХМӘҘУЛЛА БЕЙЕШЕВ
## 1896 – 1937

Әхмәҙулла Әлмөхәмәт улы Бейешев – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан башҡорт офицерҙарының береһе, һуңынан күренекле дәүләт эшмәкәре. 1896 йылдың 24 февралендә (икенсе сығынаҡтарҙа 3 мартта тиелә) Ырымбур губернаһы Орск өйәҙе (хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районы) 5-се Үҫәргән улысының Иҙелбай ауылында тыуған.

Ырымбурҙа Уҡытыусылар семинарияһын тамамлай. 1916 йыл хәрби хеҙмәткә алынып, Беренсе донъя һуғышында ҡатнаша. 1917 йылда Чугуев хәрби училищеһын тамамлап, подпоручик званиеһын ала.

1917 йылдың декабрендә отпускыға ҡайтҡан подпоручик Бейешевты Башҡорт хөкүмәтенә эшкә саҡырылар. 1918 йылдың ғинуарында хөкүмәттең ҡушыуы буйынса Ә. Бейешев башҡорт офицерҙары Ғ.Мағазов, Ә. Ҡарамышев, М. Ҡарамышевтар, менән бергә автономияның хәрби көстәрен булдырыу маҡсатында, Бөрйән-Түңгәүер кантонына юллана. Бында улар тарафынан 400 кешелек башҡорт отряды ойошторола. Февраль айында Башҡорт хөкүмәте ҡулға алынып, Баймаҡтағы отряд ҡыйратылғас, подпоручик Бейешевҡа йәшеренеп йөрөргә тура килә.

1918 йылдың июнендә Силәбелә барып урынлашҡан Башҡорт хөкүмәте регуляр ғәскәр менән бер рәттән урындарҙа иректе отрядтар ойоштороу эшенә тотона. 1918 йылдың 1 июлендәге Башҡорт хәрби шураһының фарманында “*урындарҙа тәртип урынлаштырыу һәм большевиктар менән көрәш алып барыу маҡсатында*” айырым башҡорт отрядтарын ойошторорға тиелә.

Әлбиттә, граждандар һуғышы барған осорҙа Башҡортостан автономияһының урындағы власть органдары эшен тәьмин итеү, ябай халыҡты төрлө йәберләүҙәрҙән ҡурсалау өсөн ҡоралды көс ойоштороу көнүҙәк мәсьәләгә әүерелә. Милли хәрәкәт етәкселеге быны яҡшы аңлай. Сөнки ҡыҙылдар һәм монархистик рухтағы аҡтар ҙа Башҡортостан автономияһын танып бармай, кантондарҙа үҙ хөкөмөн ҡылырға тырыша. Шуға күрә лә был отрядтар Башҡортостан хөкүмәтенең Хәрби бүлегенә буйһондорола. Һуғыш тамамланғас,

был отрядтар даими милицияға әүерелеп, Башҡортостан хөкүмәтенең Эске эштәр бүлеге ҡарамағына күсергә тейеш була.

Ирекле отрядтарҙы ойоштороу һәм уларҙың эшен көйләү өсөн Башҡорт хәрби шураһында Ирекле отрядтар бүлеге булдырыла. Ирекле отрядтарҙы ойоштороу эше подпоручик Әхмәҙулла Бейешевҡа йөкмәтелә. Ул Ирекле отрядтар бүлеген етәкләй.

Силәбелә урынлашҡан Башҡорт хөкүмәте, ирекле отрядтар ойоштороу эшен яйға һалыу өсөн Әхмәҙулла Бейешев менән Сәғит Мерәҫовты Ырымбурға ебәрә. Бында улар, Башҡорт хөкүмәтенең Ырымбур хәрби бүлеген ойоштороп, кантондарҙа отрядтар төҙөү эшенә тотона. Ирекле отрядтарҙы кантондарҙың идараһы янында ойоштороу ҡарала. *"Башҡорт хәрби бүлеге Әхмәт Бейешев менән Сәғит Мираҫовҡа, комсостав кадрҙары етәкселегендә кантондарға үҙ вәкилдәрен ебәреп, ирекле отрядтар ойошторорға ҡушты. Халыҡ бындай отрядтарҙың төҙөлөүен хуплап ҡаршы алды. Ирекләләр отрядҡа ҡоралдары, үҙ аттары менән килде һәм урындағы халыҡ иҫәбенә йәшәне"*, – тип яҙа үҙенең китабында Муса Мортазин. Архив документтарынан күренеүенсә, ысынлап та ирекле отрядтар ойоштороу ниәте кантондарҙағы халыҡтың хуплауын таба. 1918 йылдың июль-август айҙарында Башҡорт Хәрби шураһы һәр кантонға вәкилдәр ебәрелеп, әүҙем рәүештә отрядтар төҙөлә башлай.

Әйткәндәй, ошондай отряд ойоштороу бурысы менән прапорщик А. Ғәлиев менән бергә мәшһүр йырсы Ғәзиз Әлмөхәмәтов та Ҡыпсаҡ кантонына, йәғни йырсының тыуған яғына, ебәрелә. Ошондай уҡ бурыс бөйөк шағир, азатлыҡ йырсыһы Шәйехзада Бабичҡа ла йөкмәтелә. Улар Сәйетгәрәй Мағазов менән Өфө губернаһында башҡорт отрядтары ойошторорға тигән тейеш була. Уның ҡәләмдәше Ғәбделхай Иркәбаев Бөрйән-Түңгәүер кантонында отряд ойоштороуҙа ҡатнаша. Ирекле отрядтар ойоштороу өсөн хөкүмәт вәкилдәре менән бергә офицерҙар – инструкторҙар ебәрелә.

Һөҙөмтәлә, бер-ике ай эсендә Башҡортостандағы (ул ваҡытта ҡоролтай ҡарары буйынса автономияның урындағы власть органдары Бәләкәй Башҡортостан территорияһында ғына ойошторолған була) 13 кантонда ирекле отрядтар төҙөлә. Был отрядтарҙың һәр береһе шул кантондарҙың исеме менән аталып йөрөтөлә. Һәр бер отряд 150-нән алып 400-гә яҡын кешенән тора. Мәҫәлән, Табын ирекле отрядында 200 кеше, Дыуанда – 200 кеше, Арғаяшта – 200, Юрматыныҡында – 250 кеше, Ҡошсо кантонында ла 250 кешелек отряд төҙөлә. Көҙәй отрядында 100 кеше булһа, Үҫәргән һәм Туҡсоранда – 160-шар кеше иҫәпләнә. Бөрйән-Түңгәүер, Ҡыпсаҡ һәм Ялан (хәҙерге Ҡурған өлкәһе) кантондарындағы отрядтар 180-шәр кешенән тора. Иң ҙур отрядтар Ете ырыу менән Тамъян-Ҡатай кантондарында ойошторола. Бындағы отрядтар 300 кеше тәшкил итә. Башҡорт хәрби шураһы тарафынан ирекле отряд етәкселәре итеп, ғәҙәттә, офицерҙар һәм прапорщиктар ҡуйылған. Отряд етәксеһе янында ярҙамсыһы һәм өлкән һәм кесе инструкторҙар булған.

Был отрядтар тулыһынса халыҡ иҫәбенә ойошторолған һәм көн күргән, тип уйларға ярамай. Башҡорт хәрби шураһы тарафынан ирекле отрядтар аҡса, кейем-һалым (обмундирование), һәм башҡа кәрәк яраҡтар менән тәьмин

ителә. Ирекле отрядтарҙың урындағы халыҡ иҫәбенә йәшәүенә килгәндә, Хәрби шураның фарманында: “*Разрешается начальникам отрядов принимать всякого рода пожертвований кроме денежных*”, – тиелә.

Шулай итеп, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә Башҡорт хөкүмәте ике пехота дивизияһы һәм бер кавалерия полкынан торған Башҡорт корпус менән бер рәттән һәр кантонда ирекле отрядтар ойоштороуға өлгәшә. М. Мортазин 1918 йылдың июненән октябренә тиклем был отрядтарҙың һаны 3,5 меңгә етте, тип билдәләй.

Был отрядтар Башҡортостан автономияһының урындағы власть органдарының эшен тәьмин итеү һәм ябай халыҡты талап йөрөгән ҡыҙыл отрядтарҙан ҡурсалау йәһәтенән ҙур әһәмиәткә эйә була. Был хаҡта Әхмәтзәки Вәлиди ҙә үҙенең хәтирәләрендә: “*Июлдә Әхмәт Бейешев етәкселегендә милиция ойоштора башланыҡ. Милиция тәшкиләте, мәмләкәт эсендәге большевик отрядтарын ҡыуып, тәртип урынлаштырыу менән шөғөлләнәсәк. Был тәшкиләт үҙ вазифаһын уңышлы башҡарҙы, большевиктарҙың һәр ерҙә ҡалдырған йәшерен ойошмаларын табып, юҡ итте*”, – тип яҙа. Ошо отрядтар ярҙамында һуғыш барған осорҙа ла Ырымбурҙағы Башҡортостан хөкүмәте алыҫ ятҡан кантондары менән тығыҙ бәйләнештә була. Бер һүҙ менән әйткәндә, ирекле отрядтар хөкүмәткә ныҡлы терәк, тыл булып хеҙмәт итә.

Бындай хәл Башҡортостан автономияһын танырға теләмәгән аҡ генералдарҙың алҡымына арҡыры торған ҡылсыҡ кеүек була. “*Башҡортостанда ҡеүәтле көс булып үҫә барған ирекleләр отрядтарынан шөрләп, Дутов уларҙы таркатыу, туҙҙырыу өсөн бөтәһен дә эшләп ҡараны: был отрядтарҙы фронтка ебәреүҙе талап итте, хәрәкәт итеүсе башкорт частарын улар менән тулыландырыуға саҡырҙы. Быны менән Дутов Башҡорт хөкүмәтен хәлһеҙләндерергә теләй ине*”, – тип яҙа М. Мортазин.

Хәрби-стратегик йәһәттәнме, әллә Дутовтың талабы менән ризалашыпмы, Башҡорт хәрби шураһы 1918 йылдың 7 октябрендәге фарманы менән Бөрйән-Түңгәүер, Үҫәргән, Ҡыпсаҡ, Етеырыу, Туҡ-Соран кантондарындағы отрядтарҙы 2-се Башҡорт ирекле кавалерия полкына туплаrға бойора. Хәрби шураның Ирекле отрядтар бүлеге бөтөрөлә, уның етәксеһе Әхмәҙулла Бейешев полктың командиры итеп тәғәйенләнә. Полк командиры фарманы менән кантондарҙағы отрядтар 2-се полктың эскадрондары итеп үҙгәртелә, уларҙың етәкселәре эскадрон командирҙары булып китә. Башҡорт хәрби шураһы фарманы менән полкка, Кесе ҡоролтай ағзаһы, 1918 йылдың февралендә Баймаҡта ҡыҙылдар тарафынан үтерелгән ҡаһарман сардар, поручик Ғабдулла Иҙелбаевтың исеме бирелә.

Подпоручик Бейешев 2-се Башҡорт кавалерия полкы командиры сифатында, 1918 декабренән 1919 йылдың февраленә тиклем ҡыҙылдарға ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша. Яуҙа күрһәткән ҡаһарманлыҡтары өсөн Әхмәҙулла Бейешевҡа ромистр званиеһы бирелә.

1919 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡас, элекке ирекле отрядтар (милиция) етәксеһе Әхмәҙулла Бейешевҡа шундай уҡ юҫыҡтағы бурыс йөкмәтелә. Уны БашЧК (Башҡортостандың Ғәҙәттән

тыш комиссияһы) рәйесе тәғәйенләйҙәр. Хәҙер уға совет власының тәртип һаҡлау органдарын ойоштороорға кәрәк була. Әммә был вазифала ул оҙаҡ эшләп өлгөрмәй. 1919 йылдың май аҙағында уны 1-се Армия хәрби революцион трибуналы янындағы Башревком вәкиле Таһир Имаҡов эргәһенә икенсе вәкил итеп ебәрелә. Бында улар ҡыҙылдарҙың урындағы халыҡты йәберләүенә сик ҡуйыу, баш-баштаҡланған ҡыҙыл командирҙарҙың эшен армия етәкселегенә еткереү, яуаплылыҡҡа тартырыу өсөн ебәрелә. Әммә бында Башревком вәкилдәренә ҡолаҡ һалып бармайҙар. *"Трибунал очень мало имеет касательства к делам башкир и о дипломатических отношениях между Башревкомом и Первой армией представления почти не имеют, а потому фактической пользы ревкому представительство при трибунале не приносит, хотя бы по делу т. Воробьева и др. Относительно дела Воробьева и др. известно, что трибунал армиии не будет разбирать и судить, а только передаст материалы в высший трибунал, если этого захотят"*, – тип хәбәр итә Әхмәҙулла Бейешев Башҡортостандың хәрби комиссары Әхмәтзәки Вәлидовҡа.

Артабан Әхмәҙулла Бейешев 1919 йылдың июнь айында Дәүләт контроле халыҡ комиссары итеп тәғәйенләнә. 1920 йылдан Социаль тәьминәт һәм хеҙмәт комиссары вазифаһын башҡара. 1921 йылдың ғинуарынан Автономиялы Башҡорт Совет Республикаһы хөкүмәтенең башлығы – Халыҡ Комиссарҙары Советы (Башсовнарком) рәйесе булып китә. 1921 йылдың июленән ноябренә тиклем РКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитетының яуаплы сәркәтибе булып эшләй. Был осорҙа Әхмәҙулла Бейешев башҡорт теленең дәүләт теле булараҡ ғәмәлгә ашырыу эшенә күп көс һала. 1924 йылда ул Халыҡ мәғарифы комиссары, 1925 йылдан БАССР-ҙың финанс комиссары урынбаҫары вазифаһын үтәй.

Артабан Мәскәүгә эшкә алына. 1935 йылда И. В. Сталин исемендәге Бөтә Союз сәнәғәт академияһын тамамлай. Мәскәүҙәге М. В. Фрунзе исемендәге Үҙәк аэродромдың төҙөлөш начальнигы булып эшләй. Ҡулға алыныр алдынан Бөтә союз промысл кооперацияһы советында консультант булып йөрөй.

Уны территористик ойошмала ҡатнашыуҙа ғәйепләп, 1937 йылдың 20 июнендә ҡулға алалар. Өс ай төрмәлә тотҡандан һуң, 27 сентябрҙә СССР Юғары Советының хәрби коллегияһы ҡарары Әхмәҙулла Әлмөхәмәт улы Бейешев үлем язаһына хөкөм ителә. Хөкөм ҡарары шул көндә үк атҡарыла. Мәскәүҙең Донской зыяратында ерләнгән. 1957 йылдың 31 октябрендә шул уҡ Хәрби коллегияның ҡарары менән реабилитациялана.

**Сығанаҡтар:**

ЦГИА РБ. Ф. Р-78. Оп. 1. Д. 1. Л. 1.
ЦГАОО РБ. Ф. 9776. Оп. 2. Д. 3. Л. 31.
ЦГИА РБ. Ф. 933. Оп. 2. Д. 26. Личное дело Биишева А. А.
ЦГИА РБ. Ф. 394. Оп. 1. Д. 233. Л. 25.
А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Ч. 1. Уфа, 2005. С. 262, 274, 350.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 1. Уфа, 2002. С. 310, 316, 317.

Шунда ук. Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 273, 399, 416, 429.
Мардамшин Р. Р. Башкирская чрезвычайная комиссия (Страницы истории). Уфа, 1999. С. 14–16.
Мардамшин Р. Из когорты борцов // Ватандаш. 1997. № 12.
www.lists.memo.ru



# ҒӘЛИМЙӘН ТАҒАН
## 1892 – 1949

Ғәлимйән Ғирфан улы Таған – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәктендә әүҙем ҡатнашҡан башҡорт офицерҙарының береһе, Зәки Вәлидиҙең яҡын көрәштәше һәм дуҫы, ҡаһарман сардар. 1892 йылдың 1 ғинуарында Ырымбур губернаһы Силәбе өйәҙе Ҡатай улысының (хәҙер Ҡурған өлкәһенең Әлмән районы) Тәңреғол ауылында тыуған. Ғәлимйән Таған тәүҙә ауыл мәҙрәсәһендә, артабан Рус-башҡорт мәктәбендә уҡый. Һуңынан Уҡытыусылар семинарияһын тамамлай һәм урыҫ булмаған мәктәптәрҙә урыҫ телен уҡыусыһы исемен алып, уҡытып йөрөй.

Беренсе донъя һуғышы башланыу менән Ғ. Таған хәрби хеҙмәткә алына. Уны Семинария бөткән уҡытыусы булараҡ, хәрби мәктәпкә ебәрәләр. Тифлис ҡалаһында хәрби мәктәпте тамамлағандан һуң, прапорщик чины алып, Кавказ фронтында хеҙмәт итә. 1917 йылда революциянан һуң тыуған яғына ҡайта.

Архив документтарынан, Зәки Вәлидиҙең хәтирәләренән күренеүенсә, Ғәлимән Таған 1918 йәйендә Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәктенә ҡушылып китә. Ләкин ул 1917 йылда башҡорт ҡоролтайҙарында, һис юғында, III Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайында ҡатнашҡан булыуы ла мөмкин.

1918 йылдың май аҙағында Чехословак корпусы большевиктарға ҡаршы баш күтәреп, Силәбе ҡалаһында власты үҙ ҡулына ала. Оҙаҡламай бында Башҡорт хөкүмәте үҙенең эшмәкәрлеген яңынан башлай. Чехтар ярҙамында башҡорт ғәскәрҙәре ойоштороla башлай. Ошо эштә әүҙем ҡатнашҡан башҡорт офицерҙарының береһе – прапорщик Ғәлимйән Таған була. Зәки Вәлиди уны Силәбе халыҡ власы янындағы Башҡорт хөкүмәте вәкиле итеп тәғәйенләй. 12 июнь, башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороуҙағы идара органы булараҡ, хөкүмәттең Хәрби бүлеге мөдире Зәки Вәлиди етәкселегендә Башҡорт хәрби шураһы (һуңынан ул “Башҡорт ғәскәре штабы” тип аталып йөрөтөлә) булдырыла. Башҡорт офицерҙары подпоручик Ғ. Ғәбитов, прапорщик Ғ. Мөхәмәтйәровтар менән бергә Ғ. Таған да хәрби шураның ағзаһы итеп һайлана.

Документтарҙан күренеүенсә, 1918 йылдың июлендә З. Вәлиди Ғ. Тағанды яңы ойоштороla башлаған 5-се Башҡорт пехота полкына командир итеп

тәғәйенләй. Әммә оҙаҡламай ул Златоуст өйәҙендә ойошторолоп ятҡан 3-сө Башҡорт пехота полкына, подполковник Тереғолов янына ярҙамға ебәрелә. 1918 йылдың сентябрендә, Тереғолов 1-се Башҡорт пехота дивизияһы начальнигы итеп ҡуйылыу айҡанлы, 3-сө Башҡорт полк командиры командиры бурысы прапорщик Тағанға йөкмәтелә.

3-сө полкка командир итеп тәғәйенләнгәнгә тиклем Ғәлимйән Таған тыуған яғына ҡайтып, үҙенең тыуған ауылы Тәңреғолда Ялан кантонының башҡармаһы ойоштороп, уның рәйесе булып тора.

1918 йылдың октябрендә Һамар хөкүмәтенең Халыҡ армияһын ҡыҙылдар ҡыҫа башлай. Армияның баш командующийы генерал Галкин Себер хөкүмәтенән башҡорт частарын ярҙамға ебәреүҙе үтенә. Оҙаҡламай Ғ. Тағандың полкы Һамар фронтына ташлана. Бында 3-сө Башҡорт полкы В. Каппель корпусы составында ҡыҙылдарға ҡаршы ҡаты һуғыштарҙа ҡатнаша. Өфө яғына сигенгән Халыҡ армияһы ғәскәрҙәренең сигенеүен тәьмин итә.

Зәки Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә «Өсөнсө полктың хәле», тип аталған бүлектә Ғәлимйән Таған етәкселек иткән 3-сө полктың хәрби хәрәкәттәре тураһында ентекле яҙа: *“7 октябрҙә башҡорттар чехтар менән бергә Һамарҙы ҡалдырҙы. Бынан һуң полковник Таған етәкселегендәге полк, полковник Каппель частары менән берлектә, Бөгөлмә тирәһендәге Төпкилде ауылы янында ҡыҙылдарға ҡаршы бик ҡаты һуғышта ҡатнашты...*

*...Туп-тура Мәскәүҙән ебәрелгән ҡыҙыл батальондар ҡыҫымы аҫтында французлар менән Каппель ғәскәрҙәре сигенде. Был хәлдә беҙҙең өсөнсө полк та Өфөгә, унан һуң Өфөнөң көнсығышына китергә мәжбүр булды”*, – яҙа Вәлиди.

1919 йылдың ғинуар башына Зәки Вәлиди башҡорт ғәскәрҙәренең бөтәһен тиерлек үҙенең ҡулы аҫтында туплауға өлгәшә. Полктар ике дивизиянан торған Башҡорт корпусына берләштерелә. Каппель корпусында йөрөгән 3-сө Башҡорт уҡсы полкы ғына ситтә тороп ҡала. Шулай ҙа, корпус командалығы 18 февралгә тиклем 3-сө полктың башҡорт ғәскәрҙәренә килеп ҡушылырына өмөтөн өҙмәй. Хатта уны корпустың 2-се дивизияһына инәсәк тип планлаштыра.*“В состав 2-й дивизии должны войти: 5-й Башкирский стрелковый полк, 6-й Башкирский стрелковый полк, 2-й Башкирский кавалерийский имени Абдуллы Идельбаева полк и 3-й Башкирский стрелковый полк, по прибытии его из Уфимского фронта”*, – тиелә.

Әммә аҡтар Ғәлимйән Тағандың полкына Башҡорт корпусына барып ҡушылырға мөмкинлек бирмәй. 18 февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власына сыҡҡас, Колчак 3-сө Башҡорт полкын бөтөнләй таратырға бойора. *“Полктың бер өлөшө Ләмәҙ исемле рус ауылында – Таған, икенсе өлөшө Һатҡы заводында Һарун Ҡорбанғәлиев етәкселегендә булды һәм Колчактың ҡоралды тапшырырға ҡушҡан әмеренә буйһонмай, ике аҙна ҡаршылыҡ күрһәтте. Колчак ризыҡ ягын да ҡыҫты һәм һалдаттарға ауылдарына таралырға бойороҡ бирҙе. Таған менән Һарун Ҡорбанғәлиев, ҡалын ҡар яуған ҡыш айҙары булмаһа, Колчак әмерен тыңламай, төп башҡорт ғәскәрҙәренә килеп ҡушылыр инек, тип рапорт бирҙе”*, – тип яҙа Вәлиди.

Ахыр сиктә, 3-сө Башҡорт уҡсы полкы ҡорал һалырға мәжбүр була. 1919 йылдың 2 мартында Ғәлимйән Таған 3-сө полктың хәле тураһында аҡ генералдарҙың береһенә былай тип яҙа: *"Сообщаю Вам нижеследующие подробности последних событий: с Валидовым перешли к красным 1-й, 2-й, 3-й, 4-й и 5-й пехотные Башкирские полки. Остались на нашей стороне партизанские отряды (в которых было свыше 2000 штыков) и наш полк (3-й башкирский), находящийся в корпусе генерала Каппеля, а потом переданный, очевидно с целью расформирования, в 6-ю Уральскую дивизию, т.к. Каппель не согласился бы сделать этого.*

*Переход Валидова был удобным предлогом к выполнению намеченной цели и наш 3-й полк был расформирован. Тяжелое впечатление осталось, когда отнимали у нас 27 пулеметов, добытых нами у красных, и так же 7 походных кухонь и около 100 лошадей, необходимых для полка, это было еще до расформирования. При расформировании было у нас только 670 человек, т.к. мы во время боев, из-за слабости вооружения, потеряли около 1200 человек. Из этих 670 остались в армии человек 120, а все остальные, близкие к своим домам, расходились в полном разочаровании".*

1919 йылдың йәйендә Ғәлимйән Таған генерал Беловтың Көньяҡ армияһында хеҙмәт итә. Август айында ҡыҙылдар Колчак армияһын Башҡортостан территорияһынан ҡыҫырыҡлап сығара. Колчак армияһының төрлө частарындағы 2 меңдән ашыу башҡорт һалдаты менән бергә поручик Таған да көнсығышҡа сигенә. 1920 йылдың март башында башҡорттар Чита ҡалаһына килеп етә. Ғәлимйән Таған менән Ғәбделхай Ҡорбанғәлиев башҡорт һалдаттарын бер урынға туплау ниәте менән аҡ генералдар менән һөйләшеүҙәр башлай. 14 март Ҡорбанғәлиев атаман Семенов менән һөйләшеп, башҡорттарҙы уның ғәскәрҙәре сафында туплауға ризалыҡ ала. 16 апрелдә барон Унгерндың саҡырыуы буйынса Таған менән Ҡорбанғәлиев Даурияға барып, уның Азия дивизияһы составында башҡорт ротаһын ҡарап ҡайталар.

1920 йылдың 14 июнендә Чита ҡалаһында башҡорт вәкилдәренең кәңәшмәһе булып үтә. Унда Башҡортостандың 8 өйәҙенең вәкиле булараҡ 20 кеше ҡатнаша. Йыйылышта Башҡорттарҙың Рәсәйҙең Көнсығыш ситендәге хәрби-милли идараһын ойоштороу мәсьәләһе күтәрелә. Оҙаҡламай башҡорттар атаман Семенов ярҙамы менән был ниәтте тормошҡа ашыра. 1920 йылдың 22 июнендә Семенов үҙенең фарманы менән башҡорттарҙың хәрби-милли идараһын ойоштора. Ошоноң менән бер рәттән ул аҡ армия сафтарында Башҡорт ғәскәрен төҙөүгә ризалыҡ бирә. Хәрби-милли идараның рәйесе итеп Ғ. Ҡорбанғәлиев тәғәйенләнә. Ә бына идаралыҡтың штаб начальнигы вазифаһына һәр генерал үҙ кешеһен ҡуйырға тырыша. *"27 июня приказом председателя военно-национального управления башкир Рос. Вост. Окр. за № 1 по Башкирскому войску было объявлено об открытии действий Военно-национального управления башкир Рос. Вост. Окр. в гор. Чите.*

*Затем шли переговоры о назначении начальника штаба Управления и ввиду важности той роли, которую мог сыграть начштаб, все группировки и*

*высокопоставленные лица обратили на это очень серьезное внимание и каждый из них старался провести своего кандидата. Штаб походного атамана стоял за то, чтобы назначен был офицер Генерального штаба. Заместитель атамана оренбургских казаков, ген. Анисимов предлагал кандидатуру полковника Кручинина, начдив 1-й Уфимской ген. Бангерский предлагал из генерального штаба полковника Михайлова и много было других кандидатов, предлагаемых со стороны различных лиц из командного состава и штабов.*

*Но приказом председателя Военно-национального управления за № 1 по штабу Управления от 1 июля был допущен к временному исполнению должности начальника штаба Управления поручик Таганов*", – яҙа "Башкиры в Забайкалье" тигән хеҙмәтендә Ғ. Таған.

Ошо рәүешле, 1920 йылдың июленән, поручик Таған Башҡорттарҙың хәрби-милли идараһы штабы начальнигы вазифаһын үтәй башлай. Оҙаҡламай уға подполковник званиеһы бирелә.

Ҡорбанғәлиев менән Таған хәрби-милли идара биргән вәкәләттәрен файҙаланып, башҡорт яугирҙарын бер ғәскәргә туплаРға тип күпме генә тырышып ҡараһалар ҙа, улар ниәте тормошҡа ашмай. Атаман Семенов ыңғай ҡараһа ла, аҡ генералдар башҡорттарҙың берләшеүенә ҡырҡа ҡаршы сыға. 1920 йылдың ноябренә ҡыҙылдар Семенов ғәскәрҙәрен Манчжурияға бәреп сығара. Аҡ армия тамам тарҡала.

Ғәлимйән Таған Японияға сыға, һуңынан венгр шәрҡиәтселәре ярҙамында Венгрияға барып төпләнә. бында ул Дербцен ҡалаһындағы аграр университетта белем алып сыға. Артабан Будапештта Франц Иосиф исемендәге университеттың иҡтисад факультетын тамамлап, "Совет Рәсәйе валютаһы" тигән темаға докторлыҡ диссертацияһын яҡлай. Шуға ҡарамаҫтан, этнография менән шөғөлләнеүен дауам итә. Һуңынан Мадьяр дәүләт этнография музейына эшкә күсә. 1945 йылда Совет ғәскәрҙәре Венгрияға килеп еткәнсә ошо музейҙың Ислам һәм төрки бүлеген етәкләй. Ошо осорҙа уның "Башҡорттоң тирмә йорттағы көнкүреше" , "Башҡорттарҙа һәм ҡырғыҙҙарҙа ат ауырыуҙары һәм уны дауалау", "Башҡорттарҙа һәм ҡырғыҙҙарҙа ат ярыштары һәм байрамдары", "Башҡорттарҙа мал тамғалау ысулы", "Башҡорттарҙа һәм ҡырғыҙҙарҙа ат тәрбиәләү ысулдары", "Башҡорттарҙа һәм ҡырғыҙҙарҙа йөк ташыу һәм сәйәхәт итеү саралары" исемле һәм башҡа фәнни мәҡәләләре баҫылып сыға.

1945 йылда Совет ғәскәрҙәре Венгрияға инеү менән, Ғәлимйән Таған Төркиәгә китергә тырышып ҡарай. Әммә виза ала алмағас, советтарҙан Германияға ҡасырға мәжбүр була. Гамбург ҡалаһына килеп урынлашып, университетҡа эшкә төшә. Ғ. Таған штаттан тыш төрки телдәре уҡытыусыһы булып эшләй. Һуғыштан һуңғы ауыр тормош, юҡлыҡ (тәүге осорҙа уға ҡасҡындар лагерҙарында йәшәргә тура килә), уның һаулығын тамам ҡаҡшата. Ғәлимйән Ғирфан улы Таған 1948 йылдың 28 июнендә Гамбургта вафат була.

**Сығанаҡтар:**


ЦГИА РБ. Ф. 1201. Оп. 4. Д. 4. Л. 12.

ЦГИА РБ. Ф. 9776. Оп. 2. Д. 8. Л. 156.

А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Кн. 1. Уфа, 2005. С. 246, 282, 290, 295, 309, 314, 317.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 254, 401, 403, 406.
Вәлиди Туған Ә. Ә. Хәтирәләр. Өфө, 1996. 249–252-се бит.
Валиди Тоган А.-З., Инан А., Таган Г. Служение: Сборник трудов башкирских ученых-эмигрантов – лидеров национально-освободительного движения 1917–1920 годов. Уфа, 2007. С. 16, 26, 36, 66.
Фархшатов М. Н. Галимджан Таган в эмиграции: Биографический очерк. Уфа, 2003. С. 13–24, 76-78.



## ӘҮХӘҘИ ИШМЫРҘИН
**? – 1923**

Әүхәҙи Ғәләүетдин улы Ишмырҙин – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан башҡорт офицерҙарының береһе, Зәки Вәлидиҙең яҡын көрәштәше, ярҙамсыһы. Ул Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙе Аҙнай улысының (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Ишембай районы) Кинйәбулат ауылында тыуған.

Ергән ауылында 2 синыфлы Рус-башҡорт мәктәбендә уҡый. Артабан Ҡаҙан ҡалаһында Уҡытыусылар семинарияһын тамамлай. Беренсе донъя һуғышы башланыу менән Әүхәҙи Ишмырҙин әрмегә алына. Кесе офицерҙар әҙерләү хәрби мәктәбен тамамлап, прапорщик чинында фронтҡа ебәрелә. 1914 йылдан алып 1917 йылға тиклем Ишмырҙин Герман һуғышында йөрөй. Фронтта күрһәткән батырлыҡтары өсөн дүрт тапҡыр Георгий тәреһе менән бүләкләнә, йәғни тулы кавалеры була. Подпоручик дәрәжәһен ала.

1917 йылда тыуған яғына ҡайтыу менән ул Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушылып китә. Әйткәндәй, милли хәрәкәттә Әүхәҙи Ишмырҙиндың ағаһы Ишбулды һәм ҡустыһы офицер Сөләймән дә әүҙем ҡатнаша (архив документтарынан күренеүенсә, рәсми ҡағыҙҙарҙа Әүхәҙи “Ишмурзин I” ҡустыһы Сөләймән “Ишмурзин II” йөрөтөлгән). Ә. Ишмырҙин 1917 йылғы Башҡорт ҡоролтайҙарында ҡатнаша. Милли хәрәкәттең матбуғат органы “Башҡорт” гәзитендә әүҙем яҙыша.

1918 йылдың февралендә Ырымбурҙағы Башҡорт хөкүмәте большевиктар тарафынан ҡулға алынғас, Юрматы кантоны башҡорттары Әүхәҙи Ишмырҙин менән Гәрәй Ҡарамышевты Ырымбур ҡалаһына ебәрә. Әммә улар Башҡорт хөкүмәте ағзаларына ярҙам итә алмай. Ҡайтҡас, Ә. Ишмырҙин, Юрматы кантоны башҡорттары ҡоролтайын йыйып, Совет хөкүмәте рәйесе В.И. Ленина былай тип телеграмма ебәрә: *“Кантональный съезд 250 представителей от 24 волостей Стерлитамакского уезда, обсудив арест членов Башкирского предпарламента в Оренбурге, постановил: заявляем категорический протест против такой несправедливости. Обвинения ни на чем не основаны кроме нелепых слухов.*

*Их оклеветали, сводя личные счеты. Быть контрреволюционерами они не могли. Платформа Башкурдистана [Совету] Народных Комиссаров известна по докладу комиссара Манатова. Заявляя протест, требуем немедленного совобождения и передачи их в распоряжение представителей от кантонств Башкурдистана, которые съезжаются в Оренубрг и которые, если найдут их виновными, предадут народному революционному суду".* Әммә башҡорт эшмәкәрҙәренең мөрәжәғәтенә Мәскәүҙә ҡолаҡ һалыусы булмай.

1918 йылдың 4 апрель башында Әмир Ҡарамышевтың партизан отрядтары, казактар менән бергә Ырымбурға һөжүм итеп, Башҡорт хөкүмәте ағзаларын төрмәнән азат итеүгә өлгәшә. Июнь башында хөкүмәт ағзалары Силәбе ҡалаһына йыйылып, үҙҙәренең эшмәкәрлеген яңынан йәйелдереп ебәрә. Комуч һәм Себер хөкүмәттәре ярҙамында башҡорттар ғәскәр ойоштора башлай. Был осорҙа Әүхәҙи Ишмырҙин Стәрлетамаҡ ҡалаһында Комуч армияһы сафтарында хеҙмәт итә. Стәрлетамаҡ өйәҙе башҡорттарынан мосолман ротаһы ойоштороп ҡыҙылдарға ҡаршы һуғышып йөрөй.

Башҡортостан территорияһы большевиктарҙан азат ителгәс, ул Юрматы кантонының башҡармаһы рәйесе итеп тәғәйенләнә. Әммә был вазифала подпоручик Ишмырҙинға оҙаҡ эшләргә тура килмәй. Сентябрь аҙағында ул Ырымбурға Башҡорт хөкүмәте ҡарамағына саҡыртып алына. Зәки Вәлидиҙең өлкән адъютанты булып хеҙмәт итә. Уның урынына Юрматы кантоны етәксеһе итеп ҡустыһы Сөләймән Ишмырҙин тәғәйенләнә. Октябрь башында Зәки Вәлиди үҙенең көрәштәше Ә. Ишмырҙинды 6-сы Башҡорт уҡсы полкына командир итеп ҡуя.

1918 ноябрендә власты үҙ ҡулына алған адмирал Колчак Башҡорт корпусын тарҡатыуға өлгәшә. Артабан башҡорт ғәскәрҙәрен туранан-тура атаман Дутовҡа буйһондороорға бойора. Ләкин Башҡорт хөкүмәте уның фармандарына ҡолаҡ һалмай. Декабрь айында Зәки Вәлиди башҡорт полктарын бер урынға тупларға тигән йәшерен фарман ебәрә. Һөҙөмтәлә ғинуар башында, 3-сө полктан тыш, бөтөн башҡорт полктары ла Башҡортостан территорияһында бер йоҙроҡҡа туплана. Вәлиди полктарҙы ике дивизиянан торған Башҡорт корпусына берләштерә һәм ғәскәрҙәр менән етәкселекте үҙ ҡулына ала. 1-се Башҡорт дивизияһы менән командалыҡ итеүҙе Әүхәҙи Ишмырҙинға йөкмәтә. Ошо уҡ мәлдә Башҡорт хөкүмәте советтар менән килешеүгә йүнәлеш ала. Һөҙөмтәлә 1919 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сығырға тигән фекергә килә. Зәки Вәлиди штабс-капитан Ишмырҙинға тағы ла ҙур бурыс һала – Башҡорт ғәскәрҙәренең ҡыҙылдар яғына сығыуын тәьмин итеү. 1919 йылдың 18 февралендә Әүхәҙи Ишмырҙин командалыҡ иткән 1-се дивизия полктары беренсе булып Ҡыҙыл Армия яғына сыға.

21 февраль Темәс ауылында 1-се Бөтә Башҡорт хәрби съезында Ә. Ишмырҙин милли хәрәкәт етәкселәре Зәки Вәлиди, Мөхәмәтхан Ҡулаев, Юныс Бикбов һәм башҡалар менән бергә Башҡортостандың ваҡытлы революцион хөкүмәте – Башревком ағзаһы итеп һайлана. Республиканың хәрби комиссары

Зәки Вәлиди большевиктар лидерҙары менән һөйләшеп-килешеү өсөн Мәскәүгә киткәс, Башревком хәрби комиссар бурысын ваҡытлыса Әүхәҙи Ишмырҙинға йөкмәтә. Артабан ул Вәлидиҙең урынбаҫары вазифаһын үтәй.

Республиканың хәрби комиссарына мөһим дәүләт һәм ғәскәри эштәр буйынса хәрби эштәр буйынса командировкаларҙа күп йөрөргә тура килә. Ошо айҡанлы башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороу эше менән туранан-тура уның урынбаҫары Әүхәҙи Ишмырҙинға шөғөлләнергә, Башҡортостандың хәрби комиссары вазифаһын башҡарырға тура килә.

Апрель аҙағында Башревком Саранск ҡалаһына эвакуациялана. 27 апрелдә Вәлиди командировкаға китеп, үҙенең урынына тағы ла Ишмырҙинды ҡалдыра. 13 майҙа ҡайта ла, ун көн дә тормай, 21 майҙа Һамар ҡалаһына, Көнсығыш фронтҡа китә. 27 майҙа Һамарҙан ҡайтып, иртәгеһенә Мәскәүгә китә. 18 июндә Мәскәүҙән ҡайтып, 25 июндә Украинаға, Көньяҡ фронтҡа китә. Көньяҡ фронттан 15 июлдә ҡайта ла, иртәгеһенә Һамар һәм Бәләбәй ҡалаһына юллана. Һамарҙан 15 августа ҡайта. Тимәк, март, апрель айҙарында, 27 апрелдән 13 майға, 21–27 майҙа, 28 майҙан алып 18 июнгә, 25 июндән 15 июлгә, 16 июлдән 15 августа тиклем Әүхәҙи Ишмырҙин Зәки Вәлиди урынына Башҡорт Совет Республикаһының хәрби комиссары вазифаһын башҡара. Саранск ҡалаһында ике кавалерия һәм ике уҡсы полктарҙан торған Айырым Башҡорт бригадаһын ойоштороп, Көньяҡ фронтҡа оҙатыу эшенә туранан-тура етәкселек итә.

Артабан Бәләбәй ҡалаһында ойошторола башлаған Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы менән шөғөлләнә. 1919 йылдың 21 июлендә Һамар ҡалаһында булған Көнсығыш фронттағы Башревком вәкиле М. Халиҡовҡа: *"Говорил с Белебеем, пока в бригаду поступило лишь 530 человек; мобилизация идет почему-то туго, приму самые решительные меры. Взял на себя обязанность мобилизации Белебеевского, Стерлитамакского уездов, закончу к 1 августа. Сам буду разъезжать по волостям и в Стерлитамак..."*, – тип хәбәр итә. Ишмырҙин Бәләбәйгә килеп, бригаданы ойоштороу эшенә ныҡлап тотона. Бригада командиры Михович урынына башҡорт офицеры, элекке полковник Хәсән Әхмәровты тәғәйенләй. Бригаданың Штаб начальнигы Воронцов урынына Заһит Гәрәевты тигән башҡорт офицерын ҡуя. 1919 йылдың сентябрь башына Ишмырҙиндың тырышлығы менән Бәләбәй ҡалаһында Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы үҫеп сыға.

1919 йылдың сентябрендә Реввоенсовет рәйесе Троцкий башҡорт ғәскәрҙәрен Петроградҡа ебәрергә бойороҡ бирә. Тиҙ арала Бәләбәйҙән Башҡорт уҡсы бригадаһы, 3-сө Башҡорт кавалерия полкы күсерелә. Көньяҡ фронттан Башҡорт кавалерия дивизияһының полктары килә. Деникинға ҡаршы һуғышта ауыр юлғатыуҙар кисергән, сафтары һирәгәйгән Башҡорт кавалерия дивизияһын тулыландырыу, һуғыш кәрәк-яраҡтары менән тәьмин итеү, башҡорт ғәскәрҙәрен Юденичҡа ҡаршы һуғышҡа әҙерләү бурысы алғы планға сыға.

*"Постановление Реввоенсовета Республики от 7 октября за № 4848-ОП о новом переформировании башкирских частей в Петрограде нами в*

*исполнение еще не приведено. Для разрешения этого вопроса прошу срочно выехать в Петроград товарища Валидова или Ишмурзина...”*, – тип хәбәр итә башҡорт ғәскәрҙәре эштәре буйынса махсус вәкил Хәлим Әмиров. Оҙаҡламай Әүхәҙи Ишмырҙин Петроградҡа килеп Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө частарын ойоштороу, тулыландырыу менән шөғөлләнә.

Совет хөкүмәте башҡорт ғәскәрҙәренең Юденич армияһын ҡыйратыуҙа күрһәткән барытлыҡтарын юғары баһалай. Башҡорт командирҙары һәм һалдаттарына Ҡыҙыл Байраҡ ордены һәм башҡа ҡиммәтле бүләктәр бирелә. РСФСР хөкүмәте Әүхәҙи Ишмырҙиндың хеҙмәттәрен дә баһалап үтә. Уға алтын хәрефтәр менән яҙылған ҡылыс бүләк итә.

Башҡортостанға ҡайтыу менән Ишмырҙин республиканың запас ғәскәри частарын ойоштороу менән мәшғүл була. Стәрлетамаҡта торған ғәскәрҙәр туранан-тура уға буйһона, гарнизон начальнигы вазифаһын үтәй. Ул саҡта Башревком урынлашҡан Стәрлетамаҡ ҡалаһы Өфө губернаһы ҡарамағында була. Өфө һәм Ырымбур губернаһы большевиктары Башҡортостан автономияһына ҡаршы ҙур ҡаршылыҡ күрһәтә, төрлө провокациялар эшләй. Ләкин улар Башҡорт республикаһының хәрби көстәренән шөрләнкерәй. 1919 йылдың сентябрендә булып үткән ваҡиғалар шул турала һөйләй. Сентябрь айында Көньяҡ фронттан, 1-се Башҡорт кавалерия полкынан делегат сифатында Зәйнуллин тигән һалдат Сәтрлетамаҡҡа килә. Ул Деникинға ҡаршы һуғыштарға батырлыҡтары өсөн Троцкийҙан бүләккә сәғәт алған ҡаһарман яугир, абруйлы һалдат була. Стәрлетамаҡ өйәҙе ЧК-һы өс башҡорт һалдатын шул иҫәптән, Зәйнуллинды контерреволюцияла ғәйепләйп, төрмәгә ябып ҡуя. Большевиктарҙың бындай баш-баштаҡлығы, үҙҙәрен Стәрлетамакта хужа итеп тотоуҙары – Башҡорт республикаһын эшкә һанамауҙарын асыҡ күрһәтә. Зәки Вәлиди большевиктарға башҡорттарҙың кем икәнен тиҙ төшөндөрә. Уның бойороғо буйынса Ишмырҙиндың һалдаттары, 26 сентябрҙә Стәрлетамаҡ төрмәһен барып баҫып, ҡулға алынған башҡорттарҙы сығара. Был ваҡиға тураһында Өфө губревокмы рәйесе Эльцин Мәскәүгә бына нимә, тип ошаҡлай: *“Только что прибыл нарочный из Стерлитамака с сообщением слудеющих фактов, подтвержденных документально: 26 сентября начальник гарнизона Башвоенкомата по Стерлитамаку Ишмурзин Первый командировал для Бисярова в Стерлитамакскую тюрьму с вооруженной силой 70 человек для освобождения арестованных, числящихся за Стерлитамакской Чека, Зайнуллина, Даутова, Надыршина, предписав в случае сопротивления агентов Чека арестовать их. Освобожденные обвиняются в контрреволюции, состоят сотрудниками Башвоенкомата. В ответ на эти незаконные действия в тот же день уполномоченный ревсовета укрепрайона Сидоровым был запрощен начальник гарнизона, им и предревкомом уезда Тереховым был запрошен политотдел Башреспублики с предупреждением ликвидировать незаконные действия. Ответа на запрос еще не последовало. Прибывший нарочный сообщает, что против отряда Чека выставлены пулеметы численностью одиннадцать.*

*Башкирские части приведены в боевую готовность. По данным разведки, их численность в одном Стерлитамаке до четырех тысяч чел., вооруженных вполне. Нарочным сообщено уревкому. Наши указания – держаться тактично, не открывая активных действий, сообщая о незаконных действиях в губернский центр...".*

Бына ошондай ҡатмарлы, ауыр осорҙа Әүхәҙи Ишмырҙин кәрәк урында көс менән Башҡорт автономияһының хоҡуҡтарын большевиктарға таныта, Башревком менән иҫәпләшергә мәжбүр итә.

Ләкин артабанғы айҙарҙа Башревкомға ҡаршы көрәшкә Мәскәүҙән Үҙәк власть эмиссарҙары, Башобком ҡушыла. Ике яҡ араһындағы ҡапма-ҡаршылыҡта Мәскәү коммунистарҙы яҡлап сыға. Ә инде 1920 йылдың майына Башҡортостандың хоҡуҡтарын бөтөнләй сикләргә була. Ошо маҡсатта 1920 йылдың 17 майында РСФСР СНК-һы һәм ВЦИК-тың декреты менән Башҡорт автономияһының хоҡуҡтары ҡырҡа сикләнә. Быға протест белдереп, Башревком, эшен ташлап, Башҡортостандан сығып китә. Стәрлетамаҡта торған башҡорт һалдаттары Вәлиди ҡушыуы буйынса өйҙәренә таралыша башлай. Хәрби комиссариаттың һалдаттары Әүхәҙи Ишмырҙин менән китә. 1920 йылдың 30 июнендә П. Викман Мәскәүгә: "*Район национальной столицы Башкирии кишит вооруженными шайками. Вдобавок, к Темясово продвинуты приказом наркомвоена Ишмурзина отряды кавалерии и пехоты*", – тип хәбәр итә.

Бөрйән-Түңгәүер кантонында кәңәшмә үткәргәндән һуң, башҡорт эшмәкәрҙәре, шул иҫәптән Әүхәҙи Ишмырҙин, көрәште дауам итеү өсөн Төркөстанға сығып китә. "*Беҙҙең Башҡортостан ғәскәренән Әүхәҙи Ишмырҙин, ярамсым Ибраһим Исхаҡов, башҡа бер нисә офицерыбыҙ, полковник Һибәтулла Һөйөндөковтың яҡын офицерҙары менән бергә килеп, барыһы ла Бохараның хәрби ойошмаларында етәксе вазифалар алды*", – тип яҙа Зәки Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә.

Төркөстанда Зәки Вәлиди һәм башҡа башҡорт эшмәкәрҙәре тарҡау баҫмасылар отрядтарын бергә туплап, большевиктарға ҡаршы ойошҡан рәүештә көрәшергә ниәт итә. Төрлө фронттарҙа һуғышып, утты-һыуҙы күп кискән башҡорт офицерҙары баҫмасыларҙы һуғышҡа өйрәтеү, ойоштороу эше менән мәшғүл була. Әүхәҙи Ишмырҙин Төркөстанда ҡыҙылдарға ҡаршы күп кенә һуғыштарҙа ҡатнаша. Милли хәрәкәт уңышһыҙлыҡҡа осрағас, Вәлиди һәм уның көрәштәштәре, шул иҫәптән Әүхәҙи Ишмырҙин Афғанстанға китергә кәңәшләшәләр. Әммә ҡаһарман сардар һәләкәткә осрай. "*Ташкентта саҡта хөкүмәт даирәләрендә эшләгән арҡадаштарыбыҙ аша беҙҙе бик ауыр ҡайғыға һалған тағы бер вакиғаны белдек. Был иһә дуҫым Әүхәҙиҙең ҡыҙылдар ҡулына әсир төшөүе ине. Ул вакиға хаҡында башҡа яҡтан бер ниндәй ҙә мәғлүмәт алмаһаҡ та, ысын булыуына ышандыҡ. Бер йылдан һуң Ҡабулда саҡта Әүхәҙиҙе Мәскәүҙә язалауҙарын ишеттек, ләкин эштең асылын, 1925 йылда Төркиәгә килгәс, йәғни өс йыл үткәндән һуң ғына, Әүхәҙи янында булған арҡадаштарынан белдек.*

*Әухәҙи һәм якындары 11 августа Усматта хушлашып минән айырылғандан һуң Мамур һәм Тураб бәктәр менән бергә Зомин һәм Уратүбә тауҙарында кыҙылдар менән һуғыша-һуғыша бер аҙна вакыт үткәргәндәр. Арҡадашы Һибәтулла әйтеүенсә, Әухәҙи Зомин тимер юлы станцияһынан ун саҡырым төньяктағы Ҡуру Гөлдөрәүек исемле йәйләүҙә рустар менән бәрелештә әсир төшкән. Был көндәрҙә Әухәҙиҙең рухы бик төшөнкө була. Шул ук Һибәтулланың хәбәренә карағанда, бер кистә йәйләү аласығында ултырғандар, көн бик ямғырлы, томанлы булған. Эйәр муксаһындағы коньякты алып килеп, арҡадаштары менән эскән сакта Әухәҙи Пушкиндың ошо шиғырын һөйләгән:*

*Буря мглою небо кроет,*
*Вихря снежные крутя*

*Наша ветхая лачужка*
*И печальна, и темна.*

*Выпьем с горя, где же кружка,*
*Сердцу будет веселей.*

*Ул үҙе был тауҙарҙа оҙак ҡалмай, Мача юлы менән Әнүәр Паша янына китергә, унда ла туктамай, Афғанстанға сығырға уйлаған икән. Мачаларҙың рәйесе Асрархан ғәскәре менән бергә килгән. Әухәҙи был һуғышта ла күп егетлек күрһәткән, ләкин рустарҙың тап каршыһына сыккан бер урында аты ташка һөрөнөп йығылған һәм шунда ук янына кыҙыл һалдаттар ҙа килеп еткән. Әухәҙи револьверы менән уларҙың бер нисәһен атып үлтергән, әммә кыҙылдар ҡулына эләккән. Шулай итеп, беҙҙең Башкортостандың хөрмәтле хәрби нәзире, әсир төшөп, тукмала-тукмала, Зоминға, унан Ташкентка, артабан Мәскәүгә алып кителә."*

Башҡортостан дәүләтселеге өсөн хәрәкәттә әүҙем ҡатнашҡан ҡаһарман башҡорт офицеры, милли хәрәкәт етәкселәренең береһе булған Әухәҙи Ғәләүетдин улы Ишмырҙиндың ғүмере ошо рәүешле өҙөлә. Милли хәрәкәттә ҡатнашҡан туғандары Ишбулды һәм Сөләймән Ишмырҙиндарҙы 30-сы йылдар аҙағындағы Сталин репрессияһы һәләк итә.

**Сығанаҡтар:**

ЦГИА РБ. Ф. 1201. Оп. 4. Д. 4. Л. 16.
ЦГИА РБ. 1107. Оп. 1. Д. 25. Л. 21.
ЦГИА РБ. 1780. Оп. 1. Д. 9. Л. 5.
А.А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Ч. 1. Уфа, 2005. С. 218, 288, 293, 297, 298, 310, 315, 334.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 1. Уфа, 2002. С. 304, 344, 352.
Шунда ук. Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 497, 561, 579.
Шунда ук. Т. 2. Ч. 2. Уфа, 2003. С. 151–158, 176, 182, 203, 229, 236, 283, 412, 430.

Шунда уҡ. Т. 3. Ч. 1. Уфа, 2004. С. 201, 440, 441.
Шунда уҡ. Т. 3. Ч. 2. Уфа, 2006. С. 24, 169, 174–179, 383, 562.
Шунда уҡ. Т. 4. Ч. 1. Уфа, 2008. С. 265, 282.
Вәлиди Туған Ә. Ә. Хәтирәләр. Өфө, 1996. 388, 472, 473-сө биттәр.
Сулпан Иманғолов. Әүхәҙи ҡылысы // Шоңҡар. 1995. № 2.



## ГӘРӘЙ ҠАРАМЫШЕВ
## 1888 – 1922

Мөхәмәтгәрәй Батыргәрәй улы Ҡарамышев – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте етәкселәренең береһе. 1888 йылда Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙенең Маҡар улысы (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Ишембай районы) Маҡар ауылында тыуған. Данлыҡлы Ҡарамышевтар нәҫеленән. Башҡорт армияһы сардарҙары, офицерҙар Әмир һәм Мөхтәр Ҡарамышевтарҙың ағаһы.

Гәрәй Ҡарамышев бала сағында ауырыу сәбәпле 11 йәшендә генә уҡырға бара. Шуға ҡарамаҫтан белемгә һәләтле бала була. 1902 йылда ауыл мәҙрәсәһен тамамлағандан һуң, Ҡаҙан ҡалаһына барып, Уҡытыусылар семинарияһына уҡырға инә. Был осорҙа семинария уҡыусылары араһында революцион рух хөкөм итә. Г. Ҡарамышев та унан ситтә ҡалмай, ә киреһенсә, әүҙем ҡатнаша. Йәшерен түңәрәктәрҙә лектор булараҡ сығыш яһай, хатта, революцион ошоймаларҙың гәзиттәрен яҙҙырып уҡый. *“Төрмәлә ултырған сәйәси тотҡон–уҡыусыларҙың попечителе булараҡ, уларға бүләктәр ебәрә, семинарияла уҡыусыларҙан иғәнә йыя торғайным”*, – тип яҙа ул үҙенең автобиографияһында.

1907 йылда Семинарияны тамамлағандан һуң, 1917 йылға тиклем төрлө ерҙәрҙә балалар уҡытыу менән шөғөлләнә. Революциянан һуң ижтимағи эшмәкәрлеккә тотона. Ул Стәрлетамаҡ өйәҙендәге улыс комитеттарын ойоштороу эшенә йәлеп ителә. 1917 йылдың майында Гәрәй Ҡарамышев Мәскәүҙә үткән I Бөтә Рәсәй мосолман съезында ҡатнашып ҡайта. Мәскәүҙән ҡайтыу менән Маҡар улысы башҡарма комитеты уны Стәрлетамаҡ өйәҙенең Ер съезына ебәрә. Съезда Г. Ҡарамышевты Өйәҙ ер башҡармаһы (Уездная земельная управа) рәйесе урынбаҫары итеп һайлайҙар.

1917 йылдың йәйендә Ҡарамышев Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте ҡушылып китә. Стәрлетамаҡ өйәҙе башҡорттары уны өйәҙҙең Башҡорт шураһы рәйесе итеп һайлай. Гәрәй Ҡарамышев 1917 йылда үткән Башҡорт ҡоролтайҙарында әүҙем ҡатнаша. 1918 йылдың ғинуарында Стәрлетамаҡ өйәҙе башҡорттарының беренсе съезын үткәрә. Съезд Ҡоролтайҙың Башҡортостан мөхтәриәте тураһындағы ҡарарын хуплай, автономияның урындағы власть

органдарын – кантон башҡармаһын һайлай. Әммә февраль айында Башҡорт хөкүмәте ҡулға алыныу менән автономияны тормошҡа ашырыу эше туҡтап ҡала. Был осорҙа Гәрәй Ҡаармышев өйәҙҙең педагогия курстары мөдире, артабан 20-се участканың мировой судьяһы булып эшләй.

1918 йылдың авгусында Башҡорт хөкүмәте Силәбенән Ырымбур ҡалаһына күсеп ҡайтыу менән Ҡарамышев та эшкә саҡырыла. Ул хөкүмәттең Ер төҙөлөшө (Землеустройство) бүлеген етәкләй. 1918 йылдың 1 сентябрендә Ҡарамышев, башҡорт йәштәренең "Тулҡын" ойошмаһын тергеҙеү буйынса конференцияла әүҙем ҡатнаша. Уны "Тулҡын"дың башҡарма комитеты рәйесе итеп һайлайҙар. Был ойошманың матбаға һәм драматик бүлектәре булдырыла. 1918 йылдың көҙөндә "Тулҡын" ойошмаһының инициативаһы менән төрлө мәҙәни саралар ойошторола, мәшһүр шағир, азатлыҡ йырсыһы Шәйехзада Бабчитың "Йәш Башҡортостан. Зәңгәр йырҙар" һәм Хәбибулла Ғәбитовтың "Башҡорт моңдары" исемле шиғри йыйынтыҡтары баҫыла.

1918 йылдың ноябрендә адмирал Колчак властка килеү менән Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәренең хәле хөртәйә. Милли хәрәкәт етәкселеге Совет власы менән килешеү юлдарын эҙләй башлай. Ошо маҡсатта Муллаян Халиҡов менән Гәрәй Ҡарамышевты Мәскәүгә ебәрәләр. Әммә илселәрҙең юлы уңмай. Улар кире әйләнеп ҡайта. Был мәлдә Башҡорт хөкүмәте ағзаһы Муса Смаҡов һәм Арғаяш кантоны етәкселәре Х. Ҡушаев, М. Мәғәсүмов һәм башҡалар аҡтар тарафынан ҡулға алынып, Силәбе төрмәһендә ултыра. Зәки Вәлиди уларҙы төрмәнән сығарыу бурысын Гәрәй Ҡарамышевҡа йөкмәтә. Ҡарамышев Силәбелә чехословактар менән һөйләшеп башҡорт эшмәкәрҙәрен азат итеүгә ирешә. Тырышлыҡ менән Силәбе төрмәһендә ултырған 13 кешене сығарыуға өлгәштем, тип яҙа Г. Ҡарамышев.

1919 йылдың 18 февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыға. 21 февраль Темәс ауылында I Бөтә Башҡорт хәрби съезы үтә. Гәрәй Ҡарамышев был оло йыйынды ойоштороуҙа һәм уның эшендә әүҙем ҡатнаша. Съезд рәйесе урынбаҫары итеп һайлана. Башҡорт һалдаттары алдында ялҡынлы телмәр тота. Башҡорт халҡының данлы һәм шанлы үткәндәре хаҡында һөйләп китә. Башҡорттар борон-борондан азатлыҡ өсөн ҡулына ҡорал алып көрәшер булған. Урыҫ тарихсылары уларҙы "бунт" тип атай. Тимәк, башҡорт халҡының был милли-азатлыҡ хәрәкәте "иҫәп буйынса 88-се бунты" тип атай. Совет власы менән берлектә контрреволюцияға ҡаршы аяуһыҙ һуғышҡа саҡыра.

Съезда Башҡортостан автономияһының революцион хөкүмәте – Башревком ойошторола. Яңы хөкүмәткә ағза итеп, милли хәрәкәт лидерҙары Зәки Вәлиди, Мөхәмәтхан Ҡулаев, Юныс Бикбов, Аллабирҙе Йәғәфәровтар менән бергә Гәрәй Ҡарамышев та һайлана.

Иртәгеһенә Башревком үҙенең беренсе ултырышында, Башҡорт Совет Республикаһының тәүге комиссарҙарын һайлай. Ҡарамышевҡа республиканың Халыҡ хужалығы советы (Башсовнархоз) рәйесе вазифаһы йөкмәтелә. Бер үк ваҡытта уны Башревком рәйесе урынбаҫары итеп һайлайҙар. "*Ввиду*

*отсутствия председателя, председателем практически был я. В период моего председательствования Башсовправительство переживал самые трудные моменты: во-первых натиск белых в следствии этого эвакуация в г. Саранск, во-вторых, не совсем дружеблюное отношение фронтовых частей на башкир, недавно перешедших на советскую сторону"*, – тип яҙа Гәрәй Ҡарамышев үҙенең автобиографияһында.

Г. Ҡарамышев 1919 йылдың мартынан май айына тиклем Ғәлиәхмәт Айытбаев урынына Башҡортостандың ер эштәре буйынса халыҡ комиссары бурыстарын да үтәй.

1919 йылдың авгусында Башревком Стәрлетамаҡҡа ҡайтып төшә һәм Башҡортостанға ҡараған территорияларҙағы Өфө, Ырымбур губерналарынан кире үҙ ҡарамағына алыу өсөн һөйләшеүҙәр башлай. Башревком рәйесе Харис Йомағолов менән Гәрәй Ҡарамышев Өфө губкомы менән һөйләшеп, мөнәсәбәттәр урынлаштырып ҡайта. Артабан, Башсовнархоз рәйесе сифатында 1919 йылдың февралендә үк үҙенә йөкмәтелгән бурыстар менән шөғөлләнергә мөмкинлек ала. 1920 йылда Башҡортостандың Үҙәк Башҡарма комитеты (БашЦИК) ағзаһы итеп һайлана. 1920 йылдың ноябрендә РКП(б) һәм БашЦИК делегацияһы составында, П. Мостовенко, К. Иҙелғужиндар менән бергә Бөрйән-Түңгәүер кантонында тоҡанған ихтилал етәкселәре менән һөйләшеүҙәрҙә ҡатнаша. 26 ноябрь ике яҡ араһында килешеү төҙөлә. Уның һөҙөмтәһендә, баш күтәреүселәр амнистиялана. 1920 йылдың июнендә Үҙәк власҡа протест белдереп эшен ташлап киткән башҡорт эшмәкәрҙәре ҡабат етәксе урындарға тәғәйенләнә. Мәҫәлән, Таһир Имаҡов Ревтрибунал рәйесе, Сөләймән Мырҙабулатов – хәрби эштәр буйынса комиссар Муса Мортазиндың урынбаҫары булып китә. Артабан Г. Ҡарамышев "Башпомгол"да эшләй.

Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте һәм дәүләт эшмәкәре Мөхәмәтгәрәй Батыргәрәй улы Ҡарамышев 1922 йылдың сентябрендә вафат була.

## Сығанаҡтар:


ЦГИА РБ. Ф. 394. Оп. 9. Д. 17. Л. 57–58.

ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 25. Л. 2.об, 137.

А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Ч. 1. Уфа, 2005. С. 240.

Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 273, 569, 577, 579, 582.

Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 2. Уфа, 2003. С. 429, 670.

Кульшарипов М. М. Башкирское национальное движение (1917–1921 гг.). Уфа, 2000. С. 312–313.

Вәлиди Туған Ә. Ә. Хәтирәләр. Өфө, 1996. 253-сө бит.

Башкирская энциклопедия. Т. 3. Уфа, 2008. С. 329.

## СӘЙЕТГӘРӘЙ МАҒАЗОВ
## ? – 1921

Сәйетгәрәй Сәйетйәғәфәр улы Мағазов – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан эшмәкәрҙәрҙең береһе, шағир, Башҡорт хөкүмәте ағзаһы, Зәки Вәлидиҙең яҡын көрәштәше. Ырымбур губернаһы Силәбе өйәҙенең (хәҙерге Ҡурған өлкәһенең Әлмән районы) Асҡар ауылында тыуған. Уның революцияға тиклемге тормошо хаҡында мәғлүмәттәр юҡ.

Сәйетгәрәй Мағазовтың исеме Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкте документтарында 1918 йылдың йәйенән күренә башлай. Әммә 1917 йылда Башҡорт ҡоролтайҙарында ҡатнашҡан булһа кәрәк. 1918 йылдың июнендә Башҡорт хөкүмәте үҙенең төп иғтибарын милли армия төҙөүгә йүнәлтә. Ошо эштә Сәйетгәрәй Мағазов та әүҙем ҡатнаша, Башҡорт хәрби шураһының ағзаһы итеп алына. Милли хәрәкәт лидеры Зәки Вәлидиҙең яҡын ярҙамсыһы сифатында йөрөй. “*Полк төҙөй башлауыбыҙға бер аҙна ваҡыт үткәндер. Екатеринбург яғында Арғаяш кантонында большевиктарҙы ҡыуып сығарырға тотонған чехтарға ярҙамға кире батальон ебәрҙек. Был ғәскәрҙең хәрәкәте хаҡында тәүге хәбәрҙәре алғандың иртәгеһенә, беҙ Сәйетгәрәй Мағазов менән бергә, чех офицеры йөрөткән автомобилгә ултырып, Силәбенән сығып киттек. Көҙәш тигән ерҙә бик ҡаты бәрелеш булды. Сәйетгәрәй менән, винтовкалар тотоп, һуғышта ҡатнаштыҡ*”, – тип яҙа Зәки Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә.

1919 йылдың июль башында Башҡорт хөкүмәте Омскийҙағы Ваҡытлы Себер хөкүмәте һәм Себер армияһы командалығы менән һөйләшеүҙәр башлай. Тәүҙә Омскиға башҡорт офицеры Ғәбделхаҡ Ғәбитов ебәрелә. Артабан был һөйләшеүҙәрҙә Зәки Вәлиди менән Сәйеттәрәй Мағазов та ҡатнаша. “*Бер нисә көндән һуң Сәйетгәрәй Мағазов менән бергә Омскиға үҙем килдем... Гришин-Алмазовты* (хөкүмәт рәйесе – А. Я.) *шул көндө күрҙек, башҡор полктары стратегия яғынан мөһим урын биләү арҡаһында, уларҙы Себер хөкүмәтенең баш командалығына тура буйһондороу хаҡында килештек, башҡа талаптарыбыҙҙы ла ҡәнәғәтләндерҙе*”, – тип яҙа Вәлиди. Сәйетгәрәй Мағазов Омскийҙан тура Семипалатинск ҡалаһына юллана. Бында ул, 18–21 июлдә йыйылышта ҡатнаша, ҡаҙаҡтарҙың Алаш Урҙа һәм Төркөстан хөкүмәте етәкселәре менән осрашып, бергә эш итеү тураһында һүҙ ҡуйыша. “*Ҡаҙаҡ һөйләшендә бик матур шиғырҙар яҙа белгән Сәйетгәрәй Мағаз Ҡаҙағстан үҙәгендә ҙур хөрмәт ҡаҙанған, “Алаш Урҙа” исемле гәзиттәрендә минең хаҡта, башҡорт хәрәкәте тураһында маҡтау мәҡәләләре...*”, – ти Вәлиди.

Ҡаҙағстандан ҡайтыу менән С. Мағазов Башҡорт хөкүмәтенең уполномоченныйы сифатында Силәбе, Вернеуральск һәм Златоуст өйәҙҙәрендә башҡорт отрядтарын ойоштороуҙа ҡатнаша. Артабан, 1918 йылдың авгусында Башҡорт хәрби шураһы комиссияһы составында Башҡорт армияһының униформаһын эшләүҙә ҡатнашлыҡ итә.

1918 йылдың октябренән Сәйетгәрәй Мағазов Башҡорт ғәскәри идаралығында, Зәки Вәлиди янында хеҙмәт итә.

1919 февралендә, Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, I Бөтә Башҡорт хәрби съезында Башҡортостандың революцион хөкүмәте – Башревком ағзаһы итеп һайлана. Февраль айынан Башревкомдың агитация-мәғлүмәт бүлеге мөдире булып эшләй. Артабан 1919 йылдың майынан көҙөнә тиклем Мәскәүҙә Я. М. Свердлов исемендәге Коммунистик университетта уҡып ҡайта. Башревкомдың мәғлүмәт бүлегенә етәкселек итә. 1920 йылдың мартынан Сәйетгәрәй Мағазов Башҡортостандың Хәрби эштәр буйынса комиссариатының Сәйәси–ағартыу идаралығын етәкләй.

1920 йылдың 19 майындағы декреты менән Үҙәк Совет хөкүмәте Башҡорт республикаһының автономия хоҡуктарын ҡырҡа сикләй. Зәки Вәлиди (был ваҡытта ул Мәскәүгә саҡыртып алынған була) артабанғы көрәште дауам итеү өсөн, Башревком ағзаларына эште ташлап, Төркөстанға китергә кәңәш итә. 1920 йылдың июнь уртаһында башҡорт эшмәкәрҙәре, шул иҫәптән, Сәйетгәрәй Мағазов та, Стәрлетамаҡ сығып китә. Башревком ағзаларының ҡаланан китеүен күптәр белмәй ҙә ҡала. *“при нахождении в недельном отпуске в дер. Абсалямово Уршакминской волости на празднике “Ураза-Байрам” до 24 июня с. г. начальник политуправления тов. Магазов, уезжая куда-то, оставил записку управляющему делами об оставлении меня начальником управления...”* , – тип хәбәр итә 28 июндә яңы Башревком рәйесенә, Сәйәси идаралығының бүлек мөдире Хәбибов.

Башҡорт эшмәкәрҙәре 17 июндә Бөрйән-Түңгәүер кантонының Яңы Усман ауылында осрашып, Төркөстанға сығып китергә ҡарар ҡыла. Сәйетгәрәй Мағазов И. Исхаҡов, Н. Таһиров, Ф. Сөләймәнов, Т. Ғисмәтуллиндар менән бергә Ташкентҡа юллана. *“Ҡаҙағстандан килгән башҡорт зыялылары араһында Сәйетгәрәй Мағазов та булды. Улар бөтә үҙәк Ҡаҙағстанды гиҙеп сығып, дуҫтарыбыҙ менән бәйләнеш урынлаштырған”*, – тип яҙа Вәлиди. 1921 йылдың июнендә Төркөстандағы милли хәрәкәт уңышһыҙлыҡҡа осрағас, башҡорт эшмәкәрҙәре, Харис Йомағолов менән бәйләнешкә инеп, властарҙан ризалыҡ алып, Башҡортостанға ҡайтырға сыға. Сәйетгәрәй Мағазов ауырып китеү сәбәпле Ташкент ҡалаһында ҡала. Һуңыраҡ Башпомгол делегацияһы менән республикаға юллана. Юлда вафат булып, Кинель ҡалаһында ерләнә.

Сәйетгәрәй Сәйетйәғәфәр улы Мағазов шиғри күңелле, ижадҡа маһир шәхестәрҙең береһе була. 1918 йылда Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә бағышланған, башҡорт ғәскәрҙәренең ҡаһарманлығын данлаған шиғыр һәм дастандар ижад итә. *“Әммә был әҫәрҙәрҙең күбеһе баҫылып сыкманы. Барыһы ла Советтар тарафынан юҡ ителде”*, – тип яҙа Зәки Вәлиди.

## Сығанаҡтар:

ЦГИА РБ. Ф. 1201. Оп. 2. Д. 2. Л. 6.
ЦГИА РБ. Ф. 78. Оп. 1. Д. 7. Л. 21.
ЦГИА РБ. Ф. 629. Оп. 1. Д. 1306. Л. 104.
ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 25. Л. 178.
А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Кн. 1. Уфа, 2005. С. 27, 256, 268, 269, 294, 296.

Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 556, 402, 411, 414, 424, 556, 579, 583, 625.
Шунда ук. Т. 4. Ч. 1. Уфа, 2008. С. 251.
Вәлиди Туған Ә. Ә. Хәтирәләр. Өфө, 1996.  227, 223.
Тагиров Т. Суровая проза жизни. – Уфа, 2004. С. 3–34.

# ИСКӘНДӘР СОЛТАНОВ
## 1872 – ?

Искәндәрбәк Мөхәмәтйәр улы Солтанов – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең тәүге осоронда әүҙем ҡатнашҡан эшмәкәрҙәрҙең береһе. Сығышы менән Минзәлә өйәҙе башҡорттарынан, данлыҡлы дворяндар династияһы – Солтановтар нәҫеленән. 1872 йылда Минзәлә өйәҙенең мировой посреднигы Мөхәмәтйәр Солтановтың (1837–1915) ишле ғаиләһендә (оло ҡатынан) дүртенсе бала булып донъяға килә.

Атаһы – Мөхәмәтйәр Солтанов 60-сы йылдарҙа 20-се башҡорт кантоны башлығы, артабан 7-се башҡорт кантоны башлығы ярҙамсыһы булып хеҙмәт итә. 1866 йылда отставкаға сығып, суд хеҙмәтенә күсә. Бының өсөн ул Ҡаҙан университетының юридик факультетында бер йыл уҡып ала. Искәндәрбәккә 13 йәш булғанда, 1885 йылда, атаһы Рәсәй мосолмандарының диниә назараты мөфтөйө итеп тәғәйенләнеп, Өфө ҡалаһына күсәләр.

Искәндәрбәктең ағаһы Арыҫланғәле (1862–1908) Ырымбурҙағы Неплюев кадет корпусын тамамлап, хәрби хеҙмәттә йөрөй. Штаб-ротмистр чинын ала. Һуңынан Өфө ҡала думаһы гласныйы, йәғни депутаты итеп һайлана. Артабан Өфө округ судында поверенный (суд эштәрен алып барыу менән шөғөлләнеүсе кеше) булып эшләй. Искәндәрбәк Солтанов та юрист һөнәрен һайлай. Ҡаҙан университетының юридик факультетын тамамлаған булһа кәрәк. Революцияға тиклем адвокат булараҡ абруй ҡаҙана. Присяжный поверенный, йәғни суд палатаһы эргәһендәге дәүләт хеҙмәтендәге адвокат булып эшләй. Искәндәрбәк 1905 йылда урыҫ ҡыҙы Анна Рябикинаға өйләнә. Бының өсөн уның кәләше Ислам динен ҡабул итеп, Ғәйнелхаят тигән исем ала. Никах шәриғәт ҡанундары буйынса үткәрелә. 20-се быуат башында Өфөлә урыҫ ҡыҙының башҡортҡа кейәүгә сығып, Ислам динен ҡабул итеүе башҡа һыйырлыҡ түгел, әлбиттә. Әммә Искәндәрбәктең атаһы Мөхәмәтйәр Солтановтың мөфтөй булыуын, иҫкә төшөрһәк, ғәжәпләнерлек урын юҡ. Был Солтановтарҙың абруйы тураһында ла һөйләй.

1917 йылда батша власы ҡолатылып, азатлыҡ елдәре иҫкәс, башҡорт милли интеллигенцияһы башҡорт халҡының хоҡуҡтарын хаҡында һүҙ күтәрә. Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте башҡорттарға автономия яулау идеяһын көн үҙәгенә сығара. Үҙ халҡының революцияға тиклемге хоҡуҡи хәлен, дөрөҫөрәге хоҡуҡһыҙ хәлдә көнитмешен күреп йәшәгән адвокат Искәндәрбәк Солтанов та милли хәрәкәткә ҡушыла. 1917 йылдың 8-20 декабрендә үткән 3-сө Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайында милли хәрәкәт лидерҙары Зәки Вәлиди, Шәриф Манатов, Юныс Бикбов, Сәғит Мерәҫовтар менән бергә Башҡортостан автономияһының Кесе ҡоролтайына ағза итеп һайлана. Бынан тыш Башҡорт хөкүмәте составына индерелә.

Әммә 1918 йылдың февраль башында Ырымбурҙа Башҡорт хөкүмәте большевиктар тарафынан ҡулға алынып, Башҡортостан автономияһын тормошҡа ашырыу эше 1918 йылдың июненә тиклем туҡтап ҡала. Был осорҙа Искәндәрбәк Солтанов Өфөгә үҙ ғаиләһенә ҡайтҡан булһа кәрәк.

1918 йылдың июнендә Силәбе ҡалаһында Башҡорт хөкүмәте тергеҙелеү менән И. Солтанов башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороу эшенә йәлеп ителә. Себер хөкүмәте менән милли ғәскәрҙе тәьмин итеү тураһында һөйләшеү өсөн 1918 йылдың авгусында Зәки Вәлиди олпат һәм тәжрибәле эшмәкәр Искәндәр Солтановты Омск ҡалаһына ебәрә. Бында ул Себер хөкүмәтенең хәрби министры менән һөйләшеүҙәр алып бара. 11 августа И. Солтанов Омскиҙан Ырымбурға Зәки Вәлидигә былай тип телеграмма һуға: *"Переговоры приостановились до возвращения министров Областной думы и окончательного согласия [с] требованиями военного министра, о которых телеграфно невозможно сговориться. Выезжаем сами. Деньги добровольческим отрядам министр обещал отпустить. Продовольствие для Вернеуральского [и] Орского районов дают за наличный расчет"*.

Омскиҙан ҡайтҡандан һуң, Искәндәр Солтанов Башҡорт хөкүмәте рәйесе Юныс Бикбов, Зәки Вәлиди, Сәғит Мерәсов, Абдулла Әҙеһәмовтар менән берлектә 8–20 сентябрҙә Өфөлә үткән Дәүләт йыйылышында ҡатнаша. Бында большевиктарға ҡаршы көрәшкән көстәрҙең берләшкән органы – Бөтә Рәсәй ваҡытлы хөкүмәте (Өфө Директорияһы) ойошторола. Башҡорт хөкүмәт вәкилдәре автономия хоҡуғы һәм милли ғәскәрҙәрҙең үҙаллылығын яҡлап сығыш яһай.

1918 йылдың 29 сентябренән Искәндәр Солтанов Ырымбурҙа Башҡорт хөкүмәтенең Хоҡуҡ бүлеге мөдире булып эшләй башлай. Әммә 1918 йылдың ноябрендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәренең хәле ҡатмарлаша төшә. Себерҙә власты үҙ ҡулына алған адмирал Колчак, Өфө Директорияһы ағзаларын ҡулға алып, үҙен Рәсәйҙең баш хакимы итеп иғлан итә. Оҙаҡламай Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәрен таратыу тураһында фарман бирә. Колчак менән һөйләшеү өсөн Искәндәр Солтанов, Мөхәмәтхан Ҡулаев, генерал Хажиәхмәт Ишбулатов һәм Әүхәҙи Ишмырҙиндар Омскиға юллана. Зәки Вәлиди 14 декабрҙә фронттағы башҡорт полк муллаларына ебәргән йәшерен хатында: *"Доктор Кулаев, генерал Ишбулатов, Султанов и Ишмурзин еще до сих пор не вернулись. Ездивший туда (Омскиға – А. Я.) капитан Юнусов вернулся. Письмо от них получили сегодня. Они пишут о плохом положении Колчака"*, – тип хәбәр итә.

Совет власы яғына сығыр алдынан 1919 йылдың 29 ғинуарында, Темәс ауылында үткән йыйылышта Башҡорт хөкүмәтенең составында үҙгәрештәр булып үтә. Яңы рәйес итеп Мөхәмәтхан Ҡулаев һайлана. Ни сәбәптәндер Искәндәрбәк Солтанов Илдархан Мутин һәм генерал Ишбулатов менән бергә хөкүмәт составынан сығарыла.

Ошо осорҙан алып И. Солтановтың исеме Башҡорт милли хәрәкәте документтарында осрамай. Бәлки, Башҡорт хөкүмәтенең Совет власы яғына сығыу ниәтен хупламағандыр. Быны өсөн сәбәптәр етәрлек: күренекле дворяндар

нәçеленән, мөфтөй ғаиләһенән. Искәндәрбәк Мөхәмәтйәр улы Солтановтың артабанғы яҙмышы билдәһеҙ.

## Сығанаҡтар:

А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Ч. 1. Уфа, 2005. С. 87, 159, 292, 345.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 1. Уфа, 2002. С. 216.
Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 39, 252, 283, 543.
Хөсәйенов Ғ. Б. Башҡорт халҡының рухи донъяһы. – Өфө, 2003. 76–83-сө биттәр.



## ХӘБИБУЛЛА ҒӘБИТОВ
## 1886–1939

Хәбибулла Ғәбделҡаһир улы Ғәбитов – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан, уның матбуғат органдарына етәкселек иткән эшмәкәрҙәрҙең береһе. Ул 1886 йылдың майында Ырымбур губернаһы Орск өйәҙенең 2-се Түңгәүер улысының (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Баймаҡ районы) Әбделкәрим ауылында тыуған. Троицк ҡалаһындағы данлы "Рәсүлиә", унан һуң Өфөләге "Ғәлиә" мәҙрәсәләрендә белем ала. Революцияға тиклем мөғәлимлек итә.

1917 йылда Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушыла. Милли хәрәкәттең тәүге матбуғат органы – "Башҡорт" гәзитен сығарыу менән шөғөлләнә. 1917 йылдың авгусында үткән II Башҡорт ҡоролтайында Башҡорт үҙәк шураһына һайлана.

1917 йылдың декабрендә, Хәбибулла Ғәбитов Ырымбурҙа үткән III Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайында Башҡортостан автономияһының Кесе ҡоролтайы составына инә. Ҡоролтай мәлендә Ш. Бабич, Г. Ҡарамышев, В. Ғәбитов, Ф. Әхмәҙуллиндар менән бергә башҡорт йәштәренең "Тулҡын" берекмәһен ойоштора. Уның башҡарма комитетына һайлана.

1918 йылдың ғинуарында Башҡорт хөкүмәте Х. Ғәбитовты автономияның Тамъян-Ҡатай, Ҡыуаҡан кантондары башҡармаларын ойоштороу өсөн Верхнеуральск өйәҙенә ебәрә. Февраль башында, Ырымбурға ҡайтып барышлай, Баймаҡта урынлашҡан башҡорт отрядына һуғыла. Ырымбурҙа Башҡорт хөкүмәте ҡулға алынғас, 16 февраль (2 март) Баймаҡ Советы башҡорт отрядын, төндә килеп баҫып, командирҙары Ғ. Иҙелбаев менән Ғ. Мағазовтарҙы, улар менән бергә Хәбибулла Ғәбитовты ла ҡулға ала.

22 февралдә (яңыса 4 мартта) ҡыҙылдар башҡорт офицерҙарын ата. Большевиктарҙың суды Х. Ғәбитовты, хәрби кеше булмағанға күрә, атмаҫҡа ҡарар итә (Аҙаҡ, 1918 йылдың көҙөндә, был фажиғәле ваҡиға тураһында Ғәбитов "Башҡортостан хөкүмәтенең теле" гәзитендә яҙып сыға).

Артабан Ғәбитов Мәскәүҙә Милләттәр эштәре буйынса комиссариат (Наркомнац) янындағы Үҙәк мосолман комиссариатында эшләй. Комиссариаттың

Башҡорт бүлегендә агитация эшен етәкләй. Был осорҙа Үҙәк мосолман комиссариатында башҡорт эшмәкәрҙәренән Ш. Манатов, Ғ. Айытбаевтар эшләй.

1918 йылдың июнендә Башҡорт хөкүмәте ҡабат тергеҙелә. Июль айында Сәғит Мерәҫов етәкселегендә Ырымбурҙа Башҡорт хөкүмәтенең Хәрби бүлеге эшләй башлай. Хәбибулла Ғәбитов Ырымбур хәрби бүлегенең баҫмаһы – "Башҡорт тауышы" гәзитен сығарыуҙы юлға һала. Артабан "Башҡортостан хөкүмәтенең теле" гәзитенең мөхәррире булып эшләй. Ошо осорҙа Х. Ғәбитов әҙәби эшмәкәрлек менән әүҙем шөғөлләнә, илһамланып шиғырҙар яҙа. "Башҡорт моңдары" тип исемләнгән шиғри йыйынтығы баҫтырып сығара. 1918 йылдың 4 октябрендә, гәзит аша, "Һалдат йырҙары" (Башҡорт ғәскәрҙәренә бүләгем) тип исемләнгән шиғырында башҡорт һалдаттарына былай тип мөрәғәжәт итә:

Беҙ Уралдың балаһы,
Башҡортостан данаһы.
Уралҡайға тиң түгел
Дошмандарҙың зәмин ҡалаһы,
Урал кеүек ер ҡайҙа?
Беҙ зәмин кеүек ир ҡайҙа?
Эйе шул, шулай шул,
Беҙ барабыҙ дошманға,
Арыҫландай атылып.
Күкрәгенә дошмандың
Үткер пуля батырып.
Ҡаршы сыҡ та яуға кит!
Беҙ батыр бит, беҙ егет!
Эйе шул, шулай шул,
Беҙ батыр бит, беҙ егет!
Беҙ сигенеү белмәйбеҙ,
Дошман көсөн күрмәйбеҙ,
Һуғыш беҙгә мәрәкә,
Йәрәхәтте һиҙмәйбеҙ.

1918 йылдың октябрендә Башҡорт хәрби шураһы 7-се Башҡорт уҡсы полкын ойоштора башлай. Был ғәскәри частҡа полк мулла итеп Хәбибулла Ғәбитовты тәғәйенләй. Ләкин ноябрҙә, аҡтарҙың ҡаршылығы арҡаһында, Хәрби шура 7-се полкты ойоштороу эшен туҡтатырға мәжбүр була. Ошо айҡанлы Башҡорт хәрби шураһының тағы бер фарманы донъя күрә: "*Назначенный полковым муллой седьмого полка мулла Хабибулла Габитов назначается исполняющим должности полкового муллы первого Башкирского полка, бывший мулла означенного первого полка остается помощником муллы того же полка*", – тиелә фарманда.

1919 йылда Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, Хәбибулла Ғәбитов Башҡортостан хәрби эштәр комиссариатында

эшләй. Артабан Эске эштәр халыҡ комиссариатының информацион-инструкторлыҡ идаралығында инструктор булып йөрөй. 1920 йылдың авгусынан Бөрйән-Түңгәүер кантонына башҡарма комитет ағзаһы булып эшләй.

20-се йылдар Хәбибулла Ғәбитовтың ижадҡа бай осоро була. 1923 йылда "Урал йырҙары" исемле шиғри йыйынтығы донъя күрә, 1924 йылда "Ынйыҡай менән Юлдыҡай" пьесаһын яҙа. Тел ғилеме өлкәһендә хеҙмәт емештәре булып "Башҡортса яҙыу ҡоралы" (1924), "Башҡорт теленең имләһе", "Башҡорт теленең грамматикаһы" (1925) тигән авторҙаш китаптары донъя күрә. Ғәбделәхәт Вилданов менән берлектә "Боронғоларҙың һүҙҙәре. Башҡорт телендә мәҡәлдәр һәм тапҡыр һүҙҙәр" йыйынтығы сыға.

1926 йылдан Х. Ғәбитов "Яңалиф" (башҡорт яҙыуын ғәрәп графикаһынан латиницаға күсереү) комитетына етәкселек итә. 30-сы йылдар башында "Южураллес" тресында эшләй.

1935 йылдың апрелендә, милләтселектә ғәйепләп уны ҡулға алып, төрмәгә ябалар. Артабан биш йылға иркенән мәхрүм ителеп, алыҫ Магадан ҡалаһына ебәрелә. 1939 йылда шунда вафат була.

## Сығанаҡтар:

ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 132. Л. 123.
ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 30. Л. 41.
А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Кн. 1. Уфа, 2005. С. 54, 87, 117, 118, 339.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 1. Уфа, 2002. С. 157, 216, 245, 308–334, 406, 457.
Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 273, 416, 420, 461, 470.
Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 2. Уфа, 2003. С. 150.
Шунда уҡ. Т. 4. Ч. 1. Уфа, 2008. С. 408, 410.
Книга памяти жертв политических репрессий Республики Башкортостан. Т. 2. Уфа, 1999. С. 20.
Башкирская энциклопедия. Т. 2. Уфа, 2006. С. 179.
Рәүеф Насиров. Уҙамандарҙы эҙләйем. Өфө, 1997. 176–190-сы биттәр.

# УСМАН ҠЫУАТОВ
# 1897–1956

Усман Мөхәмәтғәлим улы Ҡыуатов – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан эшмәкәрҙәрҙең береһе. 1896 йылда Ырымбур губернаһы Орск өйәҙенең Ҡыуат-Бикбирҙе ауылында (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Ейәнсура районына ҡараған Үтәғол ауылы) тыуған. Данлыҡлы башҡорт дворяндары Ҡыуатовтар нәҫеленән.

Ҡыуатовтар  кантон идаралығы осоронда (1798–1865) кантон башлыҡтары, ярҙамсылары булып хеҙмәт итә. Араларынан иң күренеклеһе Әлмөхәмәт Ҡыуатов 1848 йылда Ҡаҙан университеты философия факультетының Көнсығыш телдәр бүлеген тамамлап, киләһе йылына филология (словесность) буйынса кандидатлыҡ дәрәжәһен ала.

Усман Ҡыуатовтың атаһы Мөхәмәтғәлим Әбделғәни улы (1873–1937) үҙ заманының уҡымышлы, алдынғы ҡарашлы кешеләренең береһе, мәғрифәтсе була. Ырымбур гимназияһында белем ала. Донъяуи фәндәр уҡытыуға ҡоролған тиҫтәнән ашыу башҡорт мәктәбен асыуға өлгәшә. 1891–1894 йылдарҙа үҙе асҡан Сермән ауылы мәктәбендә директор булып эшләй. В. В. Катаринскийға “Букварь для башкир” (1892) китабын әҙерләүҙә ҙур ярҙам күрһәтә. Улдары Ғүмәр менән Усманды юғары белемле итеү өсөн тырыша. Тәүҙә өлкән улы Ҡаҙан университетының медицина факультетына уҡырға инә, унын артынса Усман шул уҡ факультетҡа бара. Әммә университеттың 4-се курсында уҡығанда илдә ҙур үҙгәрештәр башлана. Рәсәйҙә батша власы ҡолатылып, демократия һәм азатлыҡ һулышы бөтә ил халкын ҡуҙғата. Усман Ҡыуатов башы-аяғы менән Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә сума.

1917 йылдың июнь аҙағында Усман Ҡыуатов Ырымбурҙа үткән Башҡорт өлкә бюроһының йыйылышында ойошторолған милли хәрәкәткә етәкселек итеү органы –  Башҡорт халҡының иттифаҡи бюроһы составына ҡабул ителә. 1917 йылдың 20–27 июлендә Ырымбурҙа үткән 1-се Башҡорт ҡоролтайында У. Ҡыуатов Башҡорт үҙәк шураһының башҡарма комитетына һайлана. Ҡоролтайҙан һуң ул Әхмәтзәки Вәлиди, Илдархан Мутин менән берлектә Петроградҡа юллана. “*Мине, Усман Ҡыуатов исемле университет студентын һәм Илдархан Мутин тигән бер зыялыны башҡорттарҙың ер хоҡуғын һәм батша заманынан йыйылып килгән башҡорт капиталын, Ырымбурҙағы Башҡорт ғәскәре биналарын, парк һәм баҡсаларын, месетен (Каруанһарай) кире алыу мәсьәләләре буйынса Керенский хөкүмәте менән осрашыу, быуындан быуынға ҡалып килгән был дәғүәләрҙе хәл итеү өсөн Петроградҡа ебәрҙеләр... Усман Ҡыуатов, йәш кенә медицина студенты булыуына ҡарамаҫтан, башҡорт ер хоҡуғы мәсьәләләләрен аңлай ине. Беҙ хөкүмәткә тапшыра торған документта 1906 йылдың 9 ноябрендә, 1910 йылдың 19 ноябрендә, 1911 йылдың*

*20 майында сығарылған һәм Башҡортостанға урыҫ күскенселәре килеүҙе көсәйткән закондарҙы үҙгәртеү талабы ҡуйылды*", – тип яҙа хәтирәләрендә Вәлиди. Башҡорт вәкилдәре Петроградта ер мәсьәләләрендә уңышҡа өлгәшә алмаһа ла, Каруанһарайҙы башҡорт халҡына ҡайтарыу эшен ыңғай хәл итеп ҡайта.

1917 йылдың октябрендә Башҡорт үҙәк шураһы Усман Ҡыуатовты Ырымбур губернаһы башҡорттары исеменән Ойоштороу йыйылышына (Учредительное Собрание) депутатлыҡҡа кандидат итеп күрһәтә.

1918 йылдың ғинуарында Усман Ҡыуатов башҡорт делегацияһы составында Ҡаҙанда үтәсәк мосолмандарҙың 2-се Хәрби съезына юллана. Әйткәндәй, ошо осорҙа Усмандың атаһы Мөхәмәтғәлим Ҡыуатов Үҫәргән кантонының съезында күпселек тауыш менән кантон башҡармаһы рәйесе итеп һайлана.

Февраль башында Башҡорт хөкүмәтенең большевиктар тарафынан ҡулға алынғанын ишетеп, Хәрби съездың башҡорт делегаттары Усман Ҡыуатов, Мөхәмәтхан Ҡулаев, Муса Мортазин, Хафиз Ҡушаевтар Ырымбурға ҡайтып төшә. Большевиктар А. Дәүләтшин менән Б. Шәфиев тарафынан ойошторолған яңы орган – Башҡортостандың Ваҡытлы Революцион Советы менән һөйләшеүҙәр һөҙөмтә бирмәй. Улар Башҡорт хөкүмәте ағзаларын төрмәнән сығарарға уйламай. Ҡарашы буйынса большевиктарға яҡын торған Муса Мортазин Советҡа ағза итеп һайлана. Ә Усман Ҡыуатов менән Мөхәмәтхан Ҡулаев большевиктар менән уртаҡ тел таба алмайынса ҡайтып китергә мәжбүр була.

1918 йылдың июнендә Силәбе ҡалаһында Башҡорт хөкүмәте яңынан тергеҙелә. Хөкүмәттең Хәрби бүлеге Башҡорт армияһын ойоштороу эшенә тотона. Июль айында башҡорт эшмкәрҙәре Ырымбурға килеп, Хәрби бүлектең урындағы бүлексәһен ойоштора. Усман Ҡыуатов Ырымбурға килеп Хәрби бүлектең эшенә ҡушылып китә. Уға Үҫәргән кантонында ирекле отряд ойоштороу эше йөкмәтелә. Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә У. Ҡыуатов үҙенә һалынған бурысты үтәп сыға – Үҫәргән кантонында 300 кешелек ирекле отряд ойоштороп, уның менән етәксеһе булып китә. "*Башҡорт хөкүмәте вәкиле студент Усман Ҡыуатов инициативаһы менән Орск өйәҙендә башҡорттарҙың тәүге ирекле ғәскәре ойошторолды. Һәр береһе ҡоралланған, патрондары ла етерлек. Ирекле ғәскәр ойоштороуҙы һәр ерҙә халыҡ ҙур шатлыҡ менән ҡаршы ала. 1-се Үҫәргән улысы уларҙың хөрмәтенә, байраҡтар ҡуйып, һый әҙерләп, ҙур байрам үткәрҙе. Һәр кем ғәскәргә ярҙам күрһәтә*", – тип хәбәр итә 1918 йылдың 20 авгусында "Башҡорт хөкүмәтенең теле" гәзите.

Сентябрь аҙағында Усман Ҡыуатов, Үҫәргән ирекле отрядын прапорщик Әмировҡа тапшырып, Ырымбурға Башҡорт хөкүмәте ҡарамағына эшкә күсә. Хөкүмәттең Эске эштәр бүлегенең ваҡытлы сәркәтибе итеп тәғәйенләнә. 1 октябрҙә Башҡорт хөкүмәтенең махсус вәкиле итеп кире Үҫәргән кантонына ебәрелә. Артабан У. Ҡыуатов Башҡорт хөкүмәтенең Эске эштәр бүлеге мөдире Аллабирҙе Йәғәфәровтың ярҙамсыһы булып эшләй. Әйткәндәй, был осорҙа, Башҡорт хөкүмәтендә Ҡыуатовтар нәҫеленән тағы бер вәкил – Әлмәхәмәт

кантондың улы Хужәхмәт Ҡыуатов эшләй. Ул 1918 йылдың сентябрендә хөкүмәттең ғәскәри милиция бүлеге начальнигы итеп тәғәйенләнә, ә быға тиклем Етеһыу (Семиречинск) губернаһында өйәҙ начальнигы булып хеҙмәт иткән була.

1919 йылдың 26 ғинуарында Башҡорт хөкүмәтенең составында үҙгәрештәр булып үтә. Хөкүмәттең рәйесе – Мөхәмәтхан Ҡулаев, ә хөкүмәттең ағзалары итеп З. Вәлиди, Ю. Бикбов, А. Йәғәфәров һәм А. Әҙеһәмовтар менән берлектә Усман Ҡыуатов та һайлана. Хөкүмәт ағзаһы булараҡ, ул Башҡортостан автономияһының артабанғы яҙмышын хәл иткән мөһим ҡарарҙарҙы ҡабул итеүҙә ҡатнаша. 16 февралдә Башҡорт хөкүмәте тиҙ арала Совет власы яғына сығыу тураһында ҡарар ҡыла.

Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, 21 февраль көнө 1-се Бөтә Башҡорт хәрби съезында Усман Ҡыуатов Башҡорт Совет автономияһының революцион хөкүмәте – Башревкомдың ағзаһы итеп һайлана. Ике көндән Башревком Башҡорт республикаһының 15 комиссиариатын ойошторорға ҡарар итә. Финанс һәм һаулыҡ һаҡлау комиссары вазифаһы У. Ҡыуатовҡа йөкмәтелә. Әммә апрель башында, Абдулла Әҙеһәмов сирләп китеү сәбәпле, Ҡыуатовты Ырымбур ҡалаһына, 1-се армия штабында Башревком вәкиле итеп ебәрәләр. Был осорҙа Колчак армияһы, контрһөжүмгә күсеп, Ҡыҙыл Армия ғәскәрҙәре Башҡортостандан сигенә башлай. 14 апрелдә Зәки Вәлиди: “*Постарайтесь скорее вывести из Оренбурга дивизион 2-го полка, а также ходатайствуйте о скорейшей подаче подвижного состава для войска, находящиеся в Тоцке*”, – тип телеграф аша У. Ҡыуатов менән С. Мағазовҡа хәбәр ебәрә. Ырымбурҙан эвакуацияланырға әҙерләнеп йөрөгәндә, Орск өйәҙе урыҫтары ялыуы буйынса, губЧК вәкилдәре Усмандың фатирын тентеп-тикшереп, 1918 йылда Үҫәргән ирекле отрядына етәкселек итеүгә бәйле документтарын таба. Уны аҡ гвардия хәрәкәтендә ҡатнашыуҙа ғәйепләп, төрмәгә ябып ҡуялар. Ырымбурҙағы хәлдәр тураһында Башревком рәйесе урынбаҫары М. Ҡулаев Мәскәүгә Милләттәр эштәре буйынса халыҡ комиссары Сталинға хәбәр итә: “*На основании параграфа 16 заключенного договора члены Башкирского правительства не подлежат репрссиям за свою минувшую деятельность. Между тем бывший член Башкирского правительства и член Башвоенревкома Куватов был арестован Оренбургской чрезвычайной комиссией. Башвоенревком просит принят меры к разъяснению дела и преданию суду виновников ареста Куватова*”. Ошондай уҡ телеграмманы Зәки Вәлиди һәм Харис Йомағолов та ебәрә. Оҙаҡламай Ырымбур губЧК-һы, Мәскәүҙең бойороғо буйынсалыр, ахыры, Усман Ҡыуатовты Һамар ҡалаһына Башревком ҡарамағына ебәрергә була. Апрель аҙағында Һамарға килеү менән Усманды, Һамар губернаһы башҡорттары араһында мобилизация үткәреү эшен йөкмәтеп, Пугачев өйәҙенә ебәрәләр. Әммә уны чекистар күҙ уңынан ысҡындырмай. Хәҙер уның эшен 1-се армияның махсус бүлеге һәм Һамар губЧК-һы тикшерергә тотона.

15 майҙа командировканан Саранский ҡалаһына Башревкомға ҡайтыуына, хәрби комиссар Зәки Вәлиди, Һамар губЧК-һы һәм 1-се армияның махсус

бүлегенең талабы арҡаһында, күрәһең, Ҡыуатовты ҡулға алырға бойороҡ бирә. Бынан тыш ул Башревком составынан сығарыла. 19 май: “*Сегодня третий день, как сижу в заключении, и никакого обвинения Вадиловым мне не предъявлено... Вместе с тем прошу внести на собрании ревкома вопрос о выдаче меня на поруки кому-нибудь из членов ревкома*”, – тип Башревком рәйесенә ғариза яҙа. Зәки Вәлиди, һамар губЧК-һы һәм 1-се армияның махсус бүлеге тынысланғанса Усман Ҡыуатовты һаҡ аҫтында тоторға ҡарар иткәндер, буғай. Бер ай тирәһе һаҡ аҫтында ултырғандан һуң, Башревком уны Яхъя Салиховҡа яуаплылығына, порукаға тапшыра. Бер аҙнанан Ҡыуатовты Башсовнархоздың ер эштәре бүлеге коллегияһы ағзаһы итеп тәғәйенләйҙәр.

1919 йылдың авгусында Башревком Башкортостанға ҡайта. У. Ҡыуатов Башревкомдың уполномоченныйы сифатында Саранск ҡалаһында ҡалдырыла. Октябрҙең аҙағында ғына Стәрлетамаҡҡа саҡыртып алына. 1920 йылдың башында ул ер эштәре буйынса халыҡ комиссары вазифаһын башҡара. Үҙәк власть 1920 йылдың 19 майындағы декреты менән Башҡортостандың автономия хоҡуҡтарын милли-мәҙәни өлкә кимәленә ҡалдыра. Мәскәүҙең ҡырҡа үҙгәргән сәйәсәтен ҡабул итмәйенсә, Башревком ағзалары, шул иҫәптән Усман Ҡыуатов та, Төркөстанға сығып китә. Бында ла большевиктар власы урынлаштырылғас, У. Ҡыуатов Германияға эмиграцияға китә һәм Берлин ҡалаһына барып урынлаша. 1924 йылдың февралендә Берлинға Зәки Вәлиди менән Фәтхелҡадир Сөләймәнов килә. З. Вәлидиҙең Усманды эмиграциялағы сәйәси эшкә йәлеп итергә тигән ниәтләй. Әммә уларҙың килеүенә, У. Ҡыуатов Рәсәйгә ҡайтып киткән була. “*Төркөстандан Фәйзулла хужа хөкүмәте Берлинға 70 талип ебәргәйне. Шулар араһында... Башҡортостандан Усман Ҡыуатов та бында булған. Усман үҙе сәйәси көрәшкә бик тоғро егет ине. Тап беҙ Берлинға килгән арала уның ҡайтып китеүен белеп, бик нык бошондоҡ. Сөнки башҡорттарҙан көрәште дауам итерлек, университет тамамлаған, өҫтәүенә немецсә яҡшы белгән бер кешебеҙ ҙә юҡ ине.*”, – тип яҙа үҙенең хәтирәләрендә Вәлиди.

Рәсәйгә ҡайтһа ла, күп кенә Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте эшмәкәрҙәре кеүек үк, Башҡортостандан ситтә йәшәргә тура килә. Ошо арҡала ғына, 30-сы йылдарҙың ҡанлы репрессияларынан ҡотолоп ҡала алғандыр, күрәһең. Ул ғүмеренең һуңғы йылдарын Әзербайжанда, Баҡы ҡалаһында үткәрә. Баҡы медицина университетында уҡыта.

Усман Мөхәмәтғәлим улы Ҡыуатов 1956 йылда ошонда вафат була.

**Сығанаҡтар:**

ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 155. Л. 4.
ЦГИА РБ. Ф. 1201. Оп. 2. Д. 3. Л. 21.
А. А. Валидов – организатор автономи Башкортостана (1917–1920). Ч. 1. Уфа, 2005. С. 53, 238.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 1. Уфа, 2002. С. 142, 178, 354.
Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 282, 285, 432, 543, 447, 553, 579.

Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 2. Уфа, 2003. С. 180, 312, 338, 339, 340, 429, 465, 467, 478, 480, 665.
Вәлиди Туған Ә. Ә. Хәтирәләр. Өфө, 1996. 186, 586, 610-сы биттәр.
Кульшарипов М. М. Башкирское национальное движение (1917-1921 гг.). Уфа, 2000. С. 96.
Әсфәндиәров Әнүәр. Олатайҙарҙың бар тарихы...– Өфө, 1996. 97–102 биттәр.
Башкирская энциклопедия. Т. 3. Уфа, 2008. С. 562–564.



## ҒАБДУЛЛА ИБРАҺИМОВ
## 1895 – 1937

Ғабдулла Ғәбделғәлләм улы Ибраһимов (псевдонимы Ибраһим Ҡыпсаҡ) – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан эшмәкәрҙәрҙең береһе. 1895 йылда Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙенең Ҡараҡыпсаҡ улысына ҡараған Сапыҡ ауылында тыуған. Тәүҙә тыуған ауылында, атаһы, указлы мулла Ғәбделғәлләмдең мәҙрәсәһендә белем ала. 1914 йылдан Ҡарғалы мәҙрәсәһендә, артабан Ырымбур ҡалаһында уҡый.

1918 йылда Башҡортостан автономияһының Ҡыпсаҡ кантон башҡармаһында сәркәтип булып эшләй. Ошо осорҙа Ырымбурҙа сыҡҡан Башҡорт милли хәрәкәтенең матбуғат органы – “Башҡортостан хөкүмәте теле” гәзитенә әүҙем яҙыша.

Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, һәләтле егетте Башревкомға инструктор-ойоштороусы итеп алалар. 1919 йылдың майында Ғабдулла Ибраһимов Мәскәүгә Я.М. Свердлов исемендәге Коммунистик университетҡа уҡырға ебәрелә. 1919 йылдың көҙөндә, Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы комиссары Нуриәғзәм Таһиров Мәскәү университетында уҡыусы башҡорт курсанттарын Петроградҡа, башҡорт ғәскәрҙәре ҡарамағына ебәреүҙе һорап мөрәжәғәт итә. Был осорҙа 10 меңдән ашыу яугирҙы тәшкил иткән Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө тәжрибәле сәйәси эшмәкәрҙәргә ҙур ҡытлыҡ кисерә.

1919 йылдың октябрендә Коммунистик университетты тамамлаған, курсанттар Ибраһимов, Сәғәҙиев һәм Лотфуллиндар Петроградҡа килә. Сәғәҙиев Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһының сәйәси бүлеген етәкләһә, Ғабдулла Ибраһимов күптән түгел Бәләбәйҙән килгән Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһына (4 меңдән ашыу кеше) сәйәси комиссар итеп тәғәйенләнә. Һөҙөмтәлә Ғ. Ибраһимов Петроградтағы башҡорт ғәскәрҙәренең сәйәси етәкселәренең береһе булып китә.

Ибраһимов бында, ғәскәрҙәр араһында, Башҡорт автономияһы етәкселегенең сәйәси йүнәлешен алып бара, әүҙем яҙыша. Башҡорт кавалерия дивизияһы һәм Башҡорт уҡсы бригадаһының сәйәси бүлектәре 1920 йылдың

февралендә, Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәренең Совет власы яғына сығыуының бер йыллығына бағышлап, “Бәхет көнө” исеме аҫтында альбом-йыйынтыҡ, әҙерләп сығара. Был йыйынтыҡ милли хәрәкәттең пропагандистик баҫмаһы булараҡ, һалдаттар араһында таратыла. Комиссар Ибраһимов “Бәхет көнө” йыйынтығында “Башҡортостан хәрәкәте” тип исемләнгән мәҡәләһе менән сығыш яһай. Башҡорт һалдаттарына автономия өсөн көрәштең тарихын, Совет власы яғына сығыуҙың уның әһәмиәте хаҡында бәйән итә. “*Күп тотҡонлоҡта торған халыктың яҙмышы, яхшы тормошо фәкәт Совет власын урынлаштырганда гына мөмкин буласагына ышанып, бөтә Башкортостан халкы бөгөнгө көндө иң ҙур, иң хөрмәтле байрамдарҙан һанай. Петроградтагы башкорт гәскәрҙәре, бигерәк тә, һәр һугыштан, һәр бер фронттан яхшы хәбәре булып, был байрамдың* (бер йыллығы – А. Я.) *инкилаб мәркәзе Питерҙа тура килеүенән файҙаланып, яңы-яңы өмөттәр менән якты киләсәкле Башкортостандың йәшәүе фәкәт Совет власы менән генә тәьмин ителәсәгенә ышанып, бөтөн көс, бөтөн корбандарының шуга сарыф ителеүенә әһәмиәт бирә. Һәм бөтә иҙелгән халыктарҙың томошоноң яхшы юлга куйылыуы хакына бирелгән корбандарга карамаҫтан, теләгән эштәребеҙҙе майҙанга куйыуга каршы булган бөтә революция дошмандары, элекке заман кешеләре башкорт халкын юлдан сыгарырга, уны советтарга каршы куйырга бик күп тырышалар. Ошо максат менән был көндәрҙә: “Советтар инде башкорттарҙы бөтөнләй бөтөрәләр”, – тип, провокация тараталар, ялганлайҙар. Иптәштәр, ул дошмандарҙың һүҙҙәре*”, – тип яҙа комиссар.

Юденич ғәскәрҙәре ҡыйратылған 1920 йылдың башында Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы Новгород губернаһына, ә Башҡорт уҡсы бригадаһы полктары Карел муйынына (Карельский перешеек) сик буйы хеҙмәтенә күсерелә. Ғабдулла Ибраһимовты Башҡортостанға ҡайтҡан Нуриәғзәм Таһировтың урынына кавалерия дивизияһы комиссары итеп тәғәйенләйҙәр. Петроградты обороналауҙа күрһәткән хеҙмәттәре өсөн уны юғары дәүләт наградаһы – РСФСР-ҙың Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләйҙәр (1921 йылда).

Комиссар Ибраһимов хәрби хеҙмәттән 1920 йылдың көҙөндә генә ҡайта. Ҡайтыу менән ул Башҡортостандың Социаль тәьминәт халыҡ комиссары итеп вазифаһына тәғәйенләнә, 1921 йот йылында Ибраһимов “Башпомгол” рәйесе урынбаҫары булып эшләй. Граждандар һуғышынан һуң ас-яланғас ҡалған башҡорт халҡының хәлен яҡшыртыу, кот осҡос аслыҡтан ҡотҡарыу өсөн булған көсөн һалып эшләй.

Артабан РКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитетында бүлек мөдире вазифаһын биләй. 1923 йылда Ғабдулла Ибраһимов Ырымбурҙа, Каруанһарай бинаһында урынлашҡан Башҡорт педагогия техникумына директор итеп тәғәйенләнә. Ул етәкселек иткән осорҙа, техникумда башҡорт әҙәбиәтенең буласаҡ күп кенә эшмәкәрҙәре тәрбиәләнеп сыға.

Караүанһарай техникумында эшләгән осоронда Ғабдулла Ибраһимов үҙе лә әүҙем ижади эш менән мәшғүл була. 1925 йылда “Петроград өсөн көрәштә

башҡорттар” исемле, хәтирәләр менән байытылған, документаль очеркы китап булып баҫылып сыға.

1926 йылда Ғ. Ибраһимов Башпотребсоюз идараһы рәйесе итеп Өфөгә эшкә күсерелә, артабан Башҡортостандың Халыҡ мәғарифы комиссариатында эшләй. 1931 йылда Өфөнөң Комбайн моторҙары заводында (хәҙерге УМПО) бүлек начальнигы булып эшләй, һуңынан Белорет металлургия заводына директор урынбаҫары итеп тәғәйенләнә. 1934 йылда ошо йүнәлештә юғары белем алыу маҡсатында Мәскәүгә И. В. Сталин исемендәге Бөтә Союз сәнәғәт академияһына уҡырға инә. 1937 йылда, Мәскәүҙә уҡып йөрөгән мәлендә Ғабдулла Ибраһимов репрессиялана.

Үҙ халҡының тоғро улы, милли-азатлыҡ хәрәкте эшмәкәре, яҙыусы-әҙип Ғабдулла Ғәбделғәлләм улы Ибраһимовтың яҡты исеме 1957 йылда аҡлана.

## Сығанаҡтар:


ЦГИА РБ. Ф. 1780. Оп. 1. Д. 11. Л. 49.
ЦГИА РБ. Ф. 629. Оп. 1. Д. 1306. Л. 104.
ЦГИА РБ. Ф. 1107. 141. Оп. 10. Л. 13.
ЦГИА РБ. Ф. 395. Оп. 1. Д. 21. Л. 6.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 426.
Ибраһим Ҡыпсаҡ. Петроград өсөн көрәштә башҡорттар. Ватандаш. 1997, № 2.
Мостафа Солтанов. Көйөргәҙе яугирҙары. Ватандаш. 1998, № 2.
Муртазин М. Л. Башкирия и башкирские войска в гражданскую войну. М., 2007. С. 195.
Насыров Р. Уҙамандарҙы эҙләйем. Өфө, 1997. 144-147-се биттәр.
Ярмуллин А. Ш. Башҡорт ғәскәрҙәренең Петроградта сыҡҡан “Бәхет көнө” журнал-альбомы. Ватандаш. 2007, № 1.



## ҺИҘИӘТ СӘҒӘҘИЕВ
**1887 – 1937**

Һиҙиәтулла Сибәғәтулла улы Сәғәҙиев – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан эшмәкәрҙәрҙең береһе. 1887 йылда Өфө губернаһы Стәрлетамак өйәҙенең Аҙнай улысына ҡараған (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Ишембай районы) Тирмәнйылға ауылында тыуған. 1903–1911 йылдарҙа Ҡаҙан ҡалаһында "Мөхәмәҙиә" мәҙрәсәһендә белем ала. Мәҙрәсәне тамамлағас, тыуған яғына ҡайтып, революцияға тиклем Ергән ауылында уҡытып йөрөй.

1917 йылда Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә әүҙем ҡушылып китә. Юрматы кантон округы шураһының ағзаһы итеп һайлана. 1918 йылдың 15 ғинуарында Юрматы кантон округының съезында ҡатнаша. Унан һуң Һиҙиәтулла Сәғәҙиев Башҡорт үҙәк шураһы ағзаһы Муса Смаҡов менән Бәләбәй өйәҙенең Әлшәй станцияһында үтәсәк Мең кантон округының съезына йүнәлә. Башҡортостан автономияһына йәне-тәне менән ҡаршы булған татар большевиктары ҡораллы көс килтереп, съезды ҡыуып тарата. Һ. Сәғәҙиев менән М. Смаҡов саҡ-саҡ ҡасып ҡотола. "*Араларында булып, һуңынан һөйләүселәр һүҙҙәренә караганда, улар Ғәбиҙулла Ибраһимов, Ғәбделнасир Ғабдулов, Шакир Мозафаров, Рябов (урыҫ офицеры), Юлмөхәмәт Арыҫланбәков, Муса Смаҡов һәм Һиҙиәтулла Сәғәҙиевтарҙы тотоп алырға ла, әгәр ҙә аҙ ғына каршылык күрһәтһәк, шул хәйлә менән атырға булған. Тик уларға эш ҡылырға ярҙамға Дәүләкәндән килергә тейеш булған ҡыҙылдарҙың һуңлауы сәбәпле, бер аҙ аптырашта ҡалғандар. Беҙҙең тере ҡалыуыбыҙға шул сәбәп булған*", – тип яҙа үҙенең үлемдән ҡотолоуы хаҡында Һ. Сәғәҙиев.

1918 йылдың йәйендә, большевиктар власы ҡолатылып, Башҡорт хөкүмәте тергеҙелеү менән урындағы кантон органдары үҙ эшен яңынан башлай. Һиҙиәтулла Юрматы кантоны башҡармаһында эшкә тотона. Әммә 1918 йылдың декабренә фронт һыҙығы Юрматы кантоны ла килеп етә. Кантон территорияһы ҡыҙылдар менән башҡорт ғәскәрҙәре араһындағы ҡаты алыштар яланына әүерелә. Һ.

Сәғәҙиев башҡорт ғәскәрҙәре сафына күсә. *“16 ғинуарҙа офицер Чанышев менән Һиҙиәт Сәғәҙиевты, корал һәм һуғыш яраҡтары һоратып чехтарға ебәрҙек. Чехтар, Колчак менән Дутовтың ҡаршы сығыуына ҡарамаҫтан, һорауыбыҙҙы ҡәнәғәтләндерҙе”*, – тип яҙа Зәки Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә.

1919 йылдың 18 февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң һуң Сәғәҙиев 21 февралдә Темәс ауылында үткән 1-се Бөтә Башҡорт хәрби съезында ҡатнаша. Съезда сығыш яһап, делегаттарҙы Юрматы кантон башҡармаһы исеменән тәбрикләп үтә. Был оло йыйында Башҡортостандың ваҡытлы революцион хөкүмәте – Башҡорт хәрби – революцион комитеты (Башревком) ойоштоорола.

Съездан һуң Сәғәҙиев Башревкомдың комендант командаһына хеҙмәткә тәғәйенләнә. 1919 йылдың майында Башревком республика өсөн башҡорт сәйәси кадрҙарын әҙерләү маҡсатынан 30 кешене, шул иҫәптән Һиҙиәтулла Сәғәҙиевты, Мәскәүгә Я. М. Свердлов исемендәге Коммунистик университетына курстарға ебәрә. Ул университеттың Үҙәк һәм урындағы идара факультетында белем ала. Ул осорҙа юғары уҡыу йортондағы курстар өс-дүрт ай менән генә сикләнә.

1919 йылдың көҙөндә Юденич армияһы Петроградҡа яңай башлаған. Троцкийҙың фарманы буйынса башҡорт ғәскәрҙәре Петроградҡа күсерелә. Бында Башҡорт кавалерия дивизияһы һәм Башҡорт уҡсы бригадаһынан торған ун меңлек башҡорт ғәскәре туплана. Ғәскәрҙәрҙе тиҙ арала тәжрибәле башҡорт сәйәси комиссарҙар менән тәьмин итеү мәсьәләһе килеп баҫа. Башҡорт кавалерия дивизияһы комиссары Нуриәғзәм Таһиров Мәскәү университетында уҡып йөрөгән башҡорт курсанттарының бер өлөшөн Петроградҡа ебәреүҙе һорап Башревкомға мөрәжәғәт итә. Һиҙиәтулла Сәғәҙиев, Ғабдулла Ибраһимов һәм Хәйҙәр Лотфуллиндар Петроградҡа ебәрелә. Х. Лотфуллин башҡорт ғәскәрҙәренең “Салауат” гәзитенә сәкрәтип, Ғ. Ибраһимов Башҡорт уҡсы бригадаһы комиссары, Һ. Сәғәҙиев Башҡорт кавалерия дивизияһының Сәйәси бүлеге мөдире итеп тәғәйенләнә.

Бөтә фронтта Ҡыҙыл армия ғәскәрҙәре тәртипһеҙ сигенеп, Юденич армияһы Петроградҡа яҡынлашҡан осорҙа, башҡорт ғәскәрҙәрендә дошманға ҡаршы тороҙай тәртип, рух ныҡлығын тәьмин итеү бурысы Һ. Сәғәҙиевтың да иңенә ята. Был бурыс Башҡорт кавалерия дивизияһының Сәйәси бүлеге начальнигы намыҫ менән үтәп сыға. Башҡорт ғәскәрҙәре дошманды Петроградҡа үткәрмәй, ауыр юғалтыуҙар аша фронттағы хәлде кирегә үҙгәртергә ярҙам итә. Һ. Сәғәҙиев Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө командиры Хәлил Әлишев менән башҡорт ғәскәрҙәренең Петроград фронтында күрһәткән батырлыҡтарын тасуирлап “Башҡорт инҡилабы тарихы” тигән хеҙмәт яҙа. *“Улар был әҫәрҙә ун бер мең башкорт ғәскәренең Юденичты ҡурҡыта алыуы менән бергә, Советтарға ҡаршы даирәләрҙә симпатия ҡаҙаныҡ, бер көн ҡоралдарын ҡыҙылдарға ҡаршы бороп, батшаны кире ҡайтарырға ярҙам итә алырҙар, тигән өмөт уятыуҙары, икенсе яҡтан, ғәскәрҙә батырлык Петроград фронтының терәге булған 7-се Ҡыҙыл Армия мөхитендә көнләшеү тойғоһо уятыуы хаҡында яҙған”*, – тип

билдәләп үтә Зәки Вәлиди. Был хеҙмәт Башҡортостанда ташҡа баҫылмай ҡала, 1920 йыл уны Зәки Вәлиди эмиграцияға киткәндә, үҙе менән алып китә.

Юденич ғәскәре ҡыйратылғандан һуң, 1920 йылдың башында Башҡорт кавалерия дивизияһы Новгород губернаһына күсерелә. Һиҙиәтулла Сәғәҙиев Башҡорт уҡсы бригадаһына комиссар итеп тәғәйенләнеп, Петроградта ҡалдырыла. 1920 июнендә Мәскәүҙең Башҡортостан автономияһына ҡаршы сәйәсәтенә ризаһыҙлыҡ белдереп, Зәки Вәлиди етәкселегендәге Башҡорт хөкүмәте – Башревком ағзалары, көрәште дауам итеү өсөн республиканы ташлап Төркөстанға сығып китә.

Республиканың яңы етәкселеге Сәғәҙиевты Башҡортостанға ҡайтарырға була. БашЦИК рәйесе Мансырев 1920 йылдың 3 авгусында 7-се армияның Сәйәси бүлегенә: *"Мы думаем Сагадеева отозвать, назначив комиссаром Башбригады вместо него тов. Титиева, который прибудет на фронт с добровольцами... "*, – тип хәбәр итә. Ҡайтыу менән Һиҙиәт Сәғәҙиев Мәғариф комиссариаты коллегияһы ағзаһы итеп тәғәйенләнә. 1921 йылдың июленән РКП(б) Өлкә комитетында агитация һәм пропаганда бүлеген етәкләй. Шул йылдың декабрендә уны БАССР-ҙың Халыҡ мәғарифы комиссары итеп тәғәйенләйҙәр. Был юғары вазифала ике йыл эшләгәндән һуң, Башглавсудҡа эшкә күсә. 1926 йылда Башобкомда инструктор булып эшләп ала. 1926–1927 йылдарҙа Мәскәүҙә Юғары юридик курстарҙа белемен камиллаштырып ҡайтып, Башглавсуд коллегияһы ағзаһы сифатында – суд-хөкөм системаһында эшләүен дауам итә. Судта эшләгән осоронда, Сәғәҙиев хөкөмгә тартырылған дуҫтарын, таныштарын – милли хәрәкәттә ҡатнашҡан кешеләрҙе яҡлап сығыш яһай. Ошо арҡала партияның Өлкә комитеты яғынан шелтәләр ала.

1929 йылдың мартында ул Башкустпромсоюзға эшкә күсә, артабан "Южураллес" тресында уҡыта. Ошо уҡ йылда уның яҡын дуҫы, Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте лидерҙарының береһе Нуриәғзәм Таһировты ҡулға алып, 10 йылға иркенән мәхрүм итәләр. Үҙенең баш осонда ла ҡара болоттарҙың ҡуйырғанын аңлап, Һиҙиәтулла Сәғәҙиев Ҡырғыҙстанға сығып китә. Бында ул Тоҡмаҡ ҡалаһында Рабфак директоры булып эшкә төшә. Әммә оҙаҡламай 30-сы йылдарҙың ҡанлы репрессия дәүере етә. 1936 йылда ҡулға алып, Сәғәҙиевты Фрунзе (хәҙерге Бешкәк ҡалаһы) ҡалаһына төрмәгә ябыҡ ҡуйылар. Бер йылдан уны иреккә сығаралар, хатта эшенә ҡайтырға рөхсәт итәләр. Ләкин күп тә үтмәй, 1937 йылдың авгусында яңынан ҡулға алынып, Мәскәүгә оҙатыла.

Ике ай төрмәлә ултырғандан һуң, 1937 йылдың 9 октябрендә, СССР Юғары судының Хәрби Коллегияһы ҡарары буйынса Һиҙиәтулла Сәғәҙиев атыла. Сталин үлеп, уның шәхес культы фашланғас, 1957 йылда күп кенә репрессия ҡорбандар менән берлектә Һиҙиәтулла Сибәғәтулла улын да якты исеме аҡлана.

**Сығанаҡтар:**

ЦГИА РБ. Ф. 629. Оп. 1. Д. 2. Л. 34.
ЦГИА РБ. Ф. 629. Оп. 1. Д. 1306. Л. 104.

ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 127. Л. 73.
ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 10. Л. 65.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 577.
Шунда уҡ. Т. 4. Ч. 1. Уфа, 2008. С. 395, 407.
Вәлиди Туған Ә. Ә. Хәтирәләр. Өфө, 1996. 260, 299-сы биттәр.
Рәүеф Насиров, Рәйес Ҡотошев. Комиссар Сәғәҙиев. Ватандаш. 2000, № 6.
Тагиров Т. Суровая проза жизни. Уфа, 2004. С. 126–133.



## ИБРАҺИМ ИСХАҠОВ
### 1891 – 1921

Ибраһим Ейәнбай улы Исхаҡов – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан башҡорт офицерҙарының береһе, Әхмәтзәки Вәлидиҙең яҡын көрәштәше. 1891 йылда Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙе (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Стәрлетамаҡ районы) Мырҙаш ауылында тыуған. 1913 йылда батша армияһына хеҙмәткә алынып (хәрби мәктәп тамамлаған күрәһең), офицер дәрәжәһендә ҡайтып төшә.

1918 йылдың йәйендә Башҡорт армияһына хәрби хеҙмәткә саҡырыла. Штабс-ротмистр И. Исхаҡов Зәки Вәлидиҙең шәхси адъютанты һәм тән һаҡсыһы булып хеҙмәт итә. 1918 йылдың көҙөндә Вәлиди уны Айырым Башҡорт корпусының 2-се Башҡорт уҡсы полкы командиры итеп тәғәйенләй. Декабрь айына тиклем Исхаҡов үҙенең полкы менән Аҡтүбә фронтында ҡыҙылдарға ҡаршы һуғыша.

1918 йылдың 14 декабрендә Вәлиди Ибраһим Исхаҡов менән Нуриәғзәм Таһировҡа (2-се полктың муллаһы) йәшерен хат ебәрә. Унда фронтҡа һибелгән башҡорт полктарын Башҡортостан территорияһында, бер урынға тупларға тигән йәшерен фарман бирә. Исхаҡовҡа ошо фарманды башҡорт ғәскәрҙәренә таратырға ҡуша. Декабрҙың аҙағына башҡорт полктары бер урынға йыйыла башлай. Ибраһим Исхаҡов та үҙенең полкын Аҡтүбә фронтынан Башҡортостанға алып килә.

Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре 1919 йылдың февралендә Совет властарына сыға. Ә май аҙағында Саранскиҙа Башҡорт корпусы частарынан, ике уҡсы һәм ике кавалерия полктарынан торған, Айырым Башҡорт бригадаһы ойошторола башлай. Ибраһим Исхаҡов бригаданың 2-се Башҡорт уҡсы полкы командиры итеп ҡуйыла.

1919 йылдың июнь башында Реввоенсовет рәйесе Троцкий Саранскийҙағы Башҡорт бригадаһын Деникинға ҡаршы Көньяҡ фронтҡа (Украинаға) ебәрә. Бында башҡорт полктары Деникиндың армияһына ҡаршы ҡанлы һуғыштарҙа ҡатнаша. Харьков янында айырыуса ҡаты һуғыштар булып үтә. Ҡыҙылдарҙың

14-се армияһының частары тулыһынса таркалып, тәртипһеҙ рәүештә фронттан сигенгән шарттарҙа, Башҡорт бригадаһына яу яланында бик ауырға тура килә. Күп осраҡта күрше ҡыҙыл частар менән бәйләнештең булмауы, уларҙың сигенеүе арҡаһында башҡорт полктарына аҡтарҙың ҡамауында ҡалырға тура килә. Ошондай ҡамауҙарҙа ҡалып, Ибраһим Исхаҡовтың 2-се полкы айырыуса ҙур юғалтыуҙар кисерә. Полктың яртыһы тиерлек яу яланында ятып ҡала.

1919 йылдың июль башында Башҡортостандан өҫтәмә ғәскәрҙәр килеү менән бригада Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы үҙгәртелә. Зәки Вәлиди Көньяҡ фронтҡа килеп, башҡорт ғәскәрҙәренең хәле менән таныша. *"4 июля я смотрел в эшелонах уже 2-й стрелковый Башкирский полк, который несмотря на то, что терпел на фронте больше всех, сохраняет все достоинства башкирского войска, в этом полку я не заметил ничего кроме хорошего, за что приношу благодарность всем красноармейцам полка, командиру полка Исхакову и политкому Юлдашеву"*, – ти хәрби комиссар. Әммә, артабанғы ауыр һуғыштар барышында дивизия тағы байтаҡ юғалтыуҙар кисерә. Ошоноң һөҙөмтәһендә, 14-се армия командалығы дивизияның ғәскәрҙәрен ике йыйылма полкка, Йыйылма Башҡорт уҡсы һәм кавалерия полктарына туплай. Исхаҡов етәкселек иткән 2-се полктың иҫән ҡалған яугирҙарын батальонға туплап, йыйылма полка ҡушалар, ә Исхаҡов батальон командиры итеп ҡалдырыла.

Артабан ул Зәки Вәлидиҙең адъютанты булып йөрөй. 1919 йылдың көҙөндә Ибраһим Исхаҡов Петроград ҡалаһындағы Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһының 2-се полкына командир итеп тәғәйенләнә. Юденич ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша. Яуҙа ҡаты яралана. Петроградты һаҡлауҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн ҡаһарман сардар РСФСР-ҙың юғары наградаһы – Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә.

Ибраһим Исхаҡов 1920 йылдың февралендә республикаға ҡайта. Март айында Үҫәргән кантонындағы коммунистар Башревкомға ҡаршы фетнә ҡора. Съезд үткәреп, кантондағы власты үҙ ҡулына ала, Башҡортостан автономияһына ҡаршы сығыш яһай. Исхаҡов Башревком комиссияһы составында (Х. Әмиров, С. Ишмырҙиндар менән бергә) Үҫәргән кантонындағы килеп сыҡҡан хәлде тикшереүҙә ҡатнаша. Комиссия ағзалары, һалдаттар менән барып, тиҙ арала тәртип урынлаштыра. Ғәйеплеләрҙе ҡулға алып, кантонда Башҡортостан автономияһы власын тергеҙә. Фетнәнең башында торған кантондың коммунистар ойошмаһы ҡыуып таратыла. Март аҙағынан Исхаҡов Үҫәргән кантонының хәрби комиссары булып хеҙмәт итә.

1920 йылдың майында ул Башҡортостандың Хәрби эштәр буйынса комиссары урынбаҫары Әүхәҙей Ишмырҙиндың ярҙамсыһы итеп тәғәйенләнә. Әммә оҙаҡламай, 1920 йылдың 19 майында, Үҙәк Совет власы үҙенең декреты менән Башҡортостандың автономия сикләй. Зәки Вәлиди көрәште Төркөстанда дауам итергә ҡарар итә. *"Мин Мәскәүҙән китҡәс, ышаныслы офицерҙарымдың өсөһөнә Төркөстан хәрәкәтенә ҡушылыу планымды астым. Шуларҙан адъютантым Ибраһим Исхаҡовҡа Масальскийҙың "Төркөстан өлкәһе" исемле*

*әҫәрен биреп, уны ентекле өйрәнергә ҡушкас, ул: “Ниңә?” – тип һораны. Бәлки, бер аҙҙан, шунда китербеҙ”, – тигәс, – “Өйрәнермен”, тип яуап бирҙе”*, – тип яҙа Вәлиди.

1920 йылдың июнендә Зәки Вәлидиҙең көрәштәштәре – Башревком ағзалары, офицерҙар уның планына ярашлы Төркөстанға китә. “*Беҙҙең Башҡортостан ғәскәренән Әүхәҙей Ишмырҙин, ярҙамсым Ибраһим Исхаҡов, башҡа бер нисә офицерыбыҙ, полковник Һибәтулла Һөйөндөковтың яҡын офицерҙары менән бергә килеп, барыһы ла Бохараның хәрби ойошмаларында етәксе вазифалар алды*”, – тип яҙа Вәлиди. Артабан Ибраһим Исхаҡов Кермана ҡалаһында хәрби мәктәп ойоштороп, курсанттарҙы уҡытыу менән мәшғүл була. Баҫмасылар яғында ҡыҙылдарға ҡаршы алыштарҙа ҡатнаша. 1921 йылдың апрелендә Ибраһим Исхаҡов Бохара әмире яҡлы булған баҫмасылар тарафынан үлтерелә. “*Беҙҙең йәмғиәт* (Төркөстан милли берлеге – А.Я.) *исеменән бирелгән бойороҡто үтәп, Бохара хәрби мәктәбе уҡыусыларынан 40 офицерыбыҙ, Ибраһим Исхаҡ менән бергә баҫмасыларға ҡушылыу өсөн Нурата яғына китеп барышлай, Ҡаһһар мулла етәкселегендәге әмир яҡлыларҙың һөжүменә дусар булды. Бер өлөшө, шул иҫәптән 3 башҡорт, үлтерелеп, икенсе өлөшө әсир ителде...*”, – яҙа Вәлиди.

Ғәзиз халҡының бәхетле киләсәге өсөн күпме ауырлыҡтар кирсергән, күпме утты-һыуҙы кискән ҡаһарман сардарҙың ярһыу йөрәге алыҫ Төркөстан далаһында тибеүҙән туҡтай.

**Сығанаҡтар:**


ЦГИА РБ. Ф. 1780. Оп. 1. Д. 49. л. 194.
ЦГИА РБ, Ф. 629. Оп. 1. Д. 1303. Л. 9–12.
ЦГИА РБ, Ф. 1107. Оп. 1. Д. 7. Л. 2.
ЦГАОО РБ. Ф. 1832. Оп. 2. Д. 130. Л. 3.
ЦГАОО РБ. Ф. 1832. Оп. 4. Д. 294. Л. 1–18.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 260, 486, 596.
Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 2. Уфа, 2003. С. 227.
Шунда уҡ. Т. 4. Ч. 1. Уфа, 2008. С. 51–105, 217.
Вәлиди Туған Ә. Ә. Хәтирәләр. Өфө, 1996. 299, 388, 409, 429-сы биттәр.
Муртазин М. Л. Башкирия и башкирские войска в гражданскую войну. М., 2007. С. 195.



## ТАҺИР ИМАҠОВ
## 1895 – 1937

Таһир Ғилман улы Имаҡов – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан эшмәкәрҙәрҙең береһе, Зәки Вәлидиҙең яҡын көрәштәше. 1895 йылдың 26 октябрендә Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙенең (хәҙерге Башкортостан Республикаһының Көйөргәҙе районы) Ҡансыра ауылында тыуған.

Ырымбурҙа "Хөсәйениә" мәҙрәсәһендә уҡый. 1914–1915 йылдарҙа Ырымбурҙа һәм Урта Азиялағы Джизак ҡалаларында эшләй. 1915 йылдың майында хәрби хеҙмәткә алынып, Беренсе донъя һуғышында ҡатнаша. Батша армияһында писарь булып хеҙмәт итә. Аҙаҡ Учебный командала уҡып, унтер-офицер званиеһын ала. Таһир Имаҡов 1917 йылдың февраль революцияһын Ҡаҙан ҡалаһында ҡаршылай. Артабан Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушылып китә. 1917 йылда Башҡорт ҡоролтайҙары делегаты була.

1918 йылдың ғинуарында башҡорт делегацияһы составында Муса Мортазин, Хафиз Ҡушаев, Усман Ҡыуатов һәм Мөхәмәтхан Ҡулаевтар менән бергә Ҡаҙанда үткән II Бөтә Рәсәй мосолман хәрби съезында ҡатнаша. Февраль башында, Башҡорт хөкүмәтенең ҡулға алыныуын ишетеп, башҡорт вәкилдәре Ырымбурға ҡайта. Март айында Таһир Имаҡов Муса Мортазин менән бергә Башҡортостандың Ваҡытлы революцион советына ағза итеп һайлана. Әммә большевиктар яңы ағзаларға шикләнеп ҡарай. Бигерәк тә атаҡлы коммунист Бәхтегәрәй Шәфиев уларҙы өнәп бөтмәй. "*К ним (Имакову, Муртазину Мусе, Куватову Усману) Шафиев относился недоверчиво, осторожно*", – тип яҙа Ваҡытлы совет рәйесе А. Дәүләтшин.

1918 йылдың апрелендә Таһир Имаҡов Милләттәр эштәре буйынса Халыҡ комиссариаты (комиссары Сталин) янындағы Үҙәк мосолман комиссариатының Башҡорт эштәре буйынса бүлеге мөдире итеп тәғәйенләнә. Артабан Өфө губкомы янындағы Татар-Башҡорт комиссариатында агитация һәм ойоштороу бүлеген етәкләй. 1918 йылдың июнь башында Өфө аҡтар ҡулына күсә.

Таһир Имаҡов ҡабат Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәктенә ҡушылып китә. 1918 йылдың авугст айында ул Башҡорт хәрби шураһы ағзаһы Ғәбделхай

Иркәбаев менән Бөрйән-Түңгәүер кантонында ирекле отряд ойоштороу менән мәшғүл була. Һуңынан Имаҡов Бөрйән-Түңгәүер отряды командиры булып хеҙмәт итә. Уға прапорщик званиеһы бирелә.

1918 йылдың октябрендә Бөрйән-Түңгәүер, Үҫәргән, Етеырыу, Ҡыпсаҡ, Туҡ-Соран кантоны отрядтары һәм Башҡорт хәрби шураһы янындағы махсус команда 2-се Башҡорт ирекле кавалерия полкына берләштерелә. Т. Имаҡов үҙенең отряды менән 2-се полктың 1-се эскадронын тәшкил итә. 1918 йылдың декабренән алып 1919 йылдың февраленә тиклем Таһир Имаҡов, 2-се Башҡорт кавалерия полкы составында ҡыҙылдарға ҡаршы һуғышып йөрөй. Ҡаһарманлыҡтары өсөн подпоручик званиеһын ала.

Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, 1919 йылдың 21 февралендә Темәс ауылында үткән I Бөтә Башҡорт хәрби съезын ойоштороуҙа әүҙем ҡатнаша. Съезд рәйесе урынбаҫары итеп һайлана. Оло йыйында Башҡортостан автономияһының революцион хөкүмәте – Башревком ойошторола. Таһир Имаҡов милли хәрәкәт етәкселәре З. Вәлиди, Г. Ҡарамышев, Ю. Бикбов, М. Ҡулаев, А. Йәғәфәровтар менән бергә Башревкомға һайлана.

26 февралдә Эске эштәр һәм милләттәр эштәре буйынса комиссар Фәтих Төхвәтуллин Мәскәүгә ебәрелеү сәбәпле, уның бурыстары Таһир Имаҡовҡа йөкмәтелә. Был осорҙа Имаҡов Башҡортостандың ғәҙәттән тыш комиссияһын (БашЧК) ойоштороу мәсьәләләре менән мәшғүл була. БашЧК-ның проект эшләй.

Саранск ҡалаһында Т. Имаҡов Башревком Президиумы ағзаһы итеп һайлана, Юстиция комиссары вазифаһын башҡара. 1919 йылдың майында Имаҡовты Башҡортостан территорияһында һуғышҡан 1-се армияның Ревтрибуналына Башревком вәкиле итеп ебәреләр. Август айында Имаҡов Муса Мортазиндың бригадаһын ҡыҙылдар яғына сығарыу эше менән мәшғүл була. *“Бындағы ваҡиғалар тураһында ишетеп* (Мортазинды аҡтар менән һуғыша башлауын ишетеп – А. Я.), *Башҡорт кавалерия бригадаһына Башревком ағзаһы Имаҡов иптәш килеп етте. Ул яугирҙарыбыҙҙы ҡыҙылдарҙың бригадаға яҡшы мөнәсәбәттә булыуына инандырҙы һәм комбриг Мортазинға ҡыҙылдарға ҡушылырға кәңәш бирҙе. Һөйләшеү ике көн буйы барҙы”*, – тип яҙа Муса Мортазин үҙенең китабында. Башҡорт кавалерия бригадаһы сыҡҡандан һуң, Зәки Вәлиди ни сәбәптәндер Мортазин урынына бригада командиры итеп Таһир Имаҡовты тәғәйенләргә ниәтләй. Әммә аҙаҡ *“Бройдо* (Көнсығыш фронттың Реввоенсовет вәкиле булһа кәрәк– А.Я.) *от имени фронта настаивал оставить Муртазина комбригом, я согласился”*, – тип хәбәр итә З. Вәлиди. Ә шулайҙа 15 сентябрҙә республиканың хәрби комиссары үҙенең фарманы менән Таһир Имаҡовты Мортазин бригадаһының 2-се полкы командиры итеп раҫлай. Бының менән Зәки Вәлиди Мортазин бригадаһында үҙенең ышаныслы кешеһен ҡуйырға уйлаған булһа кәрәк. Әммә Мортазин үҙенең китабында полк командиры булараҡ Имаҡовтың исемен бер ерҙә лә телгә алмай. Тимәк, уға бригада ла хеҙмәт итергә тура килмәгән, күрәһең.

Артабан Таһир Имаҡовтың исеме 1920 йылдың ғинуарында Стәрлетамаҡта булып үткән ваҡиғаларында яңғырай. Архив документтарынан

күренеүенсә, Т. Имаҡов 10 ғинуарҙан Зәки Вәлидиҙең (был ваҡытта ул Мәскәүҙә була) урынбаҫары Әүхәҙи Ишмырҙин тиф менән ауырып китеү сәбәпле, Башҡортостандың хәрби комиссары вазифаһын үҙ өҫтөнә ала. Ошо мәлдә Башревкомға ҡаршы фетнә әҙерләнеп ятылыуы асыҡлана (Башобком менән БашЧК ҡатнашлығында). Башревком рәйесе Йомағолов 12 ғинуар көнө БашЧК рәйесе Сөләймән Мырҙабулатовты эшенән алып, уның урынына Имаҡовты тәғәйенләй. 16 ғинуар көнө Йомағоловтың бойороғо буйынса Имаҡов һәм Эске эштәр комиссары Фәтих Төхвәтуллин А. Измайлов, Г. Шәмиғолов, С. Мостафин һәм Муценектарҙы ҡулға ала. Был эш оҙаҡламай Мәскәү ҡыҫыла, Йомағоловты Үҙәккә саҡыртып алалар. Имаҡов урынына БашЧК рәйесе итеп Төхвәтуллин тәғәйенләнә.

1920 йылдың мартында Таһир Имаҡов Зәки Вәлиди урынына ваҡытлыса Башҡортостан хөкүмәте – Башревком рәйесе вазифаһын башҡара. Май айында Үҙәк Совет хөкүмәте үҙенең декреты менән Башҡортостандың автономия хоҡуҡтарын ҡырҡа сикләгәс, Имаҡов Башревком ағзалары менән бергә эш ташлап сығып китә.

20–30-сы йылдарҙа юриспруденция буйынса белем алып, юрист һөнәрен үҙләштерә. 1935 йылда ул Башҡортостандан Ырымбур ҡалаһына күсеп китә. Бында Дәүләт банкыһында юрист-консульт булып эшләй.

Уны 1937 йылдың 4 апрелендә НКВД органдары ҡулға ала. Төрмәлә 7 ай буйына тотҡандан һуң, 14 ноябрҙә Т. Имаҡовты ҡаҙаҡтарҙың Алаш Урҙа милләтселек ойошмаһында ҡатнашыуҙа ғәйепләп, үлем язаһына хөкөм итәләр. Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте эшмәкәре Таһир Ғилман улы Имаҡов 1960 йылдың 9 сентябрендә реабилитациялана.

## Сығанаҡтар:

ЦГАОО РБ. Ф. 9776. Оп. 2. Д. 9. Л. 112.
ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 25. Л. 4, 47, 56.
ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 30. Л. 85.
ЦГИА РБ. Ф. 629. Оп. 1. Д. 1371. Л. 2об.
ЦГИА РБ. Ф. 1780. Оп. 1. Д. 11. Л. 61.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 1. Уфа, 2002. С. 384–385, 402, 405–406, 408–409.
Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 411, 577, 579–581, 596.
Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 2. Уфа, 2003. С. 51, 53, 170, 172, 331, 349, 366.
Мортазин М. Л. Әҫәрҙәр. Өфө, 1994. 112-се бит.
Мардамшин Р. Р. Башкирская чрезвычайная комиссия. Уфа, 1999. С. 12–13, 34–35.
Нәҙершин Ф. Таһир Имаҡов // Каруанһарай. 2006, № 19 (124).
www.lists.memo.ru



## ХӘЛИМ ӘМИРОВ
## 1894 – ?

Хәлим Насретдин улы Әмиров – Башҡортостан автономияһы өсөн көрәштә әүҙем ҡатнашҡан, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарынан сыҡҡан милли хәрәкәт эшмәкәрҙәренең береһе. Ул 1894 йылда Өфө губернаһы Бөрө өйәҙенең Уран ырыуы башҡорттарына ҡараған Яңы Уртауыл ауылында (бөгөнгө Башҡортостан Республикаһының Яңауыл районы) тыуған.

Архив документтарынан күренеүенсә, Хәлим Әмиров Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә 1918 йылда ҡушылған. Әммә 1917 йылдағы Башҡорт ҡоролтайҙарында Бөрө өйәҙе башҡорттарынан делегат булараҡ ҡатнашыуы бик мөмкин. Х. Әмиров 1918 йылдың йәйендә Ырымбурҙа Башҡорт хөкүмәтенә эшкә алына. Уны хөкүмәттең Мәғариф бүлеге мөдире урынбаҫары итеп тәғәйенләйҙәр. Башҡортостан автономияһының урындағы власть органдары – кантон башҡармалары янындағы Мәғариф бүлектәрен ойоштороу менән шөғөлләнә.

1919 йылдың февралендә Башҡорт хәкүмәте һәм ғәскәрҙенең Совет власы яғына сығыуы һәм артабан Башҡортостан автономияһының революцион хөкүмәтен ойоштороу ваҡиғаларында әүҙем ҡатнаша. 16 февралдә ул Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәренең Совет власы яғына сығыу тураһында фарманды иғлан итеү өсөн, Башҡорт корпусы штабынан особоуполномоченный сифатында Таналыҡ-Баймаҡ заводына (хәҙерге Баймаҡ ҡалаһы) ебәрелә. 21 февраль көнө Темәс ауылында үткән 1-се Бөтә Башҡорт хәрби съезында ҡатнаша, делегаттар алында сығыш яһай.

1919 йылдың мартында Х. Әмировҡа Башҡортостандың Халыҡ мәғарифы комиссариатының башҡарма органы – Коллегияһы ағзаһы итеп раҫлана. Әммә уға мәғариф өлкәһендә эшләргә насип булмай. 1919 йылдың яҙында аҡтар яңынан һөжүмгә күсеү сәбәпле, Башревком Темәс ауылынан Мораҡҡа, Иманғолға (хәҙерге Ырымбур өлкәһе), артабан Һамар ҡалаһына эвакуациялана. Май аҙағында Саранск ҡалаһында барып төпләнә.

Бында элекке башҡорт ғәскәрҙәренән ике кавалерия һәм ике уҡсы полктар ойоштороla башлай. Полктар Айырым Башҡорт бригадаһына берләштерелә.

Башҡорт республикаһының хәрби комиссары Зәки Вәлиди бригаданың сәйәси комиссары итеп Хәлим Әмировты тәғәйенләй. Башҡорт ғәскәрҙәре Көнсығыш фронтҡа барып, йәғни Башҡортостанға ҡайтып, Колчак армияһына ҡаршы һуғышырға тейеш була. Ләкин 1919 йылдың июнендә Украинала Ҡыҙыл Армияның хәле мөшкөлләнеү сәбәпле, Троцкий Саранскиҙағы башҡорт полктарын Көньяҡ фронтҡа, Денинкин армияһына ҡаршы ебәртә.

Әле аҙағынаса ойошторолоп бөтмәгән, хәрби кәрәк-яраҡтар менән тейешенсә тәьмин ителмәгән башҡорт полктары Харьков ҡалаһына юллана. Хәлим Әмиров сәйәси комиссар һәм Башревкомдың особоуполномоченныйы сифатында ғәскәр менән китә. Бында башҡорт ғәскәрҙәре килеп төшөү менән генерал Деникиндың армияһы менән ҡаты һуғышҡа инә. Ҡыҙылдарҙың 14-се армияһының тулыһынса тарҡалып, тәртипһеҙ рәүештә сигенеүе, улар менән идара иткән Харьковтың оборона Советының аҡтарға һатылыуы арҡаһында Башҡорт бригадаһына ауыр юғатыуҙар кисерергә тура килә. Фронт тотҡан күрше ҡыҙыл частарҙың сигенеүе арҡаһында, күп осраҡта башҡорт ғәскәрҙәренә аҡтарҙың ҡамауында ҡала. Уның өҫтәүенә, Харьковтың аҡтар ҡулына күсеүендә башҡортарҙы ғәйепләп, Оборона Советы Сумы ҡалаһында Башҡорт бригадаһының штабын, шул иҫәптән Х. Әмировты ҡулға ала. Бындай хәл башҡорт ғәскәрҙәрендә ҙур риҙаһыҙлыҡ тыуҙыра. Башҡорт һалдаттары ҡулға ҡорал алып, командирҙарын ҡотҡарырға әҙер була. Быны күреп, Оборона Советы башҡорт командирҙарын ирекка сығарырға мәжбүр була. Бына ошондай һынауҙар аша үтергә тура килә көньяҡ фронтта Башҡорт бригадаһы һәм уның комиссары Х. Әмировҡа.

1919 йылдың июль башында Көньяҡ фронтҡа хәрби комиссар Зәки Вәлиди килә. Бында яңы килгән һалдаттар командирҙар менән тулыландырылып, Башҡорт бригадаһы Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы тип үҙгәртелә. Ул дивизияның сәйәси комиссары итеп Нуриәғзәм Таһировты тәғәйенләй. Ә Хәлим Әмиров Саранскиға, Башревком ҡарамағына ҡайтарыла.

1919 йылдың сентябрендә Петроград фронтындағы Ҡыҙыл Армияның ғәскәрҙәренең хәл мөшкөлләнә. Юденич армияһы, ҡыҙылдарҙы ҡыйрата барып, революцияның бишеге – Петроград ҡалаһына яҡынлаша. Ҡыҙыл Армияға ярҙамға тағы ла һуғышсан, дисциплиналы башҡорт ғәскәрҙәре кәрәк булып сыға. Ленин менән Троцкий бөтә башҡорт ғәскәрҙәрен тиҙ арала Петроградҡа ебәрергә тигән фарман бирә.

Сентябрь айында Бәләбәй ҡалаһынан өс полктан торған Айырым Башҡорт бригадаһы һәм тағы бер кавалерия полкы, артиллерия дивизионы, Көньяҡ фронттан Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы полктары Петроградҡа килә. Бында 10 меңдән ашыу башҡорт яугиры туплана. Улар Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмөн тәшкил итә.

Хәлим Әмиров Башҡорт республикаһының башҡорт ғәскәрҙәрендәге особоуполномоенныйы сифатында киң хоҡуҡтар менән Петроградҡа ебәрелә.

Уға ғәскәрҙәрҙә сәйәси эш алып барыу, улар менән сәйәси яҡтан идара итеү һәм ойоштороу бурыстарын атҡарыу бурысы йөкмәтелә. Петроградҡа килеү менән Х. Әмиров башҡорт ғәскәрҙәрендәге сәйәси комиссарҙар составына иғтибарҙы йүнәлтә. Ул башҡорт ғәскәрҙәрен башҡорт комиссарҙары менән тулыландырыу мәсьәләһен алға ҡуя. Ошо айҡанлы Мәскәүҙә, ВЦИК янындағы Башҡорт республикаһы вәкиле Әбрәшит Бикбауов 1919 йылдың 29 октябрендә Башҡортостандың Хәрби эштәр буйынса комиссариатына былай тип хәбәр итә: *"Настоящим сообщаю требование обобоуполномоченного по делам башкирских частей в Петрограде т. Амирова о замене во вверенных ему башкирских частях ответственных работников небашкир башкирами-курсантами, необходимой для создания могущественной башкирской армии и для ее воспитания в зависимости (с учетом) бытовых и исторических особенностей нашего народа, а также подверждаю его настойчивую просьбу об откомандировании в Петроград московских курсантов тт. Магасумова, Баталова, Абсалямова, Ишкаева и Дюкасова на полковые комиссарские должности и еще десять человек на менее ответственные дожности..."*. Ә. Бикбаув та Хәлим Әмировтың фекерен ҡеүәтләй: *"Побывав в Петрограде, лично убедился, что удовлетворение просьбы Амирова крайне необходимо"*, – тип тамамлай ул үҙенең телеграммаһын.

Хәлим Әмиров Петроградтағы ғәскәрҙәр араһында Башҡорт автономияһы етәкселегенең сәйәсәтен алып барыусы, Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте мәнфәғәтен алға һөргән, пропагандалаған эшмәкәрҙәрҙең береһе була. Мәҫәлән, Петроградта башҡорт ғәскәрҙәренең 1-се Коммунистик конференцияһында "Башҡорт хәрәкәте" тигән доклад менән сығыш яһай. Трибунаға сығып: *"Мәскәүҙә йыйыласаҡ II Мосолман коммунистарының съезында мөһим мәсьәләләрҙең араһында, татар-башҡорт мәсьәләһе алдыбыҙҙа тора. Был мәсьәлә хаҡында беҙҙән вәкил булып барасаҡ иптәштәргә ҡыҫҡаса ғына материал булһын уйы менән башкорттарҙың был һуңғы 1917 йылдан башлап революцион хәрәкттәре хаҡында һөйләмәксе булам"*, – тигән һүҙҙәр менән башлап Башҡортостан автономияһы өсөн көрәштең тарихына туктальп китә, уның маҡсаттарын асып һала. Әйткәндәй, аҙаҡ Әмировтың был докладь, 1920 йылды февралендә, Башҡорт ғәскәрҙәренең Совет власы яғына сығыуына бер йыл тулыу айҡанлы сығарылған "Бәхет көнө" исемле альбом-журналында баҫылып сыға.

Юденич армияһы тар-мар ителгәндән һуң, Башҡорт кавалерия дивизияһы Новгород губернаһына, ә Башҡорт уксы бригадаһы полктары Финляндия сигенә күсерелә. Х. Әмиров 1920 йылдың февралендә Башҡортостанға ҡайта. Бында ул Башҡортостан Халыҡ мәғарифы комиссариаты Коллегияһы ағзаһы итеп, элекке вазифаһына тәғәйенләнә. Республикаға ҡайтҡас, Х. Әмировтың эшмәкәрлеге мәғариф өлкәһе менән генә сикләнмәй. Башревком уға тағы ла яуаплы бурыстар йөкмәтә.

1920 йылдың мартында Башҡортостан автономияһына ҡаршы булған кешеләрҙән торған РКП(б)-ның Үҫәргән кантоны комитеты (Ырымбур

губкомының йәшерен бойороғо буйынса), Башревкомдың рөхсәтенән тыш, кантондың Советтар съезын үткәреп, яңынан кантревком һайлай. Съезд тураһында башҡорт ауылдарына әйтелмәй, делегаттар күпселек урыҫ ауылдарынан йыйыла. Әҙселекте тәшкил иткән башҡорт делегаттарын ҡорал менән ҡурҡытып, съезда Башҡортостанға ҡаршы ҡарарҙар ҡабул ителә, Башревкомға буйһонмаҫҡа саҡырған сығыштар була. Кантон башҡарма комитетына автономияға ҡаршы кешеләр һайлана. Кантон үҙәге Ейәнсура ауылына Чеботаревка исемле урыҫ ауылына күсерелә. Бер һүҙ менән әйткәндә, Үҫәргән кантонында власть фетнәселәр ҡулына күсә.

Башревком Үҫәргән кантонындағы ваҡиғалар тураһында хәбәр алыу менән Хәлим Әмиров, Сөләймән Ишмырҙин һәм Ибраһим Исхаҡовтарҙан торған махсус комиссия булдыра. Зәки Вәлиди комиссияның рәйесе итеп Х. Әмировты тәғәйенләй. Башревком комиссияһы һалдаттар менән Үҫәргән кантонына килеп төшә. Килеү менән Хәлим Әмиров тиҙ арала кантонда тәртип урынлаштыра, Башҡортостан автономияһы власын тергеҙә. Башревкомға буйһонмаған яңы кантревкомдың һәм канткомдың ағзаларын ҡулға ала. Коммунистарҙың берәүһе Ырымбурға ҡасып ҡотола. "*Башревком выслал в усерганский кантон – Чеботаревку комиссию во главе с Амировым и двумя отрядами, первый в сто человек занял Чеботаревку, второй отряд, количество коего не выяснено, расположился в районе Чеботаревки. Комиссией арестованы коммунисты: Атанов, Ивашкин, Брозинский, Похлебаев и другие; разоружен военкомат; распущены коммунистические партии вплоть до ячеек...*", – тип был хаҡта Рәсәй транспорт ЧК-һы рәйесе Данилевский Ленин менән Дзержинскийға ошаҡлай. Хәлим Әмировтың Үҫәргән кантоны коммунистарының "арт һабаҡтарын уҡытыуын", ВЦИК-тың Башревком янындағы вәкиле Ф. Самойлов: "*Последний крупный "подвиг" валидовцев*", – тип баһалай.

25 мартта Башревком Үҫәргән кантонына етәкселекте Х. Әмировтың үҙенә тапшыра, уны кантревком рәйесе итеп тәғәйенләй. Әммә уның Үҫәргән кантонындағы коммунистарҙы ҡулға алыуы, РКП(б) ойошмаһын ҡыуып таратыуы Башобкомға оҡшамай. Май айында обком Әмировтың эшен тикшереү буйынса конфликт комиссияһын ойоштора. 16 майҙа комиссия Үҫәргән кантоны коммунистарын аҡлап сығыш яһай, Әмировты бер йылға партиянан сығарырға ҡарар ҡыла. 18 майҙа үткән Башобком пленумы уны бер йылға бөтә яуаплы вазифаларҙан ситләтергә тәҡдим итә.

Ләкин Башревком коммунистарҙың ҡарарына әллә ни ҡолаҡ һалып бармай. Х. Әмировты Башглавпродукт рәйесе вазифаһына тәғәйенләй. 1921 йылдың авгусынан ул Башобкомдың Башҡортостан Ревтрибуналы янындағы Дәүләт ғәйепләүсеһе (Гособвинитель) урынбаҫары булып эшләй.

30-сы йылдарҙа Хәлим Әмиров Өфө мотор заводында (хәҙерге УМПО) плановик булып эшләй.

1936 йылдың 23 октябрендә ҡулға алынып, өс йылға иркенән мәхрүм ителә. Артабанғы яҙмышы билдәһеҙ. 1989 йылда 12 ноябрендә реабилитациялана.

## Сығанаҡтар:

ЦГИА РБ. Ф. 629. Оп. 1. Д. 1303. Л. 15.
ЦГИА РБ. Ф. 1780. Оп. 1. Д. 9. Л. 32.
А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Ч. 1. Уфа, 2005. С. 33, 238.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 556, 577.
Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 2. Уфа, 2003. С. 161.
Шунда уҡ. Т. 3. Ч. 2. Уфа, 2002. С. 171.
Шунда уҡ. Т. 4. Ч. 1. Уфа, 2008. С. 51–105.
Книга памяти жертв политических репрессий Республики Башкортостан. Т. 1. Уфа, 1997. С. 100.
Асфандияров А. З. История сел и деревень Башкортостана. Кн. 5. – Уфа, 1994. С. 63.
Ярмуллин А. Ш. Башҡорт ғәскәрҙәренең Петроградта нәшер ителгән "Бәхет көнө" журнал-альбомы. Ватандаш. 2007, № 1.



## СӨЛӘЙМӘН ИШМЫРҘИН
**1893–1937**

Сөләймән Ғәләүетдин улы Ишмырҙин – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан башҡорт офицерҙарының береһе. 1893 йылдың 5 июнендә Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙе Аҙнай улысының Кинйәбулат ауылында тыуған. Зәки Вәлидиҙең яҡын көрәштәше, ярҙамсыһы. Әүхәҙи Ишмырҙиндың ҡустыһы.

1905 йылда Ерган ауылындағы 2 синыфлы мәктәпте, 1913 йылда Ҡаҙан ҡалаһындағы Уҡытыусылар семинарияһын тамамлай. Ҡаҙандан ҡайтҡас, бер йыл мөғәллимлек итә. 1914 йылдың октябрендә Сөләймән Ишмырҙинды хәрби хеҙмәткә алалар. Һамар ҡалаһында торған 28-се сапер батальонына билдәләнә. 1915 йылдың 31 мартынан 1917 йылдың ғинуар башына тиклем Көньяҡ-Көнбайыш фронтта йөрөй. 1917 йылдың ғинуарында белемле егетте Житомир ҡалаһындағы Көньяҡ-Көнбайыш фронттың 1-се прапорщиктар әҙерләү мәктәбенә ебәрәләр. Ярты йыл уҡығандан һуң, 1917 йылдың 15 июнендә С. Ишмырҙин прапорщик чинында 283-сө запас пехота полкына тәғәйенләнә. Бында ул полктың 3-сө ротаһы командиры, полк суды рәйесе вазифаларын үтәй. Подпоручик дәрәжәһенә үҫә. 1918 йылдың апрелендә әрменән демобилизацияланғас, Стәрлетамаҡ өйәҙ ревтрибуналы ағзаһы булып тора.

1918 йылдың июнендә Башҡортостан территорияһы большевиктарға ҡаршы көстәр ҡулына күскәс, Стәрлетамаҡ өйәҙендәге бер төркөм фронтовик башҡорт офицерҙары Шаһибәк Үзбәков, Ибраһим Исхаҡов, Ғәбделбарый Ғәмбәровтар менән бергә подпоручик Сөләймән Ишмырҙин Өфөгә Халыҡ армияһына хеҙмәткә саҡырыла. Тиҙҙән Башҡорт хәрби шураһының юллауы буйынса башҡорт офицерҙары Башҡорт армияһы сафына күсә.

1918 йылдың сентябрендә Сөләймәнде Ырымбурға, Башҡорт хөкүмәте ҡарамағына күсерелгән Әүхәҙи Ишмырҙин урынына Юрматы кантоны рәйесе итеп тәғәйенләнә. Әммә бында уға оҙаҡ эшләргә тура килмәй. 1 октябрҙә Башҡорт хәрби шураһы үҙенең фарманы менән Сөләймән Ишмырҙинға 1-се Башҡорт уҡсы полкына командалыҡ итеү вазифаһын йөкмәтә. 1918 йылдың көҙөнән 1919

йылдың февраленә тиклем С. Ишмырҙин 1-се Башҡорт уҡсы полкы командиры сифатында ҡыҙылдарға ҡаршы һуғышып йөрөй. Уға штабс-капитан званиеһы бирелә. Әйткәндәй, 1926 йылда, Зәки Вәлидигә "буржуаз милләтсе" мөһөрө тағылып, элекке милли хәрәкәт эшмәкәрҙәре үҙҙәренең биографияһының аҡтарға бәйле өлөшөн күрһәтмәҫкә тырышҡан ваҡытта, Сөләймән Ишмырҙин үҙенең анкетаһында йәшермәйенсә *"Состоял командиром полка в Национальной Башкирской армии, боровшейся в целях завоевания Автономии"*, – яҙып ҡуйған.

1919 йылдың 18 февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власына сыға. Әммә Ҡыҙыл Армия ғәскәрҙәре уларҙы ҡолас йәйеп ҡаршы алмай, ә киреһенсә, Үҙәк Совет властының бойороғона ҡарамайынса, башҡорттарҙан үс ала башлай. Башҡорт полктарын тылға күсереп, ҡоралһыҙландыралар. 1919 йылдың 3 мартында Ишмырҙин Темәс ауылындағы Башревкомға 1-се полктың хәле тураһында былай тип хәбәр итә: *"Сообщаю, что с полком прибыл в село Мелеуз, где жду распоряжения от начдива Первой Пензенской. Все имущество полка: обмундирование, обозы, мастерская и оркестр, – отобрал 1-й Смоленский полк. Мало того, дорогой у солдат и командного состава были отобраны собственные вещи. Приходилось терпеть оскорбления от красноармейцев и местных жителей. Считают нас все, и даже штаб Первой армии, пленными. Полное недоумение, разочарование. Как быть нам? От ревокма нашего никаких распоряжнений не получаем. По приказу начдива Первой Пензенской солдат мы должны распустить, оставив только добровольцев. Командный состав переходит в резерв чинов Первой армии. Солдаты требуют, чтобы полк 1-й существовал и их сичтали не доброволбьцами, а мобилизованными (ибо они мобилизованы), и сожалеют о том, зачем отступили с фронта в тыл, а не остались на фронте для активной борбы с казаками. Посылаю для выяснения настоящего нашего положения двух ротных делегатов. Жду распоряжений"*. Әммә был мәлдә башҡорт ғәскәрҙәре менән Башревком түгел, ә 1-се армия идара итә. Ҡыҙылдар, Мәскәүҙән бойороҡ алыуға ҡарамаҫтан, Башҡорт корпусы ғәскәрҙәрен тулыһынса ҡораһыҙландырып, таратырға, тигән маҡсатта эш итә. Ике ай эсендә 6 полктан торған тулайым бер корпустың ҡалдыҡтары ғына тороп ҡала. Ҡыҙылдарҙың баш-баштаҡлығына түҙә алмай, Сөләймән Ишмырҙин командалыҡ иткән 1-се полктың 2-се батальоны, 2-се Башҡорт кавалерия полкының 3-сө эскадроны, һуңыраҡ 1-се Башҡорт кавалерия полкы киренән аҡтар яғына сыға.

1919 йылдың май аҙағында Саранск ҡалаһында Башҡорт корпусынан ҡалған ғәскәрҙәрҙән 1-се, 2-се уҡсы һәм 1-се, 2-се кавалерия полктары ойошторола башлай. Улар Айырым Башҡорт бригадаһын тәшкил итергә тейеш була. 1-се Башҡорт уҡсы полкының командиры итеп Сөләймән Ишмырҙин тәғәйенләнә. Июнь башында әле ойошторолоп та бөтмәгән башҡорт полктарын Көньяҡ фронтҡа (Украинаға) ебәрергә тигән Троцкийҙың фарманы килә. Башҡорттар Харьков ҡалаһында гарнизон хеҙмәтен үтәйәсәк һәм шунда ойошторолоп бөтөрҙәр, ти Реввоенсовет. 1919 йылдың 13 июнендә Харьковҡа килеп етеүгә,

башҡорт ғәскәрҙәренә әҙерлекһеҙ, ҡоралһыҙ рәүештә Деникин армияһы менән ҡанлы һуғышҡа инергә тура килә. Полктарҙың дөйөм командалығы ла булмай, сөнки штаб ойошторолоу кимәлендә була һәм ул Саранскиҙа тороп ҡала. Һуғыш шарттарында башҡорт полктарына, тиҙ арала берҙәм идара органы – бригада штабын булдырырға тура килә. Сөләймән Ишмырҙинды бригада командиры итеп һайлайҙар. Харьков янында, ике аҙна буйы барған ҡанлы яуҙарҙа Башҡорт бригадаһы ҙур батырлыҡтар күрһәтә. Деникинсылар башҡорттарҙың ныҡлы ғәскәр икәнен күреп, уларҙы флангынан урап үтеп ҡамауға алырға тырыша. Бригада, күрше ҡыҙыл частарҙың сигенеүе арҡаһында күп тапҡырҙар дошман ҡулсаһында тороп ҡала. Харьков ҡалаһының Оборона Советының аҡтарға һатылыуы арҡаһында (башҡорт полктары уның идараһында була), Башҡорт бригадаһы байтаҡ юғалтыуҙар кисерә.

Ҡыҙыл Армия частары, Деникин ғәскәре ҡыҫымына сыҙай алмай, паникаға бирелеп сигенә. Тиҙҙән Харьков ҡалаһын ҡалдырып китә. Харьковтан иң аҙаҡ Башҡорт бригадаһы полктары сыға. Тәүге эшелонда сығып, юлда ҡыҙылдар ташлап ҡасҡан, ҡорал һәм башҡа кәрәк-яраҡтарҙы алып, Сумы ҡалаһына килгән бригада штабын ҡыҙылдар ҡорал менән ҡаршылай. Сумы чекаһы бөтөн Башҡорт бригадаһы штабын, шул иҫәптән бригада командиры Сөләймән Ишмырҙинды ҡулға алып, бикләп ҡуя. Ҡыҙылдарҙың бындай оятһыҙ ҡыланышы, арттағы эшелондар менән килеп еткән башҡорт яугирҙарын, һуңғы сиккә еткерә. Эштең нимә менән бөтөрөн аңлаған ҡыҙылдар бригада штабын ирекккә сығарырға мәжбүр була.

Июнь аҙағында Башҡорт бригадаһы Бахмач станцияһына ялға сығарыла. Бында Башҡортостандың хәрби комиссары Зәки Вәлиди килә. Ул башҡорт яугирҙарына рәхмәт белдерелә һәм бригада командиры Сөләймән Ишмырҙиндың хеҙмәтен билдәләп үтә: "

**ПРИКАЗ**

**По Башкирским войскам**
**№ 0642-I**

**2-го июля 1919 г.** **Станция Бахмач**

**§1**

**Прибыв на Южный фронт ознакомился с боевыми действиями 1-го и 2-го Стрелковых и 1-го и 2-го Кавалерийских Башкирских полков и их героическими подвигами при обороне Харькова от имени Революционного Комитета Башкирской Советской Республики приношу благодарность всем красноармейцам-башкирам; принимавшим участие в этих тяжелых боях, вынесенных при крайне неблагоприятных условиях, которыми была обставлена оборона Харькова вообще.**

**Особенно благодарю Командира 1-го Стрелкового Башкирского полка Ишмурзина II, временно исполнявшего обязанности командира Бригады, за умелое ведение операции с малым для войска ущербом; ”.**

Бригада яңы килгән яугирҙар менән тулыландырыла һәм Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы тип үҙгәртелә. Дивизияның командиры итеп Ахлау Ахлов тәғәйенләнә, комиссары – Нуриәғзәм Таһиров. Зәки Вәлидиҙең бойороғо буйынса Сөләймән Ишмырҙин Көньяҡ фронттан Хәрби комссариат ҡарамағына күсерелә. Башҡортостанға ҡайтҡас, ойошторолоп ятҡан 3-сө Башҡорт кавалерия полкына командир итеп тәғәйенләнә.

1919 йылдың сентябрендә башҡорт ғәскәрҙәре, шул иҫәптән 3-сө Башҡорт кавалерия полкы, Петроградҡа ебәрелә. Ә Ишмырҙинға ғәскәрҙәрҙе аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеү бурысы йөкмәтелеп, Башсовнархозға күсерәләр. Бында ул хәрби әҙерләүҙәр бүлеген етәкләй. Сөләймән Ишмырҙин, Көньяҡ фронттағы башҡорт һалдаттары араһында ҙур ихтирам, хөрмәт ҡаҙана. Улар, Ишмырҙинды армияға ҡайтарыуҙы һорап Башревкомға мөрәжәғәт итә. 1919 йылдың 16 сентябрендә Башревком: “*Довести до сведения военкомата о желании красноармейцев видеть Ишмурзина II своих рядах*”, – тип ҡарар ҡабул итә. Әммә Сөләймән Ишмырҙинға ғәскәр сафтарында башҡа хеҙмәт итергә тура килмәй. Күптән түгел генә эвакуациянан ҡайтҡан Башҡортостан хөкүмәте (Башревкомға) автономияны ғәмәлгә ашырыу өсөн тәжрибәле башҡорт хеҙмәткәрҙәрен кантондарға ебәрә. Башҡортостан автономияһының урындағы власть органдары – кантон революцион комитеттарын ойоштороу көнүҙәк мәсьәләгә әүерелә. 1919 йылдың көҙөндә С. Ишмырҙин Көҙәй кантревкомына эшкә ебәрелә.

1920 йылдың мартында Үҫәргән кантонында урыҫ коммунистары, законһыҙ рәүештә съезд үткәреп, яңы кантревком һайлай, республикаға ҡаршы агитация башлай. Башревком Хәлим Әмиров, Ибраһим Исхаҡов һәм Сөләймән Ишмырҙин составында комиссия төҙөп, Үҫәргән кантонына ебәрә. Вәлиди Ишмырҙинды Үҫәргән кантоның рәйесе итеп тәғәйенләй. Комиссия килеү менән фетнәселәрҙе ҡулға алып, урындағы комячейкаларҙы тарата. Кантонда Башҡортостан автономияһы власын тергеҙә. Тиҙҙән Ишмырҙин Табын кантоны рәйесе итеп тәғәйенләнә.

1920 йылдың көҙөнән ул Башҡортостандың аҙыҡ-түлек эштәре буйынса халыҡ комиссары вазифаһын үтәй, БашЦИК ағзаһы итеп һайлана. Әммә 1921 йылда Ишмырҙиндың баш осонда ҡара болоттар ҡуйыра башлай. Обком, уның аҡтар яғында йөрөгәне өсөн партиянан сығара. Киләһе йылына вазифауи енәйәттә ғәйепләп, Республика ревтрибуналы уны 15 йылға иркенән мәхрүм итергә тигән хөкөм ҡарары сығара. Башҡорт эшмәкәрҙәре Мәскәүгә, Үҙәк властҡа мөрәжәғәт итеп, Сөләймән Ишмырҙинды оло бәләнән ҡотҡарып алып ҡала.

Артабан ул юғары вазифалар биләмәй, дәүләт эшенән ситләтелә. 1926 йылға тиклем Ишмырҙин Ленин исемендәге Өлкә тәжрибә мәктәбендә завхоз булып эшләй. Риф Михтахов яҙыуынса, һуңынан ул Башглавполитпросвет бүлегендә эшләй. 1932 йылда Мәскәүгә “Союззолото” берекмәһенә эшкә күсерелә. 1937 йылда ҡулға алынып, һөргөндә үлеп ҡала.

## Сығанаҡтар:

ЦГИА РБ. Ф. 387. Оп. 3. Д. 64. Л. 13, 13 об.
ЦГИА РБ. Ф. 1201. Оп. 4. Д. 4. Л. 16.
ЦГИА РБ. Ф. 78. Оп. 1 Д. 17. Л. 4.
ЦГИА РБ. Ф. 629. Оп. 1. Д. 1303. Л. 15–15об.
ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 7. Л. 2.
А.А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Ч. 1. Уфа, 2005. С. 170.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 260, 469, 570, 596.
Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 2. Уфа, 2003. С. 54, 227, 268.
Шунда уҡ. Т. 3. Ч. 1. Уфа, 2004. С. 504, 619, 668.
Шунда уҡ. Т. 3. Ч. 2. Уфа, 2006. С. 155.
Шунда уҡ. Т. 4. Ч. 1. Уфа, 2008. С. 57, 484.
Риф Мифтахов. Ишмырҙиндар яҙмышы // Башҡортостан. 1990 йыл, 22 декабрь.



## ӘБДРӘШИТ БИКБАУОВ
**1896 – 1938**

Әбдрәшит Ильяс улы Бикбауов – Башҡорт ғәскәрҙәре командующийы Зәки Вәлидиҙең адъютанты, көрәштәше. 1896 йылда Сембер губернаһының (хәҙерге Ульяновск өлкәһенең Иҫке Кулаткин районы) Зеленовка станцияһында тыуған.

Әбдрәшит Бикбауов 1918 йылда Башҡорт армияһы сафтарына алына. Каруанһарайҙың комендант командаһы начальнигы булып хеҙмәт. 1919 йылдың ғинуарында Зәки Вәлиди уны үҙенең адъютанты итеп тәғәйенләй. Ул 1919 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәренең Совет власы яғына сығыуы менән бәйле ваҡиғаларҙа әүҙем ҡатнаша.

1919 йылдың 30 ғинуарында Муллаян Халиҡов Өфө большевиктары менән һөйләшеп ҡайта. Уның һөҙөмтәһе буйынса Башҡорт хөкүмәте Советтар менән һөйләшеү өсөн Мөхәмәтхан Ҡулаев (хөкүмәт рәйесе), Муллаян Халиҡов һәм Әбдрәшит Бикбауовтарҙы ебәрергә ҡарар итә. Зәки Вәлиди үҙенең адъютанты Бикбауовҡа башҡорт ғәскәрҙәренең мәсьәләһе буйынса һөйләшеүҙәр алып барыу бурысын йөкмәтә.

1919 йылдың 18 февралендә, йәғни Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡан көндә, башҡорт делегацияһы Өфө ҡалаһында губревком, РКП(б)-ның Өфө обкомы, 5-се Ҡыҙыл Армияның реввоенсоветы һәм Республиканың Реввоенсоветы, Милләттәр эштәре буйынса комиссариат вәкилдәре ҡатнашлығында кәңәшмә булып үтә. Һөйләшеүҙәр барашында Бикбауов Башҡортостандағы фронтты башҡорт ғәскәрҙәре үҙҙәре тоторға тейеш. Әгәр Совет власы ярҙам итһә, беҙ ғәскәрҙәребеҙҙе корпус кимәленә тиклем үҫтерәсәкбеҙ, – ти Ҡыҙыл Армия вәкилдәренә.

Артабан һөйләшеүҙәр Көнсығыш фронттың штабында Сембер ҡалаһында дауам итә. 27 февралдә башҡорт делегацияһы Көнсығыш фронттың Реввоенсовет вәкилдәре менән Тәү килешеүгә (Предварительный договор) төҙөй. Уға Ҡулаев, Халиҡов һәм Бикбауовтар ҡул ҡуя.

1919 йылдың 7 мартында башҡорт делегацияһы Мәскәүгә килә. Тиҙҙән Мәскәүгә Зәки Вәлиди ҙә килеп етә. Башҡорт вәкилдәре менән Совет хөкүмәте етәкселәре араһында ун көн тирәһе һөйләшеүҙәр бара. Ошоноң һөҙөмтәһендә, 1919 йылдың 20 мартында тарихи актҡа – "Үҙәк Совет власының Башҡорт хөкүмәте менән Башҡортостан Совет автономияһы тураһындағы Килешеүгә" ҡул ҡуйыла. Бер яҡтан РСФСР хөкүмәте (СНК) рәйесе Ленин, ВЦИК рәйесе вазифаһын башҡарыусы Владимирский, Наркомнац Сталин һәм ВЦИК сәркәтибе Енукидзе ҡул ҡуйһа, икенсе яҡтан, килешеү процессын Өфөнән алып Мәскәүгә тиклем алып килеп еткергән башҡорт вәкилдәре – Ҡулаев, Халиҡов һәм Бикбауовтар имза һала.

Килешеүҙән һуң Әбдәршит Бикбауов ВЦИК Президиумы янындағы Башҡортостан вәкиле Абдулла Әҙеһәмовтың хәрби эштәр (Башҡорт армияһы буйынса вәкиле тип тә йөрөтөлә) буйынса урынбаҫары итеп тәғәйенләнә. 1919–1920 йылдарҙа башҡорт ғәскәрҙәрен ҡорал һәм башҡа кәрәк яраҡтар менән тәьмин итеү буйынса ҙур эш башҡара.

1921 йылда Башҡортостанға ҡайта, Башсовнархоз рәйесе Гәрәй Ҡарамышевтың урынбаҫары булып эшләй. 1923 йылда "Башторг" предприятиеһы идараһы рәйесе вазифаһын башҡара. 1924–1926 йылдарҙа Мәскәүҙә Башҡортостандың сауҙа вәкиллегендә экономист-консультант, Дәүләт сауҙаһы һәм БАССР-ҙы текстиль изделиялар менә тәьмин бүлеге мөдире ярҙамсыһы булып эшләй, бер үк ваҡытта, Плеханов исемендәге Халыҡ хужалығы институтында белем ала.

1930 йылдың ғинуарында "Солтанғәлиевщинала" ғәйепләнеп, ҡулға алына һәм өс йылға иркенән мәхрүм итеп, Карелияға лагерға оҙатыла. Артабан Алыҫ Көнсығышҡа күсерелә. Әбдрәшит Ильяс улы Бикбауов 1938 йылдың 12 сентбрендә вафат була.

## Сығанаҡтар:

ЦГИА РБ. Ф. 629. Оп. 1. Д. 1242. Личное дело А. И. Бикбавова.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 536, 550, 552, 569–572, 597, 604–609, 637–638.
Кульшарипов М. М. Башкирское национальное движение (1917–1921). Уфа, 2000. С. 213.
Башкирская энциклопедия. Т. 1. Уфа, 2005. С. 413–217.
www.stalin.memo.ru



## ҒӘЗИЗ ӘЛМӨХӘМӘТОВ
**1895 – 1938**

Ғәзиз Әлмөхәмәтовты беҙ башҡорттоң мәшһүр йырсыһы, профессиональ башҡорт музыка сәнғәтенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе тип беләбеҙ. Архив документтары уның Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан эшмәкәрҙәрҙең береһе булғанлығы тураһында ла һөйләй.

Ғәзиз Салих улы Әлмөхәмәтов 1895 йылдың 29 октябрендә Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙенең (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Көйөргәҙе районы) Мораптал ауылында тыуған. 14 йәшендә ағаһы менән Урта Азияға сығып китәләр. Ташкентҡа барып ялланып эшләйҙәр. Бында, концерттарҙа сығыш яһап, моңло тауышы менән халыҡ араһында танылыу яулай. Артабан, 19 йәшенән Урта Азия ҡалалары буйлап үҙ аллы концерттар ҡуйып йөрөй башлай.

Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың 1917 йылдың ҡышында Ырымбурҙа, Каруанһарайҙа, Шәйехзада Бабич менән концерттар ҡуйып йөрөгәнлеге билдәле. Башҡорт үҙәк шураһы талантлы йәш йырсыға уҡыуында ярҙам күрһәтергә була. 1917 йылдың 30 декабрендәге ултырышында: *“Назначить безвозвратное пособие в размере 250 р. в месяц в течение 6 месяцев, начиная выдачу с 1 января 1918 г.”*, – тип ҡарар сығара.

Ләкин 1918 йылдың 4 февралендә (яңы стил буйынса 16 февраль) Ырымбурҙағы Башҡорт хөкүмәте һәм Башҡорт үҙәк шураһы ағзалары ҡулға алынып, төрмәгә ябыла. Уларҙың урынына большевиктар Башҡортостандың ваҡытлы революцион советын ойоштора. Яңы идара органына Ғ. Әлмәхәмәтовты ла эшкә саҡыралар, хатта, ағза итеп һайлайҙар. Әммә йәш йырсы Башҡортостан автономияһының законлы хөкүмәтен төрмәнән ҡотҡарыу уйы менән янып йөрөй. Ул Баймаҡтағы башҡорт отрядына хәбәр итергә ашыға.

Хәбибулла Ғәбитов хәтерләүенсә, 14 февралдә (яңыса 26 февраль) кис Ырымбурҙан Ғәзиз Әлмөхәмәтов Баймаҡҡа килеп етә. Иртәгеһенә ул Башҡорт хөкүмәтенең ағзалары ҡулға алыныуы һәм «Башҡортостанды ҡотҡарыу

буйынса комитет» ойошторолоуы һәм уның Ырымбур өйәҙендәге Ғәбделислам ауылында урынлашыуы тураһында хәбәр итә. Үҙәкте Баймаҡтан Ғәбделислам ауылына күсерергә тәҡдим итә. Ғ. Әлмөхәмәтов Баймаҡта оҙаҡ туҡталып тормай, Ырымбурҙағы хәлде һөйләгәндән һуң, ҡабат Ырымбурға киткәндер, күрәһең. Сөнки артабанғы Баймаҡтағы ваҡиғаларҙа Х. Ғәбитов уның исемен телгә алмай. 1918 йылдың мартында Ырымбурҙан килгән Ҡыҙылдар Баймаҡтағы башҡорт отрядын ҡыуып тарата, офицерҙары Ғ. Иҙелбаев менән Ғ. Мағазовты ата. Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың был осорҙағы тормошо билдәһеҙ. Күп кенә милли хәрәкәт эшмәкәрҙәре кеүек үк йәшеренеп йөрөгән булһа кәрәк .

1918 йылдың апрелендә Әмир Ҡарамышев туплаған башҡорт отряды казактар менән берлектә Ырымбурға һөжүм итә һәм Башҡорт хөкүмәте ағзаларын төрмәнән сығара. Күп тә үтмәй майҙа Силәбелә Чехословак корпусы большевиктарға ҡаршы сыға һәм власты үҙ ҡулына ала. 1918 йылдың июнендә Башҡорт хөкүмәте Силәбе ҡалаһында яңынан үҙенең эшен эшмәкәрелеген башлай. Хөкүмәт янында Башҡорт Хәрби шураһы булдырыла. Чехословактар ярҙамында тәүге башҡорт полктары ойошторола башлана.

Август айында Башҡорт хөкүмәте Ырымбурға ҡайтып, ҡабат Каруанһарайҙа урынлаша. Ғәзиз Әлмөхәмәтов тағы ла милли-азатлыҡ хәрәкенә ҡушылып китә. Был осорҙа Башҡорт хөкүмәте кантондарҙа ирекле ғәскәрҙәр ойоштора башлай. Һәр кантонда ике-өс йөҙ кешелек отрядтар булдырыла. Ҡыпсаҡ кантонында (йырсының тыуған яғында) ирекле отряд ойоштороу бурысы Ғәзиз Әлмөхәмәтовҡа йөкмәтелә. 23 августа Башҡорт хәрби шураһы отряд ойоштороу өсөн уға 5650 һум аҡса һәм ҡорал бирә. Хәрби шураның фарманында былай тиелә: “*Выданная руководителю Кипчакского добровольческого отряда Альмухаметову одну 3-х линейную русскую винтовку со штыком, 97 винтовок Бердана, 4608 патронов, 47 винтовок Ветерли, 83 штыка, 6400 патронов, 150 гранат и 150 взрывателей выписать в расход по книге огнестрельного и холодного оружия*”.

Башҡорт хәрби шураһы Ғәзиз Әлмөхәмәтовҡа ярҙамға Ҡыпсаҡ кантонына прапорщик Абдрахман Ғәлиевты ебәрә. Күренекле йырсыны тыуған яғында ҙур хөрмәт менән ҡаршы алалар. Отряд ойоштороу эшендә халыҡ ҙур ихласлыҡ менән ярҙам итә. “*28 июля по старому стилю* (яңыса 11 август – А.Я.) *Башкирским правительством был отправлен в Кипчакский кантон с целью создания добровольческой части Газиз-эфенде Альмухаметов, товарищем к нему – командиром части прапорщик Габдрахман-эфенде Галиев. Поехав туда, они совместо со членами руководства Кипчакского кантона приступили к делу. Началась запись добровольцев в войско. За два дня их набрано около 100 человек... За какие-нибудь 3–4 дня в тихом до сих пор здании Кипчакской кантонной управы прошел бурный процесс становления гордого национального войска как вооруженной силы*”, – тип яҙа кантон башҡармаһының сәркәтибе Ғабдулла Ибраһимов. Һөҙөмтәлә, Ҡыпсаҡ кантонында 180 кешенән торған отряд үҫеп

сыға. 1918 йылдың сентябрендә Башҡорт хәрби шураһы Ғәзиз Әлмөхәмәтовты Ҡыпсаҡ кантонының ирекле отряды етәксеһе вазифаһына раҫлай: *“Руководителя Кипчакского отряда Газиза Альмухаметова полагать в означенной должности с 1 августа сего года”*, – тиелә фарманда.

Артабан Ҡыпсаҡ отряды менән прапорщик Ғабдрахман Ғәлиев етәкселек итә, һуңынан был вазифаға прапорщик Сөләймән Сыртланов тәғәйенләнә. 1918 йылдың октябрендә Ҡыпсаҡ, Етеырыу, Бөрйән-Түңгәүер, Үҫәргән, Туҡ-Соран кантоны отрядтары 2-се Башҡорт ирекле кавалерия полкына берләштерелә. Командиры – подпоручик Әхмәҙулла Бейешев.

1918 йылдың сентябренән Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың исеме Башҡорт хөкүмәте һәм Башҡорт хәрби шураһы документтарында осрамай. Мәшһүр йырсы үҙенең төп шөғөлөнә ҡайтҡандыр, күрәһең. Уның артабанғы эшмәкәрлеге башҡорт профессиональ сәнғәтен үҫтереү менән бәйле була.

Ғәзиз Әлмөхәмәтов – башҡорт профессиональ сәнғәтен башлап ебәреүгә ғәйәт ҙур өлөш индергән, уның нигеҙ таштарын һалған шәхес булараҡ башҡорт милли музыкаһы тарихында тәрән эҙ ҡалдыра.

1937 йылда Ғәзиз Әлмөхәмәтовты ҡулға алалар. Уны милләтселектә ғәйепләйҙәр. Ҡыҙы Роза Әлмөхәмәтова-Латипова: *“Атайым ике тапҡыр Стәрлетамаҡта Зәки Вәлиди хөкүмәте алдында концерт биргән булған, шуны ғәйеп итеп, милләтсе мөһөрөн баҫҡандар”*, – тип хәтерләй. Үрҙәге архив документтарынан күренеүенсә, Ғәзиз Әлмөхәмәтов Зәки Вәлиди хөкүмәте алдында концерт ҡуйғаны өсөн генә түгел, ә шул милли хәрәкәттә әүҙем ҡатнашыусыларҙың береһе булараҡ репрессияланған.

Шулай итеп, башҡорттоң мәшһүр йырсыһы, композитор Ғәзиз Әлмөхәмәтов бөтөн булмышы менән халҡының яҡты киләсәге өсөн янып йәшәгән, балҡып һүнгән бөйөк шәхес икәненә тағы бер тапҡыр инанабыҙ.

## Сығанаҡтар:


ЦГИА РБ. Ф. 1201. Оп. 2. Д. 3. Л. 30.

А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Ч. 1. Уфа, 2005. С. 117, 118.

Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 1. Уфа, 2002. С. 425–426.

Рәшит Шәкүр. Арҙаҡлы башҡорттар. Өфө, 2005. 238–239 биттәр.

Книга памяти жертв политических репрессий Республики Башкортостан. Т. 1. Уфа, 1997. С. 93.



## ФӘТИХ ТӨХВӘТУЛЛИН
**1894 – 1938**

Фәтих Насир улы Төхвәтуллин – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан эшмәкәрҙәрҙең береһе. 1894 йылдың 16 мартында Өфө губернаһы Минзәлә өйәҙе Зәй улысының (хәҙерге Татарстан Республикаһы) Субыҡлы ауылында тыуған.

Ҡаҙан ҡалаһында "Мөхәмәҙиә" мәҙрәсәһендә уҡый. Мәҙрәсәне тамамлағандан һуң, Пермь губернаһының Красноуфимск ҡалаһындағы Рус-башҡорт ауыл хужалығы училищеһына уҡырға инә. Агроном һөнәренә уҡып йөрөгән тәүәккәл егеттең яҙмышын 1917 йылғы Февраль революцияһы ҡырҡа үҙгәртә. Ошо осорҙан алып ул сәйәси эшкә сума. Ф. Төхвәтуллин Февраль революцияһынан һуң Красноуфимск өйәҙенең йыйылышы (собрание) рәйесе урынбаҫары итеп һайлана, бер үк ваҡытта Красноуфимск ҡала думаһы рәйесе урынбаҫары вазифаһын башҡара. 1917 йылдың көҙөндә Пермь губернаһы башҡорттары Петроградта асыласаҡ Ойоштороу йыйылышына (Учредительное собрание) депутатлыҡҡа Фәтих Төхвәтуллинды үҙҙәренең кандидаты итеп күрһәтә һәм ул һайлауҙа депутатлыҡҡа үтә.

Әммә власҡа килгән большевиктар 1918 йылдың ғинуарында Ойоштороу йыйылышы депутаттарын ҡыуып тарата. Ләкин шул уҡ йылдың майында Силәбе ҡалаһында большевиктарға ҡаршы Чехословак корпусы ҡаршы күтәрелә һәм тиҙҙән Өфө, Ҡаҙан, Һамар һәм башҡа ҡалалар ҡыҙылдарҙан азат ителә.

Июнь айында Һамар ҡалаһында Ойоштороу йыйылышы ағзалары комитеты (Комитет членов Учредительного Собрания, Комуч) ойошторола. Фәтих Төхвәтуллин Комучҡа ағза итеп һайлана. Комуч (Һамар хөкүмәте тип тә йөрөтөлә) Рәсәйҙең демократик ҡарашлы көстәрен большевиктарға ҡаршы бергә туплаған ойошма була. Ул Рәсәй халыҡтарының үҙбилдәләнеш, автономияға хоҡуғын таный. Шуға күрә лә Башҡорт хөкүмәте Комуч менән тығыҙ бәйләнештә була. 1918 йылдың сентябрендә Башҡорт хөкүмәте Һамар ярҙамында Башҡорт корпусын ойоштороуға өлгәшә. Әммә 1918 йылдың көҙөндә, Ҡыҙыл Армия

Һамар ҡалаһын баҫып алыу сәбәпле, Комуч ағзалары Өфөгә күсә һәм артабан реакцион Себер хөкүмәтенең тәьҫиренә бирелә.

1918 йылдың 8–23 сентябрендә Өфөлә Бөтөн өлкә хөкүмәттәре, шул иҫәптән милли хөкүмәттәр йыйылышып, Ваҡытлы Бөтә Рәсәй хөкүмәтен ойоштороу тураһында килешә. Ул тарихҡа "Өфө директорияһы" ингән. Фәтих Төхвәтуллин 1918 йылдың йәйе-көҙөндә Комуч ағзаһы булараҡ әүҙем эшмәкәрлек итә. Өфө кәңәшмәһендә лә ҡатнаша. Документтарҙан күренеүенсә, был осорҙа Төхвәтуллин төрки-татар милли-мәҙәни автономияһы яҡлылар араһында йөрөй. Улар яңы төҙөлгән Өфө директорияһының ошо автономияны таныуына өлгәшергә тырышалар. Әммә Директория милли автономияларҙы таныу урынына, киреһенсә, өлкә хөкүмәттәрен таратыу тураһында ҡарар сығара. 1918 йылдың ноябрендә Колчак Өфө директорияһынан власты үҙ ҡулына. Комуч ағзалары Колчакка ҡаршы берниҙә эшләй алмай, ҡасып-боҫоп йөрөргә мәжбүр була. Ошо мәлдә реаль көскә эйә, йәғни үҙ ғәскәре булған Башҡорт хөкүмәте генә Колчакка баш бирмәй, автономияны һаҡлап ҡала.

Архив документтарынан күренеүенсә, 1918 йылдың декабрь айынан Фәтих Төхвәтуллин Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушыла. Зәки Вәлиди 1918 йылдың 14 декабрендә полк командирҙары һәм муллаларына ебәргән йәшерен хатында: "*Сегодня приехал в Уфу Габдулла Адигамов, Фатых Тухватуллин и Алюнов, как представители "съезда Учредительного собрания". Я этих людей направляю снова в Екатеринбург, в Челябинск, чтобы ознакомиться им с решением чехов*", – тип яҙа. Ләкин чехтар ҙа Колчак яғын ҡайыра башлай.

Аҡтар ҡулынан автономия алыуға тамам өмөтөн өҙгән Башҡорт хөкүмәте 1919 йылдың ғинуарында советтар менән һөйләшеүҙәр башлай һәм 18 февралдә улар Советтар яғына сыға. Өс көндән, 1919 йылдың 21 февралендә Темәс ауылында 1-се Дөйөм Башҡорт хәрби съезы асыла. Был оло йыйында Башҡортостан автономияһының ваҡытлы революцион хөкүмәте – Башревком ойошторола. Милли хәрәкәт етәкселәре Зәки Вәлиди, Гәрәй Ҡарамышев, Мөхәмәтхан Ҡулаев, Юныс Бикбов, Аллабирҙе Йәғәфәров, Әүхәҙи Ишмырҙин, Сәйеттәрәй Мағазовтар менән берлектә Фәтих Төхвәтуллин да ревком ағзаһы итеп һайлана. Ошо осорҙан башлап Ф. Төхвәтуллин Башҡорт автономияһы мәнфәғәттәре өсөн әүҙем көрәшкән эшмәкәрҙәрҙең береһе, Зәки Вәлидиҙең тоғро көрәштәшенә әүерелә.

23 февралдә Башревкомдың комиссариаттары ойошторола. Фәтих Төхвәтуллин Башҡорт Совет Республикаһының эске эштәр һәм милләттәр халыҡ комиссары итеп тәғәйенләнә. Март уртаһында аҡтар контрһөжүмгә күсеү сәбәпле, Башревком Темәс ауылынан – Мораҡҡа, артабан – Иманғолға, Ырымбурға, һуңынан Саранск ҡалаһына эвакуацияланa.

1919 йылдың 14 майында аҡтарҙан азат ителгән Башҡортостан территорияһында автономия власын урынлаштырыу өсөн Саранскиҙа Башревкомдың Уполномоченныйҙар советы булдырыла. Ошо совет составында Фәтих Төхвәтуллин Башҡортостанға китә. Бында ул Туҡ-Соран кантонында

автономияның урындағы власть органдары – кантон ревкомы, ауыл советтарын ойоштороуҙа, башҡорт ғәскәрҙәренә халыҡты мобилизациялауҙа ҡатнаша. Ырымбур губернаһы властары менән вәкәләттәрҙе бүлешеү, сиктәрҙе билдәләү тураһында һөйләшеүҙәр алып бара.

8 июлдә Фәтих Төхвәтуллин Саранск ҡалаһына кире саҡыртып алына һәм үҙенең туранан-тура вазифалары менән шөғөлләнә. Август башында Башревком Саранский ҡалаһынан, эвакуациянан ҡайтып төшә. Автоновиялы Башҡорт Совет Республикаһы хөкүмәте Стәрлетамаҡ ҡалаһында урынлаша.

1919 йылдың сентябрендә Көньяҡ фронтта һуғышҡан башҡорт ғәскәрҙәре Петроградҡа ташлана. Төхвәтуллин Башревкомдың махсус вәкиле сифатында Петроградҡа ебәрелә. Ул бында Көньяҡ фронттан килгән башҡорт полктарын ҡаршы алып, улар араһында сәйәси-аңлатыу эше үткәреү менән мәшғүл була. Фәтих Төхвәтуллин Петроградтан, башҡорт ғәскәрҙәре янынан, октябрь аҙағында ғына ҡайта.

1920 йылдың ғинуарында Стәрлетамаҡ ҡалаһында Башревком менән Башобком (коммунистар) араһында ҡапма-ҡаршылыҡ һуңғы сиккә етә. Коммунистар нисек тә булһа, Башҡортостан автономияһында власты үҙ ҡулына алырға тырыша. БашЧК-ға үҙ кешеләрен тәғәйенләй. Быға яуап итеп Башревком рәйесе Харис Йомағолов БашЧК-лағы коммунистарҙы ҡулға ала. Был конфликтҡа тиҙҙән Мәскәү ҙә ҡыҫыла һәм Башобкомды яҡлап сыға. Йомағолов Мәскәүгә саҡыртып алына. Уның урынына Башревком рәйесе вазифаһын Зәки Вәлиди үҙ ҡулына ала, БашЧК рәйесе итеп Башҡортостандың эске эштәр комиссары Фәтих Төхвәтуллинды ҡуя. Ә инде 1920 йылдың февраль башында Вәлиди Төхвәтуллинды Башревком буйынса үҙенең урынбаҫары итеп тәғәйенләй. Шулай итеп, Фәтих Төхвәтуллин Башҡорт Совет Республикаһында мөһим вазифалар биләләгән эшмәкәрҙәрҙең береһе, Зәки Вәлидиҙең уң ҡулына әүерелә. Ул командировкала саҡта Төхвәтуллин Башҡортостан хөкүмәте – Башревком рәйесе вазифаһын башҡара.

1920 йылдың июнендә Фәтих Төхвәтуллин Башревком ағзалары менән бергә Үҙәк властың мәкерле сәйәсәтенә ҡаршы (Совет хөкүмәте 1920 йылдың 19 майында үҙенең декреты менән Башҡортостандың автономия хоҡуҡтарын ҡырҡа сикләй) ризаһыҙлыҡ белдереп, отставкаға китә. Әммә ул Төркөстанға сығып китмәгән, йәки китеп өлгөрмәгән күрәһең. Уны ҡулға алып Ырымбур төрмәһенә ябып ҡуялар. Фәтих Төхвәтуллиндың 1920 йылдың октябрендә Сталиндың урынбаҫары Диманштейнға хат яҙа. Хатында ул Башҡортостандағы хәлдәрҙе аңлатырға тырыша. Фәтих Төхвәтуллин башҡорт халҡының тарихын яҡшы белеүе хайран итә. Ул үҙенең хатында бөтөн башҡорт тарихын ентекле итеп бәйән итә: “*Приступая к изложению июньских событий в БССР, нахожу сделать краткий исторический обзор Башкирии.*

*Башкиры, когда-то занимавшие громадную территорию (впоследствии эта территория была разделена на губернии: Оренбургская, Уфимская,*

*Самарская, Пермская и часть Вятской), вошла в состав Российской империи при царе Иване Грозном и заключили особый договор, смысл которого заключался в том, что Башкирия, входя в состав Русского государства, имеет свое управление, армию, сохраняет земли, платит ясак (дань натурой). После нарушения ряда договоров русскими царями башкиры под флагом сохранения автономности, начиная с 1536* (1636 йылдан булһа кәрәк – А. Я. ) *до 1774 г., восстали семьдесят четыре раза...*", – тип яҙа.

Артабан ул былай тип дауам итә: "*В 1864 году башкиры потеряли свою относительную свободу, особые башкирские управления и армия были упразднены. Начинается колонизаторская политика царей. Башкиры как кочевники и скотоводы постепенно оставляют степь, где уже устраиваются специальные дороги, по этим дорогам, разделяющим Башкирию на несколько частей, начинается "насаждение" переселенцев. Башкиры начинают группироваться на Урале, русские купцы и промышленники быстро появляются и здесь; башкир-кочевник, привыкший вести очень несложное хозяйство, постепенно попадает в кабалу, лучшие (земли) должны занимать насильственным путем промышленнки, таким образом несложному башкирскому хозяйству делают большой удар. Упадок духовных и моральных сил, с одной стороны, экономический гнет, с другой, окончательно сгибает башкир с ног.*

*Усиленная колонизаторская политика более позднего периода, "землустройство" времени Столыпина по закону 1906 года, кочевника-башкира направляет к беспощадному разорению и вымиранию...*

*Вот в каком каком положение застает Фверальская революция Башкирию. После Фверальской революции башкиры, не забывшие еще свою вольность, зашевелились сильнее, чем остальные туземцы восточных окраин России, и проявили громадную сплоченность. Первым лозунгом башкирского трудового люда было национальное самоопределение и вытекающая из него "Башкирская автономия". В период керенщины такой шаг башкир считался утопией, а впоследствии стал яблоком раздора. Само собой разумеется, такой шаг башкир не подуше был буржуазному правительству Керенского, представители которого на местах в губерниях начали всячески притеснять создающиеся "национальные советы". Башкиры проявили революционную решительность: в декабре 1917 года курултай (учредительный съезд) объявил Малую Башкирию автономной, и Областной башкирский совет явочным порядком прекратил сбор земских налогов, выгоняя земские учреждения из башкирской среды.*

*Но здесь возник татаро-башкирский вопрос. Буржуазная татарская интеллигенция выдвинула лозунг "культурно-национальная автономия" и, исходя из точки зрения, что башкиры как мусульмане и более отсталые, чем татары, не могут мыслить об автономном существовании, – начала всячески противодействовать революционному движению башкирского народа; лидеры*

*Уфимского “милли миджлиси” (национальное собрание) на руках с Кораном призывали башкир не отделяться от татар. Не религиозные чаяния руководили башкирами, они ясно понимали, что всякая политическая революция дает возможность сохранить культурно-национальные задачи за народами, но не всякая революция позволяет самоопределяться. Башкиры крепко стояли на точке зрения самоопределения нации.*

*Казалось бы, Октябрьская революция, на знамени которой было написано “Самоопредение народов”, и первое обширное воззвание Совета Народных Комиссаров к народам Востока давали полную возможность осуществить вековые чаяния трудящихся башкир. Но руководители советами на местах не могли понять башкир и [не] всегда следовали директивам центра. Башкиры захватили некоторые заводы, начали организовывать красные отряды, но такие чисто пролетарские начинания башкир закончились трагедией. И здесь тоже разыгрался национальный антагонизм – переселенец столкнулся с башкирином, и немаловажную роль здесь играли земельные взаимоотношения, переселенец понимал Октябрьскую революцию тоже своеобразно, он набросился на остатки удобных башкирских земель. Арест членов Башкирского областного совета в Оренбурге, различные интриги, плохое взаимоотношение с татарскими деятелями, неумелый подход советских деятелей в губерниях и большое “головотяпство”, выражаясь ныне появляющимся словом, по поводу восточных дел башкир к учредиловскому водовороту”.*

Артабан Фәтих Төхвәтуллин үҙенең хатында Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң булған ваҡиғаларҙы бәйән итеп үтә, Өфө һәм Ырымбур губернаһы большевиктарының Башҡортостан автономияһына йәне-тәне менән ҡаршы эшләүе, икенсе яҡтан татарҙарҙың “Татар-Башҡорт Республикаһы” идеяһы менән Башҡорт автономияһына аяҡ салыуҙары, урындағы коммунистарҙың автономияға ҡаршы эш итеүҙәре хаҡында асыҡ яҙа.

*“Ввиду того, что 13-го вечером назначено наше отправление в Москву в распоряжение особого отдела ВЧК, кроме того – по случаю болезненного состояния не мог докончить свой доклад. Мною не написана самая существенная часть доклада. Думаю, в центре мне будет предоставлена возможность для составления обширного и всестороннего доклада для представления полной картины Башкирии и об июнских событиях, где я работал около двух лет. Мне, начиная со дня организации Башревкома до середины октября 1919 года, пришлось бывать беспрерывно среди населения и среди красноармейцев, с середины октября 1919 года до 19 мая 1920 года почти беспрерывно работать в составе Башревкома и руководить теми комиссариатами, которые были возложены на меня. Поэтому свой доклад исключительно желаю основать на фактах и взять из жизни БССР”*, – тигән һүҙҙәр менән тамамлай ул үҙ хатын.

Фәтих Төхвәтуллин ике ай тирәһе Мәскәүҙә ВЧК-ның махсус бүлегендә тотола. 1920 йылдың декабрендә иреккә сығаралар. Сталиндың бойороғо

буйынса уны ҡабат Башҡортостанға эшкә ҡайтаралар. 1921 йылдың майынан Төхвәтуллин республиканың ер эштәре буйынса комиссары урынбаҫары, артабан “Башколхозсоюз” ойошмаһы рәйесе урынбаҫары булып эшләй. 20-се йылдарҙа Төхвәтуллин «Материалы к истории башкир» тип исемләнгән хеҙмәтен баҫтырып сығара.

1931 йылдың октябрендә ул Ер эштәре һәм малсылыҡ буйынса Башҡорт ғилми-тикшеренеү институты директоры итеп тәғәйенләнә. 1933 йылдан Тәжрибә ебәк станцияһы (опытная шелковая станция) директоры вазифаһын башҡара.

НКВД органдары “милләтсе” һәм “Германия агенты” тигән ялған ғәйептәр тағып, Төхвәтуллинды 1937 йылдың 28 июлендә ҡулға ала. Бер йыл төрмәлә ултырғандан һуң, 1938 йылдың 10 июлендә ул атыла. 1957 йылдың 26 июлендә Ф. Н. Төхвәтуллин реабилитацияланa.

## Сығанаҡтар:


ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 152. Л. 3.

ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 25. Лл. 2 об, 174, 208.

ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 107 а. Л. 44.

ЦГИА РБ. Ф. 1780. Оп. 1. Д. 11. Лл. 49, 203.

Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 1. Уфа, 2002. С. 179.

Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 21, 28, 487, 579.

Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 2. Уфа, 2003. С. 205, 429.

Шунда уҡ. Т. 4. Ч. 1. Уфа, 2008. С. 286–292.

Мардамшин Р. Р. Башкирская чрезвычайная комиссия . Уфа, 1999. С.37–53.

Книга памяти жертв политических репрессий Республики Башкортостан. Т. 5. Уфа, 2005. С. 106.



## ФӘТХЕЙ ӘХМӘҘУЛЛИН
### 1895 – 1938

Фәтхей Әхмәт улы Әхмәҙуллин – Башҡорт миллиа-азатлыҡ хәрәкәте эшмәкәрҙәренең береһе. 1895 йылда Өфө губернаһы Өфө өйәҙенең Абрай улысына ҡараған (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Шишмә районы) Ибраһим ауылында тыуған.

Ҡаҙан ҡалаһындағы "Ҡасимиә" мәҙрәсәһендә белем ала. 1913 йылдан Өфөлә гәзит редакцияһында экспедитор-конторщик булып эшләй. 1915 йылда фронтҡа ебәрәләр, Себергә китеп барышлай, юлда ҡаса. Әммә Омск ҡалаһында тотоп, 37-се Себер запас пехота полкында ҡалдыралар. 1917 йылдың Февраль революцияһынан һуң, әүҙем, радикаль ҡарашлы егет большевиктар партияһы сафына инә. Оҙаҡламай, 1917 йылдың мартында уны Өфө ҡалаһындағы 144-се запас пехота полкына күсерәләр. Бында ул губернаның мосолман большевиктары лидерҙарының береһенә әүерелә. Уны эшсе һәм һалдат депутаттарының Өфө губерна Советы янындағы Мосолман һалдаттары бюроһына ағза итеп һайлайҙар. 1917 йылдың августынан Баһау Нуриманов менән РСДРП(б)-ның Өфө Комитеты янындағы татар-башҡорт төркөмөнөң матбуғат органы булған "Алға" гәзитен сығарыу менән мәшғүл була.

Фәтхей Әхмәҙуллин большевик булыуға ҡарамаҫтан, Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең уй-ниәттәре уға ят булмай. Башҡорт үҙәк шураһы күтәреп сыҡҡан Башҡортостан тупраҡлы мөхтәриәте (территориаль автономияһы) идеяһын хуплай. 1917 йылдың көҙөндә Башҡорт үҙәк шураһының Өфө секретариаты уны милли хәрәкәттең лидерҙары Зәки Вәлиди һәм Шәриф Манатовтар менән берлектә, "башҡорт-федералистар" исемлеге буйынса Ойоштороу йыйылышына (Учредительное Собрание) ағзалыҡҡа кандидат итеп күрһәтә. Петроградта үтәсәк был Йыйылышҡа бөтә ил, шул иҫәптән Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте, ҙур өмөт бағлай. Башҡорт депутаттары территориаль автономия идеяһын яҡлап сығыш яһарға тейеш була.

Әммә 1917 йылдың 26 октябрендә Петроградта, Ваҡытлы хөкүмәтте ҡолатып, большевиктар власты үҙ ҡулына алғас. Ырымбурҙағы Башҡорт үҙәк шураһы ла боларыш осорҙа башҡорттар үҙ яҙмышын үҙ ҡулына алырға тейеш

тигән фекергә килә. 15 ноябрҙә Үҙәк шура Башҡортостан автономияһын иғлан итә. 1917 йылдың 8–20 декабрендә үткән 3-сө Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайында автономия раҫлана. Был ҡоролтайҙа Ф. Әхмәҙуллин да ҡатнаша. Ҡоролтай мәлендә ойошторолған башҡорт йәштәренең “Тулҡын” ойошмаһының башҡарма комитетына һайлана.

1918 йылдың ғинуарында Башҡортостан автномияһы үҙ вәкилдәрен Өфөлә үткән төрки-татарҙарҙың Милли мәжлесе йыйылышына ебәрә. Был йыйылыштарҙа башҡорт делегацияһы составында Фәтхей Әхмәҙуллин да ҡатнаша. Башҡортостан автономияһы вәкилдәре менән Милли мәжлес араһында Рәсәй мосолмандарҙың артабанғы дәүләт ҡоролошо мәсьәләһе буйынса ҡыҙыу бәхәстәр тыуа. Милли мәжлес вәкилдәре Башҡортостан автономияһына ҡаршы сыға, мосолмандар өсөн милли-мәҙәни автономия (Иҙел-Урал штаты) ғына булырға тейеш тигән фекерҙе алға һөрә.

Февраль башында Башҡортостан автономияһына ҡаршы Ырымбур мосолман комитеты, большевиктарҙың губерна комитеты ярҙамы менән Башҡорт хөкүмәтен ҡулға ала. Уның урынына большевик башҡорттар Абдулла Дәүләтов, Бәхтегәрәй Шәфиев тарафынан Башҡортостандың Ваҡытлы Революцион Советы (БВРС) ойошторола. БВРС совет платформаһы нигеҙендә Башҡортостан автономияһын тормошҡа ашырырға ниәт итә. Фәтхей Әхмәҙуллинды БВРС-тың Өфө губернаһы буйынса комиссары итеп һайлайҙар. Оҙаҡламай ул Өфө губерна Советының татар-башҡорт комиссариатында башҡорт эштәре буйынса комиссар итеп тәғәйенләнә. Милли мәжлес вәкилдәре хәҙер инде, Татар-башҡорт комиссариатына күсеп, Иҙел-Урал штаты урынына Татар-Башҡорт Совет республикаһы идеяһын алға һөрә башлайҙар. Фәтхей Әхмәҙуллин комиссариаттың башҡа башҡорт эшмәкәрҙәре менән берлектә айырым Башҡорт автономияһы өсөн сығыш яһай.

1918 йылдың июнендә комиссариатта эшләгән башҡорт эшмәкәрҙәре менән Татар-Башҡорт республикаһы яҡлылар араһында мөнәсәбәт ныҡ ҡырҡыулаша. “*На учредительный съезд советов Татаро-Башкирской республики не должен быть допущен ни один человек, не способный выразить твердую волю татаро-башкирского пролетариата, и провокаторы, подобные Шарифу Манатову и Фатхи Ахмедуллину, не должны быть близко подпущены к работе съезда. Ибо в противном случае будет нанесен большой урон делу упрочения Татаро-башкирской народной республики...*”, – тип яҙыла Бәләбәй өйәҙе башҡарма комитетының татар-башҡорт бүлеге сығарған гәзиттә. Оҙаҡламай Әхмәҙуллинды Шәриф Манатов һәм Таһир Имаҡов менән бергә төрмәгә ябып ҡуялар. Әммә уларға оҙаҡ ултырырға тура килмәй. 1918 йылдың 4 июлендә Чехословак корпусы ғәскәрҙәре Өфөнө ала. Ф. Әхмәҙуллинды Башҡорт автономияһы яҡлы кеше булараҡ төрмәнән сығаралар. Большевик икәнен белеп ҡалһалар, аҡтар ҡулға алыр, тип, ул Өфөнән сығып, йәшеренеү яғын ҡарай. 1918 йылда Әхмәҙуллин йәшеренеп йәшәргә мәжбүр була.

1919 йылда Башҡорт һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡас, Башҡорт совет автономияһын тормошҡа ашырыу эшенә ҡушылып китә. Уны Һамар ҡалаһында Көнсығыш фронттың Көньяҡ төркөмө Реввоенсоветы янындағы

Башревком вәкиле Муллайән Халиҡовтың сәйәси эштәр буйынса ярҙамсыһы итеп тәғәйенләйҙәр. Бында ул башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороу эшендә әүҙем ҡатнаша. Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте лидерҙарының береһе булған М. Халиҡов уға ҙур ышаныс менән ҡарай: *“тов. Фатхи Ахмедуллин – старый партийный работник, искренно сочувствующий нашим делам”*, – тип баһалай.

1919 йылдың көҙөндә башҡорт ғәскәрҙәре революцияның бишеге – Петроград ҡалаһын Юденич армияһынан һаҡлау өсөн Петроград фронтында ебәрелә. Петроградтағы башҡорт ғәскәрҙәренең һаны 10 меңдән ашыу яугирҙы тәшкил итә. Ғәскәрҙәрҙә сәйәси эш алып барыу өсөн тәжрибәле башҡорт эшмәкәрҙәре талап ителә. Ошо айҡанлы Башҡорт республикаһының Хәрби эштәр буйынса комиссариаты Ф. Әхмәҙуллинға тағы яуаплыраҡ бурыс йөкмәтә – үҙенең вәкиле сифатында Петроградҡа ебәрә. Бында ул “Салауат” гәзитен сығарыуҙа ҡатнаша, башҡорт һалдаттары өсөн сәйәси курстар ойоштора. Артабан башҡорт ғәскәрҙәренә сәйәси яҡтан идара итеү һәм уларҙы артабан ойоштороу маҡсатынан Башвоенкомат Фронттарҙағы башҡорт ғәскәрҙәре эштәре буйынса уполномоченныйҙар революцион советын булдыра. Ревсоветтың рәйесе итеп Әхмәҙуллин тәғәйенләнә. Уға бирелгән мандатта былай тиелә: *“Предъявитель сего – вр. и. д. Председателя Ревосовета Уполномоченных Башчастей на фронтах тов. Ахмедуллин Фатхей, которому поручено дело формирования и политическое руководство Башкирскими частями.*

*В связи с возложенными на него обязанностями, тов. Ахмедуллин имеет право пользоваться прямым проводом и дургими средствами железнодорожной, телеграфной и почтовой связи...”*. Шулай итеп, уның иңенә ҙур бурыстар һалына.

Әммә Юденич армияһы ҡыйратылғандан һуң, Ҡыҙыл Армия командованиеһы башҡорт ғәскәрҙәрен тулыландырырға ашыҡмай. 1920 йылдың башында Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы Новгород губернияһына Муравьев казармаларына күсерә. Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы полктарын Финляндия сиген һаҡларға ебәрә (ул саҡта финн границаһы Петроградтан 15 саҡырым алыҫлыҡта ғына була). Ревсовет рәйесе Әхмәҙуллин Петроградта бригада штабы янында ҡала. 1920 йылдың 8 апрелендә Зәки Вәлиди: *“...Ахмедуллина решил оставить пока на фронте, а потом может быть он заменит одного из наших представителей при ВЦИК, Ахмедуллин пусть вручает полкам знамена...”*, – тип телеграмма һуға.

Зәки Вәлидиҙең бойороғона ярашлы Ревсовет рәйесе Әхмәҙуллин ҡыҙыл туҡыманан байраҡтар эшләтеп, 27 май көнө Петроградта тантаналы рәүештә Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһының өс полкына тапшыра. Байраҡтарҙың бер яғында башҡорт телендә, икенсе яғында урыҫ телендә: *“Рәсәй Федерацияһының Башҡорт Совет Республикаһы. Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһының –се полкы”*, – тигән яҙыу булһа, уртаһында башҡорт ғәскәрҙәренең билдәһе – ярым ай менән йондоҙ төшөрөлгән. Әйткәндәй, был байраҡтарҙың икәүһе бөгөнгө көндә Башҡортостан Республикаһының Милли музейы фондында һаҡлана.

1920 йылдың майында Ҡыҙыл Армияның фарманы менән Новгород губернаһында торған Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы таратыла, уның

яугирҙарын бер полкка туплап польша фронтындағы Мортазин бригадаһына ебәрелә. Башҡорт уҡсы бригадаһы Петроградтан Эстония сигенә күсерелә. Ошондай үҙгәрештәр һөҙөмтәһендә, фронттарҙағы башҡорт ғәскәрҙәре эше буйынса уполномоченныйҙар Ревсоветы үҙенең эшмәкәрлеген туҡтата. Фәтхей Әхмәҙуллинды саҡыртып алып, Өфө губисполкомы янындағы Башвоенкомат вәкиле итеп тәғәйенләйҙәр.

Артабан ул Башвоенкоматтың комендант батальонында коммунистик ячейка рәйесе вазифаһын башҡара. 1920 йылдың декабрендә Башсовнархоз коллегияһы ағзаһы итеп тәғәйенләнә. 1921 йылда Фәтхей Әхмәҙуллинға юғары вазифа йөкмәтелә – Башҡорт Совет Республикаһының халыҡ мәғарифы комиссары итеп ҡуйыла. Киләһе йылына уны яңынан хужалыҡ эшенә күсереләр – транспорт идаралығы начальнигы булып китә. Артабан төрлө яуаплы вазифалар башҡара. БАССР-ҙың Тәьминәт комиссары урынбаҫары булып эшләй. Һуңынан республиканың Госплан рәйесе урынбаҫары вазифаһын биләй.

Күп кенә Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте эшмәкәрҙәре һәләк иткән 30-сы йылдарҙың репрессия елдәре Фәтхей Әхмәҙуллинды ла урап үтмәй. 1937 йылдың 4 августында НКВД органдары уны, контрреволюцион буржуаз-милләтселек ойошмаһында ҡатнашыуҙа ғәйепләп, ҡулға ала. 1938 йылдың 10 июлендә СССР Юғары судының Хәрби Коллегияһы ҡарары буйынса атып үлтерелә. Сталиндың шәхес культы фашланғандан һуң, 1957 йылдың августында Фәтхей Әхмәҙей улы Әхмәҙуллин реабилитациялана.

**Сығанаҡтар:**

ЦГИА РБ. Ф. 629. Оп. 1. Д. 2. Л. 48.
ЦГИА РБ. Ф. 629. Оп. Д. 1331. Л. 38.
ЦГИА РБ. Ф. 1780. Оп. 1. Д. 13. Л. 124.
ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 25. Л. 170, 174.
ЦГИА РБ. Ф. 933. Оп. 2. Д. 119. Л. 13.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 1. Уфа, 2002. С. 102, 113, 175, 177, 245, 256, 454, 510.
Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 2. Уфа, 2003. С. 172, 412, 647.
Книга памяти жертв политических репрессий Республики Башкортостан. Т. 1. Уфа, Китап. 1997. С. 169.
В. Гизетдинов. Судьба “Фатхи – солдата”// Возвращенные имена. Уфа, 1991. С. 3–22.



## КӘРИМ ИҘЕЛҒУЖИН
**1895 – 1937**

Кәрим Абдулла улы Иҙелғужин – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте эшмәкәрҙәренең береһе. 1895 йылдың 2 октябрендә Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙе Ҡыпсаҡ улысының (хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Новосергиевский районы) Мерәҫ ауылында тыуған.

К. Иҙелғужин тәүҙә ауылда уҡый, 1912 йылда Өфөләге "Ғәлиә" мәҙрәсәһенә уҡырға инә. Ләкин Өфө мәҙрәсәһен тамамларға насип булмай, ике йыл уҡығандан һуң, 1915 йылда уны әрмегә алалар. Бында ул уҡыу командаһында уҡый. Уҡыуын тамалауға, уға кесе унтер-офицер званиеһын биреп, фронтҡа ебәрәләр. Һуғышта 1917 йылға тиклем була. Октябрь революцияһынан һуң тыуған яғына ҡайтҡан унтер-офицер, фронтовик һалдатты ауыл Советына саҡыралар. Тәүҙә сәркәтип булып эшләй, артабан Ҡыпсаҡ улысының халыҡ мәғарифы инструкторы вазифаһын атҡара.

1918 йылдың майында Силәбелә Чехословак корпусы большевиктарҙы ҡыуып, власты үҙ ҡулына ала. Июнь башында улар Өфө ала. Ошо мәлдә Дутовтың казактары Ырымбур губернаһының көньяғын ҡыҙылдарҙан таҙарта. Бер көн казактар Ҡыпсаҡ улысына килеп, Советта эшләгән хеҙмәткәрҙәрҙе ҡулға ала. Кәрим Иҙелғужинды Ырымбур төрмәһенә алып килеп ябалар. 1918 йылдың июлендә Иҙелғужиндың ауылдашы, уҡытыусыһы, милли хәрәкәт етәкселәренең береһе Сәғит Мерәҫов Силәбенән Ырымбурға килә. Ул бында, Дутов менән һөйләшеп, Башҡорт хөкүмәтенең Ырымбур хәрби бүлеген ойоштора, мобилизация иғлан итә. Тиҙҙән, Мерәҫовтың тырышлығы менән Кәрим Иҙелғужин төрмәнән сығарыла. "*Мрясов Сагит, войдя в переговоры с казачьим правительством и командованием, добился передачи из тюрьмы башкир, арестованных казаками по обвинению в большевизме. В числе их был Идельгужин К., который поступил в распоряжение военного отдела Башкирского правительства и стал работать там*", – тип яҙа милли хәрәкәттә ҡатнашыусы Н. Бикбаев.

1918 йылдың 3 сентябрендә уны Башҡорт хәрби шураһы фарманы менән Ирекле отрядтар бүлеге янындағы махсус командаға һалдат итеп алалар.

Иҙелғужин бер үк ваҡытта, Ырымбур хәрби бүлегенең матбуғат органы – “Башҡорт тауышы” гәзитен сығарышыуҙа әүҙем ҡатнаша. Бында уның ялҡынлы мәҡәләләре донъя күрә. Сентябрь башында башҡорт йәштәренең “Тулҡын” ойошмаһы конференцияһында ҡатнаша.

1918 йылдың октябрендә Ирекле отрядтар бүлеге янындағы махсус команда һәм Бөрйән-Түңгәүер, Үҫәргән, Ҡыпсаҡ, Етеырыу, Туҡ-Соран кантоны отрядтары 2-се Башҡорт ирекле кавалерия полкына туплана. Башҡорт хәрби шураһы янындағы Ирекле отрядтар бүлеге бөтөрлә, уның мөдире Әхмәҙулла Бейешев 2-се кавалерия полкының командиры итеп тәғәйенләнә. Полктың штабы Ырымбурҙа, Каруанһарай бинаһында урынлаша. Кәрим Иҙелғужин 1918 йылдың октябренән алып 1919 йылдың февраленә тиклем 2-се Башҡорт кавалерия полкында писарь булып хеҙмәт итә.

16 февралдә ул Башкорт корпусы штабының уполномоченныйы сифатында Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәренең Совет власы яғына сығыуы тураһында фарманды иғлан итеү һәм уның сәбәптәрен һалдаттарға төшөндөрөү өсөн 4-се Башҡорт уксы полкына ебәрелә. 18 февралдә ошо полк составында ҡыҙылдар яғына сыға.

1919 йылдың апреленән К. Иҙелғужин 1-се армияның 20-се дивизияһында Башревком вәкиле булып хеҙмәт итә. 1919 йылдың көҙөндә ул Тамъян-Ҡатай кантонының хәрби комиссары итеп тәғәйенләнә, 1920 йылдың апрелендә Туҡ-Соран катонына күсерелә. Артабан Бөрйән-Түңгәүер кантон башҡарма комитеты рәйесе вазифаһын үтәй. 1921–1922 йылдарҙа Туҡ-Соран кантон башҡарма комитетында эшләй. 1922–1924 йылдарҙа Ырымбурҙағы Башҡорт халыҡ мәғарифы институтын етәкләй. 1925 йылда республиканың башҡорт телендәге төп матбуғат баҫмаһы – “Башҡортостан” гәзитенең яуаплы мөхәррире итеп тәғәйенләнә. Ошо осорҙа ул милли хәрәкәттең тарихы менән шөғөлләнеп ала. 1925 йылда Иҙелғужиндың “Октябрь революцияһы башҡорт крәҫтиәндәренә ни бирҙе”, 1926 йылда “Башҡорт хәрәкттәре 1917, 1918, 1919 йылдарҙа” исемле китаптары донъя күрә.

1928 йылдың октябрендә Кәрим Иҙелғужин БАССР-ҙың халыҡ мәғарифы комиссары вазифаһына тәғәйенләнә. Ләкин 20-се йылдарҙың аҙағында башҡорт милли-хәрәкәтендә ҡатнашҡан эшмәкәрҙәрҙе эҙәрлекләү башлана. 1929 йылда милли хәрәкәт лидерҙарының береһе булған Нуриәғзәм Таһировты 10 йылға иркенән мәхрүм итәләр. Ошо уҡ йылдың авгусында “партияға ингән саҡта Вәлидов армияһында хеҙмәт иткәне” тураһындағы фактты йәшергәне өсөн тип Иҙелғужинды вазифаһынан бушаталар.

Артабан ул уҡытыусы булып эшләй, 1934 йылдан Башҡорт педагогия ғилми-тикшеренеү институтының директор урынбаҫары вазифаһын үтәй. НКВД органдары Иҙелғужиндың Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә ҡатнашҡанын онотмай. 1936 йылдың сентябрендә тағы ҡулға алына. Уны биш йылға иркенән мәхрүм итеп, лагерға ебәрәләр.

1937 йылдың 21 ноябрендә НКВД-ның тройкаһы К. Иҙелғужиндың эшен яңынан ҡарай һәм атыуға хөкөм итә. Хөкөм ҡарары 1937 йылдың 21 декабрендә ғәмәлгә атҡарыла. Кәрим Абдулла улы Иҙелғужин 1956 йылдың 30 июнендә реабилитацияланa.

## Сығанаҡтар:

ЦГИА РБ. Ф. 1780. Оп. 1. Д. 11. Л. 119.

ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 25. Л. 160.

ЦГИА РБ. Ф. 1201. Оп. 2. Д. 3. Л. 29.

Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 273, 399, 423, 556, 567, 568.

Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 2. Уфа, 2003. С. 358.

Шунда уҡ. Т. 3. Ч. 1. Уфа, 2004. С. 196, 216, 618, 668.

Шунда уҡ. Т. 4. Ч. 1. Уфа, 2008. С. 564–565.

Сайфуллин С. Журналист, деятель народного образования, ученый //Трудный путь к правде. Уфа, 1997. С. 144–150.

Книга памяти жертв политических репрессий Республики Башкортостан. Т. 2. Уфа, 1999. с. 460.



## ШАКИР ТӨХВӘТУЛЛИН
## 1894 – 1937

Шакир Динислам улы Төхвәтуллин – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәктендә әүҙем ҡатнашҡан эшмәкәрҙәренең береһе. 1894 йылдың 16 декабрендә Өфө губернаһы Златоуст өйәҙе Мырҙалар улысының (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Салауат районы) Арҡауыл ауылында тыуған. Үҙенең анкетаһында яҙыуынса, Ш. Төхфәтуллин белемде ауыл мәҙрәсәһендә ала. Артабан хәрби хеҙмәткә алынып, ярты йыл әрме хеҙмәтендә йөрөп ҡайта.

1917 йылда Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушылып китә. 1918 йылда Шакир Төхвәтуллин Башҡортостан автономияһының Дыуан кантоны башҡармаһы рәйесе, кантондың хәрби начальнигы ярҙамсыһы булып эшләй. 1919 йылдың ғинуарында уны Башҡорт хөкүмәтенә эшкә алалар. 16 февралдә Башҡорт корпусы штабы уполномоченныйы сифатында 5-се Башҡорт уҡсы полкына барып, Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәренең Совет власы яғына сығыуы тураһында фарманды иғлан итә.

Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре ҡыҙылдар яғына сыҡҡандан һуң, 5-се полк һалдаттары Ш. Төхвәтуллинды Темәстә үткән I Бөтә Башҡорт хәрби съезына делегат итеп һайлай. Съезда Башҡортостан автономияһының революцион хөкүмәте – Башревком ойошторола. 1919 йылдың февраленән Шакир Төхвәтуллин Башревкомдың агитация-мәғлүмәт бүлеге мөдире Сәйеттәрәй Мағазовтың урынбаҫары булып эшләй. Март айында Аллабирҙе Йәғәфәров менән бергә Өфөлә көнсығыш фронттың аҙыҡ-түлек буйынса баш комиссары янында эшләй. Башҡорт республикаһы халҡын икмәк менән тәьмин итеү эшендә йөрөй.

1919 йылдың авгусында Башревком Саранск ҡалаһынан ҡайтҡас, Башҡортостандың урындағы власть органдары – кантревкомдар ойошторола башлай. Ш. Төхвәтуллин үҙенең тыуған яғына эшкә ебәрелә. Уны Дыуан кантонының хәрби комссары һәм кантревком ағзаһы итеп тәғәйенләйҙәр. 1920 йылдың ғинуарында ул Арғаяш кантонына, Хәфиз Ҡушаев урынына хәрби комиссар итеп күсерелә. Май айында Шакир Динислам улы партияның

Башҡортостан өлкә комитеты Президиумына кандидат итеп һайлана.

Үҙәк Совет хөкүмәте Башҡортостандың автономиялы хоҡуҡтарын ҡырҡа сикләгәндән һуң, 1920 йылдың июнендә Шакир Төхвәтуллин Башревком ағзалары менән бергә Төркөстанға сығып китә. 1921 йылда Төркөстанда милли хәрәкәт уңышһыҙлыҡҡа осрағандан һуң, ҡабат Башҡортостанға ҡайта. Халыҡ мәғарифы комиссариатында эшләй, артабан Мәскәүҙә Милләттәр эштәре буйынса халыҡ комиссариатында (Наркомнац) Башҡортостан вәкиленең урынбаҫары вазифаһында була.

1924 йылда ВЦИК Президиумы янындағы БАССР вәкиленең урынбаҫары булып хеҙмәт итә. 1925 йылдың Башҡортостанға эшкә ҡайта. Мәскәүҙә эшләгән осоронда Шакир Динислам улы башҡа автономиялы республикалар вәкилдәре араһында ҙур абруй, ихтирам ҡаҙана. Башҡортостанға ҡайтыр алдынан, автономиялы республика вәкилдәре уға, изге теләктәр теләп ҡала: *“Узнав о Вашем уходе из Представительства Башкирии в родной Вам край, мы, Ваши соратники – Представители Автономных Республик и Областей при Правительстве Р.С.Ф.С.Р. спешим пожелать Вам на новом поприще с удвоенной энергией приложить силы, знание и опыт Москвы в деле Советского строительства Башкирского народа из среды которого Вы вышли.*

*Ваша 4-х летняя работа в должности Представителя в годы разрухи и голода, а затем Заместителя, с очевидной ясностью показали Вашу трудоспособность, преданность делу Российской Коммунистической Партии (большевиков), в каковой Вы кроме того принимаете активное участие путем работы по заданиям партийных организаций.*

*Ваша прямолинейность, четкость и ясность во всем, равно чуждость всяких уклонов относят Вас к разряду выдержанных сознательных коммунистов, столь ценных для всей партии и в частности Башкирской Организации, насчитывающей, как и все наши автономные единицы, недостаточное количество таких коммунистов – туземцев, каким являетесь Вы товарищ Тухватуллин”*, – тип яҙа коллегалары.

Шакир Төхвәтуллин Мәскәүҙән ҡайтҡас, БАССР-ҙың Ер эштәре буйынса халыҡ комиссары булып эшләй, һуңынан “Башкоопхлебсоюз” ойошмаһында элемтә бюроһы сәркәтибе вазифаһын биләй. НКВД органдары Ш. Төхвәтуллиндың Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте эшмәкәре икәнен онотмай. 1930 йылдың ғинуарында Шәкир Динислам улын ҡулға алып, 5 йылға иркенән мәхрүм итәләр.

1937 йылдың 19 октябрендә Төхвәтуллин тағы ҡулға алына. Ике ай тирәһе төрмәлә тотҡандан һуң, шул уҡ йылдың 7 декабрендә атыла. Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте һәм дәүләт эшмәкәре Шакир Динислам улы Төхвәтуллин 1956 йылдың 30 июнендә реабилитациялана.

**Сығанаҡтар:**

ЦГИА РБ. Ф. 629. Оп. 1. Д. 1172. Личное дело Ш. Д. Тухватуллина.
ЦГИА РБ. Ф. 1780. Оп. 1. Д. 9. Л. 12.

ЦГИА РБ. Ф. 1201. Оп. 2. Д. 3. Л. 14.
А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Ч. 1. Уфа, 2005. С. 185.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 556, 575.
Шунда ук. Т. 2. Ч. 2. Уфа, 2003. С. 149, 554.
Шунда ук. Т. 3. Ч. 1. Уфа, 2004. С. 619, 628, 668.
Шунда ук. Т. 3. Ч. 2. Уфа, 2006. С. 564, 572, 595.
Шунда ук. Т. 4. Ч. 1. Уфа, 2008. С. 11, 24, 28, 34, 130, 133, 174, 178.
Книга памяти жертв политических репрессий Республики Башкортостан. Т. 5. Уфа, 2005. С. 106.



## ХАЖИӘХМӘТ ИШБУЛАТОВ
**1851 – 1921**

Хажиәхмәт Исхаҡ улы Ишбулатов – Башҡортостан автономияһының хәрби көстәре – Айырым Башҡорт корпусы командиры. 1851 йылдың 16 мартында Өфө губернаһы Өфө өйәҙенең 3-сө мишәр кантонына (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Благовар районы) ҡараған Өйҙрәкбаш ауылында тыуған.

1866 йылда Ырымбурҙа Неплюев кадет корпусын тамамлай. Хәрби хеҙмәтте батальон суды рәйесе сифатында башлай. 1878 йылда штабс-капитан дәрәжәһен ала. 1892 йылдан Брест-Литовскиҙа хеҙмәт итә, артабан Ковель ҡалаһында полк менән командалыҡ итә. 1908 йылда генерал-майор дәрәжәһендә отставкаға сыға. Фиҙәкәр хеҙмәте өсөн Изге Владимир, Изге Анна һәм Изге Станислав ордендары менән бүләкләнә.

Беренсе донъя һуғышы башланғас, 1915 йылда үҙ теләге менән хәрби хеҙмәткә бара. 1916 йылда Бәләбәй ҡалаһында 152-се полк менән командалыҡ итә. 1917 йылда Бәләбәй гарнизоны начальнигы итеп тәғәйенләнә. Февраль революцияһынан һуң, гарнизонда боларыш башланғас, хәрби хеҙмәтте ҡалдыра.

1918 йылдың йәйендә Силәбелә башҡорт полктары ойошторола башлағас, Зәки Вәлиди генерал Ишбулатовҡа телеграмма ебәрә: “*Башкирский военный совет просит Вас в возможно скорейшее время прибыть в Челябинск, в военный совет, для принятия участия в организации башкирских войск и руководстве ими*”. Генерал саҡырыуҙы ҙур теләк менән ҡабул итә. Июль айында Ишбулатов 1-се Башҡорт пехота дивизияһы командиры итеп тәғәйенләнә.

1918 йылдың сентябрендә башҡорт полктары Айырым корпусҡа берләштерелә. Айырым Башҡорт корпусының командиры итеп генерал Ишбулатов тәғәйенләнә. Башҡорт хәрби шураһының 7 сентябрҙәге фарманында былай тиелә: “*Согласно телеграммы Председателя Башкирского Военного Совета от 6 сентября за № 1226 прибывший в распоряжение Башкирского Военного Совета генерал-майор Ишбулатов назначается командиром Башкирского корпуса с 6 сентября с. г. коему теперь же приступить к исполнению обязанностей комнадира корпуса*”.

Генерал Ишбулатовтың Ырымбурға килеүе Башҡорт корпусы һалдаттарына рух ныҡлығы өҫтәй. 14 сентябрҙә Ырымбурҙа 4-се Башҡорт полкының частары Орск фронтына оҙатыла. Генерал Ишбулатов уларҙы вокзалға тиклем оҙатып бара. Уның сығышын һалдаттар ура ҡысҡырып алҡышлай. 16 сентябрҙә Ишбулатов бөтөн башҡорт ғәскәрҙәрен изге Ҡорбан байрамы менән ҡотлап, телеграмма ебәрә. Унда былай тиелә: *"От души поздравляю вас с великим праздником Курбан-байрам. От чистого сердца желаю вам, воинам, отважно, не дрогнувшей рукой очистившим в боях наш родину от врагов и, кроме того, избавить наш народ от неописуемых, связанных с войной, хлопот и неудобств для спокойного и благополучного проведения праздника. Прошу Аллаха силы и помощи в наших святых делах по спасению от катастрофы нашей родины Башкурдистана и всей Российской республики..."*.

Генерал Ишбулатов башҡорт милли ғәскәрҙәрен ойоштороу мәсьәләһендә бөтә күңеле менән бирелеп эшләй. Зәки Вәлиди менән бергә Һамар ҡалаһына барып Комуч (Һамар хөкүмәте) менән һөйләшеүҙәрҙә ҡатнаша. Генерал татар эшмәкәрҙәренең Башҡорт милли армияһы ойошторолоуына ҡаршы сығыуын ҡаты тәнҡитләй. Зәки Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә ошо айҡанлы бер ваҡиғаны телгә алып үтә. *"Генерал Ишбулатов менән Һамар хөкүмәте офицерҙарына тәғәйенләнгән кунакханала урынлаштык. Бер көн һалдаттар Ҡаҙан татарҙарының билдәле театр эшмәкәре Ғабдулла Ҡариевты, башкорт ғәскәрен мыҫҡыл итә, тип яғалап алып инде.*

*Мине бында офицерҙар араһында хәрби формала күргәс: "Ғәскәр ойоштороп, кеше үлтереүҙе һөнәргә әүерелдергәнһең. Мобилизация иғлан иткәнһең. Аллаһы Тәғәлә хакына ташла, урыҫка калдыр был эште", – тигән етди һүҙҙәр әйтте. Ғәскәр сардарыбыҙ генерал Ишбулатов та эргәмдә ине. Быны үҙ һөнәрен кәмһетеү тип аңланы һәм бик нык асыуланып, таныш булмаған Ғабдулла Ҡариевтан: "Һин Ваисовтарҙанмы?" – тип һораны. Ваисовтар Ҡаҙанда ғәскәри хеҙмәткә каршы сыккан бер даирә... Ҡариев: "Юк, түгелмен", – тине. Генерал уға: "Ул хәлдә һин ваисист түгел, пацифист икәнһең. Ҡаҙан татарҙары менән сыуаштар, быуаттар буйы урыҫ кулы аҫтында булып, ғәскәри идара эшен тик урыҫ эше, тип карай. Был йөҙҙән күпселегегеҙ үҙ аллы милли ғәскәр һәм ерле өлкә автономияһы фекеренә каршы. Тик дин, мәғариф эштәре менән шөғөлләнеү фекерендә. Әгәр һеҙҙе ғәскәргә алып, унда ошо өгөтөгөҙҙө дауам итһәгеҙ, мин һеҙҙе шунда ук төрмәгә ябыр инем", – тине. Мин Ҡариевка: "Башка бындай акылһыҙ һүҙ һөйләмәгеҙ, китергә мөмкин", – тинем. Ҡариев сығып киткәс, генерал миңә: "Үҙ аллы милли корпус ойоштороуҙы ғәскәрлек рухын һаклап калған башкорт һәм каҙак кабиләләре араһында башлауыбыҙ ғәйәт дөрөҫ булды. Унда бындай зарарлы, таркаткыс фекерҙәр юк", – тине"*.

1918 йылдың сентябрь аҙағында Орск ҡалаһы ҡыҙылдарҙан азат ителә. Бында башҡорт ғәскәрҙәре ҙур батырлыҡ күрһәтә. Улар беренселәрҙән ҡалаға бәреп инә. Дутов башҡорттарҙы артыҡ маҡтап бармаһа ла, уның өлкән адъютанты подполковник Вагин башҡорт яугирҙарының батырлығына һоҡланыуын

йәшермәй һәм Дутов исеменән генерал Ишбулатовҡа түбәндәге рәхмәт хатын ебәрә:

**Начальник Штаба**
**Оренбургского**
**военного округа**
**9 октября 1918 года**
**№ 414**
**гор. Оренбург**

**Х. И. Ишбулатову**
**командиру Отдельного**
**Башкирского корпуса**

**Милостивый Государь,**
**Хаджи-Ахмет Искакович**

**Командующий Войсками Округа, руководя действиями строевых частей Округа на Орском фронте лично убедился в доблестной службе башкир, работающих рука об руку с казаками, грудью отстаивающими свободу не только казаков, но и всей России.**

**Таковые же местные отзывы о работе башкирских частей неоднократно получались и от командующих фронтами.**

**С чувством глубокого удовольствия передаю Вашему Превосходительству искреннюю благодарность Командующего Войсками Округа доблестным сынам Башкурдистана за их вызывающую общее удовлетворение, службу на пользу дорогой нашей Родине.**

**Уважающий Вас и преданный А. Вагин**
**и. д. старшего адьютанта, подполковник**

Ошо мәлдә Һамар хөкүмәтенең Халыҡ армияһы (Башҡорт корпусы август–сентябрь айында ошо армия составында була) фарманы менән Хажиәхмәт Ишбулатовҡа генерал-лейтенант званиеһы бирелә. Ләкин артабан аҡтарҙың башҡорт милли ғәскәренә ҡарата мөнәсәбәте кире яҡҡа үҙгәрә. Колчак властка килеү менән Башҡорт корпусын дивизияға итеп үҙгәртергә, башҡорт ғәскәрҙәрен туранан-тура үҙенең армияһы командирҙарына буйһондорорға фарман бирә. *"Корпус сардары генерал Ишбулатов, бындай ҡатмарлы ваҡытта сардарҙың тәүәккәл булыуы шарт, мин үҙемде был сифатҡа эйә тип иҫәпләмәйем, ғәскәрҙең сардары итеп Вәлидовты тәғәйенләргә кәрәк, тип хөкүмәткә тәкдим индерҙе. Хөкүмәт 22 ноябрҙә ғәскәр сардары вазифаһын миңә йөкмәтте"*, – тип яҙа Вәлиди.

1919 йылдың ғинуарында генерал Ишбулатов Башҡорт ғәскәри идаралығының начальнигы урынбаҫары итеп тәғәйенләнә. Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң Башҡорт республикаһының Хәрби эштәр буйынса комиссариатында хәрби етәксе (военный руководитель – хәрби комиссарҙың ярҙамсыһы), 1-се мобилизация комиссияһы рәйесе вазифаларын башҡара. Башҡорт ғәскәрҙәренә мобилизация үткәреү эше менән шөғөлләнә.

Генералдың улы Сәйетгәрәй (1904 йылғы) 1919 йылда Стәрлетамаҡта, Башревкомдың Эске эштәр комиссариатында эшләй, икенсе улы Рөстәм (1905 йылғы) 1923 йылда Башсовнаркомдың Эштәр идаралығында (Управление делами) эшләй. Хажиәхмәт Исхаҡ улы Ишбулатов 1921 йылда, 70 йәшендә, Стәрлетамаҡ ҡалаһында донъя ҡуя.

## Сығанаҡтар:


ЦГИА РБ. Ф. 1201. Оп. 2. Д. 4. Л. 2.
ЦГАОО РБ. Ф. 9776. Оп. 2. Д. 3. Л. 96.
ЦГИА РБ. Ф. 629. Оп. 1. Д. 1371. Л. 5.
ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 150. Л. 35.
ЦГИА РБ. Ф. 933. Оп. 2. Д. 264.
А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Ч. 1. Уфа, 2005. С. 286, 271, 272.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 406, 464, 487.
Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 2. Уфа, 2003. С. 144, 150.
Вәлиди Туған Ә. Ә. Хәтирәләр. Өфө, 1996. 241, 242, 253-сө биттәр.

# МУСА СМАҠОВ
# 1885 – ?

Муса Ғәтиәтулла улы Смаҡов – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте эшмәкәрҙәренең береһе. 1885 йылда Өфө губернаһының Стәрлетамаҡ өйәҙенең (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Мәләүез районы) Смаҡ ауылында тыуған. Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең тәүге осоронда әүҙем ҡатнашҡан эшмәкәрҙәрҙең береһе.

1917 йылдың 25–29 августында Өфөлә үткән 2-се Башҡорт ҡоролтайында милли хәрәкәттең башҡарма органы – Башҡорт үҙәк шураһының яңы составына ағза итеп һайлана. 1917 йылдың 30 августынан Шураның Статистика бүлеген етәкләй, артабан Мәғариф бүлеге мөдире булып эшләй. 1917 йылдың 15 ноябрендә Башҡортостан автономияһын иғлан иткән тарихи акт – Башҡорт үҙәк шураһының 2-се һанлы фарманын әҙерләүҙә һәм уны иғлан итеүҙә ҡатнаша.

1917 йылдың 8-20 декабрендә Ырымбурҙа Каруанһарай бинаһында үткән 3-сө Бөтөн Башҡорт ойоштороу ҡоролтайында Башҡортостан автономияһының Кесе ҡоролтайына (предпарламент) һайлана.

1918 йылда Башҡорт хөкүмәтенең Арғаяш кантонындағы вәкәләтле вәкиле булып хеҙмәт итә. Бында ул урындағы власть органдарының эшмәкәрлеген яйға һалыуҙа булышлыҡ итә. Башҡортостан төп территорияһынан айырым ятҡан Арғаяш кантонында автономия идараһы эшмәкәрлеген тәьмин итеү еңелдән булмай. Башҡортостан автономияһына Себер хөкүмәте һәр яҡлап ҡаршылыҡ күрһәтә. 1918 йылдың ноябрендә Себер хөкүмәтенең Силәбе районындағы уполномоченныйы полковник Велька Башҡорт хөкүмәте вәкиле Муса Смаҡовты, уның менән бергә Арғаяш кантон башҡармаһы рәйесе Хафиз Ҡушаевты, кантондың хәрби начальнигы Мансур Мәғәсүмов һәм башҡаларҙы ҡулға алып Силәбе төрмәһенә бикләп ҡуя. Башҡорт эшмәкәрҙәрен төрмәнән сығарыуҙа булышлыҡ итеүҙе һорап, Әхмәтзәки Вәлиди Чехословак корпусы командующийы генерал Сыровойға мөрәжәғәт итә. Ул телеграммаһында былай тип яҙа: “*Челябинские русские власти относятся к башкирскому народу, Башкирскому правительству крайне вредно, они упразднили наши башкирские гражданские и войсковые учреждения, арестовали ряд уважаемых башкир и наших представителей. Прошу не отказать на в помощи. Убедительно прошу освободить арестованных наших представителей и в особенности члена Башкирского курултая Мусу Смакова...*”. Ошо телеграмманан һуң ғына, декабрь айында башҡорт вәкилдәрен төрмәнән сығаралар.

1919 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, Муса Смаковтың исем-шәрифе документтарҙа осрамай. Башревком эвокуацияға киткән саҡта, боларыш мәлдә хөкүмәттән тороп ҡалғандыр, бәлки. Башревком Саранскийҙан Стәрлетамаҡҡа ҡайтҡас, 1919

йылдың ноябрендә Муса Смаҡовты Өфө губернаһы властарынан Башҡортостан территорияһы органдары эштәрен ҡабул итеү комиссияһы рәйесе вазифаһын башҡарыусы итеп ҡуялар. Әммә ул был вазифала оҙаҡ эшләмәй.

1920 йылда Муса Смаҡов Башҡортостандың Мәғариф халыҡ комиссариаты Коллегияһы ағзаһы булып тора, йәғни мәғариф комиссариатында эшләй. 30-сы йылдарҙа "Южураллес" тресында инженер булып хеҙмәт итә.

1936 йылдың 1 сентябрендә ҡулға алып, бер аҙнанан иреккә сығаралар. Муса Смаҡовтың артабанғы яҙмышы билдәһеҙ. 30-сы йылдарҙың аҙағындағы репрессия елдәре уны ла урап үткәнгәндер, моғайын.

**Сығанаҡтар:**

А. А. Валидов – организатор автономи Башкортостана (1917–1920). Ч. 1. Уфа, 2005. С. 54, 61, 69, 87, 97, 118, 238, 340.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 1. Уфа, 2002. С. 157, 185, 216.
Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 72.
Шунда уҡ. Т. 3. Ч. 1. Уфа, 2004. С. 242.
Шунда уҡ. Т. 4. Ч. 1. Уфа, 2008. С. 319, 407.
Книга памяти жертв политических репрессий Республики Башкортостан. Т. 4. Уфа, 2003. С. 531.
Кульшарипов М. М. Башкирское национальное движение (1917-1921 гг.). Уфа, 2000. С. 110.

# ҒӘБДЕЛХӘЙ ИРКӘБАЕВ
## 1893 – 1919

Ғәбделхәй Иркәбаев – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан эшмәкәрҙәрҙең береһе. 1893 йылда Ырымбур губернаһы Силәбе өйәҙенең (хәҙерге Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы) Ҡорман ауылында тыуған. Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең әүҙем эшмәкәре, шағир, публицист. Башҡортостан автономияһы өсөн көрәш юлында ҡорбан булған шәхес. *“Ғәбделхай Иркәбай Һалйот ырыуынан, матур шиғырҙар яҙҙы”*, – тип телгә ала Зәки Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә.

Ғәбделхәй Иркәбаев 1917 йылда Башҡорт ҡоролтайҙарында ҡатнаша. 1918 йылдың 27–30 ғинуарында үткән Арғаяш кантоны съезында Хафиз Ҡушаев, Нуриәғзәм Таһиров, Ғариф Мөхәмәтйәровтар менән бергә кантон башҡарма комитетына һайлана. Үҙенең көрәштәштәре менән ул Башҡорт хөкүмәте мәнфәғәттәрен яҡлап сығыш яһай. Ошоноң һөҙөмтәһендә башҡорт эшмәкәрҙәре Силәбе большевиктары тарафынан эҙәрлекләнә.

Чехословактар күтәрелешенән һуң, 1918 июнендә, Ғәбделхай Иркәбаев Башҡорт хөкүмәте тарафынан милли ғәскәр ойоштороу эшенә йәлеп ителә. Башҡорт хәрби шураһының ағзаһы итеп һайлана. 1918 йылдың июлендә Таһир Имаҡов менән бергә Бөрйән-Түңгәүер кантонында ирекле отряд ойоштороу менән мәшғүл була. Артабан ул ошо отрядтың начальнигы ярҙамсыһы булып хеҙмәт итә. Шуның менән бер рәттән Ғ. Иркәбаев матбуғат биттәрендә яҡынлы мәҡәләләре менән сығыш яһай. “Башҡорт” гәзитендә уның шиғырҙары донъя күрә.

1919 йылдың 16 февралендә Ғәбделхәй Иркәбаев Башҡорт корпусы штабының уполномоченныйы сифатында, 1-се Башҡорт уксы полкына (үҙенең яҡташтарына) ебәрелә. Бында ул Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сығыуы тураһындағы фарманын һалдаттарға иғлан итә, сәбәптәрен аңлата. 21 февралдә Темәс ауылында I Бөтә Башҡорт хәрби съезы үтә. Иркәбаев йыйындың эшендә әүҙем ҡатнаша. Делегаттар алдында сығыш яһай. Һалдаттарҙы Башҡорт үҙәк шураһы исеменән тәбрикләй.

Артабан Ғәбделхәй Иркәбаев Башревкомдың матбуғат бүлегендә эшләй. 1919 йылдың мартында аҡтар һөжүмгә күскәс, Башревком Темәс ауылынан Мораҡҡа эвакуациялана. Шәйехзада Бабич менән Ғәбделхәй Иркәбаевҡа Башревкомдың типографияһын күсереү бурысы йөкмәтелә. Мораҡҡа китеп барышлай улар Кананикольск ауылы янында ҡыҙылдар тарафынан ҡулға алына. Иркәбаев менән Бабичты, улар менән бергә типографияны күсерешкән 10 һалдатты, ҡоралһыҙландырып, Йылайыр ауылына килтерәләр. 28 март көнө улар, Смоленск полкы һалдаттары тарафынан язалап үлтерелә.

## Сығанаҡтар:

ЦГИА РБ. Ф. 1201. Оп. 2. Д. 3. Л. 14.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 1. Ч. 2. Уфа, 2002. С. 401, 407, 411, 556, 577.
Хакимов Р. Ш. Земля Аргаяшская: история и современность. Челябинск, 2005. С. 75,
Башкирская энциклопедия. Т. 3. Уфа, 2007. С. 194.
Вәлиди Туған Ә. Ә. Хәтирәләр. Өфө, 1996. 273-сө бит.

# ЯХЪЯ САЛИХОВ
## 1893–1937

Яхъя Мөхәмәтшәриф улы Салихов – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан эшмәкәрҙәрҙең береһе. Ул 1893 йылда Ырымбур губернаһы Бызаулыҡ өйәҙенең (хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Тук районы) Ҡыҙыл Мәсет исемле башҡорт ауылында тыуған.

Бызаулыҡ ҡалаһында реаль училище тамамлай. Артабан Харьков ҡалаһында Ново-Александровский ауыл хужалығы институтында белем ала. 1916 йылдың майында уны әрмегә алып, Киев ҡалаһындағы прапорщиктар мәктәбендә ебәрәләр. Мәктәпте тамамлағас, прапорщик чины бирепп 170-се запас пехота полкына тәғәйенләйҙәр. Артабан подпоручик дәрәжәһен ала. Хеҙмәттән ҡайтҡас, Бызаулыҡ өйәҙе земствоһында агроном ярҙамсыһы булып эшләй.

1917 йылдың 20–27 июлендә Ырымбурҙа үткән 1-се Башҡорт ҡоролтайында Башҡорт үҙәк шураһының башҡарма комитетына эшкә саҡырыла. 1917 йылдың октябрендә Башҡорт үҙәк шураһы Яхъя Салихов менән Харис Йомағоловтың кандидатураларын Һамар губернаһы башҡорттары исеменән Ойоштороу йыйылышына (Учредительное Собрание) депутатлыҡҡа ҡуя.

1918 йылдың йәйендә Яхъя Салихов Башҡорт хөкүмәтенең Урман бүлеген етәкләй. Был осорҙа яңынан тергеҙелгән Башҡорт хөкүмәте, илдә граждандар һуғышы барыуға ҡарамаҫтан, ең һыҙғанып автономияны тормошҡа ашырыу эшенә тотона. Я. Салихов Башҡортостандың урман байлығын һаҡлау, уны ҡулланыуҙы тәртипкә һалыу эше менән мәшғүл була. 1918 йылдың 27 авгусында хөкүмәттең Урман бүлеге мөдиренең Учалы урмансылығы етәксеһенә биргән бойороғонда асыҡ сағыла. *"Ввиду беспощадного истребления лесных богатств и порубки на участке учалинского лесничества, сим дается заведующему Учалинским лесничеством, как временное мероприятие, впредь до издания общего положения о лесах Башкурдистана, право найма лесной стражи для приведения в полный порядок находящихся в его ведении лесной участок..."*, – тиелә Яхъя Салиховтың бойороғонда.

1918 йылдың 27 сентябрендә ул хөкүмәттең Агрономия бүлеге мөдире итеп тәғәйенләнә. Хәҙер инде Яхъя Мөхәмәтшәриф улына тағы ла яуаплыраҡ, ҡатмарлыраҡ ер мәсьәләһе менән эш итергә тура. Башҡортостан автономияһы ерҙәрен ҡулланыуҙы яйға һалыу, тәртиптәрен, хоҡуҡи нормаларын эшләү менән мәшғүл була. Башҡорт хөкүмәтенең 1918 йылдың 25 ноябрендә сыҡҡан "О праве и порядке пользования землей на 1918–1919 гг. на территории Малой Башкирии", тип исемләнгән 1-се һанлы мотлаҡ ҡарарында (обязательное постановление) хөкүмәт рәйесе Юныс Бикбов менән Яхъя Салиховтың да ҡул тамғаһы тора.

1919 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре советтар яғына сыҡҡандан һуң, Яхъя Салихов Башревкомға ағзалыҡҡа кандидат итеп һайлана. Артабан ул Көнсығыш фронттың 1-се армияһы штабында Башревком

вәкиле булып хеҙмәт итә. 1919 йылдың июнендә Саранск ҡалаһында Башҡорт республикаһының финанс халыҡ комиссары итеп тәғәйенләнә, бер үк ваҡытта, июль уртаһына тиклем, Мәскәүгә Бөтә Рәсәй Совнархоз съезына киткән Г. Ҡарамышевтың урынына Башсовнархоз рәйесе бурысын үтәй. Артабан ваҡытлыса Башревкомдың социаль тәьминәт бүлеге мөдире вазифаһын башҡара.

1919 йылдың авгусында Башревком аҡтарҙан азат ителгән Башҡортостан территорияһына ҡайта. 14 сентябрҙә Яхъя Салихов ер эштәре халыҡ комиссары итеп тәғәйенләнә. 1920 йылдың 19 майында Мәскәү үҙенең декреты менән Башҡорт республикаһының автономия хоҡуҡтарын бөтөнләй тиерлек юҡҡа сығара.

16 июндә Башревком ағзалары, Үҙәктең декретына ризаһыҙлыҡ белдереп, эштән китергә ҡарар итә. Бынан бер аҙна элек, 9 июндә Я. Салихов, Петровский ауыл хужалығы академияһындағы тамамланмай ҡалған уҡыуын дауам итеү өсөн ебәреүҙәрен һорап, ғариза менән Башревком Президиумына мөрәжәғәт итә. Ләкин уға академияла уҡырға насип булмаған, күрәһең. 1925 йылда тултырған анкетаһында был хаҡта бер ниндәй ҙә мәғлүмәт бирмәй.

20-се йылдар башында Яхъя Салихов БАССР-ҙың ер эштәре халыҡ комиссариатында ауыл хужалығы идаралығы начальнигы булып эшләй. 1924 йылдың 20 октябрендә, анкетаһында яҙыуынса, ғаилә хәлдәре арҡаһында (“по семейным обстоятельствам”) Махачҡала ҡалаһына сығып китә. Бында ул Дағстан ер эштәре халыҡ комиссариаты коллегияһы ағзаһы булып эшләй. Киләһе йылына, 1925 йылдың апрелендә, БашЦИК Салиховты БАССР Госпланына эшкә саҡыртып ала. Бында ул Госпландың Ауыл һәм урман хужалыҡтары секцияһы етәкләй. 1926 йылдың мартында Башсельхозкредит идараһына эшкә күсә, бер үк ваҡытта Госпланда ла элекке вазифаһын башҡара.

Әммә артабан, күп кенә Башҡорт милли хәрәкәте эшкәмәрҙәре кеүек үк Яхъя Салихов та Мәскәүгә китә. 30-сы йылдарҙа ул Ленинградтың Степан Разин исемендәге һыра заводында һоло сифаты буйынса күҙәтеүсе инспектор булып эшләй.

1937 йылдың 14 авгусында Яхъя Салихов ҡулға алалар. Уны шпионаж һәм контрреволюцион ойошмаларҙа ҡатнашыуҙа ғәйепләп, үлем язаһына хөкөм итәләр. 27 октябрҙә суд ҡарары ғәләмгә атҡарыла.

Яхъя Мөхәмәтшәриф улы Салиховтың исеме 1991 йылда ғына аҡлана.

## Сығанаҡтар:


ЦГИА РБ. Ф. 933. Оп. 2. Д. 356. Личное дело Салихова Я. Ш.
ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 155. Л. 3.
ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 127. Л. 73.
ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 25. Л. 70.
А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Ч. 1. Уфа, 2005. С. 53, 151, 226, 240.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 1. Уфа, 2002. С. 142, 179.
Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 283, 579.
Шунда уҡ. Т. 4. Ч. 1. Уфа, 2008. С. 248, 392.
Книга памяти жертв политических репрессий Республики Башкортостан. Т. 4. Уфа, 2003. С. 417–418.

# ҒӘЛИӘХМӘТ АЙЫТБАЕВ

Ғәлиәхмәт Айытбаев – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең тәүге осоронда әүҙем ҡатнашҡан эшмәкәрҙәрҙең береһе. 1917 йылдың 20–27 июлендә Ырымбурҙа үткән 1-се Башҡорт ҡоролтайында Башҡорт үҙәк шураһына ағза итеп һайлана. Уға Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәктенең башҡарма органында үтә лә яуаплы һәм мөһим эш йөкмәтелә – Башҡорт үҙәк шураһының Ер һәм урман эштәре буйынса бүлек мөдире итеп тәғәйенләнә. Был осорҙа ул башҡорттоң ер мәсьәләләрен хәл итеүгә йүнәлтелгән проект, положениелар өҫтөндә әүҙем эшләй.

1917 йылдың ноябрендә Г. Айытбаев тарафынан башҡорт улыстарында ер эштәре буйынса бүлектәр ойоштороу һәм уларҙың эшмәкәрлеге тураһында положение эшләнә.

8–21 декабрҙә, Каруанһарайҙа үткән 3-сө Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайында Ғәлиәхмәт Айытбаев башҡорттоң ер мәсьәләһе буйынса ҙур доклад менән сығыш яһай. Ошо доклад нигеҙендә оло йыйын ер буйынса резолюция ҡабул итә. Унда башҡорт ерҙәрен файҙаланыу хоҡуҡтары, ҡуртым (аренда), Башҡортостан территорияһына күсенеп килеүселәр, Башҡортостандың ер һәм мөлкәте менән идара итеү һ. б. мәсьәләләр яҡтыртыла. Күскенселәр мәсьәләһе буйынса ҡоролтайҙың ҡарарында былай тиелә:

“*16. Правом поселения на Башкирской территории пользуются только башкиры и другие мусульмане тюркского племени, оставшиеся вне пределов автономной Башкирии.*

*19. Все переселенцы, заселившие Башкирию после 20 апреля 1898 года путем принудительного отчуждения им земли, как результат хищнических законоположений и распоряжений царского правительства, должны обмениваться землями с теми из башкир и мусульман, которые остались вне пределах Башкирии и которые пожелают поселиться в ней.*

*20. Первыми обмену подвергаются переселенцы, поселившиеся в Башкирии по законам 9 ноября 1906 г., 14 июня 1910 г., 29 мая 1911 года.*

*21. Земли находящиеся в пользовании переселенцев, насильственно захвативших наделы башкир, пользуюясь покровительством старого правительства, передаются прежним владельцам – башкирам*”.

Ойоштороу йыйынында Башҡортостан автономияһының 22 кешенән торған закондар сығарыу органы – Кесе ҡоролтайы (предпарламент) ойоштороla. Милли хәрәкәттең лидерҙары Зәки Вәлиди, Шәриф Манатов, Сәғит Мерәҫов, Аллабирҙе Йәғәфәровтар менән бергә Ғәлиәхмәт Айытбаев та Кесе ҡоролтай ағзаһы итеп һайлана, Башҡорт хөкүмәте составына инә. “*Айытбаев хөкүмәттең ауыл хужалығы булеге мөдире, итеп тәғәйенләнде*”, – тип яҙа З. Вәлиди.

1918 йылдың 4 февралендә Башҡорт хөкүмәте ағзалары, шул иҫәптән Ғ. Айытбаев та, большевиктар тарафынан ҡулға алынып, төрмәгә ябыла. Әммә уны

оҙаҡ тотмайҙар. Төрмәнән сығыу менән Айытбаевты, совет платформаһындағы Башҡортостан автономияһы яҡлы башҡорт большевиктары үҙҙәренә эшкә йәлеп итә. Башҡортостандың Ваҡытлы Революцион Советына (БВРС) ағза итеп алалар. Бында уға оҙаҡ эшләргә тура килмәй. 1918 йылдың 30 мартында Ырымбур мосолман комитеты тарафынан БВРС таратыла. Башҡортостанға автономия яулау идеяһы бының менән генә һүрелеп ҡалмай. Башҡорт эшмәкәрҙәре Милләттәр эштәре буйынса комиссариатҡа (Наркомнац) ҙур өмөт бағлай.

Апрелдә Айытбаев Мәскәүҙә Наркомнац янындағы Үҙәк мосолман комиссариатына эшкә алына. Был осорҙа комиссариатта башҡорт эшмәкәрҙәренән Шәриф Манатов, Хәбибулла Ғәбитовтар эшләй. Ғ. Айытбаевты комитетың ер эштәре һәм сәнәғәт бүлеге мөдире вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләйҙәр. Бер үк ваҡытта комиссариаттың башҡорт эштәре буйынса комиссары вазифаһын башҡара. Әҙерәк Мәскәүҙә эшләгәндән һуң, ул комиссариаттың урындағы органдарының эшен юлға һалыу өсөн Башҡортостанға ҡайта.

1918 йылдың йәйендә Башҡорт хөкүмәте тергеҙелгәс, Айытбаев ҡабат Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушыла. Зәки Вәлиди уны бәйләнештәр ойоштороу өсөн Төркиәгә ебәрергә уйлай. Әммә унының сит илдә йөрөп ҡайтҡанлығы тураһында мәғлүмәттәр юҡ.

1919 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, Ғәлиәхмәт Айытбаев Башҡортостандың ваҡытлы революцион хөкүмәте – Башревкомға ағзалыҡҡа кандидат итеп һайлана. 23 февралдә Автономиялы Башҡорт Совет республикаһының ер эштәре халыҡ комиссары итеп һайлана. 1920 йылда ул Тамъян-Ҡатай кантонының ғәҙәттәш тыш комиссияһы (КантЧК) рәйесе булып эшләй. Ғәлиәхмәт Айытбаевтың артабанғы яҙмышы билдәһеҙ.

## Сығанаҡтар:


А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Ч. 1. Уфа, 2005. С. 69, 77, 87, 95, 115–117.

Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 1. Уфа, 2002. С. 185, 189, 216, 237, 402, 420.

Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 535, 579.

Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 2. Уфа, 2003. С. 429.

Шунда уҡ. Т. 4. Ч. 1. Уфа, 2008. С. 563–565.

Вәлиди Туған Ә. Ә. Хәтирәләр. Өфө, 1996. 205-се бит.

## ЙЫҺАНГӘРӘЙ ӘМИРОВ

Йыһангәрәй Ғилман улы Әмиров – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең тәүге осоронда әүҙем ҡатнашҡан эшмәкәрҙәрҙең береһе. Сығышы менән Пермь губернаһынан булырға тейеш.

Й. Әмиров 1917 йылдың 20–27 июлендә Ырымбурҙа үткән 1-се Башҡорт ҡоролтайында Башҡорт үҙәк шураһының башҡарма комитетына эшкә саҡырыла. Үҙәк шураның иҡтисад бүлеген етәкләй. 1917 йылдың 15 ноябрендә Башҡортостан автономияһын иғлан иткән тарихи акт – Башҡорт үҙәк шураһының 2-се Фарманын әҙерләүҙә һәм уны иғлан итеүҙә ҡатнаша.

1917 йылдың 8-20 декабрендә Ырымбурҙа Каруанһарай бинаһында үткән 3-сө Бөтөн Башҡорт ойоштороу ҡоролтайында Башҡортостан автономияһының Кесе ҡоролтайына (предпарламент) һайлана.

1918 йылдың ғинуарында Йыһангәрәй Әмиров Пермь башҡорттарынан вәкил булараҡ Өфөлә төрки-татарҙарҙың Милли мәжлесе съезында ҡатнаша. Бында Башҡорт үҙәк шураһы ағзалары Милли мәжлес вәкилдәре менән һөйләшеүҙәр алып бара. Й. Әмиров башҡорт делегацияһы составында съезда Башҡортостан автономияһы мәнфәғәттәрен алға һөрә.

1918 йылдың йәйендә Башҡорт хөкүмәтенең Финанс бүлеге мөдире урынбаҫары булып эшләй. Артабан хөкүмәттең махсус йомоштар үтәүсе чиновнигы (чиновник особых поручений) булып хеҙмәт итә.

Й. Әмировтың исеме артабан 1919–1920 йылғы Башҡортостандың дәүләт органдары – Башревком, Башҡорт хәрби комиссариаты документтарында осрамай.

1927 йылда Йыһангәрәй Әмиров Башҡортостандың Мәскәүҙәге сауҙа вәкиллегендә эшләй. 1927 йылдың майында Башҡортостандың Халыҡ Комиссарҙары Советы рәйесе Әҡсән Мөхәмәтҡоловтың тәҡдиме буйынса, Й. Әмиров БАССР-ҙың Госпланына эшкә күсерелә. Артабанғы яҙмышы билдәһеҙ.

### Сығанаҡтар:

ЦГИА РБ. Ф. 629. Оп. 1. Д. 1279. Личное дело Амирова Дж. Г.

А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Ч. 1. Уфа, 2005. С. 61, 69, 87, 95, 181, 236.

Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 1. Уфа, 2002. С. 189, 216.

# ҒӘЛИӘХМӘТ ХӘСӘНОВ
## 1894 – ?

Ғәлиәхмәт Вәлимөхәмәт улы Хәсәнов – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең тәүге осоронда үәҙем ҡатнашҡан эшмәкәрҙәрҙең береһе. 1894 йылда Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙе Бошман–Һыуын-Ҡараҡыпсаҡ улысының (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Күгәрсен районы) Теләүембәт ауылында тыуған.

11 йәшендә етем ҡалып, атаһының бер туған ҡустыһы ҡулында тәрбиәләнә. Аҙаҡ ауыдағы рус-башҡорт мәктәбе янындағы етемдәр пансионына барып урынлаша. Ауылда өс йыл уҡығандан һуң, Теләүембәттән йыраҡ түгел Сәйетҡол ауылындағы 2 класлы Рус-башҡорт училищеһына уҡырға инә. Бында, өс йыл эсендә столяр һөнәрен үҙләштереп, бер аҙ аҡса эшләп алып, 1911 йылда Пермь губернаһының Красноуфимск ҡалаһына сығып китә. Бында ул Красноуфимск Рус-башҡорт ауыл хужалығы училищеһына уҡырға керә. "Башҡорт степендияһы"на уҡый. Училищела Ғәлиәхмәт Хәсәнов столяр, тимерсе-слесарь һөнәрҙәрен үҙләштерә, һабын ҡайнатыусы һәм май етештереүсе заводтарҙа эшләй.

1915 йылда ауыл хужалығы училищеһын тамамлап, практикант сифатында помещик Шоттың имениеһында эшләй. Артабан Ырымбур губернаһы земствоһына эшкә төшөп, 1917 йылдың йәйенә тиклем Ырымбур өйәҙенең Покровский агрономия участкаһында агроном ярҙамсыһы булып йөрөй.

1917 йылдың йәйендә Ғәлиәхмәт Хәсәнов Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәктенә ҡушылып китә. "*После Февральской революции 1917 года добровольно покинул земство, как сын веками угнетенного царизмом башкирской бедноты для выяления интересов этой бедноты и оформление ее требований вошел в среду башкирских работников (коих было тогда несколько человек) Башкирское областное Бюро и работал не получая за свои труды никаких вознаграждений*", – тип яҙа ул үҙенең автобиографияһында.

1917 йылдың июлендә Ырымбурҙа үткән I Башҡорт ҡоролтайында ҡатнаша. Август айында Өфө лә үткән II Башҡорт ҡоролтайында ул Башҡорт үҙәк шураһы башҡарма комитетына ағза итеп һайлана. Ғәлиәхмәт Хәсәнов Үҙәк шураның Статистика эштәре буйынса бүлеген етәкләй. "*Цель Областного Бюро было объединение башкирских масс раскинутых в пяти губерниях Российской империи. Участвуя в этой работе, я собрал всякого рода статистические материалы по Оренбургской, Самарской, Уфимской, Пермской и Вятской губерний, касающихся башкирского населения, землепользования, скотоводства и т.д. и конечном результате по этим данным был составлен проект карты Башкирии с разделением на 13 кантонов*", – тип яҙа Ғ. Хәсәнов.

Ғәлиәхмәт Хәсәнов Башҡорт үҙәк шураһы булараҡ 1917 йылдың көҙөндә милли-азатлыҡ хәрәкәтенең мөһим документтарын әҙерләүҙә ҡатнаша. 1917

йылдың 15 ноябрендә Үҙәк шура тарафынан ҡабул ителгән тарихи акт – Башҡортостан автономияһын иғлан итеү тураһындағы 2-се Фарманда уның да ҡул тамғаһы бар.

1917 йылдың 8-20 декабрендә, Ырымбурҙа үткән III Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайында ҡатнаша. Ҡоролтайҙан һуң, Ғәлиәхмәт Хәсәнов Башҡорт үҙәк шураһының финанс бүлеген мөдире булып эшләй. 1918 йылдың февралендә Ырымбурҙағы Башҡорт хөкүмәте һәм Башҡорт үҙәк шураһы ағзалары большевиктар (дөрөҫөрәге, Башҡорт автономияһын күрә алмаған Ырымбур мосолман хәрби комитеты) тарафынан ҡулға алынып төрмәгә ябыла. Ғ. Хәсәнов большевиктар ҡулынан ысҡынып өлгөргән, булһа кәрәк. Документтарҙан күренеүенсә, төрмәгә ябылған башҡорт эшмәкәрҙәре араһында уның исеме телгә алынмай.

1918 йылда июнендә Силәбе ҡалаһында Башҡорт хөкүмәте янынан тергеҙелә. Июль айында Сәғит Мерәҫов, Ырымбурға килеп, Башҡорт хөкүмәтенең урындағы хәрби бүлеген ойоштора. Оҙаҡламай Ғәлиәхмәт Хәсәнов та ошо бүлектең эшенә ҡушылып китә. Хәрби бүлек ағзаһы булараҡ ул С. Мерәҫов, Ә. Бейешев, У. Ҡыуатов, Х. Ғәбитовтар берлектә халыҡты Башҡорт армияһына мобилизациялау эшендә ҡатнаша. Артбанғы айҙарҙа Ғәлиәхмәт Хәсәнов Илдархан Мутин урынына Башҡорт хөкүмәтендә финанс бүлеге мөдире вазифаһын башҡара.

Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, Башревкомда эшләй. Ғәлиәхмәт Хәсәнов Башҡортостандың аҙыҡ-түлек халыҡ комиссары итеп тәғәйенләнә. Артабан ул, Башревкомдың юлланмаһы буйынса, Мәскәүҙә Я. М. Свердлов исемендәге Коммнистик университетына уҡып ҡайта.

1920 йылдың майынан Ғ. Хәсәнов Башҡортостандың ер эштәре халыҡ комиссариаты (Наркомзем) Коллегияһы ағзаһы булып эшләй. Һуңынан Ер эштәре буйынса халыҡ комиссары итеп тәғәйенләнә. 1920 йылдың июлендә Советтарҙың I Бөтә Башҡортостан съезында – республиканың яңы идара органы – Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитеты (БашЦИК) ағзаһы итеп һайлана. Артабан Ғ. Хәсәнов республиканың ер эштәре халыҡ комиссары урынбаҫары вазифаһын башҡара.

30-сы йылдар аҙағында Ғәлиәхмәт Вәлимөхәмәт улы “Башкоопмолпром” предприятиеһында директор урынбаҫары булып эшләй. 1937 йылдың 15 декабрендә ҡулға алынып, биш йылға иркенән мәхрүм ителә. Артабанғы яҙмышы билдәһеҙ. 1957 йылдың 10 июнендә реабилитацияланған.

**Сығанаҡтар:**

ЦГИА РБ. Ф. 394. Оп. 9. Д. 17. Л. 5–6.
ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д.107а. Л. 82.
ЦГИА РБ. Ф. 629. Оп. 1. Д. 1306. Л. 104.
А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Ч. 1. Уфа, 2005. С. 54, 61, 69, 236.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 416, 421.
Шунда ук. Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 523.
Книга памяти жертв политических репрессий Республики Башкортостан. Т. 5. Уфа, 2005. С. 284.

# ҒАБДРАХМАН ФӘХРЕТДИНОВ
# 1887–1936

Ғабдрахман Ризаитдин улы Фәхретдинов – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте эшмәкәрҙәренең береһе, “Башҡорт хөкүмәтенең теле” гәзите мөхәррире, күренекле башҡорт ғалимы, мәғрифәтсеһе, дин эшмәкәре, энциклопедист Ризаитдин Фәхретдиновтың (1859–1936) улы. 1887 йылдың 15 ғинуарында Һамар губернаһы Бөгөлмә өйәҙенең (хәҙерге Татарстан Республикаһының Бөгөлмә районы) Кисеүсат ауылында тыуған.

1891 йылда Ғ. Фәхретдиновтың атаһы Өфөгә күсеп килә һәм Диниә назаратында ҡазый булып хеҙмәт итә. 1906 йылда Ырымбур ҡалаһына күсә “Ваҡыт” гәзите мөхәррире ярҙамсыһы, унан “Шура” журналында эшләй.

Ғабдрахман Өфө һәм Ырымбур ҡалаларында белем ала. Атаһы менән бергә “Ваҡыт” гәзите, “Шура” журналы редакцияларында эшләй. 1916 йылда Беренсе донъя һуғышына мобилизацияланып, Румын фронтында баш мулла булып хеҙмәт итә.

1917 йылдың декабрендә III Дөйөм Башҡорт ойошторοу ҡоролтайында ҡатнаша. Йыйын мәлендә ҡоролтай рәйесе Зәки Вәлидиҙең ярҙамсыһы була. Атаһы Ризаитдин Фәхретдинов менән бергә Башҡортостан автономияһының юғары закондар сығарыу органы – Кесе ҡоролтай (предпарламент) составына һайлана.

Башҡорт хөкүмәте ҡулға алынғандан һуң, 1918 йылдың мартынан, Ғ. Фәхретдинов Ырымбур губкомы янындағы Мосолман эштәре буйынса комиссариатта эшләй. Бында ул матбуғат эштәре буйынса бүлекте етәкләй. 1918 йылдың июлендә, Ырымбур Дутовтың ҡулына күскәс, Стәрлетамаҡҡа ҡаса.

1918 йылдың авгусында Башҡорт хөкүмәте Ырымбурға ҡайтҡас, хөкүмәттең мәғлүмәт бүлеге мөдире итеп эшкә алына. Башҡорт хөкүмәтенең Ырымбур хәрби бүлеге сығарған “Башҡорт тауышы” гәзите урынына “Башҡортостан хөкүмәтенең теле” (“Вестник Правительства Башкирии”) гәзите сығарыла башлай. Хөкүмәт баҫмаһын сығарыу эше Ғабдрахман Фәхретдиновҡа йөкмәтелә. Гәзиттә Башҡорт хөкүмәтенең фармандары, төрлө мәҡәләләр баҫыла.

1918 йылдың декабрендә, Дутов менән мөнәсәбәте тамам боҙолоп, Башҡорт хөкүмәте Ырымбурҙан күсенергә мәжбүр була. Артабанғы документтарҙа Ғабдрахман Фәхретдиновтың исеме осрамай. Ул Ырымбурҙа ҡалған булһа кәрәк. Ул икенсе тапҡыр, Башҡорт хөкүмәтенә, дөрөҫөрәге Башревкомға эшкә 1919 йылдың сентябрендә алына.

1919 йылдың 24 сентябрендә Ғ. Фәхретдинов Башҡорт Совет Республикаһының Социаль тәьминәт халыҡ комиссариаты коллегияһы ағзаһы итеп тәғәйенләнә. Сентябрь-октябрь айҙарында Өфө губернаһы ҡарамағынан башҡорт улыстарын автономияға ҡабат ҡайтарыу буйынса комссия составында

эшләй. Бер үк ваҡытта Илдархан Мутин урынына республиканың социаль тәьминәт халыҡ комиссары вазифаһын да башҡара. 1920 йылдың апреленән Башҡортостандың Дәүләт нәшриәте коллегияһы ағзаһы, артабан нәшриәт мөдире урынбаҫары булып эшләй. 1923–1924 йылдарҙа БАССР хөкүмәтендә (Башсовнарком) тәржемәсе булып эшләй. Хөкүмәт ҡарарҙары, бойороҡтарын башҡортсаға тәржемә итеү эше менән шөғөлләнә.

20-се йылдар башында Ғ. Фәхретдинов башҡорт халҡының тарихын өйрәнә, материалдар туплау. Ошо эштең һөҙөмтәһе булып, 1925 йылда уның "Башҡорт тарихы" тигән китабы донъя күрә. Унда ул хеҙмәтендә боронғо дәүерҙәрҙән алып хәҙерге көндәргә, йәғни Автономиялы Башҡорт Совет Республикаһы барлыҡҡа килгән ваҡытҡа тиклем башҡорт халҡының тарихына байҡау яһай. *"Ғабдрахман Фәхретдиновтың "Башҡорт тарихы" иһә йәш республиканың рәсми рәүештә үҙ тарихына ғәзел бер ҡараш ташлауға ынтылышы өлгөһө булып тора"*, – тип яҙа милли матбуғат тарихын өйрәнеүсе Р. Рәжәпов.

Атаһы, Үҙәк диниә назараты мөфтөйө Ризаитдин Фәхретдиновтың вафатынан һуң, 1936 йылдың июлендә НКВД органдары Ғабдрахман Фәхретдиновты ҡулға ала. Уны атаһының контрреволюционерҙар менән бәйленешен йәшереүҙә ғәйепләйҙәр. Ярты йыл тирәһе Өфө төрмәһендә ултыра. 1936 йылдың аҙағында шунда вафат була.

## Сығанаҡтар:


ЦГИА РБ. Ф. 933. Оп. 2. Д. 285. Личное дело Фахретдинова А. Р.
ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 16. Л. 1.
А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Ч. 1. Уфа, 2005. С. 85, 97.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 1. Уфа, 2002. С. 441, 414.
Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 42, 266, 267.
Шунда уҡ. Т. 3. Ч. 1. Уфа, 2004. С. 125, 139, 173, 501, 505, 526.
Шунда уҡ. Т. 3. Ч. 2. Уфа, 2006. С. 34.
Шунда уҡ. Т. 4. Ч. 1. Уфа, 2008. С. 409, 459.
Книга памяти жертв политических репрессий Республики Башкортостан. Т. 5. Уфа, 2005. С. 178.
Мөнир Һаҙыев, Ғабдрахман Фәхретдинов. Башҡорт тарихы. Өфө, 1999. 3, 52–130-сы биттәр.
Юнусова А. Б. Ислам в Башкортостане. Уфа, 1999. С. 176–180,



## ХӘСӘН ӘХМӘРОВ
**1866 – ?**

Хәсән Нурый улы Әхмәров – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан, революцияға тиклем батша армияһында полковник дәрәжәһенә күтәрелгән башҡорт офицеры. Ул 1866 йылда Ырымбур ҡалаһында тыуған.

Ҡалалағы Неплюев кадет корпусын (әйткәндәй бында башҡорттоң күп кенә данлы улдары белем алып сыҡҡан) һәм хәрби училище тамамлай. Революцияға тиклем 49-сы Себер уҡсы бригадаһында полк командиры булып хеҙмәт итә. Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә 1918 йылдың йәйендә ҡушыла.

Башҡорт хөкүмәте уны үҙенең уполномоченныйы итеп Үсәргән кантонына ебәрә. 1919 йылда Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, Һамар ҡалаһында урынлашҡан Көнсығыш фронттың Көньяҡ төркөмө штабындағы Башревком вәкиле Муллян Халиҡовтың хәрби эштәр буйынса ярҙамсыһы итеп тәғәйенләнә. Бында ул башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороу һәм тәьмин итеү эштәре менән шөғөлләнә. Артабан Хәсән Әхмәров Башҡортостан хәрби эштәр комиссариатына тәьминәт бүлеге начальнигы ярҙамсыһы сифатында Саранск ҡалаһына күсерелә.

1919 йылдың йәйендә Башҡортостандың көнбайыш өлөшө аҡтарҙан азат ителгәс, Бәләбәй ҡалаһында Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһын ойоштороу эше башлана. Әхмәтзәки Вәлиди бригаданы ойоштороуҙы тәжрибәле полковник Әхмәровҡа йөкмәтә. *“Полковник Әхмәров 5 июндә Бәләбәйгә килгәс тә, хәрби хеҙмәткә саҡырыу иғлан итеп, 3-сө һәм 4-се йәйәүле һәм 3-сө һыбайлы полктар ойоштора башлаған. Фрунзе ҡорал һәм башҡа кәрәк-яраҡтарҙы мул биргәйне...”*, – тип яҙа Зәки Вәлиди “Башҡорттар тарихы” китабында.

1919 йылдың авгусына полковник Әхмәровтың тырышлығы менән Бәләбәйҙә өс полктан торған Башҡорт уҡсы бригадаһы һәм Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһының 3-сө полкы ойошторола. 17 августа Хәсән Әхмәров Хәрби эштәр буйынса комиссариаттың фарманы менән Башҡорт уҡсы бригадаһына командир итеп тәғәйенләнә.

1919 йылдың сентябрендә, Петроград фронтында Ҡыҙыл Армияның хәле хөртәйеү сәбәпле, Реввоенсовет рәйесе Троцкий Зәки Вәлидигә башҡорт ғәскәрҙәрен Петроградҡа ебәрергә бойора: *"Троцкий Бәләбәй ойошторолған 3-сө һәм 4-се йәйәүле, 3-сө һыбайлы полктарҙы Петроградҡа һөжүм итеүсе генерал Юденичҡа ҡаршы ебәреүҙе талап итә. Мин ул ғәскәрҙе өйрәтеү, кәрәк-ярак менән тәьмин итеү эштәренең әле тамамланмауын әйтеп, полковник Әхмәровҡа хәҙергә ике батальонды бер-ике аҙна эсендә әҙерләргә әмер бирергә иттем. Бәләбәйҙәге полковникты телеграфҡа саҡыртып, хәлде аңлаттым. Ул хәҙергә хатта ике батальондың да әҙер түгеллеген белдерҙе. Мин быны иртәнсәк Троцкийға еткерҙем. Был иһә башҡорт ғәскәренең Юденичҡа ҡаршы һуғышҡа ҡатнашыуының башланғысы ине"*, – тип яҙа Вәлиди.

Тулыһынса ойошторолоп бөтмәүгә ҡарамаҫтан, Ленин менән Троцкийҙың бойороғона буйһоноп, 1919 йылдың 15 сентябрендә Башҡортостандың Хәрби эштәр буйынса комиссариаты башҡорт ғәскәрҙәрен Петроградҡа ебәреү тураһында фарман сығара. Унда былай тиелә: "*§. 2. Командиру Отдельной Башкирской Стрелковой Советской бригады тов. Ахмерову развернуть в Петрограде 1-й и 2-й Башкирские Стрелковые Советские полки, использовав для этой цели прибывающие пополнения из Запасного Стрелкового Башполка и изъяв из Сводного Башкирского полка всех служивщих в 1-м и 2-м Башкирских Стрелковых Советских полках.*

*§. 4. Прибывающему в Петроград 3-му Башкирскому Стрелковому Советскому полку совместно с развертываемыми 1-м и 2-м Башкирскими Стрелковыми Советскими полками составить Отдельную Башкирскую Стрелковую Советскую бригаду*".

Шулай итеп, полковник Әхмәров 1919 йылдың сентябрендә Петроградҡа килеп, Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы полктарын артабан ойоштороу эше менән мәшғүл була. Һөҙөмтәлә 1919 йылдың октябрь аҙағында: *"Айырым Башҡорт уҡсы бриагадһының (командиры Әхмәров иптәш): 1-се полкы – 36 комсоставтан, 1650 штыктан, 3 пулеметтан; 2-се полкы – 47 комсоставтан, 2160 штыктан, 2 пулеметтан; 3-сө полкы 25 комсоставтан, 950 штыктан, 7 пулеметтан тора ине"*, – тип яҙа үҙенең китабында Муса Мортазин.

1919 йылдың октябрендә Юденичҡа ҡаршы һуғышҡа Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһынан 3-сө полк ебәрелә. Ул Айырым башҡорт кавалерия дивизияһынан 3-сө кавалерия полкы һәм дә Айырым Башҡорт артиллерия дивизионы менән Петроград фронтының Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмөн тәшкил итә.

Юденич армияһы ҡыйратылғас, 1920 йылдың февралендә Хәсән Әхмәров Башҡорт уҡсы бригадаһын Хәлил Әлишевҡа тапшырып, Башҡортостанға ҡайта. Бында уға Зәки Вәлиди тағы ла яуаплы вазифа йөкмәтә. Уны Башҡорт республикаһының запас ғәскәрҙәре идаралығы начальнигы итеп тәғәйенләй. Полковник Әхмәровтың командалығында Башҡорт запас уҡсы полкы, Айырым Башҡорт уҡсы батальоны, Айырым Башҡорт запас кавалерия дивизионы,

Айырым Башҡорт эскадроны, Айырым Башҡорт еңел батареяһы һәм башҡа частар, йәмғеһе 10 мең кешелек ғәскәр була. Уларҙы төрлө-кәрәк яраҡтар менән тәьмин итеү, өйрәтеп, әҙерләп һуғышҡа оҙатыу эштәре менән булыша.

1920 йылдың октябрендә республиканың запас ғәскәрҙәренең байтағы көнбайыш фронтҡа оҙатыла, идаралыҡ бөтөрөлә. Полковник Хәсән Нурый улы Әхмәровтың артабанғы яҙмышы билдәһеҙ.

**Сығанаҡтар:**


ЦГИА РБ. Ф. 3168. Оп. 1. Д. 9. Л. 4.

ЦГИА РБ. Ф. 3168. Оп. 1. Д. 6.

ЦГИА РБ. Ф. 629. Оп. 1. Д. 1371. Л. 2.

А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Ч. 1. Уфа, 2005. С. 238.

Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 2. Ч. 2. Уфа, 2003. С. 173, 237.

Вәлиди Туған Ә. Ә. Хәтирәләр. Өфө, 1996. 243, 288-се биттәр

Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Башҡорт тарихы. Анкара, 2003. 404-се бит.

Мортазин М. Л. Әҫәрҙәр. Өфө, 1994. 141-се бит.

# ҒАБДУЛЛА ИҘЕЛБАЕВ
## 1893 – 1918

Ғабдулла Сәфәрғәли улы Иҙелбаев – Башҡортостан автономияһының тәүге ғәскәренә етәкселек иткән башҡорт офицерҙарының береһе, ҡаһарман сардар. 1893 йылда Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙенең Бошман-Һыуын-Ҡараҡыпсаҡ улысы (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Күгәрсен районы) Теләүембәт ауылында тыуған.

Ҡаҙан мәҙрәсәһендә, артабан Ырымбур ҡалаһында 1-се ирҙәр гимназияһында белем ала. 1914 йылда Ҡаҙан университетының медицина факультетына уҡырға инә. Икенсе йылына, хоҡуҡ һөнәрен үҙ итеп, университеттың юридик факультетына күсә.

Ғ. Иҙелбаев гимназия йылдарында уҡ халҡының тормошон яҡшыртыу, уның киләсәге тураһында уйҙар менән янып йөрөй. *“Еще будучи в гимназии, Идельбаев любил выступать в качестве оратора. И жилка красноречия в нем проснулась, когда он впервые услыхал лекции на юридическом факультете. Он решил посвятить себя той науки, которая, по его мнению, вырвет родной народ из жадных рук всякого рода предпринимателей”*, – тип яҙа уның һабаҡташы.

Ләкин университетты тамамларға насип булмай. Уны хәрби хеҙмәткә саҡырылар. Прапорщик званиеһы биреп, Көньяҡ-көнсығыш фронтҡа ебәрәләр. Бында Иҙелбаев поручик дәрәжәһенә тиклем үрләй. 1917 йылдың йәйенән поручик Иҙелбаев Симферополь ҡалаһында хеҙмәт итә. Был осорҙа Башҡортостанда автономия өсөн милли хәрәкәт көсәйгәндән-көсәйә бара. Әйткәндәй, милли хәрәкәттең тәүге осоронда Ғабдулланың атаһы Сәфәрғәли Иҙелбаев та әүҙем ҡатнаша. 1917 йылдың июнь аҙағында Башҡорт халҡының иттифаҡи бюроһы ағзаһы итеп һайлана.

Башҡортостандан ситтә, хәрби хеҙмәттә йөрөүенә ҡарамаҫтан, Башҡорт үҙәк шураһы Ғабулла Иҙелбаевты, 1917 йылдың көҙөндә Ырымбур губернаһы башҡорттарынан Рәсәйҙең Ойоштороу йыйылышына (Учредительное собрание) депутатлыҡҡа кандидат итеп күрһәтә. Уның кандидатураһы халыҡтың хуплауын таба һәм илдең оло ҡорона депутат итеп һайлана. Ә декабрь айында үткән 3-сө Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайында Иҙелбаев Башҡортостан автономияһының Кесе ҡоролтайы составына индерелә.

Ғинуар башында Ырымбурҙан телеграмма алыу менән (унда Иҙелбаевтың Ойоштороу йыйылышы һәм Кесе ҡоролтай ағзаһы итеп һайланыуы тураһында хәбәр ителә) Иҙелбаев Симферополдән тыуған яғына юллана. Әммә тимер юлындағы боларыш арҡаһында, Ырымбур ҡалаһына ғинуарҙың 17-18-ҙәрендә генә килеп етә. Килеп төшөү менән Бөрйән-Түңгәүер кантонындағы башҡорт отряды янына китә. Был ваҡытта прапорщик Ғимран Мағазов менән корнет Әмир Ҡарамышев етәкселегендә 400 тирәһе кешенән торған тәүге башҡорт

отряды ойошторолған була. Отряд Таналыҡ-Баймаҡ заводында (хәҙерге Баймаҡ ҡалаһы) урынлаша. Башҡорт хөкүмәте поручик Иҙелбаевҡа ошо отряд менән командалыҡ итеү бурысын йөкмәтә.

Отряд 3-сө ҡоролтайҙың ҡарарҙарына ярашлы, Бөрйән-Түңгәүер кантонындағы алтын мәғдәнлектәрен Башҡорт хөкүмәте ҡарамағына күсерергә тейеш була. Әммә отрядтың ҡоралы етерлек кимәлдә булмай. Шуға күрә башҡорт офицерҙары, ҡорал мәсьәләһен хәл итеүҙе һорап, Баймаҡ эшселәр Советына мөрәжәғәт итә. Ҡорал өсөн тейешле аҡсаһын да бирәләр. Баймаҡ Советы Орск ҡалаһынан ҡорал һатып алып килергә вәғәҙә бирә. Ләкин 4 февралдә (яңы стиль буйынса 16 февраль) Ырымбур губревкомы, Башҡорт хөкүмәтен төрмәгә ябып, тиҙҙән Баймаҡ советына башҡорт отрядын юҡ итергә бойора.

Бер нимәлә белмәгән Әмир Ҡарамышев отрядтың бер өлөшө менән ҡорал алып килә ятҡан Баймаҡ Советы большевиктарын ҡаршыларға сыға. Әммә тегеләр икенсе юлдан китеп, йәшерен рәүештә Баймаҡҡа ҡайта һәм башҡорттар өсөн тәғәйенләнгән ҡорал менән үҙ эшселәрен ҡоралландыра. Улар 16 февралдең төнөндә (2 март) Баймаҡта бер нәмә белмәй йоҡлап ятҡан башҡорт отрядын килеп баҫа. Башҡорт һалдаттарын ҡыуып таратып, командирҙары Ғабдулла Иҙелбаев, Ғимран Мағазов, прапорщик Усман Йәһүҙин, башҡорт отрядында хеҙмәт иткән биш поляк офицерын һәм дә Башҡорт хөкүмәте ағзаһы Хәбибулла Ғәбитовты ҡулға ала.

Иҙелбаевтың ауылында ҡунған Ҡарамышев, Баймаҡтағы хәл тураһында ишетеп, тирә-яҡ ауылдарҙан ике мең тирәһе башҡортто йыйып, Баймаҡты ҡамауға ала. Большевиктарҙан башҡорт офицерҙарын азат итеүҙе талап итә. Әммә ҡоро ҡул менән баштан-аяҡ ҡоралланған Баймаҡ эшселәренә ҡаршы ҡаршы һуғышҡа инергә баҙнат итмәй. Тиҙҙән Баймаҡҡа ҡыҙыл гвардия полкы килеп етә. Ә башҡорттар Баймаҡтан сигенергә мәжбүр була.

Баймаҡ Советы эшселәре, бер нисә көн буйы, ҡыҙылдарҙың полкы килгәнсе, Ғабулла Иҙелбаев менән Ғимран Мағазовты туҡмап, мыҫҡыллап һорау алалар. Ҡыҙылдарҙың полкы башҡорт офицерҙарын, улар менән бергә ике полякты атырға тигән ҡарар сығара. Хәбибулла Ғәбитов офицер булмауы арҡаһында ғына үлем язаһынан ҡотола. Уның хәтерләүенсә, 22 февраль (7 март) көнө, бөгөн һеҙҙе атасаҡтар тип, Баймаҡ эшселәре Иҙелбаев менән Мағазовтың кейеме һалдырып, уларға таушалып бөткән кейем бирәләр ҙә, атырға алып китәләр. *“Одетые в лохмотья, обутые в притащенные со свалки галоши, оставшиеся после грабежа даже без чулков, с голыми ногами, торчащими из дырявых галош, стоят они на снегу. Разрывающая сердце, страшная была эта картина...*

*Начальник красных отдал команду на молебен. Наши дважды по четыре раза произнесли намаз. Поляки крестились. После молитвы Габдулла Идельбаев и Гимран Магазов стоя на ногах, а поляки на коленях вновь построились.*

*Габдулла Идельбаев сказал:*

*– Нас убиваете, но остается в живых еще два миллиона башкир. Вы не сможете заглушить нашу священную идею, пока не перебьете весь этот двухмилионный народ. Мы встречаем смерть со спокойной душой.*

*Затем последовал приказ начальника красных. Так как расстрельщики были пьяны, залпа не получилось, стрельба оказалось беспорядочной. Польские офицеры, не сразу скончавшиеся шевелились. Габдулла и Гимран, какой-то силой, все еще стояли на ногах. Вот затихли польские офицеры. А наши все стоят. Наконец, сначала Гимран, а за ним Габдулла, медленно склоняясь назад, упали, героически и с открытой грудью встретив славную смерть* ", – тип яҙа Х. Ғәбитов.

Баймаҡтағы ҡанлы ваҡиғалар башҡорт халҡында большевиктарға ҡаршы нәфрәт уята. 1918 йылдың июнендә Башҡорт хөкүмәте большевиктарға ҡаршы һуғыш иғлан итә. Ул башҡорт халҡына яҙылған мөрәжәғәтендә: "*...Войска наши, которые были нами посланы для охраны интересов и спокойствия башкирского народа в различных кантонах и для укрепления законности и порядков в кантонах, они путем обмана и для измены распустили, уничтожили (разрушили).*

*Начальников же наших войск, братьев наших Абдуллу Идельбаева и Гимрана Магазова и вместе сними еще шестнадцать человек сделали своими жертвами и расстреляли. Предательское убивство родного любимого юриста Абдуллы Идельбаева, представляющего собой воплощение бьющей ключем у башкира отваги, силы, энергии, честности, искренности, надругание и издевательство над его телом за то лишь, что до последнего вдоха кричал: "Вам, угнетателям, не уничтожить автономии Башкирии, мы умрем, но народ вам убить не удастся!". И тут же выкрикивания перед плачущим и стонущим народом: ""Вот вам автономия!". Все это еще феврале наглядно показало, кто такие большевики...".*

1918 йылдың йәйендә Бөрйән-Түңгәүер кантоны халҡы, Башҡортостан автономияһы өсөн ҡорбан булған ҡаһарман башҡорт офицерҙарының исемдәрен мәңгеләштереү мәсьәләһен күтәреп сыға. Улар Баймаҡта Иҙелбаев менән Мағазов исемендәге мәктәп төҙөргә ҡарар итә. Бының өсөн иғәнә йыйыу ойошторола. Ә Башҡорт хәрби шураһы 1918 йылдың көҙөндә 2-се Башҡорт кавалерия полкына Ғабдулла Иҙелбаевтың исемен бирә.

**Сығанаҡтар:**


А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Ч. 1. Уфа, 2005. С. 134, 135,138 .

Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 1. Уфа, 2002. С. 308–336, 338–341, 343, 518.

Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 509.

Кульшарипов М.М.Башкирское национальное движение (1917–1921 гг.). Уфа: Китап, 2000. С. 96.

## МӨХТӘР ҠАРАМЫШЕВ

1895 – ?

Мөхтәр Батыргәрәй улы Ҡарамышев – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан башҡорт офицерҙарының береһе, сардар. 1895 йылда Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙенең (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Ишембай районы) Маҡар ауылында тыуған. Гәрәй менән Әмир Ҡарамышевтарҙың ҡустыһы.

Тәүге белемде Маҡар ауылы мәктәбендә ала. 1906 йылда мөғәллим атаһы Орск ҡалаһына эшкә күсерелә, Мөхтәр бында училище тамалалай. Артабан педагогия курстарында белем ала. 1915 йылда хәрби хеҙмәткә алынып, фронтҡа эләгә. 1917 йылдың сентябренә тиклем 14-се драгун полкы составында һуғышта ҡатнаша. Яраланғас, уны бер айға ялға ҡайтарып ебәрәләр. Тиҙҙән инде илдә сәйәси хәлдәр ҡырҡа үҙгәреп китә. Октябрь аҙағында большевиктар власты үҙ ҡулына ала. Мөхтәр тыуған яғына ҡайтҡас, Иҫке Сәйет ауылы мәктәбе мөдире булып эшкә төшә. Был осорҙа Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт киң ҡолас ала. 1918 йылдың ғинуарында Юрматы кантонының беренсе ҡоролтайында М. Ҡарамышевты кантон башҡармаһына һайлана. Әммә Ырымбурҙа Башҡорт хөкүмәте ҡулға алыныу менән Башҡортостан автономияһының урындағы власть органдарының эше лә юҡҡа сыға.

1918 йылдың йәйендә прапорщик Ҡарамышевты Башҡорт армияһы сафтарына хеҙмәткә алына. Июль айынан башҡорт ғәскәрҙәренең инспекторы булып хеҙмәт итә һәм бер үк ваҡытта, ҡорал-боеприпас складын етәксеһе вазифаһын башҡара. Йәғни ғәскәрҙәрҙе ҡорал менән тәьмин итеү менән шөғөлләнә. 1918 йылдың 27 августында Мөхтәр Ҡарамышевҡа Башҡорт хәрби шураһының артиллерия бүлеге мөдире бурысы йөкмәтелә. Хәрби шураның 28-се (§ 4) фарманында: “*Прапорщика Карамышева, назначенного приказом № 7, § 4, инспектором Башкирских войск и заведующим оружием считать с того же числа на должности заведующего артиллерийским отделом ввиду неимения штатных должностей инспектора Башкирских войск и заведующего оружием и фактически ведением складом боевых припасов и оружием Башкирского военного совета*”, – тиелә.

1918 йылдың көҙөндә прапорщик Ҡарамышев, мәрхүм ағаһы Әмир Ҡарамышев етәкселек иткән 1-се Башҡорт кавлерия полкына командир итеп тәғәйенләнә. Подпоручик звание бирелә. 1-се полк менән ул 1919 йылдың ғинуарына тиклем командалыҡ итә. Ошо осор эсендә ҡыҙыл армия ғәскәрҙәренә ҡаршы ҡанлы яуҙарҙа ҡатнаша. Күрһәткән батырлыҡтары өсөн ротмистр итеп үрләтелә.

1918 йылдың декабрь аҙағында, Мөхтәр Ҡарамышев Стәрлетамаҡ ҡалаһы янында Ҡыҙыл Армия частарына ҡаршы фронт тота. Ошо районда һуғышҡан

бөтә ирекле башҡорт отрядтары М. Ҡарамышевтың ҡулы аҫтында туплана. Ул Стәрлетамаҡ фронты командующийы итеп тәғәйенләнә. Бында башҡорт ғәскәрҙәренә бик ауыр шарттарҙа һуғышырға тура килә. З. Вәлидиҙең 30 декабрҙә ғәскәри старшина Богдановҡа яҙған хатында асыҡ сағыла: "*На Стерлитамакском фронте действует 1-й кавалерийский имени Карамышева полк 400 человек при 152 винтовках и 400 конях. Юрматынский отряд 150 человек, Табынский отряд 200 человек. Туда же двигается Кипчакский отряд 160 человек, Джетировский отряд 120 человек, Тамъян-Катаевский 400 человек, усерганский отряд 180 человек. Бурзянский 300 человек остается на охране Правительственных учреждений в Баймакском районе.*

*Руководство башкирским конным полком и отрядами в Стерлитамакском районе объединяются в руках командующего Башкирскими силами Стерлитамакского района, которым назначаю ротмистра Карамышева. Только эти части полуголодные так же не имеют денег и без патронов, пулеметов и недокомплект оружия*", – тип хәбәр итә Зәки Вәлиди һәм ҡорал менән ярҙам итеүҙе һорай.

Аҡтарҙан ярҙам ала алмағас, Мөхтәр Ҡарамышев етәкселегендәге ғәскәрҙәр Стәрлетамаҡтан сигенергә мәжбүр була. 1919 йылдың ғинуар башында 1-се Башҡорт кавалерия полкы Башҡорт корпусына барып ҡушыла. 10 ғинуарҙа Зәки Вәлиди М. Ҡарамышевты башҡорт ғәскәрҙәренең баш интенданты итеп тәғәйенләй, ә 1-се Башҡорт кавлерия полкын Муса Мортазин етәкләй.

Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, 1919 йылдың мартында, Мөхтәр Ҡарамышев, Башревкомдың аҙыҡ-түлек бүлеге мөдире, артабан Мораҡ ауылы һәм районы гарнизоны начальнигы булып хеҙмәт итә. Апрель айынан Хәрби эштәр буйынса халыҡ комиссариатында дөйөм эштәр бүлеге (общий части) начальнигы вазифаһында була.

1919 йылдың авгусында, Башҡортостан автономияһы хөкүмәте (Башревком) Саранскиҙан ҡайтҡас, Мөхтәр Ҡарамышев Табын кантоны ревкомы рәйесе итеп тәғәйенләнә. 1919 йылдың декабрендә Тамъян-Ҡатай кантонына хәрби комиссар итеп күсерелә. Һаулығы ҡаҡшау сәбәпле 1920 йылдың ноябрендә Мөхтәр Ҡарамышев тыуған яғына ҡайта һәм уҡытыусы булып эшләй. Әммә тиҙҙән Юрматы кантонының ер эштәре бүлеге мөдире итеп эшкә алына. Унан инде Дыуан-Ҡошсо кантонының Совнархоз рәйесе итеп күсерелә. 1921 йылдың февралендә "Белрайлесконтора"ға комиссар итеп тәғәйенләнә. Октябрь айында Мөхтәр Ҡарамышевты Стәрлетамаҡҡа Башҡортостандың социаль тәьминәт халыҡ комиссариаты коллегияһына эшкә алалар.

Тап ошо осорҙа партия сафтарын таҙартыу эше киң ҡолас ала. 1921 йылдың 15 ноябрендә комиссия Мөхтәр Ҡарамышевтың элекке эшмәкәрлеген тикшереп, Башҡорт армияһында ҡыҙылдарға ҡаршы һуғышҡанын иҫкә төшөрөп: "*исключить из партии как активного участника в борьбе против Соввласти и участника арестов коммунистов при Соввласти как националиста без права вступления...*", – тигән хөкөм сығара.

Мөхтәр Ҡарамышевтың артабанғы яҙмышы билдәһеҙ. Күп кенә Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтен эшмәкәрҙәрен һәләк иткән 30-сы йылдар репрессияһы уны урап үтмәгәндер, күрәһең.

## Сығанаҡтар:


ЦГИА РБ. Ф. 1201. Оп. 2. Д. 3. Л. 20.
ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 30. Л. 40.
ЦГАОО РБ. Ф. 9776. Оп. 2. Д. 4. Л. 166.
ЦГАОО РБ. Ф. 22. Оп. 2. Д. 310. Дело Мухтара Карамышева.
А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Кн. 1. Уфа, 2005. С. 351–354.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 2. Ч. 2. Уфа, 2003. С. 289, 438.
Шунда уҡ. Т. 3. Ч. 1. Уфа, 2004. С. 83.
Вәлиди Туған Ә. Ә. Хәтирәләр. Өфө, 1996. 205-се бит.

# ҒӘБДЕЛХАҠ ҒӘБИТОВ

Ғәбделхаҡ Ғәбитов – 1918 йылда Башҡортостан автономияһының хәрби көстәре – Башҡорт армияһын ойоштороу эшендә мөһим роль уйнаған башҡорт офицерҙарының береһе. Тыумышы менән Ырымбур губернаһы Троицк ҡалаһынан.

Атаһы мөғәллим була. Атаһынан етем ҡалып, йәмәғәт аҡсаһы иҫәбенә (бәлки "Башҡорт стипендияһына" белем алғандыр) уҡый. Беренсе донъя һуғышы башланғас, хәрби хеҙмәткә алына. Унда хәрби училище тамамлап, подпоручик чинында ҡайта.

1918 йылдың май аҙағында Силәбелә власть Чехословактар ҡулына күскәс, 2 июндә Арғаяш кантонының Мәтәл ауылында подпоручик Ғәбделхаҡ Ғәбитов рәйеслегендә Башҡорт милли-азатлыҡ эшмәкәрҙәре съезға йыйыла. Съезд Чехословактар менән һөйләшеү өсөн Ғ. Ғәбитов, С. Мерәҫов һәм Н. Таһировтарҙы Силәбегә ебәрә. Башҡорт вәкилдәре чехословактар менән уртаҡ тел таба. Силәбенең Халыҡ власы комитетында Башҡорт шураһы ойошторола. Уның ағзалары итеп Ғ. Ғәбитов, С. Мерәҫов, Н. Таһиров, Т. Ғисмәти, Ф. Сөләймәнов, Ғ. Мөхәмәтйәровтар һайлана.

Подпоручик Ғәбитов башҡорттар исеменән Чехолосвак корпусы командалығы менән милли ғәскәрен ойоштороу мәсьәләһе буйынса һөйләшеүҙәр башлай. Чехослокавтар башҡорттарға ҡорал менән ярҙам итергә ризалаша. Һөҙөмтәлә, подпоручик Ғәбитов, Зәки Вәлиди Силәбегә килеп, Башҡорт хөкүмәте эше башланғансы ҙур эштәр башҡарып өлгөрә.

Зәки Вәлиди килгәс, Башҡорт армияһын ойоштороу эше менән шөғөлләнеүсе махсус орган – Башҡорт хәрби шураһы ойошторола. Хәрби шураны Вәлиди етәкләй, уның урынбаҫары итеп Ғ. Ғәбитов тәғәйенләнә. Ул Себер хөкүмәте менән бәйләнешкә инеп, башҡорт ғәскәрҙәрен ҡорал, хәрби кәрәк-яраҡтар менән тәьмин итеү буйынса Башҡорт хөкүмәте исеменән һөйләшеүҙәр башлай. Июль башында Башҡорт хөкүмәте уны, киң вәкәләттәр менән Омскийға ебәрә. 1918 йылдың 2 июлендә Башҡорт хөкүмәтенең Хәрби бүлеге тарафынан бирелгән танытмала былай тиелгән: "*Предъявитель сего товариш председателя Военного совета при военном отделе Правительства Башкирии подпоручик Абдул-Хак Габитов командируется для переговоров с Временным Сибирским правительством и командующим войсками Западной Сибири по вопросам организации и управления Башкирских войск*".

Подпоручик Ғәбитовтың Омскийҙағы һөйләшеүҙәре уңышлы тамамлана. Себер хөкүмәте милли ғәскәрҙәр төҙөү идеяһын өнәп бармаһа ла, Аҡ армияның айырым хәрби берәмеге булараҡ Башҡорт ғәскәрен ойоштороуға ризалыҡ бирә. Был, Граждандар һуғышы барышында, Башҡортостан автономияның

йәшәйәшен, киләсәген тәьмин иткән ҙур уңыш була. Ошоноң менән Ғәбделхаҡ Ғәбитов башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороуҙа баһалап бөткөһөҙ эш башҡарып сыға.

Себер хөкүмәтенең ярҙамы менән Башҡорт хәрби шураһы башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороу эшен йәйелдереп ебәрә. Июнь-июль-август айҙарында 1-се, 2-се, 3-сө, 4-се, 5-се Башҡорт пехота полктары һәм 1-се Башҡорт кавалерия полкы ойошторола. 24 июль подпоручик Ғәбитов 2-се Башҡорт пехота полкы командиры итеп тәғәйенләнә. 2-се полктың частары ҡыҙылдар менән һуғыштарҙа ҙур батырлыҡтар күрһәтә. Июль аҙаҙғында Екатеринбург ҡалаһын азат итеүҙә ҡатнаша. Ҡала халҡы башҡорт полкына рәхмәт йөҙөнән "Доблестным освободителям – благодарный Екатеринбург" тигән яҙыу менән байраҡ бүләк итә.

1918 йылдың көҙөндә һаулығы насарайыу сәбәпле, Ғ. Ғәбитов хәрби хеҙмәттән китә. Уның исеме милли хәрәкәт документтарында башҡа осрамай. Подпоручик Ғәбделхаҡ Ғәбитовтың артабанғы яҙмышы билдәһеҙ.

## Сығанаҡтар:


ЦГИА РБ. Ф. 1201. Оп. 2. Д. 1. Л.
ЦГАОО РБ. Ф. 9776. Оп. 2. Д. 3. Л. 116.
ЦГАОО РБ, Ф. 1832. Оп. 4. Д. 294. Л. 3.
А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Кн. 1. Уфа, 2005. С. 143, 245, 255.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 251, 401.
Вәлиди Туған Ә. Ә. Хәтирәләр. Өфө, 1996. 227, 352-се битәр.
Хакимов Р. Ш. Земля Аргаяшская: история и современность. Челябинск, 2005. С. 84, 87.

# ҒАРИФ МӨХӘМӘТЙӘРОВ
## 1891 – ?

Мөхәмәтғариф Зәкир улы Мөхәмәтйәров – 1918 йылда Башҡортостан автономияһының хәрби көстәре – Башҡорт армияһын ойоштороуҙа әүҙем ҡатнашҡан башҡорт офицерҙарының береһе, Зәки Вәлидиҙең көрәштәше, адъютанты. Тыумышы менән Ырымбур губернаһы Силәбе өйәҙенән (хәҙерге Силәбе өлкәһе). Күренекле башҡорт яҙыусыһы Хәй Мөхәмәтйәровтың (1911–1941) әҡрәбәһе. Әйткәндәй, уның атаһы Ғабдрафиҡ Мөхәмәтйәров та Силәбе башҡорттары араһында танылған милли эшмәкәр була. 1919-1920 йылдарҙа Арғаяш кантоны ревкомитеты рәйесе булып эшләй.

Ғариф Мөхәмәтйәров Силәбе ҡалаһында дүрт класлы училище тамамлай. Беренсе донъя һуғышы башланғас, хәрби хеҙмәткә алынып, унда хәрби мәктәп тә уҡый. Прапорщик званиеһында тыуған яғына ҡайта.

1917 йылда Ғ. Мөхәмәтйәров Нуриәғзәм Таһиров менән бергә Силәбе өйәҙендә Башҡортостан автономияһы ҡарарҙарын тормошҡа ашырыу менән шөғөлләнә. Әммә бында большевиктарҙың тәьҫире лә ҙур була. 1918 йылдың ғинуарында большевиктар пропагандаһын тыңлап ҡайтҡан фронтовик-башҡорттар, Ҡорбанғәлиевтар тәьҫирендә булған Арғаяш кантоны башҡармаһын таратып, башҡорт ҡоролтайҙарының ҡарарҙарын танымау тураһында ҡарар ҡабул итә. Арғаяшта Совет власын урынлаштыра.

Шуға ҡарамаҫтан, 27–30 ғинуарҙа үткән Арғаяш кантоны съезында, кантон башҡарма комитетына Башҡортостан автономияһы яҡлылар: Нуриәғзәм Таһиров, Ғариф Мөхәмәтәйров Ғәбделхәй Иркәбаевтар һайлана. 25 апрелдә үткән 2-се Кантон съезында большевиктар менән милли хәрәкәт эшмәкәрҙәре араһында ер мәсьәләһе буйынса ҡыҙыу бәхәс тыуа. Н. Таһиров, Ғ. Мөхәмәтйәровтар Силәбе һәм Ҡыштым күскенселәренә башҡорт ерҙәрен бүлеп биреүгә ҡырҡа ҡаршы сыға. Силәбе ЧК-һы уларҙы, контрреволюцияла ғәйепләп, төрмәгә ябып ҡуя. Ләкин оҙаҡламай Силәбе ҡалаһы большевиктарға ҡаршы баш күтәргән Чехословак корпусы ҡулына күсә.

1918 йылдың 7 июнендә Силәбе ҡалаһында Зәки Вәлиди етәкселегендә Башҡорт хөкүмәте яңынан үҙенең эшмәкәрелеген йәйелдереп ебәрә. Башҡорт хөкүмәте тәү сиратта үҙенең хәрби көстәрен – Башҡорт милли армияһын ойоштороу эшенә тотона. Хәрби эштәр менән идара итеү өсөн 12 июндә Башҡорт хәрби шураһы ойошторола. Хәрби шураның ағзалары итеп Ғ. Таған, Т. Ғисмәтуллин, Ғ. Иркәбаевтар менән бергә прапорщик Ғариф Мөхәмәтйәров та һайлана.

1918 йылдың июнь–июль айҙарында Мөхәмәтйәров Башҡорт хөкүмәтенең Хәрби бүлеге мөдире Зәки Вәлидиҙең сәркәтибе, артабан өлкән адъютанты булып

хеҙмәт итә. Мобилизация эше менән шөғөлләнә. Ошо осорға ҡараған мөһим генә документтарҙа З. Вәлиди менән бергә уның ҡултамғаһы тора.

1918 йылдың авгусында аҡтар Арғаяш кантонынан сыҡҡан Башҡорт хәрби шураһы ағзалары менән ҡыҙыҡһына башлай. Силәбеләге Урал корпусы штабы 11 августа Ырымбурға, Башҡорт хәрби шураһына ебәргән телеграммаһында: *“...состоят ли в Военном совете Тагиров, Мухамедьяров, Магасумов, Хакимов и были они в большевистском совете?”*, – тип төпсөнә. Ә инде прапорщик Мөхәмәтйәров Арғаяш кантонында күренеү менән уны ҡулға алалар. *“Башкирский военный совет распорядился послать в Аргаяшский кантон, находящийся в его распоряжение, временно зачисленный к 2-му Башкирскому полку конный отряд под начальством подпоручика Добринского и члена Военного совета прапорщика Мухамедьярова. Последнему были даны определенные секретные директивы о розыске дезертирующих солдат. Командир Уральского отдельного корпуса почему-то счел нужным вмешаться в это дело и послал казачий отряд для разоружения нашего.*

*Казачий отряд 19 августа исполнил поручение комкора и арестовал члена нашего Совета Мухамедьярова и подпоручика Добринского”*, – тип яҙа Зәки Вәлиди Себер хөкүмәтенең хәрби министрына һәм башҡорт вәкилдәрен ирекке сығарыуҙы һорай. Мөхәмәтйәровты оҙаҡламай сығарғандарҙыр, күрәһең, сөнки, 1918 йылдың сентябрендә ул Башҡорт хәрби шураһы фарманы менән Арғаяш кантонының ирекле отряды начальнигы итеп тәғәйенләнә. Бында Башҡортостан автономияһы власына ҡаршылыҡ ҙур була. Бер яҡтан Ҡорбанғәлиевтар халыҡты Башҡорт хөкүмәтенә ҡаршы ҡотортһа, икенсе яҡтан Арғаяш башҡорттары араһында большевиктарҙың тәьҫире көслө була. Октябрь айында Башҡорт хәрби шураһының Хәрби-тәфтиш комиссияһы, Арғаяштағы хәлдәрҙе тикшереп, Башҡортостан автономияһына ҡаршы эшләгәндәрҙе, 1918 йылдың башында Арғаяш кантон башҡармаһы рәйесен үлтереүҙә ҡатнашҡан кешеләрҙе ҡулға алырға, ҡайһыларын атырға, тигән ҡәтғи бойороҡ бирә Ғариф Мөхәмәтйәровҡа.

1918 йылдың ноябренән прапорщик Мөхәмәтйәров 2-се Башҡорт уҡсы полкының ылау начальнигы булып хеҙмәт итә. Подпоручик званиеһын ала. 1919 йылдың ғинуарынан 2-се Башҡорт кавалерия полкына эскадрон менән етәкселек итә. 18 ғинуарҙа Нуҡай ауылында ҡыҙылдарға ҡаршы алышта күрһәткән батырлығы өсөн поручик дәрәжәһенә күтәрелә. Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, Башҡортостандың хәрби революцион хөкүмәте – Башревкомға ағзалыҡҡа кандидат итеп һайлана. 1919 йылдың мартынан Башҡорт Совет республиканың хәрби эштәр буйынса комиссары Зәки Вәлидиҙең сәркәтибе вазифаһын үтәй. 1920 йылдың мартынан Арғаяш кантоны хәрби комиссары ярҙамсыһы, артабан кантондың аҙыҡ-түлек комиссары булып эшләй.

1920 йылдың июнендә үҙенең көрәштәштәре – Башревком ағзалары менән ҡуша, Үҙәк властың май декретына ҡаршы ризаһыҙлыҡ белдереп, эшен

ҡалдырып китә. Зәки Вәлиди большевиктарға ҡаршы көрәште дауам итеү өсөн Төркөстанға юлланған мәлдә, Ҡазағстанда, Ғ. Мөхәмәтйәров уның янында була. Вәлиди уны кире Башҡортостанға ҡайтарып ебәрә: "*Үҙем менән бер бергә һалдат бар. Янымдағы бәғзе әҫәрҙәремде, мылтыҡтарҙы атҡа артмаҡланыҡ. Ҡалған әйберҙәрҙе, илдең архивын Стәрлетамаҡтағы хөкүмәткә, төҙөлә башлаған Үҙәк музейға һәм китапханаға тапшырыу өсөн, адъютантым Ғариф Мөхәмәтйәровҡа бирҙем. Ул хәлде яҡшы белә ине...* ", – тип яҙа Вәлиди.

Ғариф Мөхәмәтйәров тыуған яғына ҡайтып, артабан Арғаяш кантонында эшләй. 1927–1928 йылдарҙа ул Арғаяш кантон башҡарма комитеты рәйесе вазифаһында була. 1929 йылда уны, 1918 йылда Арғаяш кантонында большевиктарҙы эҙәрлекләүҙә ғәйепләп, партия сафынан сығаралар. Ғариф Закир улы Мөхәмәтйәровтың артабанғы яҙмышы билдәһеҙ. Ләкин 30-сы йылдарҙың репрессия елдәре уға, ҡағылмай үтмәгәндер.

**Сығанаҡтар:**


ЦГИА РБ. Ф. 1780. Оп. 1. Д. 11. Л. 119.

ЦГИА РБ. Ф. 1201. Оп. 2. Д. 3. Л. 20.

ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 2. Л. 44.

ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 107а. Л. 60.

ЦГАОО РБ. Ф. 9776. Оп. 2. Д. 4. Л. 170.

А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Кн. 1. Уфа, 2005. С. 146, 263, 268, 269, 270, 300.

Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 251, 373, 579.

Вәлиди Туған Ә. Ә. Хәтирәләр. Өфө, 1996. 227, 352-се биттәр.

Хакимов Р. Ш. Земля Аргаяшская: история и современность. Челябинск, 2005. С. 75–76, 84, 87, 112, 122.

# ХӘЛИЛ ӘЛИШЕВ
## 1892 – 1937

Хәлил Фәйзрахман улы Әлишев – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан офицерҙарҙың береһе, ҡаһарман сардар. 1892 йылда Өфө губернаһы Минзәлә өйәҙенең (хәҙерге Татарстан Республикаһының Мөслим районы) Иҫке Әлмәт ауылында тыуған. Революцияға тиклем Беренсе донъя һуғышына алынып, унда хәрби мәктәп тамамлап, подпоручик званиеһын алып ҡайта.

1918 йылда йәйендә Хәлил Әлишев Башҡорт армияһы сафтарына алына. 23 август Башҡорт хәрби шураһы уны Туҡ-Соран кантонының ирекле отрядына етәксе итеп тәғәйенләй. 1918 йылдың 7 октябрендә, Бөрйән-Түңгәүер, Үҫәргән, Ҡыпсаҡ, Етеырыу һәм Туҡ-Соран кантондарындағы ирекле башҡорт отрядтары, йәғни Башҡортостандың көньяғындағы отрядтар бергә тупланып, 2-се Башҡорт ирекле кавалерия полкы ойошторола. Полктың командиры итеп Башҡорт хәрби шураһының Ирекле отрядтар бүлеге мөдире Әхмәҙулла Бейешев тәғәйенләнә. Ә Хәлил Әлишев үҙе етәкләгән Туҡ-Соран отряды менән ошо полктың бишенсе эскадронын тәшкил итә.

1918 йылдың декабренән алып 1919 йылдың ғинуарына тиклем 2-се Башҡорт полкы составында ҡыҙылдарға ҡаршы һуғыша. Ошо мәлдә Х. Әлишев үҙен ҡыйыу, оҫта һәм тәүәккәл сардар итеп таныта. Ғинуар айында Башҡорт корпусы командующийы Зәки Вәлиди уны Стәрлетамаҡ фронтындағы башҡорт отрядтарының командиры итеп тәғәйенләй. Поручик Әлишев командалығындағы башҡорт ғәскәрҙәре 1919 йылдың 18 ғинуарында Нуҡай ауылында (ул ауыл хәҙерге Күгәрсен районына ҡарай) ҡыҙылдарҙың тулы бер полкын ҡыйрата. Был хәрби уңыш тураһында ул шул уҡ көндә баш сардар Зәки Вәлидигә хәбәр итә:

*“Вчера предполагалось наступление в 16 часов на Бекичево и Тляумбетово с целью занять последних, но ввиду прибытия красных на Сатяково, что в 21 верстах южнее Мраково и согласно Вашего распоряжения, я в 18 часов двинул свои отряды из Канакиза через Тангырово, Абсалямово и Сапыково на Нукаево, где остановились на ночлег красные в числе 500 человек, как потом выяснилось 1-го Восточного Кавалерийского полка. В 5 часов утра 18 января мной было атаковано стрех сторон селение Нукаево. Находящийся в нем 1-й Восточный Кавалерийский полк принял атаку и произошел сильный бой. С обеих сторон пулеметный и ружейный ураганный огонь продолжался около трех часов. В восемь часов было занято селение. Несмотря на такой отчаянный бой, вследствии удачного расположения сил с моей стороны потери незначительны: двое убитых, трое раненых. Со стороны красных, как части пораженной, потери весьма большие, как людьми, так и военным снаряжением. Трофеи*

*подчитываются, для сведения посылаю опись, посланным вещам командиру полка. Расстроившись, части красных отступали в беспорядке по направлению на Красный мечеть. После этого вследствие усталости, измученности людей и лошадей не стал преследовать красных до Красной мечети и ничего не было известно о ней. Поэтому я вернулся в Увары.*

*По сведениям разведки бежавшие красные из Нукаевой настолько были напуганы, что даже не остановливались в Красной мечети, а поехали прямо на Тляумбетово. Теперь высылаю в Красную мечеть пол эскадрона для несения сторожевой службы, а завтра 19 января отправляюсь со штабом и с силами в Красную мечеть. В числе трофеев имеется канцелярия 1-го Восточного Кавалерийского полка с 2-я пишущими машинами".*

Нуҡай ауылындағы алышта күрһәткән ҡаһарманлыҡтары өсөн 21 ғинуар көнө Башҡорт ғәскәри идаралығы начальнигы үҙенең фарманы менән 13 офицерға яңы звание бирә, шул иҫәптән поручик Әлишев штабс-ротмистр дәрәжәһенә лайыҡ була. Артабан ул Ә. Бейеш урынына 2-се Башҡорт кавалерия полкы менән командалыҡ итә.

Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң Саранск ҡалаһында башҡорт полктарынан Айырым Башҡорт бригадаһы ойошторола. Хәлил Әлишев бригаданың 2-се Башҡорт кавалерия полкын етәкләй. Башҡорт бригадаһы составында ул 1919 йылдың июнь-сентябрь айҙарында Көньяҡ фронтта (Украинала) Деникин армияһына ҡаршы ҡанлы яуҙарҙа ҡатнаша. Дошман менән алыштарҙың береһендә 2-се Башҡорт кавалерия полкы командиры, эргәһенә снаряд төшөп, көслө контузия ала. Уны иҫһеҙ көйөнсә яу яланынан алып сығалар.

Ҡанлы алыштар һөҙөмтәһендә башҡорт полктары, шул иҫәптән 2-се кавалерия полкы, ҙур юғалтыуҙар кисерә. 14-се армия командованиеһы дүрт башҡорт полкын ике йыйылма полкка (кавалерия һәм укcы полкына ) берләштерегә ҡарар итә. 1919 йылдың сентябрендә Хәлил Әлишев 2-се полктың иҫән ҡалған командалыҡ составы һәм штабы менән Петроградҡа килә. Зәки Вәлиди ҡаһарман сардарҙы Бәләбәйҙән килгән яңы 3-сө Башҡорт кавалерия полкына командир итеп тәғәйенләй. Хәрби эштәр буйынса комиссарҙың фарманында былай тиелә: "*Командир 3-го Башкирского Кавалерийского Советского полка **Галамеев** назначается в распоряжение Начальника Отдельной Башкирской Кавалерийской Советской дивизии. На должность названного полка назначается командир бывшего Башкирского Кавалерийского Советского полка тов. **Алишев**.*

*Тов. **Алишеву** прибывших вместе с ним в Петроград командный и прочий состав бывшего 2-го Башкирского Кавалерийского Советского полка: имущество, обоз, канцелярские принадлежности и прочее немедленно отправить в Стерлитамак в распоряжение Башвоенкома, откуда получат дальнейшее направление во 2-й Башкирский Кавалерийский Советский полк бригады **Муртазина***".

Башҡорт ғәскәрҙәре Петроградта торған сағында, артабанғы формирование үтә, полктар һалдаттар, комсостав тулыландырыла, яңы килгән һалдаттар һуғышҡа әҙерлек итә. Октябрь уртаһына Юденич армияһы ҡыҙылдарҙы ҡыйратып, Петроград ҡалаһы янына килеп етә. Юденич армияһына ҡаршы башҡорт ғәскәрҙәре ебәрелә. Ошо айҡанлы Хәлил Әлишевҡа тағы бер яуаплы бурыс йөкмәтелә:

*“16-го октября 1919 года согласно словесного приказания Начальника Отдельной Кавалерийской Башкирской дивизии тов. АХЛОВА и согласно удостоверения Коменданта Петрукрайона тов. АВРОВА от 15-го октября сего года за № 343, я был назначен Начальником Башкирской группы. В состав этой группы входил 3-й Кавалерийский Башкирский полк в составе: 2-х пеших – 360 штыков и 2-х конных эскадронов в числе 240 сабель. Командир полка тов. КАПЛАН, Политком тов. Абдрашитов и 3-й батальон 3-го стрелкового Башкирского полка в составе 575 штыков, командиром батальона тов. АБДЕЕВ и Политком тов. БУЛЯКОВ.*

*Для управления этой группой мною был сформирован Штаб группы: Начальником Штаба этой группы тов. КАЛЬМЕТЕВ, для поручений тов. ТЕРЕГУЛОВ и помощник Начальника Штаба тов. СМИРНОВ и политкомом был тов. АГИШЕВ”*, – тип яҙа үҙенең докладында Әлишев.

1919 йылдың октябренән 1920 йылдың ноябренә тиклем Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө Юденич ғәскәрҙәрен ҡыйратыуҙа әүҙем ҡатнаша. Башҡорт яугирҙары ҙур батырлыҡтар күрһәтә. Һуғышсан башҡорт ғәскәрҙәре фронттың төп участкаһы – Пулков ҡалҡыулығында урынлаша. *“Пулковские высоты по своему георграфическому положению составляли самый важный стратегический пункт, имеющий решающее значение в судьбе Петроградского фронта. Противник для занятия этого пункта сосредоточил большие свои надежные силы пехоты (офицерские батальоны), кавалерии и легкую, тяжелую артиллерию.*

*В течение нескольких дней продолжались ожесточенные бои за эти Пулковские высоты, башкиры в боях знающие только одно: умереть или победить – напрягли все силы и выказали неописуемый героизм. Удалые, храбрые, смелые, дружные натиски башкир заставляли противника, грозного генерала Юденича, отказаться от плана занять преддверие Петрограда – Пулковские высоты”*, – тиелә бер архив документында.

Хәлил Әлишев та башҡорт яугирҙарының батырлығын билдәләп үтә: *“За все операции по защите города Петрограда, входящие в состав моей группы Башчасти (3-й Кав. Башполк и 3-й стр. Башполк) отличались своим геройством, мужеством, не один командир и красноармеец этих полков не имели мысли о сдаче Петрограда”*, – тип яҙа ул үҙенең докладында.

Совет хөкүмәте Башҡорт ғәскәрҙәре Петроградты ҡурсалауҙа күрһәткән ҡаһарманлыҡтарын юғары баһалай. Байтаҡ һалдат һәм командирҙар, шул

иҫәптән Хәлил Әлишев, РСФСР-ҙың юғары дәүләт наградаһы – Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. 1920 йылда Хәлил Әлишев Финляндия сигендә торған Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы менән командалыҡ итә.

30-сы йылдар аҙағында Хәлил Фәйзрахман улы Ленинград ҡалаһында Сварочный техникумының военругы булып эшләй.

1937 йылдың 7 июнендә НКВД органдары тарафынан ҡулға алына. Ярты йыл төрмәлә ултырғандан һуң ул 1937 йылдың 8 декабрендә, НКВД Комиссия һәм СССР прокуратураһы ҡарары менән атыла.

**Сығанаҡтар:**


ЦГИА РБ. Ф. Р-78. Оп. 1. Д. 1. Л. 1.
ЦГИА РБ. Ф. 1780. Оп. 1. Д. 10. Л. 64.
ЦГИА РБ. Ф. 629. Оп. 1. Д. 1371. Л. 2об.
ЦГИА РБ. Ф. 629. Оп. 1. Д. 2. Л. 32.
ЦГАОО РБ. Ф. 9776. Оп. 2. Д. 9. Л. 112.
ЦГАОО РБ. Ф. 9776. Оп. 2. Д. 4. Л. 170.
ЦГАОО РБ. Ф. 9776. Оп. 2. Д. 8. Л. 152.
А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Кн. 1. Уфа, 2005. С. 34–35.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 2. Ч. 2. Уфа, 2003. С. 220, 236.
Муртазин М. Л. Башкирия и башкирские войска в гражданскую войну. М., 2007. С. 195.
www.lists.memo.ru

# ХАРИС ТУЙМАҠАЕВ

Харис Туймаҡаев – 1918 йылда Башҡорт армияһын ойоштороуҙа әүҙем ҡатнашҡан офицерҙарҙың береһе. Тыумышы менән Троицк ҡалаһынан. Зәки Вәлиди уны сығыш менән Башҡортостандың Күгәрсен районынан, тип яҙа.

Харис Туймаҡаев Беренсе донъя һуғышына алынып, унда хәрби мәктәп тамамлап, офицер чинын алып ҡайтҡан булһа кәрәк. 1918 йылдың майында Силәбе ҡалаһында большевиктар власы ҡолатылып, Чехословак корпусы ҡулына күскәндән һуң бында Силәбе башҡорттарынан Мосолман ирекле отряды ойошторола. Отрядҡа поручик Х. Туймаҡаев етәкселек итә. Оҙаҡламай Силәбе ҡалаһында Башҡорт хөкүмәте милли ғәскәр төҙөү эшенә тотона. Әлеге Мосолман ирекле отряды нигеҙендә Башҡортостан автономияһының тәүге ғәскәри берәмеге – 1-се Башҡорт пехота полкы ойошторола. Уның командиры итеп поручик Туймаҡаев тәғәйенләнә.

1-се Башҡорт полкы 1918 йылдың июнь–июль айҙарында ҡыҙылдарға ҡаршы һуғышта ҡатнашып, аҡтар алдында үҙен һуғышсан милли ғәскәр итеп таныта. Был, үҙ сиратында, Башҡорт хөкүмәтенә башҡорт ғәскәрен артабан үҫтерергә, яңы полктар ойошторорға мөмкинлек бирә.

1918 йылдың август башында 1-се полк Башҡорт хөкүмәте менән бергә Ырымбурға килеп урынлаша. 11 августа Ырымбур хәрби округы ғәскәрҙәре командующийы Дутов башҡорт полкын килеп ҡарап китә. Башҡорт һалдаттары араһындағы тәртип һәм хәрби рухтың юғары киләмдә булыуын күреп, ул һоҡланыуын йәшермәй. Полк командирына рәхмәтен белдереп, иртәгеһенә үк түбәндәге фарманды сығара: “

## ПРИКАЗ
## по Оренбургскому военному округу

## № 107- 12 августа 1918 г. гор. Оренбург

## (по отделу Генерал-Квартирмейстера)

**11 августа я посетил только что прибывший в г. Оренбург 1 батальон 1-го Башкирскаго полка, расквартированный на Маячной горе, в лагере 2-го кадетскаго корпуса. В момент моего прибытия батальон обедал. Из всего виденнаго мною в батальоне, я вынес самое отрадное впечатление. Несмотря на праздник, все г.г. офицеры были при батальоне. Солдаты хорошо одеты, имели отличный воинский вид. На приветствие отвечали сноровисто и умело. Меня порадовала выправка и молодцеватость солдат Башкирскаго полка.**

**Не оставляет желать лучшаго и внутренний распорядок в батальоне: помещения содержатся в чистоте, в канцелярии полный порядок, во всем чувствуется опытная и твердая рука командира полка заботящагося о своей части в общем и в подробностях.**

**За все виденное считаю долгом благодарить командира полка поручика Туймакаева, начальника пулеметной команды поручика Жукова и всех г.г. офицеров этой молодой части. Так же сердечно благодарю и молодцов солдат.**

**Родина наша, раздираемая когтями врагов, и призывающая истинных сынов своих к спасению ея, давно ждеть таких строевых частей, каким является только что осмотренный мной батальон славнаго Башкирскаго полка.**

**Я уверень, что часть эта послужит надежным кадром для нарождающихся новых Башкирских частей, а образцовая их служба опирающаяся на сознательную дисциплину, веру в правое дело Свободы и Родины и победу над врагом, послужит примером для других частей Народной Армии, формирующихся в Оренбурге.**

**Да здраствует нарождающаяся Народная армия!**

**Да здраствует первый Башкирский полк!**

**Приказ этот прочесть во всех ротах, сотнях, батареях и командах**”.

Ошо уҡ осорҙа поручик Харис Туймаҡаев Башҡорт хәрби шураһы комиссияһы составында Башҡорт армияһы униформаһын эшләүҙә ҡатнаша. Милли униформа башҡорт ғәскәрҙәрендә 29 августа индерелә.

1918 йылдың 30 авгусында Х. Туймаҡаев Башҡорт хәрби шураһының Ирекле отрядтар бүлеге ҡарамағына күсерелә. “*Вместо поручика Туймакаева командиром 1-го Башкирского полка назначается подполковник Якубовский. Первому предписывается сдать полк, а второму принять и о сдаче и приеме донести Башкирскому военному совету...*”, – тиелә фарманда.

Артабан уны Башҡорт хөкүмәтенең уполномоченныйы сифатында Үҫәргән кантонына ебәрергә булалар. Бында Харис Туймаҡаев Усман Ҡыуатов менән Үҫәргән кантоны идараһы эшен юлға һалыу менән шөғөлләнә. Башҡортостан автономияһының урындағы власть органдары яңы аяҡҡа баҫҡан осорҙа, улар кадрҙарға ҡытлыҡ кисерә. 16 октябрҙә Башҡорт хөкүмәтенә яҙған хатында вәкилдәр кантон идараһын белгестәр менән тәьмин итеү мәсьәләһен хәл итеүҙе һорап мөрәжәғәт итә. “Для успешной работы просим все просьбы удовлетворять без задержки, в противном случае наше пребывание будет бесполезным”, – тип хәбәр итә Туймаҡаев.

1918 йылдың ноябренән поручик Туймаҡаев Башҡорт ғәскәри идараһында махсус йомош буйынса обер-офицер булып хеҙмәт итә. Уға штабс-капитан званиеһы бирелә.

Артабан милли хәрәкәт документтарында уның исеме осрамай. 1919 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡан мәлдә аҡтар яғында ҡалғандыр, бәлки. Уның артабанғы яҙмышы билдәһеҙ.

## Сығанаҡтар:

ЦГАОО РБ. Ф. 1832. Оп. 4. Д. 294. Л. 3.
ЦГИА РБ. Ф. 1201. Оп. 2. Д. 1. Л. 20.
ЦГИА РБ. Ф. 1201. Оп. 3. Л. 4, 22.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 406.
А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Кн. 1. Уфа, 2005. С. 187, 302.
Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Башҡорттар тарихы. Өфө, 2005. 207-се бит.

# ШАҺИХӘЙҘӘР АҠСУЛПАНОВ
## 1868 – ?

Шаһихәйҙәр Ҡотлоғәлләм улы Аҡсулпанов – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә ҡатнашҡан офицерҙарҙың береһе, башҡорт дворяндары Аҡсулпановтар нәҫеленән, батша армияһының подполковнигы. 1868 йылда Өфө губернаһының Стәрлетамаҡ өйәҙе Тәлтем-Юрматы улысы Күсәрбай (Аҡсулпан) ауылында (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Стәрлетамаҡ районы) тыуған.

Аҡсулпановтар – борон-борондан башҡорт ғәскәрендә хеҙмәт иткән нәҫел. Ғәскәри старшина Күсәрбай Аҡсулпанов батша алдында күрһәткән хеҙмәттәре өсөн 1793 йылда дворянлыҡ ала. Кантон заманында 7-се Башҡорт кантоны менән етәкселек итә. Уның улы Аралбай, 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашып, батырлыктары өсөн Изге Анна ордены менән бүләкләнә. Икенсе улы Әхмәтшафиҡ йорт старшинаһы ярҙамсыһы булып хеҙмәт итә, Ырымбур линияһында сик буйы хеҙмәтендә йөрөй.

Шаһихәйҙәр Ҡотлоғәлләм улы ла ата-бабаларының юлын һайлай. Ҡайҙа хәрби белем алғанлығы билдәһеҙ. Ырымбурҙағы Неплюев кадет корпусын тамамлаған, буғай. Беренсе донъя һуғышында ҡатнаша. 1917 йылда подполковник Аҡсулпанов Киев хәрби округының артиллерия идаралығы начальнигы булып хеҙмәт итә.

Октябрь революцияһынан һуң тыуған яҡтарына ҡайта. 1917 йылдың декабрендә Ырымбурҙа үткән 3-сө Дөйөм Башҡорт ҡоролтайында Башҡортостан автономияһының Кесе ҡоролтайына (предпарламент) ағза итеп һайлана.

1918 йылдың июнендә Силәбе ҡалаһында Башҡорт хөкүмәте тергеҙелеп, Башҡорт армияһы ойоштороу эше башлана. Башҡорт хөкүмәте алдында, беренсе сиратта милли ғәскәрҙе башҡорт офицерҙарын тәьмин итеү мәсьәләһе килеп баҫа. Революцияға тиклем батша армияһында хеҙмәт иткән, өлкән офицер дәрәжәһендәге (подполковник, полковник) башҡорттарҙы йәлеп итергә кәрәк була. Әммә ундайҙар башҡорттар араһында бик һирәк. Шуға күрә Башҡорт хөкүмәте уларҙың һәр береһен ғәскәргә саҡырыу өсөн вәкилдәр ебәрә. Шәйехзада Бабич иһә тыуған ауылы Күсәрбайҙа йәшәгән подполковник Аҡсулпанов менән һөйләшеп ҡайта. Өфөлә Һамар һәм Себер хөкүмәттәре менән һөйләшеүҙәр алып барған Зәки Вәлиди 1918 йылдың 17 июлендә Силәбеләге Башҡорт хәрби шураһы вәкиленә: “*Гильфанов и Бабич вернулись. Генерал Ишбулатов и полковник Акчулпанов согласились, будут в Уфе в субботу*”, – тип хәбәр итә. – “*У Султанова (һүҙ Искәндәр Солтанов хаҡында бара – А. Я.) имеются братья-офицеры, один из них, кажется, Ибрагим, другой – его родственник. Кажется, Ибрагим Губайдуллин, должно быть, находится в деревне Мрясово*

*Уршакминской волости. Еще есть офицеры Сыртлановы в Белебеевском уезде. Немедленно необходимо вызвать их в Уфу.*", – тип бойороҡ бирә.

1918 йылдың авгусына Башҡорт хөкүмәте бер кавалерия һәм биш пехота полкын ойоштороуға өлгәшә. Зәки Вәлиди, Һамар хөкүмәте менән һөйләшеп, башҡорт полктарын Айырым Башҡорт корпусына тупларға мөмкинлек ала. Комучтың Халыҡ армияһы командованиеһы менән килешеү нигеҙендә подполковник Аҡсулпанов Башҡорт корпусының 1-се пехота дивизияһына командир итеп тәғәйенләнә. Башҡорт хәрби шураһының 9 сентябрендәге 38-се фарманында: "*Согласно телеграммы № 868 от 7 августа Председателя Башкирского Военного Совета Валидова управляющим военными делами Комитета Членов Учредительного Собрания утверждены в должности начальника 1-й пехотной Башкирской дивизии подполковник Акчулпанов и начальника 2-й пехотной Башкирской дивизии подполковник Бикмеев. Означенных лиц полагать в ожидании и до их прибытия и. д. начальников дивизии остаются назначенные ранее приказом Башкирского Военного Совета...*", – тиелә.

Башҡорт корпусының 1-се пехота дивизияһы штабы Силәбе ҡалаһында урынлаша. Уның составына 2-се, 3-сө һәм 5-се Башҡорт пехота полктары инә. Был ғәскәри частар Верхнеуральск өйәҙе һәм Силәбе ҡалаһында урынлашҡан була. Бер урында тупланмаған был полктар менән идара итеүе еңелдән булмай подполковник Аҡсулпановҡа. Шуға ҡарамаҫтан сардар дивизия менән дә командалыҡ итергә һәм башҡорт офицерҙарын тәрбиәләүҙә ҡатнашырға лә өлгөрә. Ул Ырымбурҙа асылған Башҡорт прапорщиктар мәктәбендә уҡыта. Ошо хаҡта Зәки Вәлиди былай тип яҙа: "*Ырымбурҙа беҙ хәрби эштәр менән бергә мәғариф менән дә шөғөлләндек. Мөғәллим мәктәптәре, медсестра, телеграф, телефон курстары, хәрби мәктәп, ғәскәри курстар астыҡ. Башҡорттарҙан барлыҡ офицерҙар, унтер-офицерҙар уҡытыу эше менән шөғөлләнде. Батша ғәскәрендә хеҙмәт иткән башҡорт офицерҙарынан полковник Аҡсулпанов, Хәсән Әхмәров, Ғәлимйән Таған ҙур фиҙәкәрлек күрһәтте*".

1918 йылдың ноябрендә Колчак корпусҡа тупланған башҡорт милли ғәскәрҙәрен таратырға ҡарар итә. Башҡорт корпусын 9-сы Башҡорт уҡсы дивизияһы итеп үҙгәртеү тураһында фарман сығара. Себер хөкүмәтенән аҡса, ҡорал һәм башҡа һуғыш кәрәк-яраҡтары алып торған Башҡорт хөкүмәте Колчактың фарманы менән ризалашырға мәжбүр була. Шулай итеп, Башҡорт корпусының ике дивизияһынан бер дивизия ойошторола.

1918 йылдың сентябренән 1920 йылдың авгусына тиклем Шаһихәйҙәр Аҡсулпановтың исеме Башҡорт хәрби шураһы, артабан Башҡорт хәрби комиссариаты, Башревком документтарында осрамай.

1920 йылдың 7 авгусында подполковник Аҡсулпанов Стәрлетамаҡта урынлашҡан Башҡорт республикаһының запас ғәскәрҙәре идаралағы начальнигы Хәсән Әхмәровтың ярҙамсыһы итеп тәғәйенләнә. Шуныһы ҡыҙыҡлы фарманда:

*“Прибывшего при сношении Административно-мобилизационного отдела Башнарвоенкомата за № 02/ 23165 от 5 августа сего года бывшего заведующего общим делопроизводством Инспектора Артиллерии Народно-Революционной армии Дальне-Восточной Республики тов. АКЧУЛПАНОВА назначаю помощником начальника Запасных войск...”*, – тиелә. Фармандан күренеүенсә, Шаһихәйҙәр Аҡсулпанов Алыҫ Көнсығыш Республикаһының Ҡыҙыл армияһында хеҙмәт итеп йөрөгән булып сыға. Әммә ул яҡтарға ни рәүешле барып сыҡҡандыр, билдәһеҙ.

Подполковник Аҡсулпанов 10 мең тирәһе кешене тәшкил иткән башҡорт запас ғәскәрҙәрендә инспекция эше менән шөғөлләнә. Ғәскәрҙәрҙәге хәрби әҙерлек, тәртип, тәьминәт мәсьәләләрен тикшереп, Аллағыуат ауылында урынлашҡан Айырым Башҡорт запас уҡсы полкында булып ҡайта. 1920 йылдың октябрендә Башҡорт Республикаһының запас ғәскәрҙәре идаралығы бөтөрөлә. Шаһихәйҙәр Аҡсулпановтың артабанғы яҙмышы билдәһеҙ. Отставкаға сығып ауылына, ҡайтҡандыр, күрәһең.

Башревком документтарында тағы бер Аҡсулпановтың исем-шәрифе телгә алына. Ул – Вәли Ҡотләхмәт улы Аҡсулпанов, Ш. Аҡсулпановтың ике туған ҡустыһы булһа кәрәк. 1889 йылда Стәрлетамаҡ өйәҙенең Күсәрбай ауылында тыуған. Алты йыл Верхне-Удинск ҡалаһында батша армияһының 19-сы Себер уҡсы полкында, артабан Силәбе ҡалаһында Ҡыҙыл Армияның 1-се запас полкының татар-башҡорт батальонында хеҙмәт итә. 1919 йылдың авгусында Башревком Саранск ҡалаһынан Стәрлетамаҡҡа ҡайтҡандан һуң, Вәли Аҡсулпанов Эске эштәр халыҡ комиссариатына эшкә алына. Артабанғы яҙмышы билдәһеҙ.

## Сығанаҡтар:


ЦГИА РБ. Ф. 1201. Оп. 2. Д. 4. Л. 15.
ЦГИА РБ. Ф. 3168. Оп. 1. Д. 2. Л. 58.
ЦГИА РБ. Ф. 3168. Оп. 1. Д. 6. Л. 163.
ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 152. Л. 50.
А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Ч. 1. Уфа, 2005. С. 271–272.
Национально-государственное устройство Башкортостана. Т. 1. Уфа, 2002. С. 216.
Вәлиди Туған Ә. Ә. Хәтирәләр. Өфө, 1996. 243-сө бит.
Башкирская энциклопедия. Т. 1. Уфа, 2005. С. 107.
Кульшарипов М. М. Башкирское национальное движение (1917–1921). Уфа, 2000. С. 165.

# ШАҺИБӘК ҮЗБӘКОВ

Шаһибәк Үзбәков – Башҡорт милли–азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан башҡорт офицерҙарҙың береһе, Әхмәтзәки Вәлиҙең яҡташы, остазы һәм дуҫы. Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙенең (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Ишембай районы) Әхмәр ауылында тыуған.

Стәрлетамаҡ ҡалаһында рус мәктәбен тамалай, артабан Көҙән ауылында Вәлидиҙең атаһы Әхмәтшаһ мулланың мәҙрәсәһендә уҡыта. Ошо осорҙа (1901 йылдар тирәһендә) Шаһибәк Үзбәков З. Вәлидигә урыҫ теленән һабаҡтар бирә. Артабан Үтәк мәҙрәсәһендә лә Вәлиди Ш. Үзбәков ҡулы аҫтында уҡый. *"Атайымдың мәҙрәсәһендә уҡытҡан Шаһибәк Үзбәков тә олатайымдың мәҙрәсәһенә күсте. Мин унан русса өйрәнеүемде дауам иттем..."*, – тип яҙа Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә.

Беренсе донъя һуғышы башланғас, Ш. Үзбәков хәрби хеҙмәткә алына. Бында ул хәрби мәктәп тамалап, офицер звание алып ҡайта.

1918 йылдың июнендә Шәһибәк Үзбәков яҡташтары офицерҙар Ғәбделбарый Ғәмбәров һәм Сөләймән Ишмырҙин менән бергә Өфөгә Һамар хөкүмәтенең Халыҡ армияһына мобилизациялана. Артабан Башҡорт хәрби шураһының юллауы менән улар Башҡорт армияһы сафына күсерелә.

1918 йылдың 14 сентябрендә поручик Үзбәков Табын кантонының ирекле отряды начальнигы итеп тәғәйенләнә. Артабан ул Башҡорт ғәскәри идарлығында Зәки Вәлидиҙең өлкән адъютанты вазифаһын башҡара.

1918 йылдың ноябрендә хәлдәр ҡатмарлашып китә, Колчак үҙенең фарманы менән Башҡорт корпусын дивизия кимәленә ҡалдыра. Дивизияға командир итеп урыҫ офицерын ҡуйҙырта. Зәки Вәлиди 14 декабрҙә фронттағы башҡорт офицерҙары һәм полк муллаларына яҙған йәшерен хатында, башҡорт полктарын бер урында тупларға тигән бурыс ҡуя һәм дивизия менән етәкселекте Шаһибәк Үзбәковҡа тапшырырға ниәтләй. Хатта былай тиелә: *"...Не надо итди дальше, мотивируя это тем, что вы ждете 4-й и 5-й полки; когда они прибудут, опять не двигайтесь с места. Когда закончится сбор всех войск, я дам специальное распоряжение отступить...Однако если до моего распоряжения большевики начнут наступление, не оказывая больше сопротивления, необходимо отступать. Если начальник дивизии генерал Савич-Заболоцкий выйдет в отставку в Уфу, буду поручать Шайбеку Узбекову отступить с соответствующей дивизией"*.

Бер йоҙроҡҡа тупланған башҡорт полктары 1919 йылдың ғинуарында Зәки Вәлидиҙең фарманы менән яңынан Башҡорт корпусына берләштерелә. Ғинуар аҙағында Башҡорт хөкүмәте большевиктар менән һөйләшеүҙәр башлай. Февраль башында Советтар яғына сығырға тигән ҡәтғи ҡарарға килә. Зәки Вәлиди был ҡарарҙы командирҙарға иғлан итә: *"Офицерҙарҙы йыйҙым. Күсергә*

*теләмәүселәр булһа, мәжбүр итмәйем, үндайҙарҙы бер айлык жалованиеларын, ат һәм ҡоралдарын биреп, үҙҙәре теләгән ак генералдарға ебәрәм, тинем"*, – тип яҙа Вәлиди. – *"Нык якын күргән аркадаштарымдан Шаһибәк Үзбәков, Ғәни Ҡарамышев, Исмәғил Шәрипов һәм башка ҡайһы берәүҙәр рөхсәт алып китте... Шаһибәк менән йәш сактан дуҫ инек. Бик якшы, акыллы һәм ҡыйыу кеше булыу менән бергә үтә үҙ һүҙле ине. Якшы белемле офицер булғас, хәрби эштәр теорияһы менән шөғөлләнерме тип өмөт иткәйнем. Тиҫкәреләнде, унан да баш тартты..."*.

Шаһибәк Үзбәков Колчак армияһында үҙенең полкы менән кире аҡтарға сыҡҡан Муса Мортазин менән бергә ҡыҙылдарға ҡаршы һуғыша. 1919 йылдың июнендә М. Халиҡов: *"По сведениям помполитпреда Фахретдинова, двумя башкирскими отрядами Узбеков и Муртазин действуют против 20-й дивизии, всего тысяча штыков..."*, – тип Вәлидигә хәбәр итә. Август айында Колчак армияһы Башҡортостандан сигенә башлай. Мортазин үҙ бригадаһы менән ҡабат ҡыҙылдар яғына сыға. Зәки Вәлиди яҙыуынса, Шаһибәк Үзбәков, Урал казактары менән Украинаға китеп, генерал Врангель ғәскәрендә хеҙмәт итә. *"Аҙаҡ, Ҡырымда яраланып, Истанбулға килеүе һәм шунда вафат булыуы хакында ишеттем"*, – ти Вәлиди.

## Сығанаҡтар:

ЦГИА РБ. Ф. 1201. Оп. 2. Д. 1. Л. 16 .
А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана (1917–1920). Ч. 1. Уфа, 2005. С. 334, 338, 346 .
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 260, 437.
Шунда уҡ. Т. 2. Ч. 2. Уфа, 2003. С. 37, 376.
Вәлиди Туған Ә. Ә. Хәтирәләр. Өфө, 1996. 24, 35, 266-сы биттәр

# ТАЛХА РӘСҮЛЕВ

Талха Ғайса улы Рәсүлев – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте эшмәкәре, Зәки Вәлидиҙең яҡын көрәштәштәренең береһе. Ырымбур губернаһы Вернеуральск өйәҙенең (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Учалы районы) Әүәз ауылында тыуған булһа кәрәк. Атаһы Ғайса Фәтҡулла улы Рәсүлев мәшһүр “Илсе Ғайса” йырының авторы. Ахун дәрәжәһен ала. 1904–1905 йылдарҙағы Рус-япон һуғышында ҡатнаша. 3-сө Манчжурия армияһы штабында мулла булып хеҙмәт итә. Һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн 3-сө дәрәжә Изге Станислав ордены менән бүләкләнә.

Талха Рәсүлев ике туған ағаһы – башҡорттоң арҙаҡлы ишаны Зәйнулла Рәсүлевтың Троицкиҙағы “Рәсүлиә” мәҙрәсәһендә белем ала. Беренсе донъя һуғышына алынып, фронтта йөрөп ҡайта. 1917 йылда Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушыла. Талха Рәсүлевтың исеме Зәки Вәлидиҙең “Хәтирәләр”ендә йыш телгә алына.

1918 йылдың апрелендә Ырымбур төрмәһенән, большевиктар ҡулынан ҡотолғас, З. Вәлиди Тамъян-Ҡатай кантонына килә. Бында уны Талха Рәсүлев оҙатып йөрөй. “*Кайнаъам буласак Талха Рәсулев менән Силәбе һәм Ялан* (хәҙерге Ҡурған башҡорттары – А.Я.) *аша Кустанай ҡалаһына барыу өсөн уның улысы Туңъатаръа киттек. Туләк ауылында алтын йыйыу рудникы хужаһы Ғәҙелшаһ исемле бер менәүәр затка һуъылдыҡ... Туләк һәм Талханың ауылы Туңъатарҙа бер-ике көн торҙоҡ... Якшы аттар килтереп, ауылының көнбайышында, алыҫтаъы Уйташ тауҙарындаъы йәйләүҙәренә киттек. Көн йылынъан, ат ярыштырып барып еттек. Көн, ысынлап та капыл йылынды. Иртә яҙ булыуъа ҡарамаҫтан, ауыл янындаъы бәләкәй кулдә Талха, уның кустылары менән бер нисә тапкыр һыу индек. Уңдан да, һулдан да кыҙыл урыҫ ҡарауылдарының йөрөүе хакында ишетәбеҙ. әммә милләтебеҙ берҙәм һәм тоъро булъанлыктан, үҙебеҙҙе тамам хәүефһеҙ хис иттек һәм һис бер ниндәй ҡурҡыныс булмаъан кеүек ирекле тойоп, ат ярыштырып бара бирҙек. Бер көндән һуң, талха менән хушлашып, Ялан кантонына Муса Кәлимулла Хәҙис улының йортона табан юлъа сыктым*”, – тип яҙа Вәлиди хәтирәләрендә.

Был осорҙа Талха Рәсүлев Зәки Вәлидиҙең яҡын көрәштәше, ныҡлы терәгенә әүерелә. Вәлиди Т. Рәсүлевты яуаплы бурыс менән Алыҫ Көнсығышҡа ебәрмәксе була. “*Талхаъа каъыҙҙарҙы, алтын һәм каъыҙ аҡсаларҙы биреп, шул ук көндәме, иртәгеһенәме Чумляк станцияһына оҙаттыҡ. әгәр Владивостоктаъы Япония консуллыъында һөйләшеү һөҙөмтә бирмәһә, Японияъа сыъып, уларҙың булышлыъында Көнсыъыш Рәсәй мосолмандарының фажиъәле хәлен донъяъа белдереү бурысын йөкмәттек*”, – тип яҙа Зәки Вәлиди.

Талха Рәслүлев Силәбе ҡалаһында Чехословак корпусының большевиктарға ҡаршы баш күтәргәнен ишетеп, кире әйләнеп ҡайта. “*Партизан отрядтарыбыҙъа*

*таянып милли ғәскәр ҡорһаҡ, большевиктарҙы мәмләкәтебеҙҙән ҡыуып сығарырға мөмкин буласаҡ, тигән фекергә килдек. Ошо фекергә инанғанлыҡтан, был көн беҙҙең өсөн шатлыҡлы булды, кисен байрам иттек. Тағандарҙың (был мәлдә Ғәлимйән Тағандың тыуған ауылы Тәңреғолда була улар – А.Я.) бер маһир ҡурайсыһы бар икән, шуны саҡырҙылар. Ҡымыҙ ҙа, әсе бал да бар ине. Башҡорт бейеүҙәренә маһир Талха, Муса Кәлим, Ғәлимйән Тағана бер-бер артлы төшөп бейенеләр. Мин дә уларҙан ҡалышманым. Иртәгеһенә Силәбегә киттем*", – ти Вәлиди.

1918 йылдың июнь башында Силәбе ҡалаһында Башҡорт хөкүмәте яңынан тергеҙелә. Башҡорт эшмәкәрҙәре Чехословактар ярҙамында башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороу эшенә тотона. Оҙаҡламай Башҡорт армияһын ойоштороу буйынса идара органы – Башҡорт хәрби шураһы булдырыла. Талха Рәсүлев хәрби шураның ағзаһы итеп һайлана. 1918 йылдың июнь-июль айҙарында ул Башҡорт хәрби шураһы рәйесе Вәлидиҙең махсус йомоштарын үтәүсе вазифаһын башҡара. Июль аҙағында тыуған яғына ҡайтып Тамъян-Ҡатай кантонының эшен яйға һалыу менән мәшғүл була. Тәүәккәл ир-уҙаманы Т. Рәсүлевты Тамъян-Ҡатай кантоны етәксеһе – башҡармаһы рәйесе итеп һайлайҙар. Кантондың етәкселек органы Верхнеуральск ҡалаһында урынлаша. 1918 йылдың 5 октябрендә Ырымбурға Башҡорт хөкүмәтенә ебәргән донесениеһында Т. Рәсүлев былай тип хәбәр итә: "... кантональная управа имеет честь донести:

1. Кантональная управа, после изгнания большевиков, приступила к отправлению своих функций на выборных началах с 1 августа сего года в составе следующих лиц: председателя Талхи Расулева (он же начальник кантона) – гражданина дер. Авязовой Тунгатаровской волости и членов: Мусы Шамситдинова, Хайбуллы Казаккулова – деревни Казаккуловой Кубеляк-Телевской волости и Исмагила Султанова – дер. Кутуевой той же волости.

2. Организованы при управе следующие отделы:

а) народного образования – заведующий Усман Ниязгулов;

б) медицинский – заведующий врач Кусямышев;

в) милиции – начальник отдела Мужагитдин Габдулмаликович Маликов;

г) распорядительный;

д) бухгалтерский и оценочно-окладный;

ж) статистический.

По мере надобности будут организованы и последующие отделы".

1918 йылдың октябрендә Тамъян-Ҡатай кантонының башҡармаһы Ҡаҙаҡкол ауылына күсә. Ноябрь айында власҡа Колчак килеү менән аҡтар менән Башҡорт хөкүмәтенең мөнәсәбәттәре ҡырҡыулаша. Колчак Башҡорт хөкүмәте, кантондарҙағы ғәскәри начальниктарҙы бөтөрөргә, башҡорт ғәскәрҙәрен туранан-тура Дутовҡа буйһондороға тигән фарман бирә. Башҡорт етәкселеге Колчактың бойороғон үтәргә ашыҡмай. Аҡтарҙан өмөтөн өҙгән милли-хәрәкәт лидерҙары Советтар менән һөйләшеүҙәр башлай. Һөҙөмтәлә 1919 йылдың 18 февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыға. Талха

Рәсүлев ошо һынылышлы осорҙа Башҡортостан автономияһы өсөн барған тарихи ваҡиғаларҙың уртаһында ҡайнай.

1919 йылдың 21 февралендә Темәс ауылында 1-се Бөтөн Башҡорт хәрби съезы үтә. Съезд барышында Башҡортостандың ваҡытлы революцион хөкүмәте – Башревком ойошторола. Элекке Башҡорт хөкүмәте үҙенең бөтөн вәкәләттәрен яңы идара органына тапшыра. Талха Рәсүлев милли хәрәкәт эшмәкәрҙәре М. Халиҡов, Я. Салихов, Н. Таһиров, Ғ. Айытбаев һәм Ғ. Мөхәмәтйәровтар менән бергә Башревкомға ағзалыҡҡа кандидат итеп һайлана.

Оҙаҡламай Талха Рәсүлевҡа тағы ла яуаплыраҡ бурыс йөкмәтелә. Ул Мәскәүгә киткән Абдулла Әҙеһәмовтың урынына Башҡорт Совет Республикаһының аҙыҡ-түлек буйынса халыҡ комиссары итеп тәғәйенләнә. Башҡортостан автономияһы өсөн үтә лә ауыр осорҙа, 1919 йылдың февраль-март айҙарында, Т. Рәсүлев аҙыҡ-түлек мәсьәләләре менән шөғөлләнә. Тиҙҙән Колчак армияһы ҡыҙылдарҙы Башҡортостандан ҡыҫырыҡлай башлай. Темәстә урынлашҡан Башревком тәүҙә Мораҡҡа, Иманғолға күсенергә, артабан Саранск ҡалаһына эвакуацияланырға мәжбүр була.

1919 йылдың авгусында Башревком Башҡортостанға ҡайта. Республиканың урындағы власть органдары эшмәкәрлеге яңынан тергеҙелә башлай. Талха Рәсүлев, тыуған яғына ҡайтып, Тамьян-Ҡатай кантонында эшләй. 1920 йылдың май аҙағында Башсовнархоз Президиумы ағзаһы итеп һайлана. Әммә бында уға оҙаҡ эшләргә тура килмәй. 16 июндә Башревком ағзалары, Үҙәк Совет власының мәкерле милли сәйәсәтенә ҡаршы ризаһыҙлыҡ белдереп, эштән китә. Зәки Вәлидиҙең кәңәше буйынса башҡорт эшмәкәрҙәре Төркөстанға юллана. “Хәтирәләр”ҙән күренеүенсә, Талха Рәсүлев Төркөстанда Зәки Вәлиди янында йөрөй. Әммә уның артабанғы яҙмышы билдәһеҙ. Рәүеф Насиров яҙыуынса, Талха Рәсүлев Төркөстандағы милли хәрәкәт уңышһыҙлыҡҡа осрағас, Алыҫ Көнсығышҡа киткән, аҙаҡ Ҡытайға сыҡҡан.

## Сығанаҡтар:


ЦГИА РБ. Ф. 395. Оп. 1. Д.14. Л.34.
ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 25. Л. 4.
ЦГИА РБ. Ф. 1107. Оп. 1. Д. 107а. Л. 82.
Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925). Т. 2. Ч. 1. Уфа, 2002. С. 579.
Вәлиди Туған Ә. Ә. Хәтирәләр. Өфө, 1996. 217–219, 222, 223-сө биттәр.
Рәүеф Насиров. Уҙамандарҙы эҙләйем. Өфө, 1997. 116-сы бит.

Ҡушымта.

# Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең етәкселек органдары

## БАШҠОРТ ӨЛКӘ БЮРОҺЫ

(1917 йылдың 10 майынан – июнь аҙағына тиклем)

Ағзалары:

**Әхмәтзәки Вәлиди**
**Сәғит Мерәҫов**
**Аллабирҙе Йәғәфәров.**

## БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ ИТТИФАҠИ БЮРОҺЫ

(1917 йылдың июнь аҙағынан – 20 июленә тиклем)

Ағзалары:

**Усман Ҡыуатов**
**Юныс Бикбов**
**Сәфәрғәли Иҙелбаев**
**Ғариф Мутин**
**Ғүмәр Ҡыуатов**
**Харис Игликов**
**Ғабдулла Дәүләтшин**
**Юлбарыҫ Бикбов.**

## БАШҠОРТ МӘРКӘЗ (ӨЛКӘ) ШУРАҺЫ

(1917 йылдың 20 июненән – 1919 йылдың 21 февраленә тиклем)

Рәйестәре:

**Шариф Манатов, Шәйехзада Бабич, Сәләх Атнағолов**

*Башҡарма комитеты ағзалары:*

**Ғариф Мутин**
**Сәғит Мерәҫов**
**Илдархан Мутин**
**Усман Ҡыуатов**
**Харис Йомағолов**
**Зәки Вәлиди.**

*Башҡарма комитет ағзалары ярҙамсылары:*

**Нуриәғзәм Таһиров**
**Яхъя Салихов.**

**Башҡорт үҙәк шураһы Башҡарма комитетының яңы составы**

(1918 йылдың авгусында II Башҡорт ҡоролтайында һайланған)

Рәйесе: **Шәриф Манатов.**

*Башҡарма комитет ағзалары:*
**Зәки Вәлиди**
**Нуриәғзәм Таһиров**
**Хәбибулла Ғәбитов**
**Ғәлиәхмәт Айытбаев**
**Муса Смаҡов**
**Фәтих Дәүләтшин**
**Шәйехзада Бабич**
**Сәләх Атнағолов**
**Сәғит Мерәҫов**
**А. Ғүмәров**
**К. Кәбиров.**

*Башҡарма комитеты ағзалығына кандидаттар:*
**Ғәйнулла Ғирфанов, Юныс Бикбов, Ш. Биккужин, Ә. Әлимғолов.**

*Башҡорт үҙәк шураһының өлкә секретариаттары етәкселәре:*
Өфө ҡалаһында – **Фәтхей Әхмәҙуллин.**
Силәбе ҡалаһында – **Нуриәғзәм Таһиров.**

**Башҡорт үҙәк шураһының тәүге структураһы**
(1918 йылдың авгусында)
Рәйесе: **Шәриф Манатов**
Рәйес урынбаҫары: **Зәки Вәлиди**
Сәркәтибе: **Шәйехзада Бабич**
Финанс бүлек – **Фәтих Дәүләтшин**
Нәшриәт бүлеге – **Сәғит Мерәҫов**
Иҡтисад бүлеге – **Сәләх Атнағолов**
Статистика бүлеге – **Муса Смаҡов**

**Башҡорт үҙәк шураһының бүлектәре мөдирҙәре**
(1918 йылдың ноябрендә)
Рәйесе: **Шәриф Манатов**
Сәркәтип – **Шәйехзада Бабич**
Эске эштәр бүлеге – **Зәки Вәлиди** (рәйес ярҙамсыһы)
Финанс эштәр буйынса бүлек – **Фәтих Дәүләтшин**
Иҡтисади эштәр буйнса бүлек – **Йыһангәрәй Әмиров**
Ер һәм урман эштәре бүлеге – **Ғәлиәхмәт Айытбаев**
Мәғариф эштәре бүлеге – **Муса Смаҡов**
Статистика эштәре бүлеге – **Ғәлиәхмәт Хәсәнов**
Хәрби эштәр бүлеге – **Илдархан Мутин**

# Башҡортостан автономияһының дәүләт органдары

## КЕСЕ ҠОРОЛТАЙ

(Предпарламент)

*Ағзалары:*

**Шәриф Манатов**
**Әхмәтзәки Вәлиди**
**Хажиәхмәт Рәмиев**
**Муса Смаҡов**
**Ғәлиәхмәт Айытбаев**
**Хәбибулла Ғәбитов**
**Ризаитдин Фәхретдинов**
**Сәғит Мерәҫов**
**Харис Йомағолов**
**Йыһангәрәй Әмиров**
**Үсман Тоҡомбәтов**
**Ғабдулла Иҙелбаев**
**Ғүмәр Ҡыуатов**
**Шаһихәйҙәр Аҡсулпанов**
**Ғимран Мағазов**
**Илдархан Мутин**
**Юныс Бикбов**
**Ғабдрахман Фәхретдинов**
**Нуриәғзәм Таһиров**
**Аллабирҙе Йәғәфәров**
**Искәндәр Солтанов**
**Ғәйнулла Ғирфанов**

*Кесе ҡоролтайға ағзалыҡҡа кандидаттар:*

**Ғәни Абыҙов**
**Ғабдулла Әҙеһәмов**
**Шакир Ҡылысбаев**

## БАШҠОРТОСТАН ХӨКҮМӘТЕ

(Башҡорт хөкүмәте)

*Рәйестәре:* 1917 декабренән **Юныс Бикбов,**
1919 йылдың ғинуарынан **Мөхәмәтхан Ҡулаев.**

Бүлек мөдирҙәре:

(1918 йылдың декабренә)

Хәрби бүлек – **Әхмәтзәки Вәлиди**

Эске эштәр бүлеге – **Аллабирҙе Йәғәфәров.**
Финанс бүлек – **Илдархан Мутин.**
Юридик бүлек – **Искәндәр Солтанов.**
Ер эштәре һәм мөлкәт бүлеге – **Юныс Бикбов**
Агрономия бүлеге – **Яхъя Салихов.**
Ер ҡороу бүлеге – **Гәрәй Ҡарамышев.**
Аҙыҡ-түлек бүлеге – **А. А. Хөсәйенов.**
Хужалыҡ бүлеге – **Х. Кәримов.**
Юл-төҙөлөш бүлеге – **Х. К. Әҙеһәмов.**
Халыҡ мәғарифы бүлеге – **Х. Г. Яҡупов.**
Статистика бүлеге – **Н. Н. Третяков.**
Дөйөм эштәр бүлеге – **А. С. Биркган.**
Урман бүлеге – Баш лесничий **В. А. Михайлов.**

## Башҡортостан автономияһының урындағы власть органдары

(Бәләкәй Башҡортостан)

### Кантон башҡармалары

(1918 йылдың сентябрендә)

**Ететырыу кантоны.**
Үҙәге – Иманғол ауылы.
Рәйесе – **Фәттәх Сәлтәшев.**
Иманғол, Аллабирҙе, Бөрйән, Мораптал, Таймаҫ улыстары.
Халҡы: 33 943 кеше.

**Ҡыпсаҡ кантоны.**
Үҙәге – Мораҡ ауылы
Рәйесе – **Миһран Сыртланов.**
Бөрйән-Ҡыпсаҡ, 1-се Ҡара-Ҡыпсаҡ, 2-се Ҡара-Ҡыпсаҡ, Йомағужа, Бошман-Һыуын-Ҡара-Ҡыпсаҡ улыстары.
Халҡы: 65 328 кеше.

**Үҫәргән кантоны.**
Үҙәге – Ейәнсура ауылы.
Рәйесе – **Мөхәмәтғәлим Ҡыуатов.**
Салих, 1-се, 2-се, 3-сө, 4-се, 5-се, 6-сы Үҫәргән, Үҫәргән-Хәйбулла улыстары.
Халҡы: 132 743 кеше.

**Бөрйән-Түңгәүер кантоны.**
Үҙәге – Таналыҡ-Баймаҡ заводы.
Рәйесе – **Мөхәмәтйән Булатов.**
1-се, 2-се, 3-сө, 4-се Бөрйән, Бөрйән-Таналыҡ, Ҡарағай-Ҡыпсаҡ, Байназар, 1-се Түңгәүер, 2-се Түңгәүер улыстары.
Халҡы: 64 847 кеше.

**Тамъян-Ҡатай кантоны.**
Үҙәге – Верхнеуральск ҡалаһы.
Рәйесе – **Талха Рәсүлев.**
Тамъян-Түңгәүер, Күбәләк-Тиләү, Типтәр-Учалы, Ахун, Ҡатай, Усман-Әйле, Байһаҡал, Туңғатар, Муллаҡай улыстары.
Халҡы: 92 685 кеше.

**Арғаяш кантоны.**
Үҙәге – Арғаяш ауылы.
Рәйесе – **Нуриәғзәм Таһиров.**
Һыҙғы, Мәүлит, Мөхәмәтҡол, Мәтәл, Серле, Һултай, Әмин, Башҡорт-Тинес, Ҡоншаҡ, Түләк, Бүре, Байғусҡар, Бәгәрәктамаҡ, Ҡунаҡбай, Һары, Ҡарабулаҡ, Макрушинский улыстары.
Халҡы: 82 186 кеше.

**Ҡошсо кантоны.**
Үҙәге – Оло Ыҡ ауылы.
Рәйесе – **Мөхәмәтхәй Ғөзәйеров.**
Билән, Шәкүр, Төләш, Оло Ыҡ, Яңы Златоуст, Сажи, Хажиғол, Мунсаҡ, Ювин, Оло Ҡошсо улыстары.
Халҡы: 66 748 кеше.

**Ялан кантоны.**
Үҙәге – Тәңреғол ауылы.
Рәйесе – **Ғәлимйән Таған.**
Эске, Ҡатай, Һарт-Ҡалмаҡ, Һарт-Әбдрәшит, Ҡарасай улыстары.
Халҡы: 33 092 кеше.

**Дыуан кантоны.**
Үҙәге – Арҡауыл ауылы.
Рәйесе – **Шакир Төхвәтуллин.**
Нәсибаш, Ҡалмаҡҡол, 1-се Әйле, 2-се Әйле, Мырҙалар, Үрге Ҡыпсаҡ, Дыуан-Мәсетле, Яңыбай, Яңы Балаҡатай, Түбәнге Көсөгән, Яхъя, Ибрай улыстары.
Халҡы: 84 115 кеше.

**Көҙәй кантоны.**
Үҙәге – Таутөмән ауылы.
Рәйесе – **Мәхмүт Ҡотоев.**
Урман-Көҙәй, Илек, Бәләкәй-Көҙәй, Иглин улыстары.
Халҡы: 59 668 кеше.

**Табын кантоны.**
Үҙәге – Еҙем Ҡаран ауылы.
Рәйесе – **Шаһибәк Үзбәков.**
Бишауыл-Уңғар, Биштәкә, Кәлсер-Табын, Кесе-Табын, Бишҡайын, Дыуан-Табын, Ново-Андреевская, Өршәк-Мең, Гәрәй-Ҡыпсаҡ улыстары.
Халҡы: 17 941 кеше.

**Юрматы кантоны.**
Үҙәге – Ергән ауылы.
Рәйесе – **Әүхәҙи Ишмырҙин**.
Камышов, Петров, Маҡар, Илсек-Тимер, Аҙнай, Бошман-Ҡыпсаҡ, Мәләүез, Ҡобағыш, Сытырман, Ҡалҡаш, Покров, Татьян, Резанов улыстары.
Халҡы: 152 695 кеше.

**Туҡ-Соран кантоны.**
Үҙәге – Ғүмәр ауылы.
Рәйесе – **Абдрахман Ильясов.**
Ҡыпсаҡ, Яңы-Башҡорт, Йомран-Табын, Итог улыстары.
Халҡы: 23 436 кеше.

# Автономиялы Башҡорт Совет Республикаһының дәүләт органдары

## БАШҠОРТ ХӘРБИ-РЕВОЛЮЦИОН КОМИТЕТЫ (БАШВОЕНРЕВКОМ)

(1919 йылдың 21 февраленән 1920 йылдың июленә тиклем)

Рәйестәре:

1919 йылдың февраленән (ваҡытлыса) **Гәрәй Ҡарамышев**, апрелдән **Харис Йомағолов**, 1920 йылдың мартынан **Зәки Вәлиди**, июндән **Фәйзулла Мансырев**.

Ағзалары (1919 йылдың февралендә):

**Зәки Вәлиди**
**Ильяс Алкин**
**Гәрәй Ҡарамышев**
**Таһир Имаҡов**
**Мөхәмәтхан Ҡулаев**
**Юныс Бикбов**
**Абдулла Әҙеһәмов**
**Усман Ҡыуатов**
**Аллабирҙе Йәғәфәров**
**Фәтих Төхвәтуллин**
**Әүхәҙи Ишмырҙин**
**Сәйетгәрәй Мағазов**

Кандидаттар:

**Муллайән Халиҡов**
**Яхъя Салихов**
**Нуриәғзәм Таһиров**
**Талха Рәсүлев**
**Ғәлиәхмәт Айытбаев**
**Ғариф Мөхәмәтйәров**

## Автономиялы Башҡорт Совет республикаһының халыҡ комиссарҙары

(1919 йылдың 23 февралендә һайланған)

Мәғариф халыҡ комиссары – **Йәғәфәров А. Н.**
Хеҙмәт халыҡ комиссары – **Алкин И. С.**
Финанс һәм һаулыҡ һаҡлау халыҡ комиссары – **Ҡыуатов У. М.**
Юстиция халыҡ комиссары – **Бикбов Ю. Ю.**
Ер эштәре халыҡ комиссары – **Айытбаев Ғ.**
Эске һәм милләттәр эштәре халыҡ комиссары – **Төхвәтуллин Ф. Н.**

Аҙыҡ-түлек комиссары – **Әҙеһәмов А. К.**
Башсовнархоз рәйесе – **Ҡарамышев Г. Б.**

**1919 йылдың декабрендә**

Мәғариф халыҡ комиссары – **Йәғәфәров А. Н.**
Хеҙмәт халыҡ комиссары – **Алкин И. С.**
Финанс халыҡ комиссары – **Күрпәсов А. М.**
Һаулыҡ һаҡлау халыҡ комиссары – **Ҡыуатов Ғ. М.**
Юстиция халыҡ комиссары – **Кричинский А.**
Ер эштәре халыҡ комиссары – **Салихов Я. Ш.**
Дәүләт контроле халыҡ комиссары – **Бейешев Ә. Ә.**
Эске эштәр халыҡ комиссары – **Мутин И. И.**
Аҙыҡ-түлек халыҡ комиссары – **Мөхәмәтҡолов Ә. Б.**
Башсовнархоз рәйесе – **Ҡарамышев Г. Б.**

## Автономиялы Башҡорт Совет Республикаһының урындағы власть органдары

(Бәләкәй Башҡортостан)

**Кантон революцион комитеттары**
(1919 йылдың август–ноябре)

**Ҡыпсаҡ-Ететырыу кантоны.**
Үҙәге – Ермолаевка ауылы.
Рәйесе – **К. Мөхәмәҙиев.**

**Үҫәргән кантоны.**
Үҙәге – Ейәнсура ауылы.
Рәйесе – **Әбүтәлипов.**

**Бөрйән-Түңгәүер кантоны.**
Үҙәге – Темәс ауылы.
Рәйесе – **О. Алкин.**

**Тамъян-Ҡатай кантоны.**
Үҙәге – Сермән ауылы.
Рәйесе – **Шаһиәхмәт Дауытов.**

**Арғаяш кантоны.**
Үҙәге – Арғаяш ауылы.

Рәйесе – **Ғариф Мөхәмәтйәров.**

**Дыуан-Ҡошсо кантоны.**
Үҙәге – Үрге Ҡыйғы ауылы.
Рәйесе – **Шакир Төхвәтуллин.**

**Ялан кантоны.**
Үҙәге – Тәңреғол ауылы.
Рәйесе – **Вәлиев.**

**Көҙәй кантоны.**
Үҙәге – Яңы Ҡобау ауылы.
Рәйесе – **Сәфәров.**

**Табын кантоны.**
Үҙәге – Еҙем-Ҡаран ауылы.
Рәйесе – **Мөхтәр Ҡарамышев.**

**Юрматы кантоны.**
Үҙәге – Воскресенское ауылы.
Рәйесе – **Ғәзизов.**

**Туҡ-Соран кантоны.**
Үҙәге – Әхмәр ауылы.
Рәйесе – **Мөхәмәтша Буранғолов.**

# Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте, Башҡортостан автономияһы, Автономиялы Башҡорт Совет Республикаһы һәм башкорт ғәскәрҙәренең матбуғат органдары

(1917–1920)

### "БАШҠОРТ ИТТИФАҠИ БЮРОҺЫНЫҢ МӨХБИРЕ"

Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең тәүге матбуғат баҫмаһы. 1917 йылдың 14 июнендә Ырымбур ҡалаһында бер генә һаны донъя күрә. Июль айынан "Башҡорт" исеме аҫтында баҫыла. Мөхәррире – **Сәғит Мерәҫов**.

### "БАШҠОРТ"

1917 йылдың 20 июленән Ырымбур ҡалаһында баҫыла. 1918 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте ҡулға алынғас, туктап тора. Яңынан 1918 йылдың 6 июленән Силәбе ҡалаһында сығарыла башлай. Башҡорт хөкүмәте Ырымбурға ҡайтҡас, 1918 йылдың 20 авгусында "Башҡорт" гәзите нигеҙендә "Башҡортостан хөкүмәтенең теле" баҫмаһы сығарыла башлай. Мөхәррирҙәре: 1917 йылда – **Хәбибулла Ғәбитов**, 1918 йылда – **Сәғит Мерәҫов, Ғабдулла Ғисмәти**.

### "БАШҠОРТ ТАУЫШЫ"

Башҡорт хөкүмәтенең Ырымбур хәрби бүлегенең матбуғат органы. 1918 йылдың 17 июленән алып 19 авгусына тиклем, аҙнаһына бер тапҡыр сыға. 20 августан "Башҡорт тауышы" гәзитен хәкүмәттең дөйөм рәсми баҫмаһы "Башҡортостан хөкүмәтенең теле" алмаштыра. Мөхәррире – **Хәбибулла Ғәбитов.**

### "БАШҠОРТОСТАН ХӨКҮМӘТЕНЕҢ ТЕЛЕ"

Башҡорт хөкүмәтенең рәсми матбуғат органы. 1918 йылдың 20 авгусынан сығарыла башлай. Гәзит аҙнаһына ике тапҡыр баҫыла. "Вестник Правительства Башкирии" тип исемләнгән урыҫ телендәге варианты ла сығарыла. Ҡасан ябылғанлығы билдәһеҙ. 1918 йылдың декабрь айында, Башҡорт хөкүмәте Ырымбурҙан киткәс, сығыуҙан туктаған күрәһең. Мөхәррирҙәре: тәүҙә – **Хәбибулла Ғәбитов**, артабан – **Ғабдрахман Фәхретдинов**.

### "БАШҠОРТ ХӘРБИ-ИНҠИЛАБИ КОМИТЕТЫНЫҢ МӨХБИРЕ"

Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡкандан һуң ойошторолған баҫма. Автономиялы Башҡортостан Совет Республикаһының ваҡытлы революцион хөкүмәтенең – Башревкомдың матбуғат органы. 1919

йылдың мартынан Темәс ауылында сығарыла башлай. Аҙнаһына ике тапҡыр баҫыла. Апрель айында Башревком Саранскиға эвакуацияланыу сәбәпле ябыла.

## “ИЗВЕСТИЯ БАШКИРСКОГО ВОЕННО-РЕВОЛЮЦИОННОГО КОМИТЕТА И ЦЕНТРАЛЬНОГО БЮРО КОММУНИСТОВ (БОЛЬШЕВИКОВ) СОВЕТСКОЙ БАШКИРИИ”

1919 йылдың апреленән августына тиклем Башревком тарафынан Саранский ҡалаһында эвакуацияла саҡта урыҫ телендә сығарыла. Мөхәррире **Харис Йомағолов** йә **Сәйетгәрәй Мағазов** булһа кәрәк. Башревком Стәрлетамаҡҡа ҡайтҡас, ябыла.

## “БАШҠОРТОСТАН ХӘБӘРҘӘРЕ”

Башҡорт хәрби-революцион комитеты һәм Башҡоростан хәрби эштәр буйынса комиссариатының сәйәси бүлеге матбуғат органы. Башревком Башҡортостанға ҡайтҡандан һуң, 1919 йылдың 14 сентябренән сығарыла башлай. 1921 йылдың 27 ғинуарында “Ҡыҙыл ҡурай” тип үҙгәртелә, 1921 йылдың апреленән 1922 йылдың сентябренә тиклем тағы “Башҡортостан хәбәрҙәре” исеме аҫтында, артабан Өфөлә “Башҡортостан” тигән исеме менән баҫыла. 1938 йылдан “Ҡыҙыл Башҡортостан”, 1951 йылдан – “Совет Башҡортостаны”, 1990 йылдан яңынан “Башҡортостан” исеме аҫтында донъя күрә. Гәзит Мөхәррирҙәре: 1919-1920 йылдарҙа **Харис Йомағолов**, **Аллабирҙе Йәғәфәров, И. Рәхмәтуллин, З. Мозафаров** һ.б.

## “САЛАУАТ”

Петроград фронтындағы башҡорт ғәскәрҙәренең матбуғат органы. 1919 йылдың сентябренән Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһының сәйәси бүлеге тарафынан сығарыла башлай. Гәзитте сығарыуҙы юлға һалыуҙа дивизияның хәрби комиссары **Нуриәғзәм Таһиров** ҙур роль уйнай. Үҙе лә әүҙем яҙыша. Гәзит өс көнгә бер тапҡыр баҫыла. “Салауат” гәзите 1920 йылдың майына тиклем сығарыла. Мөхәррире: **Ғабдулла Ғисмәти**.

## “ҠАҺАРМАН БАШҠОРТ”

Колчак менән киткән башҡорт ғәскәрҙәренең матбуғат органы. 1920 йылда Рәсәйҙең Көнсығыш сигенең Башҡорт хәрби-милли идараһы тарафынан сығарыла. Идараның рәйесе **Ғәбделхай Ҡорбанғәлиев**, штаб начальнигы – **Ғәлимйән Таған**.



**3-сө Башҡорт ойоштороу ҡоролтайы делегаттары Каруанһарай янында**. Ырымбур ҡалаһы, 1917 йылдың декабре.



**Бер төркөм башҡорт эшмәкәрҙәре.** Ултыралар (һулдан уңға): икенсе **Ғүмәр Ҡыуатов** – Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау халыҡ комиссары, дүртенсе **Абдулла Әҙеһәмов** – РСФСР Хөкүмәте янындағы Башҡортостан вәкиле, бишенсе **Һиҙиәт Сәғәҙиев** (?), алтынсы **Сөләймән Ишмырҙин**, етенсе **Мөхәмәтдин Әҙеһәмов**. Баҫып торалар (һулдан уңға): беренсе **Гәрәй Ҡарамышев**, бишенсе **Нуриәғзәм Таһиров**. 1919–1920 йылдар тирәһе.



**Башҡортостандың революцион хөкүмәте – Башревком.** Беренсе рәттә һулдан уңға: **А. Кречинский** – Юстиция халыҡ комиссары вазифаһын башҡарыусы, **А. Бирkган** – Башревком сәркәтибе, **Г. Ҡарамышев** – Башсовнархоз рәйесе, **Ә. Ишмырҙин** – республиканың хәрби комиссары Зәки Вәлидиҙең урынбаҫары, **Х. Йомағолов** – Башревком рәйесе, **А. Йәғәфәров** – Дәүләт контроле халыҡ комиссары, **Ә. Бейешев** – БашЧК рәйесе, артабан Дәүләт контроле, Социаль тәьминәт, Хеҙмәт комиссары, **Ф. Төхвәтуллин** – Эске эштәр халыҡ комиссары. Стәрлетамаҡ ҡалаһы, 1919-1920 йылдар.



**Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы штабында Петроградҡа яҡынлашҡан генерал Юденич ғәскәрҙәренең һөжүмен кире ҡағыу өсөн план төҙөлгән ваҡыт.** Һулдан уңға ултыралар: РСФСР-ҙың ВЦИК янындағы Башҡортостан вәкиле **Әбдрәшит Бикбауов**, дивизия командиры **Ахлау Ахлов**, дивизия комиссары **Нуриәғзәм Таһиров**, дивизия комиссарының урынбаҫары **Передерей**. Торалар һулдан уңға: дивизияның сәйәси бүлеге мөдире **Һиҙиәт Сәғәҙиев**, полк командиры **Чанышев**, Башҡорт республикаһының башҡорт ғәскәрҙәрендәге махсус вәкиле **Хәлим Әмиров**, дивизияның табибы **Козловский**. Петроград, 1919 йылдың октябре.



**Башҡортостан хөкүмәте (Башревком) һәм башҡорт ғәскәрҙәре Саранский ҡалаһында эвакуацияла саҡта. Исмәғил Муһилә (З. Вәлидиҙең адъютанты) менән Мәрйәм ханымдың туйы.** Беренсе рәттә ерҙә ултыралар (һулдан уңға): беренсе **Ғүмәр Тереғолов** – хәрби табип, икенсе **Хәлил Тереғолов** – офицер, өсөнсө **Усман Тереғолов** – 1-се Башҡорт кавалерия полкы командиры, уңдан 2-се **Ғәли Тереғолов** (офицер) уңдан беренсе **Йәғәфәр Байышев** (офицер). Икенсе рәттә ултыралар (һулдан уңға): беренсе **Сөләймән Ишмырҙин** – 1-се Башҡорт уҡсы полкы командиры, икенсе **Хәлим Әмиров** – Айырым Башҡорт бригадаһы комиссары, уртала (ҡылыс тотҡан) **Хәлил Әлишев** – 2-се Башҡорт кавалерия полкы командиры, унының янында уңдан **Исмәғил Муһлиә** һәм хәләл ефете **Мәрйәм**. Артҡы рәттә баҫып торалар (һулдан уңға): икенсе **Әүхәҙи Ишмырҙин** – Зәки Вәлидиҙең урынбаҫары, өсөнсө **Гәрәй Ҡарамышев** – Башсовнархоз рәйесе. Саранск ҡалаһы, 1919 йылдың май аҙағы.

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ


Һәйкәлдәргәлайыҡисемдәр... 3
Әхмәтзәки Вәлиди... 5
Шәриф Манатов... 10
Юныс Бикбов... 12
Мөхәмәтхан Ҡулаев... 14
Муллайән Халиҡов... 17
Харис Йомағолов... 22
Сәғит Мерәҫов... 25
Аллабирҙе Йәғәфәров... 29
Илдархан Мутин... 34
Әмир Ҡарамышев... 37
Шәйехзада Бабич... 47
Муса Мортазин... 56
Нуриәғзәм Таһиров... 65
Хафиз Ҡушаев... 74
Шәһит Хоҙайбирҙин... 78
Әхмәҙулла Бейешев... 81
Ғәлимйән Таған... 86
Әүхәҙи Ишмырҙин... 91
Гәрәй Ҡарамышев... 97
Сәйетгәрәй Мағазов... 101
Искәндәр Солтанов... 102
Хәбибулла Ғәбитов... 107
Усман Ҡыуатов... 110
Ғабдулла Ибраһимов... 115
Һиҙиәт Сәғәҙиев... 118
Ибраһим Исхаҡов... 122
Таһир Имаҡов... 125
Хәлим Әмиров... 128
Сөләймән Ишмырҙин... 135
Әбдәршит Бикбауов... 138
Ғәзиз Әлмөхәмәтов... 140
Фәтих Төхвәтуллин... 143
Фәтхей Әхмәҙуллин... 149
Кәрим Иҙелғужин... 153
Шакир Төхвәтуллин... 156
Хажиәхмәт Ишбулатов... 159
Муса Смаҡов... 163

Ғабдулхай Иркәбаев ... 165
Яхъя Салихов ... 167
Ғәлиәхмәт Айытбаев ... 169
Йыһангәрәй Әмиров ... 171
Ғәлиәхмәт Хәсәнов ... 172
Ғабдрахман Фәхретдинов ... 174
Хәсән Әхмәров ... 176
Ғабдулла Иҙелбаев ... 179
Мөхтәр Ҡарамышев ... 182
Ғәбделхаҡ Ғәбитов ... 185
Ғариф Мөхәмәтйәров ... 187
Хәлил Әлишев ... 190
Харис Туймаҡаев ... 194
Шаһихәйҙәр Аҡсулпанов ... 197
Шаһибәк Үзбәков ... 200
Талха Рәсүлев ... 202

Ҡушымта

Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең етәкселек органдары ... 205
Башҡортостан автономияның дәүләт органдары ... 207
Башҡортостан автономияһының урындары власть органдары ... 208
Автономиялы Башҡорт Совет Республикаһының дәүләт органдары ... 211
Автономиялы Башҡорт Совет Республикаһының урындағы власть органдары ... 212
Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте, Башҡортостан автономияһы, Автономиялы Башҡорт Совет республикаһы һәм Башҡорт ғәскәрҙәренең матбуғат органдары ... 214

*Научно-публицистическое издание*

**Ярмуллин Азат Шакирьянович**

# ПОД ЗНАМЕНЕМ АВТОНОМНОГО БАШКОРТОСТАНА

( на башкирском языке)

Мөхәррире: *С. Ш. Ярмуллин*
Рәссамы: *И. З. Туймакаев*
Верстка: *Р. К. Тотманов*

Подписано в печать 11.09
Формат 60 x 84 $^{1}/_{16}$. Бумага офсетная.
Гранитура "...". Печать на ризографе.
Усл. печ. л. .... Уч.-изд. л. ...
Тираж 250 экз. Заказ №...

Редакционно-издательский отдел
Национальной библиотеки им. А.-З. Валиди РБ
450000, г. Уфа, ул. Ленина, 4
Тел./факс: (347) 272-04-89
www.bashnl.ru
nbrb@ufanet.ru